

УНИВЕРСИТЕТ

# ФЕНОМЕН МУСТАЯ КАРИМА И ГЛОБАЛЬНЫЙ XX ВЕК: НАЦИОНАЛЬНО-ДУХОВНАЯ КУЛЬТУРА В МИРОВОМ КОНТЕКСТЕ

*К 100-летию со дня рождения народного поэта Башкортостана*

*Мустая Карима*

УДК 81'1+811.512.1+39
ББК 81+81.2+63.5
Ф42

***Редакционная коллегия:***

д-р филол. наук, профессор, член-корреспондент АН РБ,
заведующий кафедрой башкирской литературы, фольклора
и культуры **Г.С. Кунафин** (*отв. редактор*);
д-р филол. наук, профессор, декан факультета
башкирской филологии, востоковедения
и журналистики БашГУ **Г.Р. Абдуллина**;
канд. филол. наук, доцент, зам. декана по учебной работе
факультета башкирской филологии, востоковедения
и журналистики БашГУ **Р.Р. Саньярова**;
д-р филол. наук, профессор **Г.Н. Гареева**;
д-р филол. наук, профессор **М.Х. Идельбаев**;
канд. филол. наук, доцент **Ф.Р. Салаватова** (*отв. секретарь*);
канд. филол. наук, доцент **Р.Д. Мустафина**;
канд. филол. наук, доцент **З.Г. Мурзагулова**;
канд. филол. наук, доцент, зам. декана по научной работе
факультета башкирской филологии, востоковедения
и журналистики БашГУ **А.О. Хужахметов**;
канд. филол. наук, доцент **И.К. Янбаев**;
лаборант кафедры башкирской литературы,
фольклора и культуры **З.А. Султанова**

**Феномен Мустая Карима и глобальный XX век:**
Ф42 **национально-духовная культура в мировом контексте (К 100-летию со дня рождения народного поэта Башкортостана Мустая Карима):** сборник материалов Международной научно-практической конференции (г. Уфа, 30 октября 2019 г.) / отв. ред. Г.С. Кунафин. – Уфа: РИЦ БашГУ, 2019. – 288 с.
ISBN 978-5-7477-4947-4

В сборник включены материалы, посвященные творчеству народного поэта Башкортостана, прозаика, драматурга Мустая Карима, а также изучению художественной культуры, литературы, фольклора, языка, журналистики многонациональной России.

Предназначено для научных сотрудников, преподавателей, молодых ученых, аспирантов, магистрантов, студентов вузов, ссузов и всех, кто интересуется проблемами гуманитарных дисциплин.

УДК 81'1+811.512.1+39
ББК 81+81.2+63.5

ISBN 978-5-7477-4947-4 © БашГУ, 2019

# ВСТУПИТЕЛЬНОЕ СЛОВО РЕКТОРА БАШГУ ПРОФЕССОРА Н.Д. МОРОЗКИНА

Уважаемые участники научной конференции, дорогие гости и коллеги!

Башкирский государственный университет славится своими знаменитыми выпускниками. Среди них особое место занимает великий башкирский поэт, писатель, драматург, публицист, гражданин и воин, выдающийся общественный деятель, человек большой души и доброго сердца Мустай Карим.

Герой Социалистического Труда, заслуженый деятель искусств РСФСР, народный поэт Башкортостана, почетный академик Академии наук Республики Башкортостан, лауреат Ленинской и Государственной премий СССР, Государственной премии РСФСР имени К.С. Станиславского, Государственной премии Республики Башкортостан имени Салавата Юлаева, Международной премии М. Шолохова, кавалер двух орденов Ленина, Трудового Красного Знамени, Дружбы народов, ордена «Знак Почета», орденов Отечественной войны 1-й и 2-й степени, Красной Звезды, орденов «За заслуги перед Отечеством» 2-й и 3-й степени, ордена Салавата Юлаева, славный сын башкирского народа Мустафа Сафич Каримов внес огромный вклад в сокровищницу мировой литературы, поднял на новый уровень традиции классической башкирской литературы. Мустай Карим стал целой эпохой башкирской, российской и мировой литературы. Из-под пера Мустая Карима вышли выдающиеся произведения, вошедшие в золотой фонд башкирской и российской литературы и театра: драмы «Одинокая береза», «Неспетая песня», «Страна Айгуль», «Пеший Махмут», «Вечерняя трапеза», комедия «Похищение девушки», трагедии «В ночь лунного затмения», «Салават», «Не бросай огонь, Прометей!», повести «Радость нашего дома», «Долгое-долгое детство», «Таганок», «Помилование» и многие другие.

Произведения М. Карима отличаются высоким философским смыслом, истинной гражданственностью. Его творчество – гимн духовной гармонии, трудолюбию, любви к Отечеству. Великий реалист и романтик, сохранивший до конца жизненного пути юношеский задор, искренность, вселяющий в людей надежду в лучшее, веру в то, что доброта, высокая гражданственность, искренность могут и должны быть спутниками человека во все времена.

Произведения Мустая Карима переведены на многие языки мира, стали частью многих национальных культур. Деятели культуры и читатели России, Казахстана, Киргизстана, Узбекистана, Таджикистана, Азербайджана, Украины, Белоруссии, Турции, Китая, Болгарии и других стран более полувека отдают должное высокому литературному мастерству, богатому творческому наследию Мустая Карима.

Художественный мир Мустафы Сафича Каримова – это мир прекрасных человеческих чувств, где много светлого и драматичного, где мудрость и глубина художественно-эстетической мысли гармонично сочетаются с жизненной простотой и величием. За все это мы благодарны великому творцу.

***Абдуллина, Г.Р.,***
*филол. ф. д., профессор, БДУ, Өфө ҡ.*
***Ҡаһарманова Л.Ф.,***
*магистрант, БДУ Өфө ҡ.*

# МОСТАЙ КӘРИМДЕҢ ДРАМАТИК ӘҪӘРҘӘРЕНДӘ "КҮҘ" ЛЕКЕМАҺЫНЫҢ МӘҒӘНӘ ҮҘЕНСӘЛЕКТӘРЕ ("ЯҢҒЫҘ ҠАЙЫН", "ҠЫҘ УРЛАУ", "ЙЫРЛАНМАҒАН ЙЫР" ӘҪӘРҘӘРЕ БУЙЫНСА)

Мостай Кәримдең күп жанрҙарҙа эшләгән талант оҫтаһы булыуы уның ижадын төрлө яҡтан өйрәнеүгә булышлыҡ итә. Шиғырҙарында ҡулланылған һүрәтләү саралары, прозаһының художестволылығы, драма әҫәрҙәренең символикаһы – был темалар әленән-әле уның ижадына әйләнеп ҡайтырға мәжбүр итә, башҡорт әҙәбиәтселәре һәм телселәре генә түгел, сит илдәрҙә йәшәгән ғалимдар, эҙләнеүселәр ҙә һәр саҡ ошоғаса күҙгә салынмаған асышҡа юлығa.

Мәҫәлән, авторҙың драма әҫәрҙәре нигеҙендә офтальмологик лексиканы өйрәнгән хеҙмәттәр әлегә тиклем юҡ [2; 157, 3; 204]. Яҙыусы ижадын ошо юҫыҡтан асыу уның әҫәрҙәренең ни тиклем һүҙ байлығына эйә булыуын тағы бер тапҡыр дәлилләй.

"Күҙ" лексемаһы беҙ тикшергән "Яңғыҙ ҡайын", "Йырланмаған йыр" драмаларында һәм "Ҡыҙ урлау" комедияһында йыш ҡына осрай. Ошо һүҙ үҙе генә айырым мәғәнә аңлатҡан осраҡтарҙы, шулай уҡ фразеологик берәмектәр составына ингән миҫалдарҙы анализлауҙы маҡсат итеп ҡуйҙыҡ был мәҡәләлә.

Медицина күҙлегенән ҡарағанда, "күҙ" – иң тәү сиратта термин [2; 157]. Был терминға һүҙлектә шундай аңлатма бирелгән: "Күҙ – күҙ алмаһынан һәм ярҙамсы аппараттан (күҙ алмаһы мускулдары, конъюнктивтар һ.б.) торған парлы күреү органы" [4; 345]. Аңлатмалы һүҙлектә мәғәнәһе күберәк килтерелгән: "1. Донъяны күреү, ҡарау ағзаһы. 2.Энәнең, мәрйендең еп үткәрә торған тишеге, күҙәү. 3. Бәйләм бәйләнгәндә яһалған элмәк. 4. Картуфтағы бөрө урыны. 5. Яуым-төшөм тамсыһы." [5; 131]. Тимәк, әлеге һүҙ күп мәғәнәгә эйә.

"Яңғыҙ ҡайын" драмаһында "күҙ" һүҙе төп мәғәлә ҡулланылған осраҡтарға туҡталайыҡ: – "Г ө л б а д у а н: "Зөләйха, күҙҙәрең шәйләһә, бынау энәне генә күҙләп бирсе…" [1; 24]. Һөйләмдә шулай уҡ "күҙләп" ҡылымының тамыры "күҙ" морфемаһына тоташа. "Күҙләү" ҡылымы үҙе лә күп мәғәнәле: "1. Күҙәтеү, ҡарау. 2. Һайлап алыу өсөн ҡарау (ҡыҙҙы). 3.диал. һабаҡлау, һаплау". [5; 566]. Мостай Кәримдең әҫәрендә был ҡылым диалект һүҙ булараҡ ҡулланылған.

Сағыштырыу ролен үтәгән осраҡтар: "Ш ә ү к ә т о в: "Тупраҡ өҫтөндәге бойҙай бөртөктәре, сабый баланың күҙ йәштәре кеүек, мөлдөрәп яталар" [1; 58]. "Ш а һ и: "Орлоҡтоң да күгәрсен күҙе кеүеге генә сәселгәйне бит ошо баҫыуға" [1; 59]. "Сабый баланың күҙ йәштәре" – сафлыҡты, ябайлыҡты, ихласлыҡты, "күгәрсен күҙе" бәләкәй, ваҡ тигәнде аңлата. Әйткәндәй, шундай исемде йөрөткән сәскә исеме лә бар.

Артабан күп кенә миҫалдар фразеологик берәмектәргә ҡарай. "Т и м е р б у л а т: "Сәсеүлектәренә күҙ төшөрөгөҙ, сәсеүлектәренә! [1; 26]". "Күҙ төшөрөү" ҡапыл ҡарап алыу тигәнде аңлата. Ш ә ү к ә т о в телмәрендә генә лә ундай миҫалдар байтаҡ осрай: "Их, күҙ көйөгө. Һин дә һөйләйһең бит" [1; 37]. "Күҙ көйөгө" – эше-ҡылығы менән йәнде көйҙөргән кеше", – тип билдәләй З.Ғ.Ураҡсин үҙенең һүҙлегендә [6; 154]. Был һөйләм аша беҙ һөйләүсенең тыңлаусыға ниндәй ҡараштa булыуын аңлай алабыҙ, йәғни уның һөйләгәнен бушҡа һанай, хөрмәт итмәй. "Күҙен алартты лабаһа «Яңғыҙ ҡайын»ға был бәндә! [1; 39]" һөйләмендә "күҙ алартыу" йыш килеү, ҡарау мәғәнәһен күрһәтә.

“Юғал күҙ алдымдан, ҡотһоҙ бәндә!” [1; 47] миҫалындағы “күҙ алды” һүҙбәйләнеше художестволы әҙәбиәттә генә түгел, ябай телмәрҙә лә йыш осрай, эргәнән ҡыуыуҙы белдерә. “Күҙ алды” һүҙбәйләнешенән сыҡҡан “күҙ алдынан китмәү”, “күҙ алдына баҫтырыу” кеүек фразеологизмдар ҙа телмәрҙә әүҙем ҡулланыла. “Бөлдөк, күҙ асып йомғансы бөлдөк” [1; 60] һөйләмендә “күҙ” концепты менән бирелгән фразологизм ҡыҫҡа ваҡытты, ваҡиғаның тиҙ булыуын белдерә. Әҫәр аҙағында Шәүкәтовтың әйткән һүҙҙәрендә лә бар миҫал: “Кешеләр ... күҙҙәремде асырға телэнеләр” [1; 70]. Зиннур Ураҡсин һүҙлегендә “күҙҙе асыу” фразеологизмының 2 мәғәнәһе күрһәтелгән: “1.Дөрөҫлөктө аңлау, ниҙең ни икәнен, кемдең кем икәнен белеп ҡалыу. 2.Бер аҙ хәлләнеп алыу” [6; 170]. Мостай Кәримдең драмаһында беренсе мәғәнә ҡулланылған.

“Күҙ” һүҙе башҡа геройҙар телмәрендә лә урын алған. “Ҡ о т л ы е в: “Мин тирмән директоры булғас, әйҙә, миңә кладовщик булып кил, күҙеңә сүп һалмам “ [1; 47] миҫалындағы тоторо̇ҡло һүҙбәйләнеш ҡамасауламау мәғәнәһенә эйә.

“Яңғыҙ ҡайын” драмаһында “күҙ” һүҙе менән бергә ҡулланылған телмәр берәмектәре бигерәк тә бер геройҙың икенсеһенә булған ҡарашын асыҡ сағылдыра.

“Ҡыҙ урлау” комедияһында ла “күҙ” концепты менән байтаҡ миҫалдарға тап булдыҡ. “Б а я н: “Һинеңсә, минең Маһибәҙәргә кеше күҙе төшөрлөк түгел инде, ә?” [1; 78]. Әжмәғол: «Туктабикә киленгә күҙем төштө, тиһең икән» [1; 85] һөйләмдәрендә “күҙ төшөү” ғашиҡ булыу мәғәнәһенә эйә. “М ө х ә м ә т ш а: “Йәмиләгә күҙ-ҡолаҡ була күр инде, Баян” [1; 79] өҙөгөндә “күҙ-ҡолаҡ булыу” һаҡлап, ҡарап йөрөтөүҙе аңлата. “Мө н и р ә: “Мин береһенә лә юрамайым, барыбер миңә күҙ һалыусы юҡ” [1; 81] һөйләмендә ҡыҙ үҙенә егеттәрҙең иғтибары булмағанға бошона. “Б а я н: “Анау Шөкөрҙөң күҙҙәре уйнап тора” [1; 85] һөйләме геройҙың характерын аса, йәғни егеткә ышанырға ярамай тигән мәғәнә һалынған бында. “М ө х ә м ә т ш а: “Бер күҙең уңда, бер күҙең һулда булһын” [1; 85] һөйләме хатта әйтем-мәҡәлгә тартып ҡуя. Ул ныҡ иғтибар менән ҡарарға әйтелгән наказды аңлата.

Халҡыбыҙҙың им-томға, көстәргә ышаныуын сағылдырған юлдарҙы ла осратырға була әҫәр тексында. “М ө х ә м ә т ш а: “Ут тоҡанмаһа, күҙ тейеүе бар” [1; 94] миҫалында “күҙ тейеү” һүҙбәйләнеше башҡорттарҙа борондан йәшәп килгән ышаныс, ауырыу исемен аңлата. Йәғни, кеше ҡыҙығып, ныҡ һоҡланып ҡараһа, кешегә күҙ тейеп, уның ауырыуға һалышыуы мөмкин. “У ң ғ а н б и к ә: “Иншалла, фәрештәнең «амин» тигән сағына тура килеп, бәндәнең күңел күҙе асылып ҡуйыуы ла бар” [1; 98] һөйләмендә “күңел күҙе” эске рухты, булмышты аңлау һәләтен аңлата [5; 191]. “К ә м и л ә: “Күҙең яман булмаһын, яман күҙ ер көйҙөрә” [1; 124] миҫалы – фольклор традицияларының өлгөһө. Тап яман күҙле кешеләрҙең матурлыҡҡа күҙе тейеүсән.

“Ш ә м с у л л а: “Ә урман куҙ яуын алып тора” [1; 96] һөйләмендә “күҙ яуын алыу” фразеологизмы һоҡланыуҙан әйтелгән. Ә “Т у к т а б и к ә: “Майлы күҙ!” [1; 102]” тигән һүҙбәйләнеш нәфселе кешегә ҡарата ҡулланыла. Ошо уҡ фразеологизмға ҡағылышлы миҫалдар: “У ң ғ а н б и к ә: “Яйлама ла, майлама ла, күҙҙәреңдән күреп торам…” [1; 107], “Төшкән була бейергә, майландырып күҙҙәрен Туҡтабикә киленгә!..” [1; 108].

Ҡайһы бер һөйләмдәрҙә ҡулланылған “күҙ” концепты кешенең характер һыҙаттарын асыуҙа ҡатнаша. “М ө х ә м ә т ш а: “Энә күҙенә йәшерһәгеҙ ҙә, табырмын!” [1; 129] миҫалы кешенең үҙ маҡсатына ниндәй хәлдә лә тоғро ҡалыуын күрһәтә. Энә күҙе – бәләкәй генә тишек, нисек булһа ла табасағын иҫкәртә әҫәр геройы. Был һүҙбәйләнеш менән тағы фразеологик берәмектәр бар башҡорт телендә: “энә күҙенән үткәреү” ныҡлап тикшереүҙе аңлата. “Туҡтабикә: «Унынын күҙ күрер” [1; 131] – геройҙың юҡҡа аптырап бармауын, ваҡыты еткәс кенә мәсьәлә хаҡында уйлана башлауын күрһәтә.

“Ҡыҙ урлау” комедияһында осраған миҫалдар геройҙың характерын билдәләргә ярҙам итә.

“Йырланмаған йыр” драмаһындағы “күҙ” концепты менән булған һөйләмдәр шулай уҡ үҙенсәлекле. Кешенең күңел кисерештәрен күрһәтеп, әлеге һүҙ үҙенең төп мәғәнәһендә ҡулланылған өҙөктәр: “Р ә х и м ә: “Дилбәр апай үҙе ағаҫҡа һөйәлгән, үҙенең күҙҙәренән мөлдөрәп йәш аға” [1; 149], “Н и з а м: “Күҙҙәреңдә, йөҙҙәреңдә күпме нур балҡый, бәхет нурҙары...” [1; 166], “Р ә х и м ә: “Анауы дәү ағайҙың күҙҙәре, беҙҙең күбенеп үлгән ҡола һыйыр күҙҙәре төҫлө, моңһоу ҡарайҙар” [1; 185]. А р ы ҡ б а е в: “Ниңә күҙең тоҙҙай булды, ҡыҙым?” [1; 180] һөйләмендәге “күҙ тоҙҙай булыу” ни эшләгәнде аңламаҫ хәлгә етеүҙе аңлата. “Я п а р: “Кеше күҙҙәренә ҡарап, выждан ғазабы күрһәм, үкенеү һүҙҙәре ишетһәм, был мәҡәләне алып ташларға, бәлки, көсөм етер ине, тигәйнем” [1; 195] һөйләме геройҙың булмышын, уның намыҫлы кеше икәнлеген аса.

Шулай уҡ алдағы әҫәрҙәрҙә осрамаған фразеологизмдарға миҫалдар бар: “Г ө л б и к ә: “Ә ағай-энеләре теге малайҙың күҙен дә астырмайҙар, өтөп баралар...” [1; 142] – “күҙ астырмау” – һүҙ әйтергә ирек бирмәү мәғәнәһендә килгән. “В ә з и м: “...ҡытай тәмәкеһен эҙләй-эҙләй , күҙем тоноп бөттө” [1; 172] миҫалындағы “күҙ тоноу”ҙың ике мәғәнәһе бар: “1. Бер ни күрмәү (ярһыуҙан). 2. Аптырап бөтөү” [6; 184]. Был һөйләмдә икенсе мәғәнә ҡулланылған.

Кеше хаҡында кире фекер булдырыуҙа “күҙ” лексемаһы ла ҙур роль уйнай: “В ә з и м: “Арыҡбаев күҙ буяусы эшлекһеҙ бер бәндә булып сыҡты” [1; 173], “Күҙ буяр өсөн, ул һүрәтсе теләһә ниндәй күлдәк кейҙерә, теләһә ниндәй яулыҡ бәйләтә алмаймы ни?” [1; 178] миҫалдарында “күҙ буяу” алдау мәғәнәһен бирә.“А р ы ҡ б а е в: “...һуңынан күҙҙе йомдом да, һеҙ ҡушты тип, саң ҡағырға тотондом” [1; 182] һөйләмендә “күҙ йомоу” фразеологизмы ике мәғәнәле: “1.күреп тә күрмәмеш булыу. 2. үлеү” [6; 180]. Автор өҙөктә беренсе мәғәнәне ҡуллана.

Был драмала “күҙ” һүҙе геройҙарҙың кисерештәрен асырға ярҙамлаша.

Мостай Кәримдең беҙ ҡарап үткән драма әҫәрҙәрендә “күҙ” лексемаһы башҡорт телендә һүҙҙәрҙең ни тиклем лексик мәғәнәләргә бай була алыуын күрһәтә. Уның ярҙамында төҙөлгән фразологик берәмектәр геройҙарҙың характерын, тойғоларын, бер-береһенә ҡарата булған мөнәсәбәтен асып бирә. Һүҙлек ярҙамында беҙ ҡайһы бер берәмектәрҙең бер нисә мәғәнә аңлатҡанын күрҙек, диалекттарҙа ҡулланылыуын асыҡланыҡ.

ЛИТЕРАТУРА:

1. Кәрим М. Айгөл иле. Пьесалар. Өфө, Башҡортостан китап нәшриәте, 1979. 480 бит.

2. Кагарманова Л.Ф., Абдуллина Г.Р. Офтальмологические термины, обозначающие глазные болезни, в русском, башкирском и английском языках // Вопросы духовной культуры народов Урало-Поволжья: история и современность: Сборник материалов Всероссийской (с Международным участием) научно-практической конференции молодых ученых, аспирантов, магистрантов, студентов (26 апреля 2019 г.) / отв. ред. Г.С. Кунафин. Уфа: РИЦ БашГУ, 2019. С.156-158.

3. Ҡаһарманова Л.Ф., Абдуллина Г.Р. Башҡорт халыҡ йырҙарында “күҙ” концепты // Вопросы духовной культуры народов Урало-Поволжья: история и современность: Сборник материалов Всероссийской (с Международным участием) научно-практической конференции молодых ученых, аспирантов, магистрантов, студентов (26 апреля 2019 г.) / отв. ред. Г.С. Кунафин. Уфа: РИЦ БашГУ, 2019. С.203-205.

4. Русско-башкирский словарь медицинских терминов: Под редакцией М.Т. Азнабаева. Уфа, ГУП РБ “Уфимский полиграфкомбинат”, 2007. 840 с.

5. Суфьянов Н.Ф., Сиразитдинов З.Ә., Ураҡсин З.Ғ. Башҡорт теленең аңлатмалы һүлеге. Өфө: Китап, 2011. 336 бит.

6. Ураҡсин З.Ғ. Башҡорт теленең фразеологик һүҙлеге. Яңыртылған, 2-се баҫма. Өфө: Китап, 2006. 344 бит.

© Ҡаһарманова Л.Ф., Абдуллина Г.Р., 2019

***Абдуллина Г.Р.,***
*филол. ф. д., профессор, БДУ, Өфө ҡ.*
***Ғүмәров З.И.,***
*магистрант, БДУ, Өфө ҡ.*

## ЛИНГВОКУЛЬТУРОЛОГИЯЛА «ҺУҒЫШ» КОНЦЕПТЫ (М.КӘРИМ ИЖАДЫ МИҪАЛЫНДА)

Лингвокультурология фәне XX быуатта үҫеш юлына баҫа. Ул телдә аралашыу ҡоралы булараҡ ҡына түгел, ә милләттең мәҙәни күрһәткесе тип ҡарала. Тел менән мәҙәниәт параллель рәүештә кешенең аң кимәлен, образлы фекерләү ҡеүәһен үҫтерә, донъяға ҡарашын формалаштыра, донъяны танып-белеүҙә ярҙам итә. Тел һәм мәҙәниәт быуындар бәйләнеше вазифаһын үтәй, уның аша оло быуын йәш быуынға үҙенең тормош тәжрибәһен, өгөт-нәсихәттәрен, рухи байлығын тапшыра килгән. Үткән быуын кешеләренең күңел байлығын бөтә нескәлектәре менән ҡабул итеү, аңлау өсөн һәр быуын мәҙәниәтте һәм телде яҡшы белергә, өйрәнергә тейеш. Фәҡәт тел генә ата-бабаларҙың үткәнен белергә, бөгөнгөнө күҙалларға, киләсәккә өмөт-хыялдар менән йәшәргә, тормошто аңларға, эргә-тирәләге ысынбарлыҡты танып-белергә ярҙам итә. Шуға ла телде һәм мәҙәниәтте өйрәнеү, уларҙың бөтә нескәлектәрен белеү мотлаҡ.

Һәр халыҡтың телендә уның тарихы йәки үткән тормошо, бөгөнгөһө, ғөрөф-ғәҙәттәре, шөғөлө, тел үҙенсәлектәре, мәҙәниәте сағыла. Кеше тел һәм мәҙәниәтте үҙләштереп, шәхес булып формалаша.

“Халыҡтың милли мәҙәнилеген формалаштырыуҙа һәм үҫтереүҙә туған телдең роле баһалап бөткөһөҙ,” – тип яҙа М.В. Зәйнуллин [3, 7]. Тел һәм мәҙәниәт тығыҙ бәйләнештә йәшәй, йәғни тел халыҡ мәҙәниәтен сағылдыра.

XXI быуат лингвистикаһы телде аралашыу һәм танып-белеү сараһы булараҡ ҡына түгел, ә билдәле бер милләттең мәҙәниәтен белдереүсе йүнәлеш булараҡ тикшерә. Бының нигеҙен В. Гумбольт, А.А. Потебня кеүек ғалимдар һалған. Мәҫәлән, В. Гумбольт «Милләттең сиктәре – минең донъяға ҡарашымдың сиктәре», – тигән. Тимәк, тел ысынбарлыҡты ғына сағылдырып ҡалмай, ә кеше йәшәй торған йәшәйеште лә барлыҡҡа килтерә. Шуға күрә лингвистика, тел тураһындағы фән, гуманитар белемдәр араһында алдынғы урындарҙы тота һәм уның ярҙамынан башҡа мәҙәниәтте өйрәнеү мөмкин түгел. Тел милләттең хәҙергеһен генә түгел, ә боронғо кешеләрҙең дә донъяға, йәмғиәткә һәм үҙ-үҙҙәренә ҡарашын өйрәнеү юлы ла.

Милли мәҙәниәтте тикшергәндә телсе ғалимдар «концептосфера» термины менән эш итәләр. «Концептосфера – айырым кешенең, шулай уҡ айырым бер телдең һүҙлек запасында һаҡланған саралар» [2, 13].

Концепт латин теленән килеп ингән “conceptus” һүҙенән – күҙ алдына килтереү, төшөнсә тигәнде аңлата. Концепт - уй, проект, алдынғы фекер; ҡайһы бер фәнни йүнәлештәрҙә логик төшөнсәне аңлата.

Лингвокультурологик тикшеренеүҙәрҙең төп обьекттары һәм предметтары:

1. Был фәндә тикшеренеү предметы булып мәҙәниәттә символик, образлы-метафорик, эталон кимәлен алған тел берәмектәре – концепттар сығыш яһай.

2. Лингвокультурологияның предметы булып мифологик йөкмәткегә эйә тел берәмектәре лә (архетиптар һәм мифологемалар) иҫәпләнә.

3. Лингвокультурологияның тағы ла бер тикшереү предметы – телдең паремиологик составы (мәҡәл-әйтемдәр, фразеологизмдар), сөнки улар йыш ҡына халыҡ мәҙәниәтен, унын үҙаҡын йөрөтәләр.

Академик Д.С. Лихачев билдәләүенсә, милли телдең концептосфераһы – ул һәр халыҡтың мифологияһы, дине, ғөрөф-ғәҙәттәре, философияһы, этнопсихологияһы, фәне, әҙәбиәте, теле һәм донъяға ҡарашы системаһы ул.

Ниндәй ҙә булһа айырым яҙыусының фекерләү образын сағылдырыусы һәм һүрәтләүсе лингвоспецифик концепттарҙы билдәләп үтеү һәм һүрәтләү лингвокультурология фәненең актуаль мәсьәләһе булып ҡала. Ғөмүмән, яҙыусының фекерләү образы унын ижадында киңерәк сағылыш таба.

Хәҙерге көндә тел ғилемендә төрлө тел концепттарын сағыштырып ҡарау мәсьәләһенә иғтибар бермә-бер арта. Концепттарҙы кеше үҙенең интеллектуаль, рухи, социаль ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереү өсөн уйлап таба. Кешенең йәмғиәттә тотҡан урыны һүҙҙе нисек ҡуллана алыуы, телмәр мәҙәниәтен генә белеүе менән түгел, ә телдең серҙәренә инә белеүе менән баһалана.

Һәр кеше үҙе күргән күренештән, хәл-ваҡиғанан үҙенә ниндәйҙер картина тыуҙыра, үҙенең ҡарашын белдерә, икенсе бер күренешкә, хәл-ваҡиғаға ҡарата әҙерлек тыуҙыра һәм ошо уй-фекерҙәр сылбыры дөйөм бер картинаны күҙ алдына баҫтыра. Мостай Кәрим ошо юҫыҡта ижад иткән һәм унын ижадының ҙур өлөшө "һуғыш" концептына бәйле. Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәрим, һуғыш башланыу менән, армия сафына алына һәм еңеү көнөнә тиклем фронтта була. Ул Украинаны азат итеүҙә ҡатнаша, ут һәм төтөн ҡаплаған далалар, емерелгән ҡалалар, янған ауылдар аша уҙа. Бөйөк Ватан һуғышы осорондағы башҡорт әҙәбиәтендә Мостай Кәримдең ижады бик ҙур әһәмиәткә эйә. Унын ижадында совет кешеләренең тыныс хеҙмәте һәм донъяла именлек өсөн барған көрәше менән тығыҙ берлектә илһөйәрлек темаһы асыҡ сағыла. Һуғыштың башынан алып аҙағына тиклем яу ҡырында булған шағир үҙ әҫәрҙәрендә һалдаттарҙың уй-тойғоларын, дошмандарға булған нәфрәтен һүрәтләй. Мостай Кәрим был йылдарҙа яҙған шиғырҙарында үҙен һәм һалдаттарҙы Ватандың ысын илһөйәрҙәре итеп күрһәтә. Һуғыштың тәүге көндәренән үк шағир " Мин фронтҡа китәм, иптәштәр!" шиғырын яҙа. Был шиғыр – бөтә халыҡты изге көрәшкә саҡырыу, рядовой һалдаттың үҙ бурысын ысын күңелдән үтәргә әҙер булыуы тураһындағы әҫәр.

*Йыр өсөн һәм тыуған ер өсөн –*
*Мин фронтҡа китәм, иптәштәр!"...*

Башҡорт халҡы 1941 йылда илде һаҡлаусыларға асыҡ хат яҙа. Хат һалдаттарҙың рухын күтәрә, еңеүгә булған ышаныстарын арттыра. Мостай Кәрим уны иғтибарһыҙ ҡалдырмай һәм 1943 йылдың октябрендә көньяк-көнбайыш фронтта, Екатериновка тигән украин ауылында, яуап хаты яҙа. Был хатта шағир еңеүгә тәрән ышаныс белдерә, һалдаттарҙың халыҡ ышанысын һис шикһеҙ аҡлаясағын әйтә.

*Күпме йонсоу һуғыш юлын үтмәнек,*
*Тир урынына күпме һандар түкмәнек.*
*Күңелебеҙҙә булды изге антыбыҙ,*
*Уйыбыҙҙа булды тыуған халҡыбыҙ.*

Әҫәрҙең финалы илбаҫарҙарға ҡаршы һуғышта еңеүгә ҙур ышаныс менән тамамлана:

*Башҡортостан! Күҙәт еңеү юлдарын,*
*Шул юл менән һиңә ҡайтыр улдарың!*

Ватанға булған ҡайнар һөйөү, дошманға нәфрәт, еңеүгә тәрән ышаныс һалдаттарға бөтмәҫ көс бирә, ҡеүәт өҫтәй. Таш яуһа ла, беҙҙең һалдаттар иҫән ҡала, йәшәү көсө мәрхәмәтһеҙ үлемде лә еңә.

Проза – М.Кәрим ижадының икенсе ҙур тармағы. "Һуғыш" концепты "Малайҙар" хикәйәһендә асыҡ сағыла. Автор үҙенең иҫтәлектәренең береһен хикәйәгә әйләндерә.

М.Кәримдең "Беҙҙең өйҙөң йәме" повесында ҡәҙимге ауыл тормошо, кескәй балалар донъяһы һүрәтләнә. Осоро – Бөйөк Ватан һуғышы йылдары. Бәләкәй Йәмилдең атаһы фронтта. Ул – ете йәшлек малай. Әсәһе менән генә йәшәй. Күрше ауылда өләсәһе бар. Һуғыш шарттарында тормоштары еңелдән түгел. Бына бер саҡ әсәһе атаһының яҙыуы буйынса ҡайҙалыр алыҫҡа барып, Оксана исемле дүрт йәшлек бер ҡыҙҙы алып ҡайта. Оксана Йәмилдең бер туғанылай яҡын кешеһенә әйләнә. Оло һуғыш еңеү менән бөтә. Йәмилдең атаһы ҡайта. Оҙаҡламай Оксананың атаһы, ҡыҙын табып, Украинаға алып китә.

Бөйөк Ватан һуғышы башланғас, шағирға яу йылдарында драма әҫәре яҙырға форсат теймәй. 1947 йылда "Туй дауам итә" тигән өс шаршаулы драмаһын яҙып бөтә. "Туй дауам итә" – Бөйөк Ватан һуғышы темаһына арналған, яу йылдарында совет кешеләренең айырыуса баҙыҡ сағылған иң яҡшы яҡтарын – тыуған илгә һөйөүҙе, дошманға нәфрәтте, батырлыҡты, үлемһеҙлекте, тоғролоҡто, берҙәмлекте, фиҙакәрлекте – һалдат һәм офицер образдары аша конкрет кәүҙәләндереүгә нигеҙләнгән әҫәр.

Ике йәш кешенең – Заһир менән Гөлшаттың – шат туйҙарын тасуирлауҙан башланған был пьесала, Бөйөк Ватан һуғышы сығып, туйҙың өҙөлөп ҡалыуы, уларҙың яу юлдарын үтеүе һәм фашизмды еңгәс, туйҙың дауам итеүе рәүешендәге сюжет һыҙығы барлыҡҡа килә. Яңы йәмғиәттең еңелмәҫлеге, совет кешеләренең оптимизмы, йәшлек дәрте, яуҙағы ҡаһарманлығы һәм киләсәккә яҡты өмөттәре пьесаны героик-романтик рух менән һуғара.

Бөйөк Ватан һуғышына арналған башҡа драмалар менән сағыштырғанда "Туй дауам итә" драмаһында яу ҡырыҫлығы, ҡан-йәш, үлемгә ҡарағанда героик рух, яҡты буяуҙар, романтик күтәренкелек өҫтөнлөк итә. Ямалетдин менән Горячев кеүек яугирҙар фронт шарттарында көңелдәрҙе күтәрерлек, һағыштарҙы баҫырлыҡ, ҡайғыларҙы онотоп торорлоҡ йор һүҙҙәр, юмор саткылары таба беләләр. Пьеса оптимистик рухта, еңеү, туй, йәшәү шатлығы менән тамамлана.

Шулай итеп, һәр бер кеше шәхес булараҡ үҙенең тормошон, ролен, шәхси эштәрен мораль-этик нормаларға таянып формалаштыра. Тел һәм мәҙәниәттә сағылған концепттарҙың ҡайһы берҙәрен кеше үҙ тормошонда ҡуллана йәки ҡулланмай, йәғни төшөнсәләрҙең күптәре уның аң кимәлен тәшкил итмәй, уның өсөн мөһим булған концепттар шәхси тормошон төҙөргә, донъяға ҡараш булдырырға ярҙам итә. Шуға күрә донъя мәҙәниәтендә булған концепттар һәр береһе тел һәм мәҙәниәттә сағылыш таба.

Мостай Кәрим Украинаны азат итеүҙә лә ҡатнаша, ут һәм төтөн ҡаплаған далалар, емерелгән ҡалалар, янған ауылдар аша уҙа. Шундай шарттарҙа «Ҡол ҡыҙы йыры», «Украина» тигән шиғырҙарын ижад итә. Шулай итеп, Мостай Кәрим әҫәрҙәрендә "һуғыш" концепты башҡорт халҡының үлемһеҙлеген, ҡаһарманлығын күрһәтә, һуғыш йылдарында булған афәттәрҙең ил яҙмышына йоғонто яһауы билдәләнә.

ӘҘӘБИӘТ:

1. Арутюнова Н.Д. Язык и мир человека. – М., 1998. – 356 с.
2. Воробьев В.В. Лингвокультурология. Теория и методы. – М, 1997. –13-сө б.
3. Зайнуллин М.В., Зайнуллина Л.М. Общие проблемы лингвокультурологии: Курс лекций. – Уфа: РИЦ БашГУ, 2008. – С. 7.
4. Кәрим М. Әҫәрҙәр дүрт томда. 1-се том. Шиғырҙар, поэмалар.-Өфө:Башҡортостан китап нәшриәте, 1987. – 400 бит.
5. Кәрим М. Йылдар ауаҙы: Шиғырҙар һәм поэмалар. - Өфө: Китап, 1970.
6. Янмурзина Р.Р. Башкирская языковая картина мира в трилогии Зайнаб Биишевой “К свету” / Р.Р.Янмурзина. – Уфа: Гилем, 2015. – 144 с.
7. Янмурзина Р.Р. Когнитивная лингвистика и лингвокультурология: черты и различия // Вестник Башкирского университета. 2014.Т.19. №1. С. 132-135.

© Гумеров З.И., Абдуллина Г.Р., 2019

***Абдуллина Л.Х.,***
*аспирант, ИИЯЛ УФИЦ РАН, г. Уфа*

## МОСТАЙ КӘРИМ ИЖАДЫНДА – БАШҠОРТ АСЫЛЫ

Бер кемгә лә сер түгел, башҡорт әҙәбиәтен, һүҙ сәнғәтен сит тарафтарҙа, илдәрҙә күпселек осраҡта Мостай Кәрим исеме аша таныйҙар, баһалайҙар. Совет осоронда милли әҙәбиәттәр араһынан берәр шәхесте һайлап, илде күтәрер, дуҫлыҡты нығытыр, әҙәбиәт ҡеүәтен халыҡ араһында таратыр – ошо рәүешле ил идеологияһын, сәйәсәтен киң массаға еткереү маҡсатынан уйланылған был күренештең башҡорт халҡы өсөн ыңғай яғы тураһында әйтеп үткем килә. Бөгөн уның ғүмерен бағышлаған ижады тураһында һүҙ әйтеү мөһим. Ғалим Ә. Сөләймәнов әйткәнсә, “шағир иһә, ҡулына ҡорал алып, үҙе лә яҡлашып, һаҡлашып алып ҡалған Ватаныбыҙҙы башҡорт әҙәбиәтен яңыртырлыҡ, уның тынын оҙайтырлыҡ шиғырҙары, сәсмәүере, драмалары менән биҙәп йәшәне һәм ахырҙа уның хаҡына ул да үҙен сарыф итте” [4. 48].

Һәр милли авторҙың әҫәрен ҡулға алған һайын беҙ унда ошо халыҡтың асылын, киҫкен мәлдәрҙәме, шатлыкта йәиһә һағышта уларға ғына хас көнкүреш, холоҡ-фиғел тураһында уҡырға, белергә теләйбеҙ. Ошо йәһәттән Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәримдең образдары миллилеге менән айырылып тора. Уны башҡа телдәрҙә ижад иткән замандаш әҙиптәре лә бит “мудрый Мустай” тип йөрөттө. Ошо “мудрый” һүҙен дә мин тап башҡорт халҡына, уның рухи асылына, рухи потенциалына ҡарата әйтелгән һүҙҙәр тип ҡабул итәм. Быға нигеҙ – уның әҫәрҙәре, геройҙары.

“Оҙон-оҙаҡ” бала саҡ әҫәрен бар донъя белә, тиһәм дә хата булмаҫ. Илебеҙҙең төрлө төбәктәрендә, сит илдәрҙәге сәфәрҙәрҙә тап ошо әҫәр хаҡында йылы һүҙҙәр, образдарына ҡарата һоҡланыу һүҙҙәре ишетергә насип булды. Был әҫәр буйынса әллә нисәмә телдә пьесалар сәхнәгә сыҡты, кино ла төшөрөлдө. Унда иҫкә ҡалырлыҡ, уйландырырлыҡ геройҙар бихисап. Хәйер, ҡәләм оҫтаһы Мостай Кәрим һәр персонажды тулы ҡанлы, тере итеп һүрәтләүгә өлгәшкән. Бына әле булһа исемдәрен әйтеү генә лә етә, һәр образ үҙенең һүҙе, хисе, уйҙары менән күҙ алдына баҫа. Шулай ҙа халыҡ шағирының һәр әҫәрендә тиерлек баҙыҡ итеп һүрәтләнгән ҡатын-ҡыҙ геройы тап “Оҙон-оҙаҡ бала саҡ” повесында мәңгелеккә күңелгә уйылып ҡала. Ул – Оло инәй образы. Әҫәрҙе ҡабат-ҡабат уҡып, йәиһә уны сәхнәләштергән спектаклдең телевизион вариантын ҡараған һайын был ҡатындың бөйөклөгөнә, тәҡдим ителгән асылының тәрәнлегенә хайран ҡалам! Һәр уҡыусы яҡшы хәтерләйҙер: Оло инәй – ул Кендектең

Оло инәйе, атаһының беренсе ҡатыны. Был ҡатынды ауылда барыһы ла хөрмәт итә, уға кәңәш һорап киләләр, уға ярҙам һорап мөрәжәғәт итәләр, уның һәр һүҙе менән иҫәпләшәләр – уның абруйы сикһеҙ. Ә бит ул ябай ауыл иренең тәүге бисәһе. Уҡыу фәлән эләкмәгән, әммә тәбиғәттән тәрән зиһенле, фәрештә лә түгел, әммә ниәте һәм күңеле саф. Ә инде уның сикһеҙ сабырлығына, зирәклегенә әҫәрҙәге ваҡиғалар аша инанаһың.

Оло инәй – ауылда кендек әбейе. Ул донъяға килергә йыйынған балаларҙы ҡабул итә. Яҡын-тирәлә уның йылы ҡулдары аша үтмәгән бер бала ла ҡалмағандыр, моғайын. Сабыйҙарҙың тәүге ауазына ла, ҡатындарыҙың шатлыҡ йәшенә лә, ир-егеттәрҙең ғәйрәтле ҡыуанысына ла Ул тәүгеләрҙән булып шаһит була. Кешене донъяға ҡабул иткән был ҡатын образын халыҡ шағиры өлкән әсәһенең һыҙаттары аша һүрәтләгән. Кендектәрен ҡырҡып, Аллаһ тәғәләнең бүләге булған, һәр секунд һайын ярҙамға мохтаж әҙәм балаһын беренсе булып ҡулына алған был гүзәл зат образында башҡорт ҡатынына ғына хас булған тәбиғи мәртәбә, эске зыялылыҡ, күңел юғарылығы бар. Бер ҡараһаң, ул бит әллә ниндәй ҙур ғалимдарҙа, академияларҙа белем алмаған – әммә ниндәй тормошсан уның белеме, үҙен тотоу кимәле. Шул уҡ ваҡытта уның ғорур һыны, һынсыл ҡарашы, мәртәбәле аҙымдары был ханым әллә нисәмә матурлыҡ институтын тамамлаған, тип уйларға мәжбүр итерлек. Башҡорт халҡының быуаттар дауамында тәрбиәләгән ҡатын-ҡыҙ асылы сағыла Оло инәй образында. Был хаҡта әҙәбиәтселәр ҙә йыш телгә ала. Ниндәйҙер кимәлдә был ҡатын образы Ер-әсә образы менән дә тиңләшә. “Ер ул, әсә төҫлө, үҙ халҡына, үҙе бар иткән халҡына, бетеү булараҡ та сығыш яһай. Башҡорт халҡы өсөн ер ул ана шундай, шағир ҙа уның һөйөклө улы”[3. 100]

Ваҡлыҡтарҙан өҫтөн булған, кеше һөйләү ҡайҙа ти, ул хатта башҡалар хаҡында насар хәбәр ишетһә лә уның күңелен аяп ҡына талапсан һүҙен еткергән, аралашҡандар ғәйбәттәргә урын ҡалдырмаған ысын мәғәнәһендә Оло инәй. Башҡорт халҡының Йәнбикә заманынан, халыҡ булып башҡорттар яралғандан алып ошо дәүерҙәргә тиклем һаҡлап алып килгән холоҡ-фиғеле, мөҡәддәс сифаттары. Ә инде Оло инәйҙәге иң күркәм сифат – ул ярата белеү. Был тойғоһо уның тәрән миһырбан, киң мәрхәмәт, нескә йәлләү, ихласлыҡ менән һуғарылған. Заманында миңә бала саҡта ошо образды Башҡортостандың халыҡ артисы Зәйтүнә Бикбулатова башҡарыуында ҡарарға насип булды. Актрисаның Оло инәйенең тауышында бар ине ана шул мәртәбәле миһырбанлыҡ. Ым-ишараһы, тауышын күтәрмәй, әммә тонын үҙгәртеп ул әңгәмәсеһенә кәрәкле һүҙен хәҙер еткереп ҡуя. Ниндәйҙер сәбәләнеү, донъя мәшәҡәте менән зыҡ ҡубыу, үрһәләнеү, ығы-зығы юҡ уның тирәһендә. Әйтерһең, был кеше үҙе үк янындағыларҙы тик яҡшылыҡ, яҡтылыҡ тураһында һөйләргә, яман ғәмәл ҡылһалар, үкенә, кисерә белергә, башҡаларҙы яратып, йөрәге менән ҡабул итергә өйрәтә. Бына ошо героиняһы кеүек, бик күп геройҙары тураһында яҙыусы тәрән өйрәнеп тә, шул уҡ ваҡытта яртаып та яҙа. Сөнки, әйтерһең, улар аша донъяға башҡорт халҡының рухи ҡеүәтен еткергәндә, ошо дәүере менән генә түгел, быуаттар буйына формалашҡан милләтенең образын тыуҙыра. Был хаҡта И. Вәлиев былай ти: “Халыҡ тураһында һөйләгәндә, ул күкрәк ҡағып, ҡысҡырмай. Ул бары тик тыуған ере, уның йылғалары, тыуған һауаһы менән бер бөтөн булып йәшәй” [2. 250].

Оло инәй кеүек башҡорт ҡатындары, ҡыҙҙары образдары уның һәр әҫәрендә бар тиерлек. Ниндәй яҡты асыллы яҡташтары тураһында һөйләй ул “Ғүмер миҙгелдәре” китабында. Алсаҡ еңгәйҙәр, бала күңелен тәрән аңлаған, уйнаған саҡтарында тыймаған, балалыҡ шөғөлдәренә ирек ҡуйған йомшаҡ асыллы инәйҙәр, баҫалҡы холоҡло, әммә ғәййәр рухлы башҡорт һалдаттары, һүҙен самалап ҡына сығарған, һәр хәрәкәте менән егәрлелеген күрһәтәйем тип торған уңған килендәр, өҙөп кенә һүҙен әйткән, егет булһа,

ут булһын, тигән мәҡәлгә торошло ағайҙар... Улар барыһы ла ғәмәлдәре, күңелдәренең саф асылдары менән сағыла Мостай Кәрим ижадында. Данлыҡлы “Үлмәҫбай” поэмаһының геройы ғына ни тора. “Үлмәҫбайҙың ҡылығында айырыуса милли характер һыҙаттары көслө. Ул – “тау башҡорто тоҡомонан Салауат атлы егет”. Уның бөтә ҡылығы милли характер, милли йола ғәҙәттәренә буйһондороп алынған”, – тип яҙа ғалим Ғайса Хөсәйенов [5.77]

Шәхсән минең өсөн Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәрим ижады – ул башҡорт халҡының асылы хаҡында бар донъяға һөйләү, Башҡортостандың тәбиғәт матурлығына дан йырлау, ошо ерлектең боронғо ҡеүәте тураһында башҡаларға бәйән итеү. Бер ҡараһаң, шағир милли асылыбыҙ хаҡында һөйләй, ә икенсе яҡтан, ул мәңгелек ҡиммәттәр тураһында яҙа. Ер йөҙөндә иң боронғоларҙан һаналған, кешелеккә “Урал батыр” эпосы кеүек мәшһүр әҫәр бүләк иткән башҡорт халҡының фиғеле тап мәңгелек төшөнсәләр тураһында һөйләй.  Мостай Кәрим ижадын башҡорт халҡының тормошонан, асылынан айырып ҡарап булмай. “Үҙ ижадында дөйөм кешелек ҡиммәтәрен раҫлау менән бергә, ул үҙенең башҡорт халҡын, уның рухын күтәрҙе, бөгөнгө замандағы уның донъя мәҙәниәтендәге урынын билдәләнe.” [1. 100]

ӘҘӘБИӘТ:

1. Ахияров К. Ш, Якупов К. А. Мустай Карим – поэт, педагог, патриот. – Уфа.: РИО РУНМЦ МО РБ, 2008. – 143 с.
2. Валеев И. И. Мустай Карим – явление мировой культуры. Т.2. – Уфа.: Гилем, 2007. – 527 с.
3. Салихов М. В. Философия и педагогика человека в творчестве Мустая Карима. – Ульяновск.: Филологические науки, 2003. – 145 с.
4. Сөләймәнов Ә. М. Беҙҙең илдең йәме. – Өфө: Информреклама, 2007. – 79 б.
5. Хөсәйенов Ғ. Б. Халыҡ шағиры – Мостай Кәрим. – Өфө: Китап, 1965. 197 б.

© Абдуллина Л.Х., 2019

***Абдуллина А.Ш.,***
*д. филол. н., доцент, БФ Баш ГУ, г. Бирск*
***Лысова О.В.,***
*к. филол. н., доцент, БФ Баш ГУ, г. Бирск*

## ЛЕКСИЧЕСКИЙ ПОВТОР В ПОЭЗИИ М. КАРИМА

Лексический повтор – тождественное или противоположное воспроизведение употребленного в тексте слова или конструкции, которое комбинирует текст в единое целое, расширяя смысловое, эмоциональное и интонационное пространство текста. Е. А. Покровская отмечает, что повтор - это «неоднократное появление в определенном отрезке языковой единицы на соответствующем лингвистическом уровне» [6, 144]. Большое количество исследований убеждает в том, что наличие повторов в тексте – эстетическая реальность, «поскольку всякий текст образуется как комбинаторное сочетание ограниченного числа элементов, наличие повторов в нем неизбежно» [3, 91]. К лексическим повторам, обычно, относят тождественные повторы, метонимию, перифразы, местоименные замены, синонимы и однокоренные слова. Они усиливают выразительность речи, способствуют выделению в тексте важного понятия, проникновению вглубь содержания, делают речь интонационно-экспрессивной. «В художественном тексте

мастера лексические повторы – это и средство межфразовой связи (цепной), и средство создания выразительности речи (тон повествования приобретает упругость, взволнованность), и даже бесхитростный способ заострить, актуализировать важный с точки зрения автора смысл, выраженный подтекстно («бросается в глаза» мысль, частично обозначенная посредством лексического повтора) [1]. Эмоциональное выделение слов в поэзии М. Карима становится особенно заметным, когда они повторяются в двух или нескольких соседних предложениях:

*Эту песню мать мне пела,*
*На руках меня качая,*
*Эту песню мать мне пела,*
*В путь-дорогу провожая.*
*Мать мне пела эту песню -*
*Мы давно расстались с нею... [2, 144].*

Нередко повторение слова в лирике М. Карима в сложном предложении производится для уточнения смысловой связи между членами предложения:

*Говорят, сотворил тебя некогда Бог*
*Из кривого ребра.*
*Говорят, у него не нашлось*
*Под рукою другого добра.*
*Ерунда! Это - я, я тебя сотворил*
*Из воды, из огня,*
*Из надежды, из песни печальной*
*Творил тебя день изо дня...*
*И туда примешал я сомненье,*
*Добавил страданье, тоску,*
*Только так, только так цену радости*
*Можно узнать на веку... [2, 121].*

В стихотворении М. Карима «Грустная песня» слово или несколько слов повторяются не только в сложном, но и в простом предложении:

*Ты сгорела... Уж не оттого ли*
*Пепел лег на волосы мои?*
*Пепел лег на волосы мои,*
*И в слезах моих все больше соли...*
*И в душе моей все больше боли,*
*Горечью душа полным-полна,*
*Тайна в ней моя погребена,*
*Промолчать придется поневоле.*
*И в слезах моих все больше соли... [2, 78].*

Выражение «Пепел лег на волосы мои» усиливает последующую градацию, придавая контексту особую значимость, афористичность. В поэзии М. Карима простые словесные повторы применяются довольно часто:

*Ко мне сквозь белый лес, сквозь белый дым*
*Ты шла... Цвел на ветвях весенний иней [2, 161].*

В этом отрывке повтор эпитета при разных словах одного предложения приводит к различиям смысловых оттенков повторяющегося слова. Повтор слова придает динамичность повествованию, создавая особый ритм, присущий стилю М. Карима. В лирике башкирского писателя встречаются и синонимические повторы:

*И в душе моей все больше боли,*

*Горечью душа полным-полна...*

Согласно Ю. М. Скребневу, анафорой называется идентичное начало одного или нескольких элементов в смежных сегментах текста, цель которого - усиление повторяющихся слов [7]. Особую выразительность произведениям М. Карима придают анафоры союза «и»:

*Я с детства так люблю -*
*Твой сын -*
*И гордость гор, и красоту долин,*
*И золото земли,*
*И серебристость вод,*
*Но всех дороже мне*
*Родной народ! [2, 179].*

Синтаксическим приемом, подобным анафоре, является эпифора — вынесение одних и тех же слов или словосочетаний в конце нескольких соседних стихов, или строф, или прозаических абзацев. Такова, например, развернутая эпифора в стихотворении М. Карима «Какая нынче осень - загляденье!»:

*Какая нынче осень - загляденье!*
*Земле куда от зелени деваться?..*
*Шиповник вспыхнул во втором цветенье,*
*Любуешься - не можешь оторваться!*
*Нас восхищало необыкновенно*
*Природы всемогущей повеленье,*
*И даже песню славы вдохновенно*
*Сложил я в честь осеннего цветенья [2, 192].*

В стихотворении «Чтоб старые слова не устарели»:

*Чтоб старые слова не устарели,*
*Я повторяю вновь*
*И в летний зной, и в зимние метели -*
*Хлеб, Родина, Любовь.*
*Беру ль оружье, песню ли слагаю*
*Иль вспахиваю новь,*
*Всегда, везде извечный ваш слуга я,*
*Хлеб, Родина, Любовь!*
*Не оскорби и малой крохи света,*
*Не вздорь, не суесловь,*
*Знай, проклянут тебя стократ за это*
*Хлеб, Родина, Любовь [2, 211].*

каждая строфа заканчивается повтором, выражающим основную мысль целого и выступающим в разных смысловых вариациях. Они в конце строф передают героическую направленность стихотворения, выполняя усилительно-эмоциональную роль. Всякий «повтор скрепляет текст как целое – структурно - композиционная оформленность выступает в качестве критерия отграничения текста от цепочки предложений» [5, 178]. Благодаря повторам появляется возможность устанавливать внутритекстовые связи.

В стихотворении М. Карима повтор усиливает содержательный потенциал слова, меняя его значение, расширяя новые значения или компоненты значения. Благодаря повтору произведение приобретает дополнительную экспрессию:

*Карусель все вертится и вертится...*

*Что-то там темнеет, что-то - светится...*
*Вертится - способна душу вытрясти:*
*Карусель построена на хитрости.*
*Ползающий, скачущий, летающий -*
*Всякий - молчаливый и болтающий*
*Мчится на одной и той же скорости.*
*Жаба надувается от гордости.*

Лексический повтор «Карусель все вертится и вертится...» постепенно расширяет семантическую структуру, наделяется особыми качествами и свойствами содержательного характера, что облегчает процесс интерпретации произведения. «Художественный мир творчества М. Карима представляет собой тесное взаимодействие национальных традиций и общих реалистических принципов отображения действительности, сложного синтеза национального, лирического и эпического в создании картины мира, концепции личности человека, его отношений с другими людьми» [1, 144].

В лирике башкирского писателя употребляются и более широкие повторы целых сложных предложений и больших обособленных групп слов, создающих эмоциональную значительность их интонирования:

*Башкирия, я снова вдалеке*
*От звезд твоих, но неразлучен с ними.*
*Где б ни был, у меня на языке*
*Всегда твое единственное имя...*
*И в зимнюю таинственную ночь,*
*Земля, ты не перестаешь мне сниться,*
*Являясь мне в трех образах, в трех лицах -*
*Как мать моя, жена моя и дочь...[2, 202].*

В этом примере лексические повторы расширяют возможности восприятия смысла текста, раскрывая его многообразные дополнительные смысловые оттенки, характеризующие лирического героя, его взаимоотношения, ситуацию в целом.

Таким образом, в лирике М. Карима лексические повторы играют смыслообразующую, ассоциативно-композиционную, интонационно-ритмическую, эмоционально-экспрессивную роль. Они выполняют функцию усиления, нарастания, способствуя созданию пульсирующих смыслов, что приводит к созданию подтекста.

ЛИТЕРАТУРА:


1. Абдуллина А.Ш. Художественное мышление М. Карима // Современные проблемы науки и образования. - 2015. - № 2-2. - С. 240.
2. Карим М.С. Избранное: стихотворения, поэмы, сказки, трагедии. – М.: Художественная литература, 1973 .— 512 с.
3. Лотман Ю.М. Анализ поэтического текста // О поэтах и поэзии. СПб., 1996. С. 18–252.
4. Мозгалова Н. Лексический повтор: всегда ли это речевая ошибка? // «Русский язык» №9 [Электронный ресурс]. 2007. – Режим доступа: http://rus.1september.ru/article.php?ID=200700902
5. Москальская О. И. Грамматика текста.- М. : Высш. шк., 1981.- 183 с.
6. Покровская Е. А. Русский синтаксис в XX веке. - Ростов-на-Дону: Изд-во Ростов. гос. ун-та, 2001. - 482 с.

7. Скребнев Ю.М. Основы стилистики английского языка. - М: «Астрель», АСТ, 2002. - 221 с.

© Абдуллина А.Ш., Лысова О.В., 2019

***Акилова М.Ф.,***
*к. филол. н., доцент, БашГУ, г.Уфа*

# ИЗУЧЕНИЕ ЛЕКСИЧЕСКИХ ВЛИЯНИЙ ЯЗЫКА ПАМЯТНИКОВ ОРХОНО-ЕНИСЕЙСКОЙ ПИСЬМЕННОСТИ НА БАШКИРСКИЙ ЯЗЫК В КОГНИТИВНОМ АСПЕКТЕ

Этнография как общественная наука, изучает народы-этносы и другие этнические общности, их этногенез, быт, культурно-исторические отношения. Во взаимодействии с другими науками (археология, история) этнография воссоздаёт этническую историю. Этнографию связывает с языкознанием – проблема языкового родства, влияний и т. д. Отметим этнография ставит и решает как познавательные, так и практические проблемы этнических аспектов перестройки быта, современных этнических процессов, формирования новых наций, борьбы с пережитками и т. д. На современном этапе своего развития лингвистическая наука приобрела отчетливую тенденцию к изучению познавательных процессов, вербализующихся в языке, к изучению ментальных структур, стоящих за языковыми структурами на фоне общих системных установок науки на антропоцентризм, экспланаторность [3, 144–238]. Многообразие исследований когнитивных свойств языка на сегодняшний день привело к формированию аксиом, на основе которых когнитивная наука прочно укоренилась и переродилась в целое направление. Исследователи уделяют внимание специальному анализу выбора способов номинации объектов окружающей действительности, оказывающие когнитивные процессыв различных областях деятельности человека. Центральным и исходным понятием когнитивной науки выступает лексемы, которые представляют «единицы осмысленного (осознанного) знания о предмете или событии, их отдельных свойствах, характеристиках, взаимосвязях с другими предметами и событиями, которой оперирует человек в процессе речемыслительной деятельности» [2, 25–77]. В зависимости от речевой ситуации лексемаможет перестраиваться во вторичную единицу, на основе уже существующих характеристик посредством когнитивного механизма. Лингвокогнитивный подход имеет множество направлений в зависимости от цели, специфики, своеобразии исследования.В отечественной филологии позиции этнолингвистикиявляются достаточно прочными.В рамках этнолингвистическихисследований, учитывая важное свойство языка, которое заключается в том, что он кодирует образное мировосприятие, облекая его в словесную форму актуальным становится изучение ихв когнитологическом аспекте.Лексическая система любого языка имеет формально-логическую упорядоченность картины мира. В этом смысле идеографическая характеристика лексики в рамках четырех когнитивных сфер (I. Природа (неживая, живая); II. Человек (как физико-биологическое существо); III. Общество (человек как единица функциональной жизни общества); IV. Познание (априори)) является основополагающим в трудах известных ученых, как Г.Д. Гачев, В.В. Морковкин, Ю.Н. Караулов, А.Т. Кайдаров, Ж.А. Манкеева, О.А. Корнилов, Е.И. Зеленев, А.Г. Шайхулов, Ф.Г. Хисамитдинова, Л.Х. Самситоваи др. С когнитологической точки зрения язык народа рассматривается как «одежда» его мыслей, чувств, ощущений, причем наиболее удобная «одежда», выгодно отличающаяся

своей выразительностью, например, от языка жестов, или рисунков, схем. При этом языковая картина мира опирается на когнитивные представления народа, другими словами – на знание по возможности всей массы реалий жизни народа в контексте культурно-информационной среды. Оригинальный характер когнитивной базы этноса составляет не только словарный состав языка, но и юмор, игра слов, намеки, каламбуры, шутки, за которыми стоит вера в силу и мудрость родного языка, его способность доносить до сознания «высокий смысл вечных истин» [4, 55]. В наибольшей степени феноменальный склад национального склада мышления отражается в национальной лексике.

У каждого народа имеется своеобразный мир, в котором определяются духовные и нравственные приоритеты, где формируется самосознание человека. В данном случае идеографическая классификация представляется как «каркас познавательного процесса» [10, 1480], которая позволяет раскрыть генетическую связь между языками. При изучении языка любого этноса можно проследить, что в нем отражаются его образ жизни, взгляды на мир, мироощущения, переживания, уровень мышления, мировидения говорящего на нем народа. Изучение проблем происхождения языка, сферы его использования, связи ее с остальными языками и их диалектами раскрывает также историю народа, как его прошлое и настоящее, так и этнолингвокультурологические контакты, и тем самым показывает, что развитие языка есть длительный и сложный процесс.

Лексикаорхоно-енисейских памятников,бозначающиематериальную и социальную, духовную жизнь человека. Например, в памятниках слово täŋri – күкобозначало «небо»:1. Üza täŋri basmasar, asra tälinmäsär türk bodun iliŋin tőrüŋin qämart arï? (КТб. 22). – Күктән тәңре баҫмаһа, аҫта ер ҡупмаһа, төрки халыҡ, һеҙҙең ерегеҙе һәм хоҡуғығыҙҙы кем тартып алыр ине?. – «Тюркский народ, если бы сверху не падали небеса, снизу не разверзлась земля, кто бы смог отобрать твою землю и права?»; 2.Täŋridäki kűnkä jerdäki älimkä bökmädim (E. 73). – Күктәге ҡояшҡа, илемә туйманым. – «Я не мог насытиться солнцем на небе, союзом моего племени на земле»; 3. Er buŝuŝluğ täŋri bulutluğ bolti (ThsII 79). – Ирҙәр ҡайғылы, тәңре болоттар ҡаплы ине. – «Мужчины были в горе, небеса – затянуты облаками». Со временем семантика этого слова расширилась и оно стало обозначать верховное божество – Тенгри – Тәңге (Бог): Täŋri täg täŋridä bulmuš türk bilga qağan bu ődkä olurtum (КТм. 1). – Күктә тыуған Тәңре кеүек, аҡыллы Билгә төрки ҡаған булып, ваҡытлы тәхеткә ултырҙым. – «Как божество, рожденное на небесах, будучи мудрым тюрком Билге каганом, я вовремя взошел на престол».Täŋri имеет также значение «возвышенный», удивительный, прекрасный: Täŋri elimkä älĉisi ärtim(E. 12). – Тәңре илемдең илсеһе инем. – «Я был посланником у божественного моего государства». В башкирском языке тәңре означает «создатель всего живого на земле, Бог, Всевышний [1, 421]. В «Мифологическом словаре башкирского языка» тәңре зафиксирован в значении «Бог, Всевышний, божество». [9, с. 452]. В памятниках древнетюркской письменности зафиксированы aj teŋri – ай тәңре – «бог луны», jašïn teŋri – йәшен тәңре «бог грозы», jel teŋri – ел тәңре «бог ветра», kün teŋri – көн тәңре «бог дня», qunčuj teŋri – кунчуй (принцесса) тәңре – «бог принцесс», qut teŋri – ҡот тәңре – «бог удачи».Башкиры верили в силу Тәңре:Тәңре ҡөҙрәте– Сила, мощь Тенгри. Тәңре ҡунағы– Нежданный гость, в мифологии – человек, направленный Тәңре, или Он сам, принявший облик человека; досл. гость Тенгри. Доброжелательное отношение, гостеприимство башкир корнями уходит глубоко до периода Тангриянства. Тәңре хаҡы – Доля, право Тенгри. Күрше хаҡы – Тәңре хаҡы – Право соседа – право Тенгри. Значение антропонимовТәңребирҙе «данный Тенгри», Тәңреғол «раб божий» связаны

верой в силу Тәңре, преклонением Тәңре. О древнебашкирской мифологии сведетельстует арабский миссионер Ахмед Ибн Фадлан. Он сообщает о существовании у башкир двенадцати божеств, культов неживой и живой природы: «Мы видели, как одна группа поклоняется змеям, другая группа поклоняется рыбам, еще одна группа поклоняется журавлям. Мне сообщили, что они (башкиры) когда-то вели войну с какими-то людьми из числа их врагов, причем враги обратили их в бегство, и что журавли закричали позади их врагов так, что они испугались и сами обратились в бегство... Поэтому башкиры стали поклоняться журавлям и говорить: «Эти журавли – наш господь, так как они обратили в бегство наших врагов». Древние пласты башкирской мифологии представлены в эпических памятниках «Урал-батыр», «Акбузат», «Заятуляк и Хыухылу» и др. (мифы о возникновении земли и небесных светил, происхождении людей и миропорядка, о верховных божествах Тенгри, Хумай, Ер-хыу и др.). Ислам вытеснил из башкирской культуры многие древние верования и мифологические сюжеты, сейчас их можно лишь отчасти реконструировать по особенностям ритуалов, обрядов, сказочным образам и сюжетам, декоративному орнаменту [6, 394]. В генетической иерархии на одну ступень ниже Тенгри и Умай находится божество Йер-су, видимо, отпрыск Неба и Земли. Ахмед Ибн Фадлан в «Запискахо путешествии по Волге» отмечает: «И я слышал, как они говорили: «Нет бога, кроме Аллаха, Мухаммад-пророк Аллаха», стараясь приблизиться этими словами к тем мусульманам, которые проезжают у них, но не веря в это. А если постигнет одного из них несправедливость или случится с ним какое-либо дело, неприятное ему, он подымает свою голову к небу и говорит: «Бир тенгри», а это по-турецки (значит) «богом одним», так как «бир» по-турецки – «один», а «тенгри» – бог (Аллах) на языке турок». В башкирском бир Тенгри – Тәңребер– смысл аналогичен. В монгольском языке тэнгэр имеет также схожие значения «бог, небо, гром, погода, гений».

В своем идеальном государстве Платон допускал только музыку, выражающую благородные, мужественные чувства, и изгонял из него печальную, разнеживающую или застольную музыку. Он осуждал музыку без слов, способную раздражать, по его мнению, дурные страсти.

Не исключая того, что музыка может пробуждать и дурные страсти, Платон видел в ней главным образом духовное начало, связывающее ее с миром «идей».

Близкое к Платону восприятие музыки как духовного воспоминания «о том, чего никогда не было», Толстой выразил уже в повести «Детство». В главу XI «Занятия в кабинете и гостиной» введен отрывок, посвященный музыке: «Maman играла второй концерт Фильда – своего учителя. Я дремал, и в моем воображении возникали какие-то легкие, светлые и прозрачные воспоминания. Она заиграла патетическую сонату Бетховена, и я вспоминал что-то грустное, тяжелое и мрачное. Maman часто играла эти две пьесы; поэтому я очень хорошо помню чувство, которое они во мне возбуждали. Чувство это было похоже на воспоминание; но воспоминание чего? казалось, что вспоминаешь то, чего никогда не было» [8, 40].

Дополнением этой мысли служит оставленный в черновом варианте повести фрагмент: «Музыка не действует ни на ум, ни на воображение. В то время, как я слушаю

музыку, я ни об чем не думаю и ничего не воображаю, но какое-то странное сладостное чувство до такой степени наполняет мою душу, что я теряю сознание своего существования, и это чувство – воспоминание. Но воспоминание чего? Хотя ощущение сильно, воспоминание неясно» [10, 40].

Духовное «воспоминание», чуждое реальности, дает музыке высокое наполнение, рождает особое эстетическое наслаждение, близкое к умилению и сладостному переживанию. Душа Николеньки в сладком полусне, навеянном музыкой Фильда и Бетховена, «вспоминает» то, чего не было, но о чем она изначально «помнит». Фильд навевает «какие-то легкие, светлые и прозрачные воспоминания», Патетическая соната Бетховена – что-то «грустное, тяжелое и мрачное».

Говоря о музыке, Толстой часто использовал слово «воспоминание». «Когда вы играли, я совершенно слился с этой музыкой, как будто это воспоминание о чем-то, такое чувство, будто я сочинил эту музыку», – восхитился однажды Толстой игрой А. Б. Гольденвейзера [3, 209].

Восприятие музыки как духовного переживания, близкого к платоновскому «воспоминанию», лежит в основе нескольких музыкальных эпизодов романа «Война и мир». Так, Толстой передает впечатление Николая Ростова от пения Наташи сразу после его огромного карточного проигрыша Долохову. Понимая, что проигрыш ставит семью на грань разорения, Ростов находится в состоянии, близком к отчаянию. Но пение Наташи неожиданно властно захватывает его душу: «Что же это такое? – подумал Николай, услыхав ее голос и широко раскрывая глаза. – Что с ней сделалось? Как она поет нынче?» – подумал он. И вдруг весь мир для него сосредоточился в ожидании следующей ноты, следующей фразы, и все в мире сделалось разделенным на три темпа: Oh mio crudele affetto… Раз, два, три… раз, два.. три… раз… Oh mio crudele affetto… Раз, два, три… раз. Эх, жизнь наша дурацкая! – думал Николай. Все это, и несчастье, и деньги, и Долохов, и злоба, и честь, – все это вздор… а вот оно – настоящее… Ну, Наташа, ну, голубчик! ну, матушка!.. Как она этот si возьмет… Взяла? Слава Богу! – И он, сам не замечая того, что он поет, чтобы усилить этот si, взял втору в терцию высокой ноты. – Боже мой! как хорошо! Неужели это я взял? как счастливо!» – подумал он.

О, как задрожала эта терция и как тронулось что-то лучшее, что было в душе Ростова. И это что-то было независимо от всего в мире и выше всего в мире» [9, 64-65].

В романе описано впечатление от пения Наташи Андрея Болконского. И в этом случае музыка заставляет забыть о материальном и пробуждает лучшее в душе: «В середине фразы князь Андрей замолчал и почувствовал неожиданно, что к его горлу подступают слезы, возможность которых он не знал за собой. Он посмотрел на поющую Наташу, и в душе его произошло что-то новое и счастливое. Он был счастлив, и ему вместе с тем было грустно. Ему решительно не о чем было плакать, но он готов был плакать. О чем? О прежней любви? О маленькой княгине? О своих разочарованиях?.. О своих надеждах на будущее? Да и нет. Главное, о чем ему хотелось плакать, была вдруг живо сознанная им страшная противоположность между чем-то бесконечно великим и неопределимым, бывшим в нем, и чем-то узким и телесным, чем был он сам и даже была она. Эта противоположность томила и радовала его во время ее пения» [9, 220].

Музыка выводит из телесного бытия в мир смутного «воспоминания» души. Николай Ростов и Болконский ощущают в пении Наташи бесконечность духовной жизни и конечность всего земного.

Изображение музыкального переживания как «воспоминания» души о небесной родине дано еще в одном эпизоде романа. Наташа, поделившись с братом детскими воспоминаниями и прослушав Nocturne Фильда, исполненный на арфе учителем

Димлером, говорит: «… когда этак вспоминаешь, вспоминаешь, все вспоминаешь, до того довспоминаешься, что помнишь то, что было еще прежде, чем я была на свете… я знаю наверное, что мы были ангелами там где-то и здесь были, и от этого все помним» [9, 288-289].

Смысл такого «воспоминания» близок тому, как его понимал Платон. В диалоге «Федон» философ замечает: «(…) душа существует не только до нашего рождения, но, что вполне возможно, некоторые души существуют и после того, как мы умрем, и будут существовать, и много раз родятся, и снова умрут: ведь душа по природе своей настолько сильна, что способна вынести много рождений» [7, 56].

Музыкальные эпизоды романа объединяются осмыслением музыки в духе философии Платона. Музыка осмыслена как идеально-духовное переживание – «воспоминание» души о небесной родине, «о том, чего никогда не было».

ЛИТЕРАТУРА:


1. Бабаев Э. Г. Лев Толстой и музыка // Лев Толстой и музыка. Хроника. Нотография. Библиография / Сост. З. Г. Палюх и А. В. Прохорова. – М.: Сов. композитор, 1997. – С. 7-39.
2. Бялокозович Б. Польская музыка в оценке Льва Толстого // Л. Н. Толстой. Ученые записки, статьи и материалы. IV. – Горький, 1961. – С. 198-213;
3. Гольденвейзер А. Б. Вблизи Толстого. Воспоминания. – М.: Захаров, 2002. – 652 с.
4. Найдорф М. И. Музыкальность Л. Н. Толстого. Источники мотивации. – М., 1990. – 134 с.
5. Платон. Собрание сочинений в 4 томах / Под общ. ред. А. Ф. Лосева, В. Ф. Асмуса. Т. 2. – СПб.: Изд. Олега Абышко, 2007. – 626 с.
6. Соколов Э. В. Античность (Платон, Сократ, Аристотель). Режим доступа: http://zhurnal.lib.ru/s/sokolow_e_w/2antich.shtml
7. Платон. Собрание сочинений в 4 томах / Под общ. ред. А. Ф. Лосева, В. Ф. Асмуса. Т. 3, ч. 2. – СПб.: Изд. Олега Абышко, 2007. – 752 с.
8. Толстой Л. Н. Собр. соч. в 22 томах. Т. 1. – М.: Худож. лит., 1978. 421 с.
9. Толстой Л. Н. Собр. соч. в 22 томах. Т. 5. – М.: Худож. лит., 1980. 401 с.
10. Толстой Л. Н. Полн. собр. соч. в 90 томах. Т. 1. – М.; Л.: Гослитиздат, 1928. – 358 с.
11. Толстой С. Л. Очерки былого. – М.: Гослитиздат, 1956. – 168 с.
12. Эйгес И. Воззрение Толстого на музыку // Эстетика Льва Толстого / Под ред. П. Н. Сакулина. – М.: Гос. акад. худож. наук, 1929. – С. 241-308;


© Ахметова Г.А., 2019

***Байғужин И.Ғ.,***
*БДУ аспиранты, Өфө к.*

## БАБИЧТЫҢ “КӨТӘМ” ШИҒЫРЫНДА ТӘБИҒӘТ ҺӘМ ХАЛЫҠ ЯҘМЫШЫ САҒЫЛЫУЫ.

Башҡорттар араһында шундай һәйбәт, аҡыллы шәхестәр бар, етерлек ғәйрәт запасы бар, үлеүгә табан барыусы башҡорттарҙы күтәрә торған күп һәйбәт һыҙаттар бар, аҙаҡ килеп, яҡты ғилем һәм бөйөк мөхәббәт кешеләре бар ҙабаһа — һис бер юл, һис бер

ҡотолоу юҡмы ни?”[1, 58] — тип яҙҙы Д. Н. Мамин-Сибиряк.Халҡының ауырлыҡтан ҡотҡарыу юлын янып эҙләгән башҡорт шәхестәренең береһе Шәйехзада Бабич булды.Был яҡты донъяла шағир 24 йыл ғына йәшәп өлгөргәҙ.Әммә уның ижад юлы ла 10 йылдан артманы. Әммә шуға ҡарамаҫтан, башҡорт халҡы уны үҙенең ятаҡҡан шағиры, халыҡ шағиры итеп таныны. Ул башҡорт әҙәбиәте тарихында юйылмаҫ эҙ ҡалдырҙы.Уның ижады үҙе бер уникаль идея-эстетик күренеш.

Шағирҙың өлгөрөүе уйҙарының халыҡ фекерен сағылдырыу дәрәжәһенә күтәрелеүенән башлана торғандыр. Бындай юғарылыҡҡа халыҡтың хыялдары менән ҡанатланып, уның теләктәре менән дәртләнеп йәшәгәндә генә күтәрелеү мөмкин.

Ш.Бабичтың ваҡиғаларҙы тетрәп-тетрәп кисереү һәләте, ил яҙмышына иғтибарлы булыуы уның шәхси һыҙланыуҙарын бик күптәр өсөн уртаҡ итте. Ул халыҡтың өмөтө менән өмөтләнде, халыҡ ҡайғыһы менән ҡайғырҙы, халыҡ нәфрәте менән нәфрәтләнде. Быларҙың барыһы ла уның күңеленә халыҡтағы иң яҡты ынтылыштарҙы тупланы.

Туған халҡына,иленә,тәбиғәтенә мөхәббәте, уның киләсәгенә бағышлаған өмөттәре Бабичтың 1916 йылда яҙылған “Көтәм” исемле шиғырындағы һәр юлға мөлдөрәмә тулған. “Был шиғыр — Бабич ижадында ғына түгел, барлыҡ башҡорт лирикаһындағы иң аҫыл әҫәрҙәрҙең береһе,”[2, 15] - тип тикмәгә генә яҙманы әҙәбиәт белгесе һәм шағир Р.Бикбаев.

Был яҡты донъяны, гөлостан кеүек йәйрәп ятҡан башҡорт ерҙәрен, уның йәмле туғайҙарын, сәскәгә күмелгән сәхрәләрен күреп, шағирҙың күңеле әллә ҡайҙарға елкенә. Тауҙарына менһә, уның алдында йәннәт нурҙары балҡығандай була. Ләкин башҡорт ауылына килеп инеү менән был яҡты тәьҫораттарҙың эҫәре лә ҡалмай.Башҡорт халҡының аянаслы тарихын иҫендә тотоп, хәҙерге ваҡытта ауылдарҙы гүрестан, йәшәп ятҡан кешеләрҙе “йәнле мәйеттәр” атай.Халыҡтың ҡайғы-хәсрәтен йылғаларҙың ағыуы менән сағыштыра. Ошо гөлостан кеүек тәбиғәт ҡосағындағы тормоштан аһ-зар, хәсрәт аңҡып тора:

*Гүрстандай ғәмле ауылдарҙа*
*Ҡыбырҙаша йәнле мәйеттәр.*
*Йәнле мәйеттәрҙең ғәмен көйләп,*
*Илап аға Һаҡмар, Яйыҡтар.* [3, 111]

Башта балҡып торған тәбиғәт, ентекләберәк ҡараһаң, бер ҙә улай шат йөҙлө түгел икән: йылғалары ла уның, ил ғәмен көйләп, илап аға. Туған халҡының ошондай тетрәткес тормош эсендә һыҙланыуы, шағир күңеленә йыйылып, һағыш булып һығылып тама:

*Янып-көйөп, бәғерем, өҙгөләнеп,*
*Ләғнәт уҡыйым, кемгә — белмәйем.*
*Килер микән аҡ көн беҙгә лә?” тип*
*Уралҡайға ҡарап илайым.*

Шағир был фажиғәле яҙмышты ситтән килгән бер үткенсе кеүек күҙәтмәй. Ул үҙен ошо йәнле мәйеттәрҙең, Һаҡмар, Яйыҡтарҙың бер туғаны итеп иҫәпләй.Ләғнәт уҡый үҙе лә белмәй кемгә тере мәйеттәй халҡымамы,баҫып инеүселәргәме? “Килер микән аҡ көн беҙгә лә?” тип өҙгөләнеп илай. Әле генә Урал тауҙарына ҡарап йырлаған егет хәҙер шул тауҙарға ҡарап илай.[3, 22]

Бабичтың йөрәгенән моңдар бөркөлгәндә лә, бәғере өҙгөләнгәндә лә, хис-тойғоларын Урал менән уртаҡлашҡандай була.Мөһабәт тауға ҡарап тыныслыҡ,сабырлыҡ,ғәйрәт көс шағирға күскәндәй.Ошо башҡорт ерenең ҡайғы-хәсрәте менән дә, өмөтө менән дә һуғарылған Уралдан үҙ күңеленә,йәшәйешенә,көс-ышыаныс алғанын тоя шағир:

*Күрәм: үҙ олпатын боҙмай һаҡлап,*
*Урал ята әкрен, тын ғына;*
*Ала шунда йәнде тынлыҡ ҡаплап,*
*Килә башлай тәмле уй ғына.*

Шағир олпат һәм тыныс Уралға ҡарап йәненең тыныслығын таба.Күҙ алдына тәмле уйҙар, яҡты киләсәк килә башлай.Быуаттар буйына бәлә-ҡазаларҙан һаҡлаусы ла,сит ил баҫҡынсыларынан ҡурсалаусы ла, бөтәһендә үҙенә һыйындырыусы мәғрүр Уралтау башҡорт халҡының берҙәмлек символына әйләнгән.Шәйехзада ла мөһабәт тауҙың көсөнә ышана һәм яҡты көндәрҙең тиҙҙән етеүен аңлай.Ошондай һиҙгерлеге арҡаһында һүҙен шағир:

*Ишеткәндәй булам әллә ҡайҙан*
*Ырыҫ-бәхет, өмөт йырҙарын;*
*Өмөт ҡайнап, ташып күкрәгемдән,*
*Көтәм тиҙҙән аҡ көн тыуғанын,*

тип тамамлай. Иле хатта ауыр замандар кисергандә лә, күкрәгенән ҡайнап, ташып торған өмөтө булғанға ла әҫәрен “Көтәм” тип атаған.

Ш.Бабич был әҫәрен башҡортса яҙа.Был хәл уны әҙәбиәтебеҙҙең формалашыу юлында үҙенсә бер тарихи факт дәрәжәһенә күтәрә. Башҡорт телен танымаҫҡа тырышыусыларҙың тауышы әленән-әле ишетелеп торған саҡта уҡ Бабичтың туған телдә шиғыр яҙырға һәм уны матбуғатҡа тәкдим итергә ҡыйыулығы етә.

Башҡортса яҙылған был шиғырҙың ниндәй резонанс тыуҙырыуы ла ҡыҙыҡлы. 1916 йылдың йәйендә “Тормош” газетаһы редакцияһы Рамаҙан ғәйете айҡанлы Мәжит Ғафури, Сәғит Рәмиев, Нәжип Думави, Сәғит Сүнчәләй, Зариф Бәшири һәм Шәихзада Бабичтың берәр шиғырын баҫтырып сығарырға була һәм гәзиттең 18 июль һанында Ғафуриҙың, Сүнчәләйҙең, Бәшириҙең шиғырҙары баҫылып та сыға. Был номерҙы әҙерләгәндә Бабич үҙенең “Көтәм” тигән шиғырын алып килә һәм ҡалған биш шағир ҙа был ваҡытта редактор янында була. [2, 17]

“Бабичтың шиғырын уҡыр алдынан әйткән ошо һүҙҙәре, — тип хәтерләй Зариф Бәшири,— бөгөнгөләй хәтеремдә ҡалған:

— Алдан уҡ әйтеп ҡуяйым: шиғырымдың ике сәйер яғы бар. Беренсенән, ул шаҡтай ҡыйыу мәсләкле, икенсенән, шиғыр башҡорт телендә яҙылған. Сөнки башҡорттоң бөгөнгө гүрстандай ауыр тормошо хаҡында милләте башҡорт булған шағир үҙ шиғырын башҡортса яҙмай булдыра алманы, һәм мин уның гәзиттә башҡортса баҫылыуын теләр инем”.

...Бабичтың был “Көтәм” тигән шиғыры миңә лә, башҡаларға ла оҡшаны. Шулай ҙа уны “Тормыш” газетаһының редакторы Закир Ҡадири хупламаны:

— Мин был шиғырҙы, — тине ул, — Бабич үҙе әйткән сәйер яҡтарын алып ташлағанда ғына баҫып сығара алам, ә был көйө — юҡ.

Быңдай хөкөмдө ишеткәс, Бабич шиғырҙы ҡуйын кеҫәһенә тыҡты ла урынынан торҙо һәм Закир Ҡадиригә:

— Беҙҙең халыҡҡа иреклe көндәр килмәйенсә, был шиғыр донъя күрә алмаҫ, ахыры. Ә мин ул көндө көтәм! — тине лә редактор бүлмәһен ташлап сығып китте”.[4]

Шулай итеп, Бабич шиғырҙарында тәбиғәт темаһы һәм азатлыҡ өсөн көрәш бәйләнештә үтә. Башҡортостан тәбиғәте үҙенең тәрән тыныслығы, сабырлағы менән халыҡты сыныҡтыра.

Тереләр үлгәндәрҙең күҙен яба, үлгәндәр тереләрҙең күҙен асып китә. Бабич үҙенең янып йәшәүе һәм ижад итеүе менән генә түгел, азатлыҡ яулау юлында һәләк булыуы менән дә күптәрҙең күҙен асып китте.

Ысын шағир яҙмышын халыҡ яҙмышынан айырып булмай. Иң аяуһыҙ йылдарҙа, үткер политик бәрелештәр һәм ҡанлы яуҙар милләттең тарихи киләсәген хәл иткәндә, Шайехзада Бабич шиғырҙары халыҡты берҙәмлеккә, татыулыҡҡа һәм рухи тотороҡлоҡҡа өндәгән, тыуған ерҙең азатлығы өсөн изге көрәшкә дәртләндергән. Шағирҙың ижады башҡорт шиғриәтенә тос өлөш индергән,байыҡтырған юғалмаҫлыҡ хәтер ҡалдырған.Шәйехзада Бабич – башҡорт иленең ысын мәғәнәһендә халыҡ шағиры.

ӘҘӘБИӘТ:

1.Мамин-Сибиряк Д.Н. Байгуш. Повесть и рассказы. – Өфө: 1978. – 320 бит.
2.Бикбаев Р. Шәйехзада Бабич. Тормошо һәм ижады. – Өфө, 1981. - 320 бит.
3.Ҡунафин Ғ. Бабичтың яҙғы йыры. Весенняя песень Бабича. – Өфө: Ғилем, 2013. – 320 бит.
4.Бәшири З. Эйе, ул хаҡлы ине//Совет Башҡортостаны, 1957, 12 декабрь.

© Байғужин И.Ғ., 2019

***Бахтиярова А.Н.,***
*к. филол. н., доцент, БашГУ, г. Уфа*

## ОБРАЗОВАНИЕ ИМЕН ПРИЛАГАТЕЛЬНЫХ В АРАБСКОМ И БАШКИРСКОМ ЯЗЫКАХ

Словообразвание – это процесс образования новых слов и характерно для всех языков. Новые слова появляются путем присоединения к корням слов различных словообразовательных аффиксов, новых корней. Они образуются в ходе различных исторических событий, явлений природы, развития техники и оборудования, появления новых наук и интересов у людей.

Проблемам словообразования сегодня в арабском и башкирском языкознаниях уделяют большое внимание. Образование новых слов в арабском языке происходит по определенным словообразовательным моделям, исторически сложившимся в данном языке. Отнесение каждого словообразовательного способа к той или иной модели может быть произведено только в ходе специального словообразовательного анализа. И то и другое достигается путем установления отношений словообразовательной производности между определенными единицами, определения направления и характера этих отношений.

В башкирском языке словообразование несет в себе переход слова от одной части речи в другую часть речи. Словообразовательная цепь характеризуется сложными смысловыми отношениями слов, представляющих все ее звенья. Они образуются посредством словообразовательных аффиксов и их словообразовательные звенья очень разнообразны по своему строению.

В данной статье мы будем рассматривать образование имен прилагательных в данных языках.

В арабском языке нет никакого грамматического отличия между существительным и прилагательным. Каждое прилагательное может быть использовано в качестве существительного. К именам прилагательным относятся слова, обозначающие либо качество (مَدْرَسَةٌجَدِيدَةٌ – «новая школа»), либо отношение (كِتَابٌرُوسِيٌّ– ‘русская книга’). В зависимости от того, обозначают ли оно качество или отношение, прилагательные делятся на качественные и относительные. Особенностью употребления арабских прилагательных является то, что прилагательные всегда ставятся после имени, которое

они определяют; неодушевленные существительные во множественном числе согласуются только с прилагательными в женском роде единственного числа. Качественные имена прилагательные обозначают качество, присущее предмету или явлению. Это, например, имена, обозначающие пространственное или временное качество (كَبِيرٌ – ‘большой’,طَوِيلٌ – ‘длинный’), внутреннее качество человека или животного (قَوِيٌّ – ‘сильный’), цвет или внешнее качество (أَحْمَرُ – ‘красный’, أَهْيَفُ – ‘стройный’).

Наибольшее распространение получили качественные имена прилагательные, образованные по формулам:

فَعِيلٌ

سَعِيدٌ – ‘счастливый’

قَرِيبٌ – ‘близкий’

شَرِيفٌ – ‘благородный’

فَعِلٌ

فَرِحٌ – ‘радостный’

يَقِظٌ – ‘бдительный’

فَعَلٌ

حَسَنٌ – ‘хороший’

فَعُولٌ

كَسُولٌ – ‘ленивый’

جَسُورٌ – ‘храбрый’

Качественные прилагательные в арабском языке, как и существительные, имеют форму разбитого множественного числа. Точных правил для ее выбора не существует, поэтому формулу разбитого множественного числа для качественных прилагательных следует запоминать.

В башкирском языке имена прилагательные образуются путем присоединения к существительным, глаголам и другим частям речи следующих аффиксов:

1. -лы/-ле, -ло/-лө: квалификация – квалификация-лы(квалифицированный), белем (знание) – белем-ле(знающий), ос (конец) – ос-ло (острый), көс (сила) – көс-лө (сильный);

2. -һыҙ/-һеҙ, -һоҙ/- һөҙ:сыҙам (терпение) – сыҙам-һыҙ (нетерпеливый), күңел (душа) – күңел-һеҙ (грустный);

3. -ғы/-ге, -ғо/-гө, -ҡы/- ке, -ҡо/- кө:ҡыш(зима) – ҡыш-ҡы(зимний), көҙ (осень)– көҙ-гө(осенний), башымда(на моей голове) – башымда-ғы(на моей голове), өҫтөндә (наверху)– өҫтөндә-ге(во что он, она одет(а);

4. -сан/-сән: ойоҡ(носок) – ойоҡ-сан (в носках), күлдәк (платье) – күлдәк-сән (в платье), һүҙ (слово) – һүҙ-сән(болтливый). Еще они добавляются к глаголам: оял (стыдись) – оял-сан (стеснительный), һөйләшеү (говорить, разговор) – һөйләшеү-сән (болтливый);

5. -сыл/- сел: ҡунаҡ (гость) – ҡунаҡ-сыл (гостеприимный), көн (день) – көн-сөл (завистливый);

6. -лыҡ/-лек, -лоҡ/-лөк:аҙна(неделя) – аҙна-лыҡ(на неделю), эсер(выпьет) – эсер-лек(выпить), күлдәк(платье) – күлдәк-лек(на платье);

7. -ғыс/-гес, -ғос/- гөс, -ҡыс/-кес, -ҡос/-көс, - аҫ, -еҫ, ыс/-ес, -ғыр/-гер, -аҡ/-әк, -ыҡ/-ек, -оҡ/-өк, -ҡ/ -к, -дыҡ/-дек, -доҡ/-дөк, -ғаҡ/-гәк, -ымтал/-емтәл, -омтал/-өмтәл, -мтал/-мтәл, -ҡалаҡ/-кәләк, -ғалаҡ/-гәләк: ҡыҙған (горячий) – ҡыҙған-ыс (жалостливый), онта (измельчи) – онта-ғыс (измельчитель), һиҙ (чувствуй) – һиҙ-гер (чувствительный), үт (пройди) – үт-кер (острый), һын (ломайся) – һын-ыҡ (сломанный), ила (плачь) – ила-ҡ

(плакса), сере (гнилой) – сере-к (гнилой), ҡурҡ (бойся) – ҡурҡ-аҡ (трусливый), көл (смейся) – көл-әс (улыбчивый), тай (скользи) – тай-ғаҡ (скользкий), һөҙ (бодай) – һөҙ-гәк (бодливый), өшө (мерзни) – өшө-мтәл (мерзлявый), ҡас (беги) – ҡас-ҡалаҡ (беглый) и др.;

8. -са/-сә:башҡорт (башкир) – башҡорт-са (по-башкирски), дәүер (эпоха) – дәүер-сә (эпохальный);

9. Аффиксы –дай/-дәй, -тай/-тәй, -ҙай/-ҙәй, -лай/-ләй присоединяются к существительным в башкирском языке и также образуют прилагательные: айыу (медведь) – айыу-ҙай (по-медвежьи), бүрәнә (бревно) – бүрәнә-ләй (как бревно) и др.

К заимствованным словам из арабского языка в башкирском языке добавляется аффикс -и, образуя прилагательные: ғилем (наука) – ғилм-и (научный), тарих (история) – тарих-и (историчексий), синыф (класс) – синф-и (классовый).

К словам, заимствованным из русского языка и других иностранных языков в башкирском языке добавляются аффиксы: -ик (техник - технический), -аль, -ль (театраль – театральный, музыкаль - музыкальный), -ив (объектив – объективный, актив - активный), -он (революцион – революционный, реакцион - реакционный).

Относительные имена прилагательные (отыменные) указывают на связь предмета с другим предметом, от которого образовано данное прилагательное, и называют признак постоянно присущий предмету. Стоит запомнить, что относительные имена прилагательные не образуют степеней сравнения.

Относительные прилагательные в арабском языке образуются от существительных при помощи окончания –ِيٌّ, которое прибавляется следующим образом:

К основе имени, если оно не имеет никаких дополнительных окончаний (та-марбуты или танвина):

مِصْرُ ‘Египет’ – مِصْرِيٌّ ‘египетский’

ذَهَبٌ ‘золото’ – ذَهَبِيٌّ ‘золотой’

Если существительное оканчивается на ةٌ, то окончание ةٌ опускается, а затем к основе имени прибавляется окончание ِيٌّ:

مَدْرَسةٌ ‘школа’ – مَدْرَسِيٌّ ‘школьный, учебный’

سِيَاسَةٌ ‘политика’ – سِيَاسِيٌّ ‘политический’

В башкирском языке так же как и в арабском можно наблюдать образование относительных прилагательных в некоторых случаях: мәктәп (школа) – мәктәп-сә (школьный, по-школьному), сәйәсәт (политика) – сәйәс-и(политический).

В арабском языке если существительное оканчивается на ا или ى , то относительные прилагательные образуются или путем замены этого окончания на و с последующим прибавлением окончания ِيٌّ

فَرَنْسَا ‘Франция’ – فَرَنْسَوِيٌّ ‘французский’

مَعْنًى ‘смысл’ – مَعْنَوِيٌّ ‘смысловой’

Или путем замены окончания ا на ِيٌّ. Примеры:

رُوسِيَا ‘Россия’ – رُوسِيٌّ ‘российский; русский’

أَمْرِيكَا ‘Америка’ – أَمْرِيكِيٌّ ‘американский’

Если имя состоит из двух коренных(имена типа أَبٌ), то третья коренная восстанавливается в виде буквы و и уже к ней прибавляется окончание ِيٌّ:

أَبٌ ‘отец’ – أَبَوِيٌّ ‘отцовский’

أَخٌ ‘брат’ – أَخَوِيٌّ ‘братский’

Если имя существительное состоит из двух коренных и имеет окончание ةٌ, то это окончание опускается, третья коренная восстанавливается в виде و и к ней прибавляется окончание ِيٌّ:

سَنَةٌ ‘год’ – سَنَوِيٌّ ‘годовой, годичный’

لُغَةٌ ‘язык’ – لُغَوِيٌّ ‘языковой’

Женский род у относительных имен прилагательных образуется также прибавлением окончанияةٌ. Множественное число для одушевленных лиц образуется при помощи окончания целого множественного числа для существительных, т.е.ونَ (ينَ), которое присоединяется к окончаниюيّ. Например:

سُورِيَا ‘Сирия’ – سُورِيٌّ ‘сирийский’ – سُورِيَّةٌ ‘сирийская’ – سُورِيُّونَ ‘сирийцы, сирийские’.

Имена прилагательные, обозначающие цвет или внешнее качество, образуются по формуле:

أَفْعَلُ – для мужского рода;

فَعَلاءُ – для женского рода;

وَانِفَعْلا (فَعْلاوَيْنِ) – формула двойственного числа для женского рода;

أَفْعَلانِ (أَفْعَلَيْنِ) – формула двойственного числа для мужского рода;

فُعْلٌ – формула множественного числа для обоих родов, например:

أَحْمَرُ ‘красный’ – حَمْرَاءُ ‘красная’ – حَمْرَاوَانِ ‘красные (дв.ч., жен.р.)’ – حُمْرٌ ‘красные (мн. ч., общ. р.).

Таким образом, и в арабском, и в башкирском языках имена прилагательные образуются при помощи различных аффиксов. При этом слова, образованные при аффиксации, не переходят в другую часть речи.

ЛИТЕРАТУРА:
1. Белкин В.М. О характере лексической синонимии в арабском литературном языке. Арабская филология. - М., 1968.
2. Гранде Б.М. Курс арабской грамматики в сравнительно-историческом освещении. – М., 1998.
3. Ишбулатов Н.Х., Зәйнуллин М.В. Хәҙерге башҡорт теле. Фонетика. Морфология. – Өфө: БДУ. – 1986. – 353 бит.

© Бахтиярова А.Н., 2019

***Бикбулатов Г.Ф.,***
*аспирант, БашГУ, г.Уфа*

## МУСТАЙ КАРИМ. ВОСПОМИНАНИЯ ИЗ ДЕТСТВА.

Часто вспоминаю слова учительницы, которая всегда говорила, что выдающиеся личности передают «эстафету» друг-другу. В 1895 году умер поэт-просветитель Мифтахетдин Акмулла, передавая ту самую «эстафету» Шайхзаде Бабичу, а в 1919 году принял ее у Бабича Мустай Карим.

Творчество Мустая Карима стало олицетворением башкирской литературы и всей нашей республики. Из-под пера Мустая Карима вышли выдающиеся произведения, вошедшие в золотой фонд башкирской литературы. Он опубликовал более 100 поэтических и прозаических сборников, свыше 10 драматических произведений. Сборники стихов и поэм «Черные воды», «Возвращение», «Европа-Азия», «Времена», пьесы «Страна Айгуль», «Похищение девушки», «В ночь лунного затмения», «Салават. Семь сновидений сквозь явь», «Не бросай огонь, Прометей!», повести «Радость нашего дома», «Таганок», «Помилование», «Долгое-долгое детство», «Деревенские адвокаты».

Произведения Мустая Карима переведены на десятки языков России и мира. По пьесе «В ночь лунного затмения» в 1987 году Свердловской киностудией был снят одноименный фильм. Повесть «Долгое-долгое детство» была экранизирована в 2004 году киностудией «Башкортостан» режиссёром-постановщиком Булатом Юсуповым.

22 сентября 2019 года в Уфе состоялся премьерный показ фильма «Сестрёнка» по его повести «Радость нашего дома». Премьера в год векового юбилея корифея башкирской литературы — народного поэта Башкортостана, выдающегося писателя, драматурга и общественного деятеля Мустая Карима стала крупным культурным событием.

Мы часто сталкиваемся утверждением, что Мустай Карим – наш Пушкин. В своем выступлении на торжестве посвященной 80-летию со дня рождения поэта Экс-премьер-министр Правительства Республики Башкортостан Рафаэль Байдавлетов сказал следующие слова: «Есть личности, которые навсегда оставляют добрый след в истории, творческое наследие которых неподвластно времени. Несколько месяцев назад вся многоязычная Россия широко и торжественно отметила двухсотлетний юбилей гениального А.С. Пушкина. На расстоянии двухсотлетия совпал с юбилеем нашего великого современника – Мустая Карима». [1,6]

Плодотворную литературную работу Мустай Карим сочетал с многосторонней общественной деятельностью. Думается, перед многими мастерами слова и пера не раз стояла дилемма: отдать предпочтение творчеству или государственной службе?

Всевозможные должности на государственной и общественной службе, конечно же мешают творческой натуре. Кто не слышал тех, кто, став депутатом, делегатом, достигнув вершин власти, жалуются: «Дел выше крыши, нет времени для творчества». Возможно и так. Но вспомним Гете, который был не только великим поэтом, драматургом, прозаиком, ботаником, ученым, открывшим межчелюстную кость у человека, геологом, живописцем, но и министром культуры герцога Веймарского, руководителем военной коллегии и руководителем дорожного строительства, директором придворного театра, министром Великого Веймарского герцогства…

Исключительное явление в истории культуры Средней Азии Алишер Навои являлся главным визерем султана Хусейна Байкары – потомка Тимура, известного в Европе под именем Тамерлана.

Из истории Башкирии можно отметить факт вхождения в дни рождения башкирской АССР в ее правительство 23-летнего известного башкирского поэта Шаехзады Бабича. И в этом ряду мастеров слова, плодотворно сочетающих творчество с государственной и общественной деятельностью, свое достойное место занимает Мустай Карим. Он всегда сумел согласовывать литературную стезю с выполнением государственных и общественных дел. Присутствие в центре политической жизни дало ему задор, возможность наблюдать дыхание эпохи с высоты вершин расширили горизонты его творчества. Отсюда же и философская глубина произведений М. Карима и общественная значимость и ценность, созвучность мировому духу.

У поэта неоднократно спрашивали: «Не мешает ли общественная работа литературному творчеству?», «Не мешает ли Вашей основной работе общественная деятельность?». И он отвечал: «Наверное, даже помогает. Потому что я не просто в курсе

каких-то событий, внутреннего движения в стране, я не сбоку подхожу к каким-то проблемам страны, а принимаю участие в их решении, и это помогает. А что касается количества, то писать мне удается, может быть, меньше, чем другим. Хотя порой, я думаю, они тоже не торопятся, могут сегодня не писать, а писать завтра… У меня нет такой возможности, утешения, что напишу завтра. Я должен писать сегодня, потому что завтра у меня будут другие дела.

И общественная деятельность налагает большие обязательства: бываешь среди людей и несешь ответственность перед людьми. Такая работа подтягивает тебя самого и вызывает в тебе гражданскую активность». [2, 226]

К сожалению, я не могу гордиться тем, что был знаком с Мустай агай, мне не посчастливилось увидеть поэта лично. Но я рад, что меня окружают люди, которые были близко знакомы с ним.

В преддверии празднования 100 – летия со дня рождения Мустая Карима в Уфимском многопрофильном профессиональном колледже, где в данный момент работаю, состоялась встреча с родственниками Народного поэта Башкортостана, организованная руководителями Клуба любителей английского языка «Корни и крылья» УМПК Батыршиной Г.Л., Ефремовой Г.Г.

На встречу пришла родная племянница Мустафы Сафиевича Зиязетдинова Альфира Ильясовна – преподаватель биологии, долгие годы проработавшая в нашем колледже, её дочь Хамитова Гульшат – выпускница отделения иностранных языков нашего колледжа, встречу украсила внучка нашего ветерана – Дарина, золовка поэта Каримова Лилия Халитовна и ее дочь Карина Каримова – также выпускница отделения иностранных языков УМПК, обладательница международного кембриджского сертификата CAE.

Близкие народного поэта, писателя и драматурга поделились своими воспоминаниями о своем великом родственнике, показали фотографии, книги с его автографами. Очень приятно было услышать теплые слова в адрес нашего колледжа от родственников аксакала башкирской литературы.

Мустай Карим – народный поэт Башкортостана, прозаик, драматург, один из тех литераторов, кто составляет золотой фонд многонациональной российской словесности.

Его произведения переведены на 35 языков, пьесы ставились практически во всех театрах ближнего зарубежья.

Он – связующее звено между башкирской и русской, восточной и европейской литературой, искусством, культурой.

Он – плод, выразитель и олицетворение огромных качественных перемен, произошедших за неполный век в бытийной и духовной жизни башкирского народа.

Он – олицетворение неразрывной связи между всеми многочисленными и разнообразными племенами, населяющими большую Россию.

Он – личность возрожденческого универсального дарования, с одной стороны, а с другой – общественный деятель и гражданин с заглавной буквы, прошедший. [3, 8]

В завершении хочу отметить, что особое место занимает в моей жизни детские воспоминания связаные с башкирской литературой, героями различных произведений. При их воспоминании мир наполняется смыслом, радость переполняет сердце. Именно

поэзия играла ключевую роль в формировании любви к родине, чувства патриотизма и ответственность за свою Родину. Свое детство я иногда воспринимал продолжением произведения «Таганок», в нем я вижу себя и своих сверстников. Мустай настолько гениально и правдиво описывает жизнь простых деревенских ребят, что написанная в пол века назад произведение, было актуально и в наше время. И сегодня перечитывая его я вновь ухожу в детство.

ЛИТЕРАТУРА:

1. Мустай Карим. Жизнь и творчество. Уфа: Китап, 2000 – 239 с.
2. Валеев И.И. Мустай Карим: воин, поэт, гражданин, – М.: Герои Отечества, 2004. – 581 с.
3. Фонд имени Мустая Карима. Мустай: Интервью, которого никогда не было. 2-е издание. – Уфа: Инеш, 2018. – 200 с.

© Бикбулатов Г.Ф., 2019

***Бикбова З. И.,***
*магистрант, БДУ, Өфө ҡ.*
***Солтанбаева Х.В.,***
*филол. ф .д., профессор, БДУ, Өфө ҡ.*

## БАШҠОРТ ТЕЛЕНДӘ ҺОРАУҘЫ БЕЛДЕРЕҮСЕ САРАЛАР

Бөтә телдәрҙә лә һорау мәғәнәһен биреүсе, белдереүсе саралар һәм ысулдар бер үк: интонация, лексик-грамматик саралар (һорау алмаштары), грамматик саралар (һорау киҫәксәләре һ.б.), структур үҙенсәлектәр (һөйләмдә һүҙ тәртибе). Әммә шул уҡ ваҡытта һәр тел өсөн генә хас булған үҙенсәлектәр ҙә бар. Һәр һорау һөйләм тибы өсөн махсус саралар һәм ысулдар ҙа булырға мөмкин. Башҡорт телендә һорау мәғәнәһен биреүсе төп сараларға тип һорау интонацияһы, һорау алмаштары һәм һорау киҫәксәләрен ҡарай.

Һорау интонацияһы йәки уның төҫмөрҙәре бөтә төр һорау һөйләмдәр өсөн дә хас һәм мотлаҡ:– Бер ҡалас ашауҙан мал яуамы? (М. Кәрим).– Әй, атаһы? (М. Кәрим).

Һорау мәғәнәһен биреүсе башҡа саралар булмағанда, һорау интонацияһы ярҙамында бөтә төр һөйләмдәрҙә логик баҫым төшкән һүҙҙә тон ҡырҡа юғары күтәрелә: Сафия: Аҫылбикә?.. (Б. Бикбай).Фәсхи: Серҙе асҡан? Кем? (С. Мифтахов).

Башҡорт телендә махсус һорау һүҙҙәре ролендә һорау алмаштары килә. Һорау алмаштары һорауҙы ойоштороусы сара булараҡ та сығыш яһай. Һорау алмаштары һорау мәғәнәһен белдереүсе лексик грамматик сара булалар һәм һорау һөйләмендә билдәле функция ла үтәйҙәр: Һанарлыҡ ниндәй юғалтыуҙар бар? (К. Мәргән). Ниндәй һорау алмашы һоралған предметтың билдәһеҙ билдәһен аңлата. – Кем һин? Кем – башҡорт телендә затты асыҡлаған һорауҙарҙа ҡулланыла һәм, төп килештә торғанда, һорау һөйләмдең эйәһе вазифаһын башҡара, башҡа килештәрҙә (йәки төп килештә бәйләүес менән килгәндә)– тултырыусы, эйәлек килештә – аныҡлаусы һ.б. һөйләм киҫәктәре була ала: Фәғилә: Ҡасан? Кемде? (С. Мифтахов). Бөтә төрки телдәрендә лә һорау киҫәксәләре файҙаланыла. Улар һораусыны ҡыҙыҡһындырған һөйләм киҫәгенәҡушылып, уға логик баҫым төшөрә, һәм йышыраҡ һөйләмде тамамлап ҡуя, тип белдерелә алтай телендә. Башҡорт телендә *-мы/-ме, -мо/-мө* һорау киҫәксәләре бар, йышыраҡ улар хәбәргә

ҡушыла һәм һөйләмдә постпозицияла тора: – Ҡасандыр студенттар менән осрашыу ваҡытында бер йәш кеше минә ошондай һорау менән мөрәжәғәт иткәйне: “Шиғыр яҙып байып буламы?” (А. Юлдашбаев). – Ә әҙипкә наҙан булһа ла яраймы? (Р. Бикбаев).

Был мәҡәләлә беҙ лексик-грамматик саралар, йәғни һорау алмаштарының һорау һөйләмдәрҙе ойоштороуҙағы ролен ҡарап үтәбеҙ.

Хәҙерге башҡорт телендә түбәндәге һорау алмаштары бар: *кем, нимә, ни, ҡайһы, нисә, ниндәй, ҡайҙа, күпме* һ.б. Улар телселәр тарафынан өйрәнелгән[1]. Һорау алмаштары һорау һөйләмдәрҙә билдәһеҙ, һоралған нәмәне алмаштырып килә, йәғни билдәле мәғәнәне идентификациялайҙар. Конкрет һорау һөйләмдәр һорау алмаштары ярҙамында ойоша, исемдәш һүҙ төркөмдәре урынына бер төрлө алмаштар, сифаттар урынында – икенселәре, ҡылымдар урынында – өсөнсө төр һорау алмаштары килә.

Төркиәттә (татар, үзбәк, ҡаҙаҡ һ.б. телдәрҙә) затҡа ҡарата *кем* алмашы ҡулланыла: Кем бар һуң һары алтынға һатылмай, үҙ-үҙен алтын менән шат ҡылмаған? (М. Ғафури).

Затһыҙ йәндәргә һәм йәнһеҙ предметтарға ҡарата *ни, нимә* файҙаланыла: – Ирмәк . Ибрай нимә тине һуң? (М. Кәрим). Тел төбөндә ниҙәр бар? (В. Бәҙретдинов). *Кем, нимә, ни* һан һәм килеш категориялары үҙгәрә һәм *өсөн, хәтлем, саҡлы, менән, тиклем* һ.б. бәйләүестәр менән килә ала:– Һиңә кемде ҡоҙаларға икән һуң? Ҡартайып эшлектән сыҡһаң, кемгә кәрәгең ҡала? (Т. Ғиниәтуллин). – Һин нимә уйлайһың, Емеш? (З. Биишева).

*Ни, нимә* һорау алмаштары бәйләүестәр менән бергә килеп, эш-хәрәкәттең, хәлдең сәбәбен, маҡсатын, шартын, рәүешен асыҡлайҙар: – Беҙҙекеләр ни саҡлы? (М. Кәрим). Төптән уйлаһаң беҙ ни өсөн балыҡ тотабыҙ? (М. Кәрим).

*Нимә*+ эшлә, *ни*+ эшлә, нишләгән конструкциялары эш-хәрәкәт, процесты асыҡлау маҡсатында ҡулланыла: – Ни эшләйбеҙ һуң, йәнем? (З. Биишева). Ә һин аҙаҡ әллә нишләнең? (З. Биишева). – Ни эшләргә? (Я. Хамматов). – Ҡарғышы төшһә, ни эшләрбеҙ? (З. Биишева).

Төрлө сифаттарҙы йәки атрибутив билдәләрҙе ниндәй йәки уның ни ҡыҫҡа формаһы асыҡлап килә: Бөгөн ниндәй ҡиммәттәр беҙгә йүнәлеш биреүсе этәргес көс булырға тейеш? (М. Бураҡаева). Бөгөн ни көн? (М.Кәрим). Ниндәй ҡыҙ был? (З. Биишева).

*Ҡайһы* һорау алмашы универсаль һәм исем, сифат, рәүеш урынында ҡулланыу мөмкинлегенә эйә: – Уландарым, һеҙҙең ҡайһығыҙ һуң лайыҡ булыр шундай иманға? (З. Биишева). Мин ҡайһыһы булып сығам әле? (М. Кәрим). Ҡайһыһы ярты, ҡайһыһы бөтөн икәнен белеп бөтөрлөкмө бында? (М. Кәрим).

*Нисә, күпме* һорау алмаштары һан, иҫәп, күләм нисбәттәре һоралған һорауҙарҙа ҡулланыла: – Тағанда нисә терәү була? (М. Кәрим). – Шулай ҙа, Исабәк, күпмегәрәк һуҙылыр тиһең? (М. Кәрим). – Пилоткаға ҡуйыр өсөн һеҙгә нисәшәр йондоҙ бирәләр? (М. Кәрим).

Төрлө хәл-торошто, рәүеште *нисек* һорау алмашы ярҙамында билдәләйҙәр: – Иң-иң-иң ҙур бөжәкте нисек атайҙар? (М. Кәрим).– Сер булмаһа, әйтегеҙ әле: һеҙ нисек баланы шулай әҙерләй алдығыҙ, ҡайҙа белем алдығыҙ? (“Ватандаш”). – Нисек итеп ҡулға төшөрҙөгөҙ һуң был нәмәләрҙе? (М. Кәрим). Ошо уҡ функцияны һорау һөйләмдәрҙә контекстҡа ярашлы ҡалай, ҡайһылай алмаштары башҡара ала: Ҡалай булып сыҡты һуң әле был? (З. Биишева). – Ҡайһылай һөйләшәләр һуң унда? (Н. Ғәйетбаев).

*Ҡайҙа* алмашы урын мөнәсәбәте билдәләгән һорау һөйләмдәрҙә ҡулланыла: – Ҡайҙа иттең балыҡты? (М. Кәрим). – Ҡайҙан килеп сыҡты һуң был һундар? (Б. Рафиҡов). – Ә үҙегеҙ бында ҡайҙан килдегеҙ? (И. Насыри). Ҡайһы, ҡай алмаштары ла ошо уҡ функция ла килә ала: Ҡараһаҡ ғибрәт менән тирә-яҡҡа, Ҡай ерҙә көслө менән көсһөҙ тигеҙ? (М. Ғафури). – Һуңғы диңгеҙ тигәндәре ҡай тарафта? (Б. Рафиҡов).

Ваҡытты *ҡасан* һорау алмашы асыҡлап килә: – Ҡасан осона сыҡмаҡсыһың инде? (М. Кәрим). Ышанам бер саҡ төн үтер. Тик ҡасан? (З. Биишева). Ҡасан килдең? (К. Мәргән).

Сәбәп-маҡсатты аныҡлауҙы *ниңә* һорау алмашы белдерә: – Ниңә шулай һис тә ҡыҙғанмайһың мине? (М. Кәрим). Алла исеме менән ниңә ярышырға? (К. Мәргән). Ниңә кеше туй ҡора, байрам итә? (З. Биишева). Ниңә шулай тип ауыҙ йыраһығыҙ? (М. Кәрим).

Бер һорау һөйләмдә ике һәм унан да күберәк һорау алмаштары ҡулланылырға мөмкин: Телеграмма тип һөйләндеме Йәмил, ҡайҙан килгән, кемдән? (М. Кәрим). Нисек... нимә тиһең, Мозафар ағай? (Н. Мусин). Нисек итеп ҡулға төшөрҙөгөҙ һуң был нәмәләрҙе? (М. Кәрим). ...Ысынлап та ҡайҙа ғына булмай ул Бағдад ҡарағы, ниҙәр генә күрмәй?! (З. Биишева).

Бер үк һорау алмашының ҡабатланыуы һорауға тойғолоҡ өҫтәй: Баян: Ҡараҡ үҙе ҡайҙа? Ҡайҙа Ҡотлоәхмәт? Дәүләтбай, Шөкөр ҡайҙа? Ҡасҡандар, ҡуян йөрәктәр! (М. Кәрим). – Кем, кем, кем? (Д. Бүләков). Сит кеше: Кем ул? Ул кем? (М. Кәрим).

Шулай итеп. һорау алмаштары һорау мәғәнәһен белдереүсе төп сараларҙың береһе булып тора һәм улар билдәһеҙ, һоралған информацияны асыҡлай.

ӘҘӘБИӘТ:


1. Бураҡаева М. Йәнтөйәк повестар. – Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1989 – 296 бит.
2. Ғайсарова-Ғиззәтуллина Г.М. Тормош шау сәскәлә: Роман, повесть һәм хикәйәләр. – Өфө, Китап, 2007. – 432 бит.
3. Ғәйетбай Н. Әстәғәфирулла! Пьесалар. – Өфө: Башҡортостан “Китап” нәшриәте, 1996.– 352 бит.
4. Кәрим М.С. Әҫәрҙәр. 5 том: повестар. Өфө: Китап, 2014. – 664 бит.
5. Магазов А. “Тәүбә”; роман. – Өфө: Башҡортостан “Китап”нәшриәте, 1994. – 256 бит.
6. Мусин Н. Мәңгелек урман. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1976 йыл. – 329 бит.
7. Кирәй Мәргән. Алсаҡ йорт. Хикәйәләр, повестар һәм пьесалар. Өфө, Башҡортостан китап нәшриәте, 1982. – 448 бит.


© Бикбова З. И., Солтанбаева Х.В, 2019

***Буранбаева Р.Д.,***
*магистрант, БДУ, Өфө ҡ.*
***Ҡунафин Ғ.С.,***
*филол. ф. докт., проф., БФА-ның мөхбир ағзаһы*
*БДУ, Өфө ҡ.*

## МӨНИР ҠУНАФИНДЫҢ «ҠАРТАЙҒАН ҠОЯШ АҪТЫНДА» ӘҪӘРЕНЕҢ ИДЕЯ-ТЕМАТИК ҮҘЕНСӘЛЕКТӘРЕ

Мөнир Ҡунафин – бөгөнгө башҡорт әҙәбиәтендә ҡыйыу проблемалар менән сыҡҡан үткер ҡәләмле яҙыусыларының береһе. Уның әҫәрҙәрендә тормоштоң әсе дөрөҫлөгө, бар ысынбарлығы ярылып ята. Тап шундай әҫәрҙәре менән ул үҙенә уҡыусыларҙы ылыҡтыра ла инде. «Ҡартайған ҡояш аҫтында» хикәйәһе лә яҙыусы ижадында ҙур урын алып тора. Күптәр яратып өлгәргән был хикәйәлә хәл-ваҡиғалар кемдәргәлер һабаҡ,

кемдәргәлер кәңәш, кемдәрәлер ғибрәт  кеүегерәк яңғырай. Был хикәйәнең идея-тематикаһын билләләү  өсөн, идея һәм тематика төшөнсәләренә аңлатма биреп үтеү урынлы булыр.

Ғайса Хөсәйенов билдәләүенсә, идея - автор әйтеп бирергә теләгән мөһим уй-фекерҙәрҙең төп айышы. Автор әйтергә теләгән уй-фекерҙәр системаһы әҫәрҙең идеяһын сағылдыра [4, 26]. Ошо уҡ билдәләмәне Ким Әхмәтйәнов былай тип аңлата: авторҙың үҙе һүрәтләгән тормош күренештәренә мөнәсәбәтен сағылдырған һәм әҫәрҙәге теманың сиселешенән, сюжеттың хәл ителешенән тәбиғи рәүештә килеп сыға торған образлы фекер[3, 75]. Ябай тел менән әйткәндә, әҫәрҙең идеяһы - авторҙың уҡыусыға еткерергә теләгән төп фекере. Төп идеяны аңлау өсөн, авторҙың ни әйтергә теләгәнен белеү генә түгел, уның яҙыр алдынан билдәләнгән төп маҡсатын, бурысын аңлау мөһим. Шулай уҡ әҫәрҙең тематикаһын билдәләмәй тороп, уға ниндәйҙер ҡылыҡһырлама биреү, анализлау мөмкин түгел. Ким Әхмәтйәнов билдәләмәһе буйынса, тематика – повесть һәм романға, хикәйә һәм поэмаға идея-художество бөтөнлөгө биреүсе барыһын бергә тематика тип атайҙар[3, 46].

Хикәйәлә автор уҡыусыға үҙ кисерештәрен,үҙ уйҙарын еткерә. Авторҙың ауыр күңел кисерештәренең сәбәбе – ауылдашы, аҡылға еңелерәк  Әкрәмдең вафаты. Ни өсөн уның үлеме шул тиклем тетрәндергес тойғолар тыуҙыра?  Хыялый исеме менән йөрөтөлгән был бәндә,ябай уйҙар менән генә йәшәмәй, көн уртаһында йондоҙ күреүе, донъяның өс ҡатламдан тороуы хаҡында белдереүе ғәжәп түгелме ни? Тик эш Әкрәмдә генә түгел, ә кешеләрҙең уны нисек ҡабул итеүендә. Уның яҙмышы, ысынлап та, бик ауыр һәм аянысл. Хыялый Әкрәмдең тормошон бәйән итә-итә, автор уҡыусыға хикәйәнең төп идея-тематик үҙенсәлектәрен  асып һала. Хикәйәнең тематикаһын билдәләп, шуны әйтергә була. Автор конкрет ниндәйҙер бер темаға ғына мөрәжәғәт итмәй, әҫәрҙә тормош күренештәре  күберәк психологик юҫыҡта сағылдырыла кеүек. Етемлек, һуғыштан һуңғы ауыр тормош,  кеше яҙмышы, кеше тормошо, кешеләрҙең бер-береһенә ҡарата мөнәсәбәте, кешелек сифаттары...Былар барыһы ла хикәйәнең тематикаһын билдәләй.

Һуғыштан һуңғы осорҙа етем ҡалған Әкрәм, өйҙән-өйгә йөрөп урамда үҫергә мәжбүр. Тиҙҙән уны кендек инәһе Ғәшүрә әбей үҙенә тәрбиәгә ала. Аҡылға зәғиф баланың яҙмышы боҙолоуҙа үҙен ғәйепләгән ҡарсыҡ, бик яҡшы тәрбиә күрһәтә,  сит-яттарҙан ҡурсалап тора. Ун ике йәшендә йәнә ҡараусыһыҙ ҡалған бала, йәнә кеше тупһаһын тапарға мәжбүр. Шул ваҡыттағы кешеләрҙең бүтән кеше яҙмышына битараф булмауын,күңеле киңлеген, берҙәмлек тойғоһон  һыҙыҡ өҫтөнә ала автор. «Эй ул саҡта кешеләрҙең миһырбанлы булыуы! Әкрәмде бер кем ҡыуып сығармай, киреһенсә ул килһә, Алланың тағын бер ҡолон ашатып, күңелен күреп күпме сауап алына, тип хужа һөйөнә»[2,10]. Һәм әҫәрҙә тәрән асышлы, кинәйәле, мәғәнәле бер момент бар: иҫәр Әкрәм кеше йортонда ғына түгел, ә бик күптәрҙән айырмалы рәүештә, тормошта ла үҙ урынын яҡшы белә. Был хаҡта оләсәй һүҙҙәренән аңлашыла:  «Иҫәр түгел ул, беҙ аңламаҫлыҡ артыҡ аҡыллы. Хоҙай уны артыҡ иманлы итеп әшкәрткән. Үҙ урынының ҡайҙа икәнен белә. Мин әле, ошо йәшемә етеп, фани донъяла урынымды белмәйем, ишек төбөндәме, мендәр өҫтөндәме. Күптәр, бик күптәр белмәй» [2,11].

Артабан хикәйәлә автор ул замандарҙа кешелек сифаттарының юғарыраҡ кимәлдә булыуы, рухи ҡиммәттәрҙең матди байлыҡтан күпкә мөһимерәк булыуы тураһындағы идеяны уҡыусыға еткерә. Ысынлап та, элек кешеләр бер-береһенә ҡарата миһырбанлыраҡ, иғтибарлыраҡ булған, бер-береһенең тормошона битараф һәм яуапһыҙ ҡарамаған тигән  фекер тыуа. Ауылда бер туғаны ла булмаған етем Әкрәмде бөтә ауыл халҡы үҫтерешә, ашата, урлашыр тип тә ситкә ҡыумай, ҡыйырһытмай.  Һуңынан инде

үҙҙәре бер зыянһыҙ Әкрәмдән файҙа күр, изгелектәре өсөн изгелек ала. Бесән сабышырға, өмәгә саҡырһындармы, һәр кемеһенә ихлас ярҙам итә бала күңелле Әкрәм.

«Булған бит заман. Эй, ул саҡта кешеләрҙең миһырбанлы булыуы! Һуңғы ҡабым ризығын кеше менән бүлешер ине»[2, 11]. Ошо мәлдә мәшһүр Мәжит Ғафуриҙың «Ярлылар, йәки өйҙәш ҡатын» повесы иҫкә төшә. Унда ла бит ябай халыҡтың бер-береһенә ярҙамсыллығы,ихласлығы, кешелек сифаттары, эске ғорурлығы сағыу сағылыш таба[1, 207]. Шулай итеп, хикәйәлә автор ике дәүерҙәге кешелек сифаттарын, тормошта ҙур урын алып торған рухи ҡиммәттәрҙе сағыштыра ла инде.«Ә хәҙер нимә, кеше етеш йәшәй, тамағы туҡ. Донъялары бөтөн, күңеле тишек. Иҫләһәң, һоҡланғыс бит, элек кемдер өй күтәрә икән, бөтә ауыл шунда ағыла. Өмә! Һәр кем килә, ҡулынан килгәнсе ярҙам итә. Ә бөгөн....арҡыры ятҡан кәртәне буй һалған өсөн хаҡ һорайҙар. Ярҙам иткән өсөн улы әсәһенән аҡса ала. Туғанлыҡ, ҡунаҡҡа саҡырыу, өмәләр, бер-берендең хәленә инеү...-юҡҡа сыға бара»[2,12]. Авторҙың был һүҙҙәре менән һәр уҡыусы килешер моғайын. Ысынлап та, юғала барған әхләк, рух төшөнсәләре, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бик күптәр өсөн әһәмиәтһеҙ хәҙер. «Күгебеҙ бейек тә, һурпабыҙ шыйыҡ хәҙер. Шуға ҡояшыбыҙ ҙа ҡартайғандан-ҡартая бара...Кешеләр, үҙ донъяһына сумып, ҡояшҡа бағып алырға ла ваҡыт тапмай. Ә беҙҙең заманда көндөҙ йондоҙ күреүселәр бар ине»[2,12]. Автор бының менән элек, саф, яҡты күңелле кешеләрҙең күберәк булыуына ишаралай. Ҡояш тигәндән, ул әҫәрҙә тәрән символик мәғәнәгә эйә. Уның аша беҙ кешеләрҙең күңел ҡояшы, күңел йылыһын күҙ алдына килтерәбҙ. Авторҙың сағыштырыуы бик уңышлы һәм отошло, уйлана беләгн уҡыусы өсөн бында тәрән мәғәнә һалынған. Беҙҙең заманда йәшәһә, үҫмер Әкрәм күптән үлгән булыр ине. Бөгөн бер ҡатлы, ярҙамсыл, саф иҫәр-хыялыйҙар, бәлки, күберәк кәрәктер. Ул саҡта йәмғиәт әхлаҡлыраҡ булыр, күптәр үҙ урынын белер ине. Ике осор кешеләренең күңел донъяһын сағыштырып, ике замандағы йәшәү принциптарын ҡылыҡһырлап, шундай һығымтаға килә автор. Яҙыусының уй-фекерҙәре бының менән генә тамамланмай әле, артабан ваҡиғалар йәнә Әкрәм янына әйләнеп ҡайта.

Йылдар үтеп, инде олоғайғас, үҙенә ныҡлы ярҙам талап ителгәндә, уға ярҙам итергә ашығыусы ғына табылмай. Өйһөҙ килеш, үҫмер саҡтағыса йәшәү рәүешенә күскәс, ярҙам ҡулы һуҙырға мөмкинлектәре булған кешеләрҙән дә яуап булмай. Изгелек күрһәтеүсе кеше шулай ҙа табыла, үҙ ауылы кейәүе уны дауаханаға урынлаштыра, ат ҡараусы булып яуаплы эш башлай Әкрәм. Әйтерһең, уның бар тормош мәғәнәһе шул аттарҙа булған. Тик уға тыныс ҡына, үҙ эшенең яуаплылылығын аңлап, яҡшы әҙәмдән изгелек күреп кенә йәшәргә барыбер яҙмаған. Хикәйәлә сабатаһын түргә элгән түрә, ауыл башлығы кеше яҙмышы менән уйнауҙан ҡурҡмай, уны психодиспансерға ебәрә. Биҡ ҡыҙғаныс был өлөштә, үҙ кеше тип һайланған, ауыл түрәһе, үҙ кешеһенә ярҙамлашыр,йәшәр урын табып бирер урынға, унан ҡотолоуҙы хуп күрә. Тик барыбер һәр яуызлыҡ кире әйләнеп ҡайта. Үлгән Әкрәмде ерләргә алып ҡайтыуға ла ҡаршы төшкән ауыл башлығы бер аҙнанан вафат була. Үҙ көсөнән файҙаланып, мохтаждарға ярҙам итмәгән өсөн язаның да иң ҡатыһын ала ул.

Шулай итеп, был хикәйә Мөнир Ҡунафин ижадының фәлсәфәүи тәрәнлеген йәнә бер тапҡыр сағыу күрһәтә. Яҙыусының фәлсәфәүи уйланыуҙары бик көслө, тормошсан, фәһемле һәм ғибрәтле. Драматик, хатта трагик пафос менән һуғарылған әҫәрендә ул тормош ҡуласа,йәләнеп килеп бер баҫа, изгелек сәсһәң - изгелек, яуызлыҡ сәсһәң - яуызлыҡ урырһың тигән идеяны уҡыусылырға бик оҫта еткереүгә өлгәшә.

ӘҘӘБИӘТ:

1. Ҡунафин Ғ.С. XX быуат башы башҡорт әҙәбиәтенең идея-художество үҙенсәлектәре. – Өфө: Ғилем, Башҡ. Энцикл., 2016. – 368 бит.
2. Ҡунафин М.С. Тәңре өрөк ҡапҡанда: Хикәйәләр. — Өфө: Китап, 2012. — 216 бит.
3. Әхмәтйәнов К.Ә. Әҙәбиәт теорияһы: Дөйөм мәғлүмәт: Икенсе баҫма.-Өфө: Китап, 1985. -344бит
4. Хөсәйенов Ғ.Б. Әҙәбиәт теорияһы.-Өфө: Китап, 2010. -389 бит.

© Буранбаева Р.Д., Ҡунафин Ғ.С., 2019

***Вәлиева Г.Д.,***
*филол. ф. к., доцент БДУ, Өфө ҡ.*
***Байбулов И.И.,***
*магистрант, БДУ, Өфө ҡ.*

# М.КӘРИМ ӘҪӘРҘӘРЕНДӘ ИНТЕРЬЕРҘЫ ҺҮРӘТЛӘҮСЕ СИНТАКСИК БЕРӘМЕКТӘР

Тел бөйөк рус яҙыусыһы М. Горький әйткәнсә, матур әҙәбиәттең «беренсе элементы», уның йәшәйеш формаһы, төп материалы. Һүҙҙән башҡа әҙәби әҫәр ижад ителә алмай. Һүҙ образ тыуҙырыуҙа, әҙәби әҫәрҙе ижад итеүҙә һәм уны ысын сәнғәт юғарылығына күтәреүҙә иң мөһим сара, тел берәмеге булып тора.

Мәшһүр һүҙ оҫтаһы, Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы М. Кәримдең ижады тел-стиль оҫталығы яғынан бай сығанаҡ һанала, сөнки әҙип бөтә жанрҙарҙа ла туған тел гәүһәрҙәрен оҫта файҙалана. Уның әҫәрҙәренең үҙенсәлеген аңлау өсөн, тел-һүрәтләү сараларын ентекләп өйрәнеү талап ителә. Артабан яҙыусының киң билдәле «Беҙҙең өйҙөң йәме», «Өс таған», «Оҙон-оҙаҡ бала саҡ», «Ярлыҡау» повестарындағы тасуирлау тибындағы микротекстар тикшереләсәк.

Интерьер (француз телендә: interieur – «эстәге» тигән мәғәнәлә) – ул өйҙөң, йорттоң эске ҡоролошо [3, 44].

М. Кәрим повестарында персонаждар йәшәгән өйҙөң эске ҡоролошон тасуирлаусы микротекстарҙы ла осратырға була (36 миҫал). Улар уҡыусыны персонаждарҙың эске һәм тышҡы донъяһы менән таныштыра һәм шул уҡ ваҡытта әҫәрҙең семантик бәйләнешен булдыра: *Әсәй эштән ҡайтҡас, төн буйы өйҙөң стеналарын йыуҙы, мейесте ап-аҡ итеп ағартты, беҙ өсәүләп ҡураны һеперҙек. Унда хәҙер бер генә сүп тә юҡ (Беҙҙең өйҙөң йәме. 134-се б.). Оксана миңә һыйынғандан-һыйына бара. Үҙе дер-дер ҡалтырай. Өйҙә бөтөнләй ҡараңғы төшә. Тик ишек яғындағы мейес кенә ағарып тора.*

*– Тыңлағыҙ! Өфө һөйләй! – тип беҙҙең радио һөйләй башланы.*

*Өләсәй әйткәндәй, рәхәт булып китте. Мин инде, мендәр артынан сығып, яңынан тәҙрә эргәһенә килеп баҫтым (Беҙҙең өйҙөң йәме. 108-се б.). Искәндәрҙәрҙең түр яғында һуҡыр лампа яна. Йорттағы барлыҡ йән эйәһе шаршау эсендә, ахырыһы. Шылт иткән тауыш юҡ. Был яҡта Искәндәр генә һике өҫтөндә теҙләнеп тиҫбе тартып ултыра (Оҙон-оҙаҡ бала саҡ. 272-се б.). Өйгә тәүҙә Вәлетдин менән мине индереп ебәрҙеләр. Ингәс тә күҙгә салынған нәмәләр шул булды: көнгә ҡараған тар ғына ике тәҙрәнән ике буй булып туҙан ағыла (ғәжәп, нисек быяла аша үтеп инә икән ул?); ҡаҡ иҙәндә бер бала имгәкләп йөрөй, икенсеһе түшендә шыуа; һике өҫтөндә оло ғына апай яманып ултыра, ишек төбөндәге ҡараңғы мөйөштә ике ир кеше йоҡлап ята (Оҙон-оҙаҡ бала саҡ. 401-се б.).*

Фактик материалға нигеҙләнеп, шуны билдәләргә була: структураһы буйынса интерьерҙы тасуирлаусы текст фрагменттары ла, пейзажды тасуирлаусы фрагменттар кеүек үк, өс төрлө формала килә:

1) ҡатмарлы синтаксик бөтөнлөк,

2) ҡушма һөйләм,

3) ябай һөйләм.

М. Кәрим повестарында интерьерҙы тасуирлаусы 19 ҡатмарлы синтаксик бөтөнлөк билдәләнелде. Пейзажды тасуирлаусы микротекстар кеүек үк, интерьерҙы тасуирлаусы ҠСБ-тәр ҙә өс өлөштән тора:

1) башлам,

2) урта (төп) өлөш,

3) тамамлаусы һөйләм (бөтөм) [2, 403].

Миҫалдар: *Ана шулай «ҡуш ҡуллап» ҡаршы алды Терехта өс лейтенантты. «Хотель» ысынлап та дан булып сыҡты. // Ҙур бүлмәлә - түшәк-яҫтыҡһыҙ алты карауат. Түр мөйөштә өҫтәл тора. Хатта ултырғыстар ҙа бар. Юрған, мендәр, түшәк япмаһы кеүек нәмәләрҙе ошо көндәрҙә генә Ладога боҙо аша Ленинград блокадаһынан сығарылған балаларға биргәндәр. Уларҙы урамдың теге яғындағы почта йортона урынлаштырғандар. Шуға күрә «хотель» йыһаз яғынан яланғасланыбыраҡ ҡалған. Әммә уның күрке, уның үлмәҫ йәне - нәҡ уртала ултырған оло суйын мейес. Ул өҙлөкһөҙ яғыла. Ихата тулы утын. Күрәһең, хәстәрле хужа уны яҙҙан уҡ, һуғыш сыҡҡанға саҡлы, әҙерләп ҡуйғандыр (Ярлыҡау. 15-се б.).*

Ҡайһы бер миҫалдарҙа был структура эҙмә-эҙлекле һаҡланмай. Ул тик ике өлөштән генә лә тора ала, был осраҡта, ғәҙәттә, ҠСБ-тә тамамлаусы һөйләм булмай, мәҫәлән: *Апай беҙҙе мәктәпкә, бер ҙур бүлмәгә, алып инә. Унда балалар ултыра торған парталар ҡуйылған (Беҙҙең өйҙөң йәме. 146-сы б.).*

Ҡатмарлы синтаксик бөтөнлөктө башлаусы һөйләмдәр башлам формаһында килә ала. Улар, ғәҙәттә, ике составлы булалар һәм уларҙа интерьерға дөйөм характеристика бирелә: бинаны белдереүсе һүҙ һөйләмдә эйә була, ә хәбәр, эйәрсән киҫәктәр интерьерҙы ябайлығы, яҡтылығы, матурлығы, байлығы, ярлылығы һ.б. билдәләре яғынан характерлай: *Бүлмә таҙа. Берҙән-бер карауат бөхтә итеп йыйыштырылған. Ҡарҙай аҡ тышлы мендәр күперелеп, өрөлөп тора. Юрған аҫтында ла  ап-аҡ япма (Ярлыҡау. 213-сө б.). Мәктәп мине артыҡ хайран ҡалдырманы. Бүрәнәгә йәбештерелгән төрлө-төрлө ҡағыҙҙарға ла, ҡара таҡтаға ла, ҡара парталарға ла иҫем китмәне (Оҙон-оҙаҡ бала саҡ. 312-се б.).*

Фактик материалды анализлау интерьерҙы тасуирлаусы ҠСБ-ҙәге башламдарҙың да ике төрҙә килә алыуын күрһәтте:

1) Хикәйәләүсе башлам тасуирлауға күсеү өсөн «баҫҡыс» функцияһын үтәй. Быңдай башлам ҠСБ-тән аңлашылған уй-фекерҙең, хәл-ваҡиғаның үҫешенә йоғонто яһай: *Ә иртәнсәк һуң, иртәнсәк ниҙәр генә эшләнмәне беҙҙең өйҙә! // Беҙ тороуға әсәйем мейесте ап-аҡ итеп ағартып ебәргән, һандыҡтағы, һандыҡтағы биҙәкле таҫтамалдар ҡаҙауҙарға алып эленгән, ҙур карауатҡа беҙҙең теге шаҡмаҡлы-шаҡмаҡлы матур балаҫ йәйелгән. Тәҙрәләргә селтәрле яңы ҡорғандар ҡоролған. Самауыр һуң, самауыр! Ҡалайыраҡ ялтырап ултыра ул өҫтәл өҫтөндә (Беҙҙең өйҙөң йәме. 148-се б.).*

Күреүебеҙсә, хикәйәләүсе башламда персонаждың бүлмә эсендә булыуы тураһында хәбәр ителә һәм бинаны белдереүсе һүҙҙең урын алыуы күҙәтелә.

2) Ҡатмарлы синтаксик бөтөнлөктө башлаусы һөйләр тасуирлаусы формала ла килә ала. Быңдай осраҡта ла, ғәҙәттә, һөйләмдәр ике составлы була һәм уларҙа интерьерға дөйөм характеристика бирелә: *Бүлмә таҙа (Ярлыҡау. 213-сө б.).*

Ҡатмарлы синтаксик бөтөнлөктөң урта өлөшөнә ҡараған һөйләмдәр мәғәнәүи яҡтан да, структур яҡтан да башлап ебәреүсе һәм тамамлаусы һөйләм менән тығыҙ бәйләнгән була. Пейзажды тасуирлаусы ҠСБ кеүек үк, интерьерҙы тасуирлаусы ҠСБ-төң дә урта өлөшө «ҡайҙа - нимә - ниндәй» схемаһына ярашлы урынлаша. Миҫалдар: *Бер миҙгел ул һүҙһеҙ торҙо, ни өсөндөр, землянканың эсен байҡап сыҡты. // Ҡарашы сөйҙә эленеп торған йөнтәҫ ҡара буркаға туҡталды. Нисәмә йыл үҙе менән йөрөтә уны, ә бер тапҡыр ҙа яурынына һалып, кеше араһына сыҡҡаны юҡ (Ярлыҡау. 114-се б.).*

Шулай итеп, ҡатмарлы синтаксик бөтөнлөктөң урта өлөшөндә предметтар («нимә»), уларҙың урыны («ҡайҙа»), билдәләре («ниндәй») тураһында ентекле информация бирелә. Грамматик төҙөлөшө буйынса әҫәрҙәрҙәге интерьерҙы тасуирлаусы микротекстарҙың урта өлөштәге һөйләмдәре ике составлы ла, бер составлы ла була ала.

ҠСБ-тәрҙе тамамлаусы һөйләмдәрҙә махсус тел саралары ҡулланыла: инеш һүҙҙәр, дөйөмләштереүсе һүҙҙәр, теркәүестәр, киҫәксәләр: *Күрәһең, хәстәрле хужа уны яҙҙан уҡ, һуғыш сыҡҡанға саҡлы, әҙерләп ҡуйғандыр (Ярлыҡау. 16-сы б.). Бына ҡайҙа ул һыйҙың ояһы! (Ярлыҡау. 297-се б.).*

М. Кәрим повестарында интерьерҙы тасуирлаусы ябай һәм ҡушма һөйләмдәр йыш ҡулланылмай (13 миҫал).

Интерьерҙы тасуирлаусы ябай һөйләмдең мәғәнәһе унан алда йә һуң тороусы һөйләмдәр менән бәйле була. М. Кәрим был осраҡта, ғәҙәттә, эш-хәрәкәт барған урынды өҫтән генә һүрәтләй, уға күҙ йүгертеп сыҡҡандан һуң, дөйөм баһа биреү менән генә сикләнә.

Интерьер тураһында мәғлүмәт һөйләмдең эйәрсән киҫәктәре ярҙамында бирелә. Миҫалдарҙан күренеүенсә, аныҡлаусылар сифат, сифат ҡылымдарҙан килеп, интерьерға таҙалығы, бөхтәлеге, яҡтылығы, күләме яғынан характеристика бирәләр: *Бүлмә таҙа (Ярлыҡау. 213-сө б.). Еренә бесән ҡатыш япраҡ түшәлгән ҡыуышта Йәнтимер эргәһендә артдивизиондың техника начальнигы техник-лейтенант Леонид Ласточкин, сабыйҙарса мыш-мыш килеп, йоҡлап ята (Ярлыҡау. 11-се б.).*

Ябай һәм ҡушма һөйләмдәрҙәге эйәрсән киҫәктәр интерьерға дөйөм характеристика бирәләр. Ғәҙәттә, эйәрсән киҫәктәр, сифаттан, сифат ҡылымдан килеп, бүлмәнең иркенлеге, таҙалығы, бөхтәлеге, йыйнаҡлығы тураһында информацияны тәшкил итәләр. Миҫалдар: *Ҡапыл күҙҙәрем үҙҙәре асылып китә. // Өй эсе шундай яҡты, ҡояш тап Оксана менән миңә ҡарап тора (Беҙҙең өйҙөң йәме. 137-се б.). Һалдат вагонының ике яртыһына ла икешәр ҡат һәндерәләр яһалған (Ярлыҡау. 7-се б.). Ул күҙҙәрен асты. // Өйҙә берәү ҙә юҡ (Ярлыҡау. 41-се б.). Мейес буйында бейек эскәмйәлә ултырған көйө ул ҡыҙҙың сәй урыны әҙерләгәнен күҙәтә (Ярлыҡау. 90-сы б.). Комбат ишек төбөндәге оҙон йәшниккә күрһәтте (Ярлыҡау. 107-се б.). Керҙәре кипкәнсе, ҡырып-ҡырып өй иҙәнен йыуҙы, соланды һепереп алды, ялт иттереп дүрт тәҙрәне һөртөп сыҡты (Ярлыҡау. 170-се б.). Ҡасан инмә, ошо Марияның донъяһы гел көлөп торор, кейәү көткән түрьяҡмы ни (Ярлыҡау. 171-се б.).*

Йомғаҡлап әйткәндә, интерьерҙы тасуирлаусы ҠСБ-тәр персонаждарҙың социаль торошо менән бәйле була.

ӘҘӘБИӘТ:

1. Башҡорт теле. Юғары уҡыу йорттарының филология факультеты студенттары өсөн дәреслек / Г.Р. Абдуллина, Г.Д. Вәлиева, К.Ғ. Ишбаев (яуаплы мөхәррир) һ.б. – Өфө: Китап, 2012. – 616 бит.

2. Грамматика башкирского языка. /Азнабаев А.М, Тикеев Д.С., Валиева Г.Д. и др. В трех томах. Том III. Синтаксис. Уфа, 2018. С 402.
3. Исҡужина Ф.С., Вәлиева Г.Д. Башҡорт телендә текст теорияһы һәм методикаһы. – Өфө: Зәйнәб Биишева исемендәге «Китап» нәшриәте, 2011. – 168 б.

© Вәлиева Г.Д., Байбулов И.И., 2019

***Ганиева З.Ю.,***
*аспирант, БашГУ, г. Уфа*

## МУСТАЙ КАРИМ КАК РЕКЛАМНЫЙ БРЕНД РЕСПУБЛИКИ БАШКОРТОСТАН

В настоящее время тяжело представить современный мир без рекламы, которая стала неразделимой и неотъемлемой частью нашей жизни. Ежедневно, сталкиваясь с ней в своем повседневном быте, мы видим и слышим рекламные тексты в средствах массовой информации, баннерах, объявлениях, флаерах, рекламирующих тот или иной товар. Как правило, текст этот краток, создан по законам и жанрам произведений речи, содержит в себе сведения о товарах и услугах, оказывает точечное воздействие на предназначенную для нее аудиторию - лиц, способных прочитать, увидеть или услышать рекламное сообщение, которое передается определенным источником информации. Рекламный текст тесно взаимодействует с историей, культурой и литературой того или иного народа. «Ментальность народа проявляется не только в живой и устной речи, в произведениях художественной литературы и публицистических текстах. Она также отражается и в текстах рекламы той или иной страны» [4].

Развитие современных технологий в продвижении экономических и социальных проектов нашей республики диктует жесткие условия конкурентной борьбы для создания узнаваемого образа республики на внутрироссийской и мировой арене. Что делает нашу малую родину - Республику Башкортостан - узнаваемой? Национальный орнамент, музыкальные инструменты, первозданность природы, мёд? Да, но есть еще и великие люди - сыны и дочери башкирского народа, впитавшие всю красоту родного края с ранних лет, развившие и сформировавшие свое мировоззрение в юности и затем прославившие его. Одним из таких людей является известный башкирский поэт и писатель Мустай Карим. Как писал народный поэт Башкортостана Равиль Бикбаев в предисловии к «Антологии поэзии Башкортостана», «Неоценимо значение творчества Мустая Карима для раскрытия образа Башкортостана. Он донес свет нашей земли до многих народов мира. Его книги переведены на многие языки, изданы во многих странах. Имя башкирского поэта с уважением повторяют во всех краях. Только творчество, завоевавшее искреннюю любовь своего народа, может взять на себя такую ответственность перед лицом всего мира» [1, 31].

Образ Мустая Карима способен выступить как рекламный бренд республики. Именно поэтому его имя присвоено Международному аэропорту «Уфа». Имена для 44 российских аэровокзалов были отобраны в рамках проекта «Великие имена России». Почти половина из более чем 190 тысяч проголосовавших предложили назвать аэропорт в честь народного поэта Башкортостана Мустая Карима. Наша воздушная гавань начала выдачу посадочных билетов для пассажиров с изображением поэта и строками из его произведения. Это говорит о том, что наши земляки ассоциируют свою малую родину с этим великим поэтом, видят в нем человека способного стать лицом республики. Для людей, незнакомых с нашим краем, строки из его произведений способны моментально

погрузить в атмосферу жизни республики, ее прошлого и настоящего, в повседневный быт ее жителей и красоту нетронутой природы. Просто вслушайтесь в эти строки:

*«…Я с детства так люблю-*
*Твой сын-*
*И гордость гор, и красоту долин,*
*И золото земли,*
*И серебристость вод,*
*Но всех дороже мне*
*Родной народ!»* [2, 101].

В сентябре 2019 года было спущено на воду новое круизное пассажирское судно «Мустай Карим», также названное в честь башкирского поэта. Разрезая волны речных просторов, это судно будет нести с собой частичку башкирского края, делая его более близким даже для людей возможно совсем с ним не знакомыми.

*«С моей любимой уплывает*
*По Белой белый пароход.*
*Он сердце больно разрезает,*
*А не волну вечерних вод.»* [3, 27].

Таким образом, можно полагать, что исчерпывающим источником информации для узнаваемости нашей республики могут стать национально-культурно ориентированные рекламные тексты, а самого Мустая Карима и его художественные произведения можно назвать рекламным брендом Республики Башкортостан, драйвером башкирской идентичности.

ЛИТЕРАТУРА:


1. Антология поэзии Башкортостана. Голоса веков. - Уфа: Китап, 2007. - 456 с.
2. Карим Мустай. Берега остаются: стихи: пер. с башк. - Москва: Худож. лит.,1966. - 191с.
3. Карим Мустай. Жду вестей: стихи и поэма пер. с башк. - М: Дет. лит.,1976. - 191с.
4. Магомедова А. Н., Идрисова Н. П., Эмирова Д. Г., Лабазанова Х. Л. Особенности рекламных текстов [Текст] // Современная филология: материалы IV Междунар. науч. конф. (г. Уфа, март 2015 г.). — Уфа: Лето, 2015. - С. 98-99. - URL https://moluch.ru/conf/phil/archive/137/6480/


© Ганиева З.Ю., 2019

***Гареева Г.Н.,***
*д. филол. н., профессор БашГУ, г. Уфа*

## ПРОБЛЕМА НРАВСТВЕННОГО ВЫБОРА В ДРАМАТУРГИИ МУСТАЯ КАРИМА

Проблема духовной свободы личности, свободы любви, нравственный выбор человека в сложнейших жизненных обстоятельствах – красной нитью проходила по всему творчеству всемирно известного писателя, драматурга, Героя Социалистического Труда, лауреата Государственных премий СССР и РСФСР, Народного поэта Башкортостана Мустафы Сафича Каримова – Мустая Карима.

Пьесы М.Карима многообразны по жанрам: это драмы «Одинокая береза», «Неспетая песня», «Страна Айгуль» (1967), «Вечерняя трапеза» (1992), политический

фарс «Дайте коня диктатору!» (1981), трагедии «В ночь лунного затмения» (1963), «Салават. Семь сновидений сквозь явь» (1971), «Не бросай огонь, Прометей!» (1975), комедия «Похищение девушки» (1958), грустная комедия «Пеший Махмут» (1981).

Ответственность человека за свои поступки, внутренняя свобода выбора жизненной, гражданской позиции, поставленные во главу угла в драме М.Карима «Страна Айгуль» (1964) [1, с.182] предопределило широкое использование различных средств психоанализа.

Глубокая человеческая трагедия Зульхабиры начинает раскрываться на сцене ее встречи с подругами детства, которые не признают ее. В монологе Залифы выносится горькое, но справедливое обвинение: «Мы мир делим пополам – только на две части: белое и черное, на друга и врага, на добро и зло, на жизнь и смерть. Мы все четверо – вдовы. Мужья наши, воюя против врага, ушли в землю. Как твой первый, родной муж, Зульхабира … То, что привезла его с собой (синьора Пиккио – Г.Г.) задевает нашу честь и память тех, кто лежит в земле вдалеке от этих краев. …Ты сама должна просить прощения, если сможем простить. Вот так-то, Зульхабира, глаза наши узнали тебя, душа – нет. …Твои страдания, твои раны страшны, то, что ты видела, пережила и вся твоя судьба ужасны, Зульхабира. Однако, все это дает ли право променять Родину на чужбину, своих людей на чужих людей?». Ни принять подарков, ни простить, что она вышла замуж за итальянца – за синьора Пиккио они не могут. Этот их поступок вызывает в душе Зульхабиры тяжкие переживания.

Но самые драматичные и даже трагичные переживания ждут героиню впереди: ее желанию увезти дочь Айгуль в Италию воспрепятствуют все – и подруги детства, и Ричард, и родной дядя Ягафар, все односельчане. Зульхабира самоотверженно бросается в нравственно-психологический поединок за свою дочь, отстаивает право матери за своего ребенка, но Ягафар ей спокойно отвечает: «На нашей стороне – право Родины, право земли и воды, право вон того солнца». Зульхабира внешне остается такой же настойчивой, твердой, но внутренне она чувствует свою неправоту, свое поражение. Но и Ягафар, и Ричард, и Залифа, Банат, Минлекей, Гульсира не собираются вопреки воле, желанию Айгуль насильно оставить ее на родине.

В драме «Страна Айгуль» право выбора: остаться на родной земле или уехать с родной матерью на чужбину - подвергает главную героиню Айгуль долгим, мучительным переживаниям, противоречивым мыслям, чувствам [2, с. 135]. После тяжелого психологического процесса, происходящего во внутреннем мире, она решает остаться на своей родине. Это ее осознанное, самостоятельное, с большим трудом достигнутое ею решение воспринимается как поступок повзрослевшего за короткий, но очень напряженный, психологически сложный промежуток времени человека, и умом, и душой постигшего одну из главных истин жизни: Родина-мать дороже всего, даже родной матери.

Благодаря показу процесса течения психологического процесса со всеми его противоречивыми мыслями, чувствами, переживаниями, окончательное решение Айгуль, которая жила до этого только мечтой о матери, страстным желанием найти ее и больше никогда не потерять, воспринимается мотивированным, убедительным поступком личности, достойно прошедшей испытание на прочность гражданского созревания.

В трагедиях М.Карима «В ночь лунного затмения», «Салават», «Не бросай огонь, Прометей!» главным героям Акъегету, Салавату и Прометею присуще единство мысли и чувства, разума и сердца.

В трагедии «В ночь лунного затмения» (1965) проблема свободы личности, свободы любви и острейший конфликт, возникший в процессе разрешения этой проблемы, в первую очередь, решается на примере поступков и помыслов Акъегета [1, с.226]. Акъегет – цельная психологическая натура с развитым чувством собственного достоинства, идущего наперекор устаревшим, изжившим себя канонам патриархально-общинного строя, сознательно вступающего в неравную борьбу, в смертельную схватку. Будучи внутренне свободной личностью, Акъегет активен в своих действиях, ему не присущи раздвоенность, колебания, раскаяния.

Образ его матери - Танкабики-бейбисе, наоборот, соткан из многочисленных противоречий, душевных терзаний, внутренних колебаний. В Танкабике живут два противоположных человека: Танкабика-мать, когда-то в молодости сама испытавшая огромную любовь и понимающая лучше всех остальных душу своего сына Акъегета, от всего сердца желает сыну счастья, со всеми силами стремится сохранить ему жизнь, уберечь непокорного, гордого, свободного духом сына от неминумой гибели. И властная, сильная Танкабика-бейбисе, раба своего положения в обществе, раба духа, раба адата, которая вынуждена соблюдать бесчеловечные, жестокие законы этого строя. Она правит своим родом, опираясь на эти каноны, и не может и не хочет отменить их даже ради спасения своего любимого сына [2, с. 172].

Разлад между чувством и долгом, умом и сердцем вызывают у героини огромные психологические коллизии, душевную борьбу, неразрешимый конфликт внутри себя. М.Карим в потрясающем глубоком психологическом ракурсе показывает удручающее душевное состояние Танкабики, превращение в финале гордой, самостоятельной, привыкшей повелевать людьми женщины в бессильную, окончательно сломленную.

В контрастном плане более выпукло раскрывается психологическое состояние Дервиша, раздвоенность его личности, противоположность его состояния, психологическая борьба между внешней кажущейся святостью, духовной отрешенностью и внутренней мирской обездоленностью, убогостью. Дервиш, всю жизнь ратовавший за веру во Всевышнего, в финале испытывает огромное разочарование, понимает всю бессмысленность своего занятия [3, с. 157].

Прометей из трагедии «Не бросай огонь, Прометей!» (1975) своим отважным, героическим поступком также утверждает идею самоотверженной, бескомпромиссной борьбы за высокие гуманистические цели. В своем желании принести огонь людям Прометей непреклонен, будучи психологически цельной, целеустремленной личностью, он стоит выше всяких колебаний и противоречий, титанический герой не идет ни на какое соглашательство и примиренчество. Вступая в борьбу с Зевсом, с владыками мира, Прометей заранее знает о грозящих ему муках, но, тем не менее, сознательно идет навстречу опасности и героически стойко принимает на себя последствия своего деяния.

В противовес ему Гефест, вынужденный покориться воле богов и приковать Прометея к скале, испытывает огромные муки за свое безволие, за повиновение, за рабство души, за неспособность противостоять, бороться за справедливость. Образ Гефеста разработан драматургом в глубоко психологическом плане.

ЛИТЕРАТУРА:

1. Гайнуллин М.Ф. Действительность. Конфликт. Характер. – Уфа: Башкирское книжное издательство, 1974. – 326 с.
2. Кильмухаметов Т. А. Драматургия и драматурги. – Уфа: Башкирское книжное издательство. 1986. – 296 с.

3. Кильмухаметов Т.А. Драматургия Мустая Карима. Своеобразие жанровой эволюции: Монография. – Уфа: Башкнигоиздат, 1979. – 222 с.

© Гареева Г.Н., 2019

***Ғиндуллина Р.А.,***
*магистр, БДУ, Өфө ҡ.*

## МОСТАЙ КӘРИМДЕҢ «АЙГӨЛ ИЛЕ» ДРАМАҺЫНДА АЙГӨЛ ОБРАЗЫ

Мостай Кәримдең күренекле сәхнә әҫәрҙәре араһында "Айгөл иле" драмаһы күркәм урын биләй. Әҫәрҙең сюжетына килгәндә, әсәһенең бер туған ағаһында үҫкән Айгөл 13 йылдан һуң, әсәһе менән осраша. Ҡыҙына өс кенә йәш ваҡытта, һуғышҡа, яралы ирен күрергә юлға сыҡҡан Зөлхәбирә киткән еренән юғала. Бына ул Италиянан, буржуй ирен эйәртеп тыуған яғына ҡайтып төшә. Был осрашыуға барыһы ла шат кеүек. Шул уҡ ваҡытта бик үк шат булмағандар ҙа, Зөлхәбирәне аңламағандары ла бар. Мин Зөлхәбирәне тулыһынса булмаһа ла, яҡлайым, уның әхирәттәрен күңелемдән генә күрә алмайым. Зөлхәбирә хатта Италияла, итальян иренән тыуған ҡыҙына Зәлифә тип үҙебеҙҙең исемде, әхирәтенең исемен ҡушҡан. Иптәштәрен һағынып йәшәгән. Бына, ниһәйәт, ҡайтҡан. Күрешергә килгән әхирәттәре уны хөкөм итергә килгән. Етмәһә, тормош йөгөн көскә тартып барыусы ауыл ҡатындары Зөлхәбирә биргән бүләкте алырға ғорурлыҡтары аша атлап сыға алмай. Шуның менән былай ҙа кителгән күңелен тағы йәрәхәтләйҙәр. Зөлхәбирәнең күңел бураны өсөн минең күңелем һулҡылдап торҙо. Әсәнең ҡыҙы өсөн өҙгөләнеүе бер илатһа, оҙаҡлап күрмәй торған тыуған ерендә һатлыҡ итеп ҡабул ителеүенә ике янаһың. Фашист концлагерҙарын үтеп, иҫән ҡалып, ғүмерен һаҡлап ҡалған кешегә ике бала бүләк иткән был ҡатынды, ирен тыуған яғына алып ҡайтыуын тиҫкәре ҡаршы алған ауыл ҡатындарын, уларҙың әлеге ваҡиғаға ҡарашын бик киҫ0кен һүрәтләгән автор. Әлеге бер ҡатлылыҡ бөгөн килеп бар халыҡ менталитетын яҡтырта кеүек. Билдәле, Мостай Кәрим был әҫәрен шул осорҙағы идеологияға нигеҙләнеп ижад иткән. Ирһеҙ ҡалып, тормош арбаһын яңғыҙ тартыусы ҡатындарҙы ла ҡаты хөкөм итке килмәй, уларҙан да бер ҡатлы кешеләр юҡ кеүек донъяла. Улар илдәренә, ирҙәренә, тормош ауырлыҡтарына мәңге тоғро булып ҡала. Айгөлдөң Италияға китеүенән баш тартыуынан һуң, ниңәлер бер кемдә лә шатлыҡ һиҙелмәй. Бының бер кемгә лә кәрәге юк инеме? Бары тик Айгөл тыуған ерен, ошо урманын, умарталығын, тау-ҡаяларын ғына ташлап китмәһен! Кеше ҡайҙа тыуған, шунда йәшәргә тейеш, тигәндән сығып ҡына хәл итеүме?

Айгөлдөң йөрәк пәрҙәһен йыртып сыҡҡан: “... Бейеккә, юғарыға күтәрелербеҙ. Алыҫҡа, бик алыҫҡа китербеҙ. Тик үткәндәрҙән ғәфү үтенер өсөн кире әйләнеп ҡайтмаһаҡ ине...”, - тип әйткән һүҙҙәре беҙгә лә ҡағыла кеүек, һағайта һәм ҡанатландыра. Айгөл һылыу, һинең күңелең саф, рухың яҡты һәм бейек, һин әле яңы бейеклектәргә артылырһың, үткәндәрҙән ғәфү һорап һин дә, Ричард Галин да, кире әйләнеп ҡайтмаҫһығыҙ, ҡайтып ҡарағандарҙың ҡайһылай икәнен күп күрҙегеҙ, һабаҡ алғанһығыҙҙыр. Хәйерле юл һеҙгә! – тип теләге килә. Ә улар теләктәренә ирешер йәштәр.

Драма 1964 йылда яҙылған, хәҙерге заман темаһына арналған, ғәҙәти тормош, көнкүреш хәл-ваҡиғаларын сағылдыра. "Бер аҙ хәүефлерәк тә, — тип яҙа Мостай Кәрим үҙе, — сөнки "Айгөл иле"ндә мауыҡтырғыс хәл-ваҡиғалар, тормош ығы-зығылары юҡ. Кешеләр тормошоноң фәҡәт ҙур, һынылышлы яҡтары бар. Әҫәрҙә уй-тойғолар —

шатлыҡ һәм ҡайғылар, өмөт һәм өмөтһеҙлектәр, осрашыу ҡыуаныстары һәм айырылышыу һағыштары - шундай ныҡ ҡуйырып китә, улар үҙе бер нисә әҫәргә етер ине". Ҡапма-ҡаршы образдарҙың үҙ-ара киҫкен бәрелеше әҫәрҙең конфликтын хасил итә. Шул йәһәттән әҙәбиәтсе Тимерғәле Килмөхәмәтов “Айгөл иле” пьесаһын драма-диспут тип атай. Айгөл иле ул – символик мәғәнәгә эйә киң донъя, рухи матурлыҡ, гүзәллек иле. Профессор Зиннур Нурғәлин әйткәнсә, “Айгөл иле үҙенең рух берҙәмлеге менән бөйөк”. “Айгөл иле” драмаһы Тыуған илгә мөхәббәт кеүек изге тойғоларҙы тулы, оҫта сағылдырыуы менән ҙур популярлыҡ ҡаҙанды. Тиҫтәләгән башҡа театрҙарҙа һәм баш ҡалабыҙҙың А.С. Пушкин исемендәге театрында ҡуйылыуы менән был әҫәр башҡорт драматургияһын илебеҙ киңлегенә сығарҙы.

Беҙ үҙебеҙҙе уратып алған тормошто, донъяны төҫтәр аша ҡабул итәбеҙ. Сағыу, асыҡ төҫтәр күңелде күтәрә, йәшәүгә дәрт бирә. Билдәле швейцар психологы һәм ғалимы Макс Люшер күҙәтеүҙәре буйынса, кешенең яраткан төҫөнә ҡарап, уның характер үҙенсәлектәрен билдәләргә мөмкин икән. Мостай Кәрим... Ул шәхес һәм рәссам. Шәхес һәм рәссам булараҡ, гел хәрәкәттә, үҙгәрештә. Уның “Айгөл иле” драмаһындағы Зөлхәбирәне һары төҫтә күреү -һағыш төҫөн, Йәғәфәр Моратшин ғорур, ғәҙел кеше, тәбиғәт ҡосағында йәшәй, шуғалыр ҙа уны йәшел төҫтә, ә ҡурҡаҡ, ике йөҙлө Ябағаевты һоро йәки ҡара төҫтә күҙ алдына килтереү, уның тормошо ла күңелһеҙ икәнен раҫлай. Ә төп герой Айгөлдө алһыу төҫтә күҙ алдына баҫтырырға мөмкин. Был аңлашыла ла, алһыу төҫ – йәшлек, мөхәббәт, матур хыялдар төҫө. Шул уҡ ваҡытта Айгөл әле донъяға алһыу күҙлек аша ҡарай, тигән фекер ҙә тыуа. Был хаҡта Сибай ҡалаһының «Ирәндек» лицейы уҡытыусыһы Гөлнәзирә Игелекова яҙып сыға. Әҫәрҙең йөкмәткеһен хәтергә төшөргәндә лә төҫтәр ҡулланыу отошло. Мәҫәлән, “һары төҫ әҫәрҙең ҡайһы өлөшөн хәтерләтә?” тигән һорауға - Зөлхәбирәнең балаһынан, тыуған иленән айырылған ваҡытын, әхирәттәренең Зөлхәбирәне танымаған урынын, Айгөлдөң әсәһен һағыныуын һары төҫ менән бәйләргә мөмкин. Ҡара төҫ йәйге матур иртәлә ҡараңғы бүлмәлә Йәғәфәр Моратшинды хөкөм итеү ваҡытын күҙ алдына баҫтыра. Ә Айгөлдөң: «Тауҙар, урмандар, ишетәһегеҙме, мин яратам, ерҙе, күкте,ҡояшты, һыуҙы...йәнә кешене, егет кешене!» - тип тәбиғәткә мөрәжәғәт иткән мәлен сағыу төҫтәрҙә, бигерәк тә алһыу төҫтә күҙ алдына килтерергә була.

Минеңсә, Мостафа Сафа улы – ул беҙҙең йәш быуын өсөн халҡыңа тоғролоҡтоң иң яҡшы өлгөһө. Уның ижады үҙ иленән, тарихынан, тәбиғәтенән, моңонан айырылғыһыҙ.

ӘҘӘБИӘТ:


1. Башҡортостан уҡытыусыһы. Игелекова Г. Б. Әҫәрҙе анализлауҙа төҫтәр алымы ҡулланыу. №3, 2014.
2. Валеев И.И. Традиции башкирского национального воспитания в творчестве Мустая Карима. – Уфа.: Китап, 2005
3. Хөсәйенов Ғ. Б. Мостай Кәрим: - Шәхес. Шағир. Драматург. Прозаик. – Өфө: Башҡортостан “Китап” нәшриәте, 1994.


© Ғиндуллина Р.А.

***Ғәлиуллин А.Х.,***
*РФА ӨҒҮ ТТӘИ аспиранты,Өфө к.*

## М. КӘРИМДЕҢ ДИУАНА ОБРАЗЫНДА КЕШЕЛЕКЛЕЛЕК САҒЫЛЫШЫ

Башҡортостандың халыҡ шағиры, милләтебеҙҙең бөйөк әҙибе Мостай Кәримдең ниндәй генә әҫәрен миҫалға алма, һәр ҡайһыһы айырым иғтибарға лайыҡ. «Яңғыҙ ҡайын», «Ҡыҙ урлау», «Йырланмаған йыр», «Диктаторға ат бирегеҙ!», «Йәйәүле Мәхмүт» пьесалары, «Ярлыҡау», «Ауыл адвокаттары» повестары Мостай Кәримде драматургия һәм проза өлкәһендәге киң яҡлы эшмәкәрлеген асып һала. Ленин премияһына лайыҡ булған «Оҙон-оҙаҡ бала саҡ» повесы ғына үҙе бер тарих. «Ай тотолған төндә» трагедияһы. Ҡәҙимге башҡорт ырыуҙары көнкүрешенең һүрәтләнеүе. Кешенең рухи азатлығы идеяһы. Тәңкәбикә - трагик образ. Ырыу йолалары ҡорбаны. Мөхәббәт һәм рух иркенә тоғролоҡ. Диуана һәм Дәрүиш образдарының әхлаҡи-фәлсәфәүи асылы. «Ташлама утты, Прометей!», «Ай тотолған төндә», «Салауат» трагедияларында күтәрелгән азатлыҡ идеяһының артабан тәрәнәйтелеүе. Был өс трагедия бер бөтөн триптих әҫәр булыуы. Бөйөк кешелек азатлығы әсән көрәш идеяһының сағылышы. Ҡыҫҡаһы, Мостай Кәрим ижадының башҡорт әҙәбиәтенә индергән өлөшө, күп милләтле совет әҙәбиәте үҫешенең мөһим урынын алып тора.

Образдарға килгәндә улар күп төрлө. Һәр ҡайһыһы айырым фәлсәфә менән һуғарылған. Нисәмә быуын уҡыусыһын битараф ҡалдырмаған «Ай тотолған төндә» трагедияһындағы Диуана образы, мәҫәлән. Ул әҫәрҙә үҙенә күрә айырым урын биләй. Аҡһаҡалдар түгел, ә Диуана үҙе – ырыу намыҫы һәм сафлығы, дуҫыңдан дошманды айырыусы, яҡшылыҡ менән яманлыҡты күреүсе, алдыҡлы асып һалыусы булараҡ күҙ алдына баҫа. Был төр образдың эске торошо, уның ҡыланыуҙары, башҡа образдар менән аралашыуынан күңеленең байлығын һәм кешегә ҡарата тоғро булыуын төҫмөрләргә мөмкин.

Диуананың бигерәк тә, бөркөт балаларын ҡаянан бәреп төшөрөүе тураһында һөйләүе, уларҙы күмергә тип ашҡыныуынан кешелеклек, тере йән эйәһенә битараф ҡалмауын күрһәтә. Мостай Кәримдең «Ай тотолған төндә» трагедияһындағы кеүек Таңсулпан Ғарипованың «Бөйрәкәй» роман-эпопеяһында һәм Гөлнур Яҡупованың «Ҡатындар» трилогияһында ла диуана образы сағылыш тапҡан. Ике автор ҙа геройын аҡыл яғынан һай булһа ла, уны кеше, шәхес булараҡ асып һала. Китап уҡыусыһына был төр образға ҡарата ытырғаныу түгел, ә кешелеклелек сифаттарын тәрбиәләй.

«Бөйрәкәй» роман-эпопеяһындағы Шәңгәрәй, «Ҡатындар» трилогияһындағы Әсән исемле геройҙарҙың кәмселегә бик үк һиҙелмәй ҙә тип әйтерлек. Образдарҙың күрәҙәлек ҡылған моменттары етәрлек. Гөлнур Яҡупова әҫәрендә геройы тураһында былай тип яҙа: *иҫәр тигәс тә, Әсән – Толпарлының кәрәкле бәндәһе ул. Хоҙай һәр кемгә үҙенең бер һөймәлеген бирә икән шул. Әсәндең күрәҙәселегә бар, тик, әлбиттә, быны үҙе белмәй. Әммә күптән һыналған: әйткәне алға килә лә ҡуя* [Ғарипова, 189 б.]. Автор романында аҡыллы, илгәҙәк булып үҫкән Әсән биш йәшлек сағында иҫәргә ҡалыуын телгә ала. Бер төрлөгә әйләнеүенә ҡойон эсендә ҡалыуы сәбәпсе була. *Ен ҡағылған инде Әсәнгә.*

*Ҡойон, осороп йөрөтөп, Биксәнәй яғында ҡалдырып киткән. Иҫе китеп ятҡанында, һыуға барған ҡыҙҙар күреп ҡалып, һыу бөркөп аңына килтергәндәр* [Ғарипова, 201 б.].

Күрәҙәлектә Әсәндең бигерәк тә, ете ҡатын-ҡыҙҙың үлемен алдан күреүе иң иҫтә ҡалған өлөштәрҙең береһе. Толпарлы ауылындағы фажиғәгә тиклем һиҙемләнеүе менән ул романдың төп геройы Нурия һәм уның әхирәте Мәүлиҙә менән бүлешә. Ләкин, ҡыҙҙар йылмайып һөйләгән иҫәрҙең ни әйтеренә төшөнөп бөтмәй. Фажиғә көнөнә тиклем йомаҡ булып ҡала. *Ылауҙарға һалып алып китәсәктәр апайҙарҙы, - тине лә тәүҙә биш, шунан тағы ике бармағын күрһәтте* <...> [Ғарипова, 163 б.]. Күпмелер ваҡыт үтеүгә баҫыуҙа ете сөгөлдөрсө ҡатын-ҡыҙ йәшен һуғыуҙан һәләк була. Ваҡиға урынына Әсән әйтмешләй, ете ылау ебәрелә, аҡ сепрәк менән тотошлай ябылған ете ҡатынды арба төбөндәге таҡтаға һалып, ауылға алып ҡайталар. Күп тә үтмәй фажиғәне күтәрә алмай Әсәндең дә йөрәге тибеүҙән туҡтай.

Таңсулпан Ғарипованың роман геройы Шәңгәрәйҙең дә яҙмышы фажиғәле тамамлана. Ауылдың буйҙаҡ, игеҙәк бер туғандары Вәләүетдин менән Ғәләүетдин мәрткә киткән Шәңгәрәйҙе үлгән тип танытма алып ер ҡуйынан тапшыра. Ә унан алда ғына, диуана үҙенең китерен һиҙгән, ахыры. Әптеләхәттең ҡәбере ситендә ултырып тәрән йоҡоға талғанда ул төшөндә һауаға күтәрелеп осоп йөрөүен күрә...

Был образды автор үҙенә күрә ваҡиғалар үҫеше шаһиты итеп тәрбиәләй. Уның күрмәгән, белмәгән әйбере булмай. Ошо арҡала ул бер-нисә кешенең ғүмерен ҡыйған ауыл советы рәйесе Ихсанбайҙың дошманы була. Бигерәк тә, романдың төп геройы Мәҙинәнең һыйырын һуйып, «айыу ите» тип алдап ашап ятыуын төп шаһиты Шәңгәрәй була. Ауыл халҡына ярҙамсылығы менән генә түгел, йәшерен хәбәрҙәрҙе еткереүҙе ролен дә башҡара. Ул урында телефон урынына «эшләй».

Ғөмүмән, миҫалҫа килтерелгән әҫәрҙәрҙә ауылда көн итеүсе кешеләрҙең яҙмышы аша әхлаҡи-этик, социаль, дини ҡаршылыҡтарҙы сағылдыра, әҫәрҙә күтәрелгән мәсьәләләр фәлсәфәүи яңғыраш ала. Мәңгелек темалар, һорауҙар көнкүреш материалында хәл ителә, геройҙарҙың үҙ-ара мөнәсәбәттәрен билдәләй. Ниндәй генә образдар булмаһын, улар аша автор йәшәйеш мәғәнәһен раҫлатырға ынтыла. Образдарҙың барыһы ла тиерлек аяныслы яҙмышҡа дусар. Улар тормоштарын үҙҙәре теләгәнсә ҡора алмай.

ӘҘӘБИӘТ:

1. Кәрим, Мостай. Ай тотолған төндә : өс шаршаулы трагедия / М.Кәрим ; [мөх. Х.Т.Бикҡолов], - Өфө: Башҡ.кит.нәшриәте., 1965. – 84 б.

2. Ғарипова, Таңсулпан. Бөйрәкәй : роман-эпопея / Т.Х. Ғарипова .— Өфө: Китап, 2006. – 768 б.

3. Яҡупова, Гөлнур. Ҡатындар : трилогия / Г.М.Яҡупова. – Өфө: Китап, 2013. 725 б.

© Ғәлиуллин А.Х., 2019

***Ғәниева Ғ.Ғ.,***
*филол. ф. к., доцент*
*БДУ-ның Бөрө филиалы*

## ТЕЛӘК МӘҒӘНӘҺЕН БЕЛДЕРЕҮСЕ -ҒЫ /-ГЕ КИЛӘ, -АҺЫ/ -ӘҺЕ КИЛӘ АНАЛИТИК ҠЫЛЫМ ФОРМАЛАРЫНЫҢ СИНТАКСИК ФУНКЦИЯҺЫ

Теләк мәғәнәһен белдереүсе *-ғы/-ге килә, -аһы/ -әһе килә* аналитик ҡылым формалары һөйләүсенең шәхси теләген хәбәр итеп, заман, зат, һан категорияһы менән үҙгәрә. Шуға күрә сағыштырмаса тамамланған уй-фекерҙе белдергән ҡылым хәбәр һөйләмдәрҙе барлыҡҡа килтереүҙә төп структур компонент булып тора. Фразаны хәбәр һөйләмгә хас тыныс тон менән әйтеү *-ғы/-ге килә* ҡушма ҡылым формаһына эмоциональ-экспрессив мәғәнәле төрлө модаль һүҙҙәрҙең һирәк эйәреп килеүе менән дә аңлатыла. Һирәк осраҡта бирелгән форма, әйтелеү маҡсатына ҡарап, һорау, өндәү, тойғо һөйләмдәрҙә ҡулланыла.

**Бер составлы һөйләмдәрҙә *-ғы /-ге килә, -аһы /-әһе килә* формаһының хәбәр булып килеүе.** Эйәһеҙ һөйләмдең хәбәре вазифаһын III зат *-ғы/-ге килә* ҡушма ҡылым формаһы үтәй. Миҫалдар: *Яңы уҡыу йылын нисек кенә булһа ла шул төҙәтелгән, яңыртылған мәктәптә башлағыһы килә (З.Биишева). Киске тамағын туйҙырып, мейес башына менеп ятырға йыйынғанда ғына, уны күреп һөйләшкеһе килде (Я.Хамматов). Әллә ниңә башҡортса сыҡҡан газета уҡығыһы килеп киткәйне (Н.Мусин).*

Эйәһеҙ һөйләмдәрҙә теләк һөйкәлешенең *-ғы/-ге килә* аналитик формаһы зат ялғауын ҡабул итмәй. Миҫалдар: *Ә әле уларҙы йәшәтке килә! (Ф.Аҡбулатова). Юҡ, булмай, шайтан алғыры, шүрәле ҡытыҡлаймы ни, донъяны яңғыратҡансы көлгө килә (Ф.Аҡбулатова).*

Һөйләүсенең эш-хәрәкәтте башҡарырға булған теләге, хыялы теләк мәғәнәле *-ғы/ -ге килә* ҡылым формаһы аша хәбәр ителә. Берлектәге йәки күплектәге I зат ҡылым формаһы бер составлы билдәле эйәле һөйләмдең хәбәре вазифаһын башҡара. Миҫалдар: *Беренсенән, Тирәклегә ҡайтып һеҙҙең бөтәгеҙҙе эргәмдә өйөрөлдөрөп, үҙемә ялсы яһап ҡуйғым килмәй. (Т. Ғарипова). Ағай, ҡурҡма, береһенә лә һөйләсәгем юҡ, ут йотоп, ғазап сигеп, әллә йәшәр, әллә йәшәмәҫ малайҙарға ғына ҡарап ултыраһым килмәй ҙәһә! (Ә.Әминев). Ҡурҡҡандан-өрккәндән түгел, һаҡһыҙ ҡыланып Надяның һиҙгер күңелен һүрелдергем килмәне (Х.Тапаков).*

Дөйөм эйәле һөйләмдең хәбәре ҡылымдың II заты менән белдерелә. Һөйләмдең йөкмәткеһенән аңлашылыуынса, теләк дөйөм кешеләргә ҡағыла: *Кешеләргә үҙең тураһында ла ниҙер әйткең, күңелдәген уртаҡлашҡың килә (Ғ.Хөсәйенов).*

Ике составлы һөйләмдәрҙең хәбәре *-ғы/ -ге, (-аһы/ -әһе) килә* ҡылым формаһы аша реалләшә. Уларҙың эйәһе төп килештәге алмаш йәки исемдәрҙән килә. Миҫалдар: *Улар Марусяның әкрен генә йырлаған моңло тауышынан, үҙҙәренең яратҡан йырҙарын йырлауҙан бер ҙә айырылғылары килмәй (Һ.Дәүләтшина). Зөлхизә-Гөлзифа тулҡынлана, берсә алға уҡтала, берсә йөҙөн устары менән ҡаплай, Юлдыбайҙың ерҙә тәгәрәп ятыуын күргеһе килмәй (Х.Тапаков).*

Ҡылымдың *-ғы, -ге килә* аналитик формаһы телмәрҙә йыш ҡына тиң хәбәр булып килә. Башҡорт телендә *килә* ярҙамсы ҡылымын тиң хәбәрҙәрҙең иң һуңғы компонентына ҡушыу алымы күҙәтелә. Миҫалдар: *Миңдеғолдоң тиҙерәк үҫкеһе, кешеләрҙең хәтерендә оҙаҡ һаҡланырҙай изге эштәр башҡарғыһы килде (Я.Хамматов). Йәнемде тетрәтеп, һағышымды яңыртҡаны өсөн был кешегә бер төрлө рәхмәт белдергем, яҡшылыҡ ҡылғым, аҙ булһа ла күңелен тапҡым килде (М.Кәрим).* Тиң хәбәрҙәрҙең теркәүестәр

менән бәйләнеү осрағы бар: *Шул саҡ Әптеләхәттең һуҙылып <u>ятҡыһы ла үлгеһе килде</u>: исмаһам, икмәк тураһында уйлауҙан туктар ине (Т.Ғарипова).* Ҡылымдың -*ғы килә* һәм -*аһы килә* формаларын тиң хәбәрҙәр булараҡ бер фраза эсендә ҡулланыу телдең морфологик байлығын билдәләй. Мәҫәлән: *Уның был шайтан элмәгенә әйләнгән донъянан <u>ысҡынаһы,</u> икенсе тормошка <u>осҡоһо килде</u> (Т.Ғарипова). Барсынбикә үҙе иренең хәлен төшөнә лә кеүек: ялкты ул илдән-илгә йөрөүҙән, ултыраҡ тормошка <u>күсәһе</u>, донъя <u>көткөһө килә</u> (Т.Ғарипова).*

Һөйләмдә һүҙҙәр кире тәртиптә килгәндә тиң хәбәрҙең тәүгеһе һөйләмде башлап ебәрә. Һөйләмдәге бындай кире тәртип ҡылымдың мәғәнәһен көсәйтә, теләктең һис шикһеҙ үтәлеүен теләү мәғәнәһе сағыла. Миҫалдар: *<u>Сыҡҡыһы,</u> ҡояш калҡкан мәлдәге саф иртәне, нурҙар эсендә ҡойоношоп ҡанат ҡаҡҡан сыпсыҡтарҙы, төрлө гүзәл төҫтәр балкытҡан сәскәләрҙе <u>күргеһе,</u> кешеләр менән күрешеп <u>һөйләшкеһе килә</u> Тимерйәндең (Б.Ноғоманов). Эй, <u>йырлағыһы килде</u> уның шул саҡ! (Т.Ғарипова).*

***-ғы/ -ге килә, -аһы/ -әһе килә* формаларының теҙмә ҡушма һөйләмдәрҙәге синтаксик функцияһы.** Теләк ҡылымдың -*ғы/ -ге (-аһы/ -әһе) килә* аналитик формаһы теркәүесле һәм теркәүесһеҙ теҙмә ҡушма һөйләм составында хәбәр вазифаһын башҡара.

**а) теркәүесһеҙ теҙмә ҡушма һөйләмдәрҙә.** Теләк ҡылымдың -*ғы/-ге килә* аналитик формаһы теркәүесһеҙ теҙмә ҡушма һөйләмдәрҙең хәбәре вазифаһын башҡара. Миҫалдар: *Әйтеп бөт, һылыу! Ни тураһында <u>һорағың килә,</u> мин яуап бирермен (Ф.Аҡбулатова).*

**б) теркәүесле теҙмә ҡушма һөйләмдәрҙә.** Теркәүесле теҙмә ҡушма һөйләмдәрҙә бер-береһенә ҡапма-ҡаршы мәғәнәле булған һөйләмдәр *ләкин, ә, әммә* теркәүестәре менән килә. Миҫалдар: *Салихтың арҡаһы һыҙлай ине, ләкин ҡыҙ алдында ялангас тәнен күрһәтеп <u>ятҡыһы килмәне</u> (Ғ.Хисамов). Әптеләхәттең ауылдаштарының яҙмышын тиҙерәк <u>белгеһе килә</u>, ә Мирхәйҙәров ул һөйләшеүҙе һаман артҡа шыуҙырғандай, кисектергәндәй (Т.Ғарипова).*

**Эйәртеүле ҡушма һөйләмдәрҙә *-ғы/ -ге килә, -аһы/ -әһе килә* формалары шарт һөйләмдең хәбәре вазифаһын башҡара.** Теләк ҡылымдың -*ғы /-ге кил* формаһы -*һа/-һә* ялғауын ҡабул итеп шарт ҡылым була ала. Был осраҡта улар эйәрсән шарт һөйләмдең хәбәре вазифаһын башҡара. Миҫал: *Үҙеңде ҡәҙерле <u>күргең килһә</u>, үҙеңдәй күреп, бүтәндәрҙе лә ҡәҙерләй белергә кәрәк (Ғ.Хөсәйенов).*

***-ғы/ -ге килә, -аһы/ -әһе килә* формаларының исем урынында ҡулланылып һөйләмдә эйә булып килеүе.** Башҡорт тел ғилемендә эйә функцияһын исем, алмаш һүҙ төркөмө генә түгел, ә исем урынында ҡулланылған башҡа һүҙ төркөмдәре, шул иҫәптән ҡылым да башҡара ала. Теләк мәғәнәле -*ғы/ -ге килә, -аһы/ -әһе килә* ҡылым формалары исем ҡылым, сифат ҡылым ялғауҙарын ҡабул итә һәм, үҙ сиратында, исем урынында ҡулланылып уның грамматик ялғауҙары менән үҙгәрә. Һөҙөмтәлә аналитик форма һөйләмдең эйәһе йәки эйәрсән киҫәктәре булып килә. Әйтергә кәрәк, тел белемендә исем-ҡылым, сифат-ҡылым ҡылым төркөмсәләре составында тикшерелә. Ләкин ҡылым тамыры теләк модаль мәғәнәле булғанлыҡтан, уның һөйләмдәге урынын билдәләү зарур.

Ҡылымдың -*ғы/-ге килә* формаһы -*ыу/-еү* исем-ҡылым, -*ған/-гән* ялғаулы үткән заман сифат ҡылым менән бергә ҡушма эйә составын барлыҡҡа килтерә. Миҫалдар: *Ошо ҡомһоҙлоғо, <u>байбисә булғыһы килеүе</u> генә боҙа шул уны... (З.Биишева). Шулай ҙа ҡарт үҙен улар алдында мәжбүри эш атҡарған ҡиәфәттә тотманы, рәхмәттәрен тыныс ҡына ҡабул итте, шатланды, ләкин ниңәлер теге балаларҙы <u>күргеһе килеү теләге</u> генә булманы (Ә.Әминев). Төлкөсураның был эшкә <u>ҡатнашҡыһы килмәгәне</u> күренеп тора (Н.Мусин).*

*-ғы/-ге килә, -аһы/-әһе килә* **формаларының исем урынында ҡулланылып һөйләмдә аныҡлаусы булып килеүе.** Теләк мәғәнәле аналитик ҡылым үткән заман сифат ҡылым ялғыуын ҡабул итеп предметты асыҡлап килә һәм һөйләмдә аныҡлаусы вазифаһын башҡара. Улар барлыҡта йәки юҡлыҡ формала була ала. Миҫалдар: *Рауза еҫен еҫкәгеһе килгән кеше дегәнәк сәсмәй, Ғәлимә (Т.Ғарипова). Туҡмалғыһы килгән бала атаһының һаҡалы менән шаярыр (Ж.Кейекбаев). Ҡыуаныстан һаман илағыһы килеп торған Емеш тә күңелле йылмайып ҡуйҙы (З.Биишева).*

**Ҡылымдың *-ғы/-ге килә, -аһы/ -әһе килә* ҡушма формаһының исем урынында ҡулланылып һөйләмдә тултырыусы булып килеүе.** Һөйләмдә ҡылымды мәғәнә яғынан асыҡлап йөрөүсе эйәрсән киҫәк булараҡ тултырыусы *-ғы/-ге килә, -аһы/ -әһе килә* ҡылым формалары менән белдерелә. Был осраҡта форма исем-ҡылым ялғауын ҡабул итеп исем урынында ҡулланыла һәм тултырыусы вазифаһын башҡара. Миҫалдар: *Ҡайтас ул Ваһап ҡоҙаһына ла, Әҙһәм ҡоҙаһына ла Ғилаждың бейәне биргеһе килмәүе хаҡында һөйләне (Ж.Кейекбаев). Әле лә тонорап ҡояш батыуын, тәбиғәттең гүзәл бер ерен, матур ҡатын-ҡыҙ һынын күрһә, буяу иҙгеһе килеүҙән ҡулдары ҡысыта башлай (Т.Ғарипова). Әлмираның формула буйынса түгел, үҙенсә шатлыҡтары, һағыштары, хатта үкенестәре менән бергә Сәлмән бабай кеүек бер-береңә иғтибарлы булып, күңелдәрҙе бәйләп, ҡәҙерләнеп, һөйөлөп йәшәйһе килеүен аңламаймы икән ни ул? (Р.Байымов).*

*-ғы/ -ге килә, -аһы/ -әһе килә* **ҡылым формаһының һөйләмдә хәл вазифаһын башҡарыуы.** Һөйләмдә ҡылымға бәйләнеп, шул ҡылымдан аңлатылған эш-хәрәкәттең ҡасан, ҡайҙа, ни сәбәпле, ниндәй маҡсат менән, ни рәүешле, ниндәй дәрәжәлә башҡарылыуын белдергән эйәрсән киҫәк хәл тип атала. Теләк модалле *-ғы/ -ге, (-аһы/ -әһе) килә* формалары шарт һөйкәлеше, исем-ҡылым, сифат ҡылым, хәл ҡылым ялғауҙарын ҡабул итеп хәлдең барлыҡ төрҙәрен яһай.

**а) рәүеш хәле вазифаһын башҡарыуы.** Ҡылым нигеҙенә *-дай /-дәй, -ҙай /-ҙәй, -тай/-тәй* ялғауы эйәреү юлы менән аналитик рәүеш хәле формалаша. Миҫал: *Торомтай, үҙ атының да насар түгеллеген күрһәткеһе килгәндәй, дилбегәһен ҡаҡты (Н.Мусин).*

**б) сәбәп хәле вазифаһын башҡарыуы.** Һөйләмдә ҡылымға бәйләнеп, эш-хәрәкәттең ни сәбәпле башҡарылыуын йәки башҡарылмауын белдергән эйәрсән киҫәк сәбәп хәле ролен үтәй. Миҫалдар: *Ашағыһы килеүҙән ашҡаҙан аҫты биҙенән ауыҙына укшыткыс тоҙло һут йыйыла, күңелен болғандыра (Т.Ғарипова).*

**в) маҡсат хәле вазифаһын башҡарыуы.** Аналитик ҡылым айырым осраҡта маҡсат хәле вазифаһын башҡара. Миҫалдар: *Ошо хаҡта кем менәндер бүлешкеһе, һөйләшкеһе килеп, Әйүп төн уртаһында ҡатынын ҡуҙғатты (Т.Ғарипова).*

**г) кире хәл вазифаһын башҡарыуы.** Һөйләмдә *-ғы/ -ге, (-аһы/ -әһе) килә* теләк ҡылым формаһы менән белдерелгән кире хәл ҡылымдан аңлашылған эш-хәрәкәттең башҡарылырға тейеш булып та башҡарылмауын йәки үтәлмәҫкә тейеш булып та үтәлеүен белдерә. Миҫалдар: *Әйләнеп, иҙән уртаһында шаңҡып торған, тағы ла нығыраҡ ҡартайып киткәндәй күренгән ирен ҡосаҡлағыһы, наҙлы һүҙҙәр әйтеп иркәләгеһе килде, әммә үҙен ҡулға алды (Т.Ғарипова). Ололар һөйләгәнде тыңлағыһы килһә лә, Салауат ҡаршылашманы (Я.Хамматов).*

**Ҡылымдың *-ғы /-ге кил* формаһының хәл әйтеме булып килеүе.** Хәл әйтеме бер нисә һүҙҙән торһа ла бер генә һөйләм киҫәге – хәл булып йөрөй. Башҡорт телендә хәл әйтемен төрлө ҡылым формалары: шарт һөйкәлеше, сифат ҡылым, хәл ҡылым, исем ҡылым менән бер рәттән ҡылымдың *-ғы /-ге кил* формаһы барлыҡҡа килтерә. Миҫалдар: *Ғәйзулла аяҡтарын көскә һөйрәп ҡайтты ла, өйгә ингеһе килмәй, һарай яғына атланы*

*(Х.Тапаков). Ошондай һары һағыш баҫҡан саҡтарҙа, өйҙә торғоһо килмәгәнлектән, һылтау табып, "комадировка" тип сығып китә ул ауылдарға (Р.Байымов).*

Аналитик ҡылым йышыраҡ хәбәр һөйләмдәрҙә ҡулланылыуға ҡарамаҫтан, теләк һөйкәлешенең төп коммуникатив функцияһында – тойғо һөйләмдәрҙә ҡулланыла. Бигерәк тә ул шиғри әҫәрҙәргә хас:

*Гел йөҙәһе килә тулҡынында,*
*Гел йөҙәһе килә елкенеп.*
*Ҡараштарым – төпһөҙ күк шикелле,*
*Эй, гиҙәһе килә ҡосаҡлап (Р.Назаров).*

Шулай уҡ шәхси теләкте белдергән форма һорау һөйләмдәрҙе барлыҡҡа килтерә: *Һинең дә уның менән интеккең киләме? (Д.Исламов). Өйгә инеп, балаларыңдың рәсемдәрен, сиккән сигеүҙәрен күргең килмәйме ни, өләс? (Т.Ғарипова).*

Туранан-тура яуап алыуҙы талап итмәгән риторик һорауҙарҙа ҡулланылыуы *-ғы/-ге килә* формаһының синтаксик ҡуллынылышын артабан киңәйтә. Миҫал: *Уның әллә ҡатыны менән ҡултыҡлашып урамдан үткеһе килмәгән тиһеңме. Бергәләп танцевать иткеһе килмәгән тиһеңме. Башҡалар һымаҡ минең дә эштән ҡабаланып, йүгерә атлай ҡайтып килеүемде теләмәгән тиһеңме (М.Әбсәләмов).*

Теләк модалле *-ғы /-ге килә, -аһы/ -әһе килә* аналитик ҡылым формаларының ҡулланылыш даирәһе киң. Улар ябай һәм ҡушма һөйләмдәрҙең хәбәре вазифаһын башҡара. Ҡушма хәбәр тиң булып килһә, ярҙамсы ҡылым һуңғы хәбәргә ҡушыла. Шулай ҙа эмоциональ телмәрҙә һөйләмдең ыңғай тәртибе юғалыуы мөмкин. Ярҙамсы ҡылым һәр тиң хәбәргә эйәрә, йә төп ҡылымдан алда килә. Форма хәбәрҙән тыш исем ҡылым, сифат ҡылым, хәл ҡылым, шарт һөйкәлеше ялғауҙарын ҡабул итеп, һөйләмдең теләһә ниндәй эйәрсән киҫәктәре ролен үтәй.

ӘҘӘБИӘТ:


1. Сәйетбатталов, Ғ.Ғ. Башҡорт теле. I том. Ябай һөйләм синтаксисы / Ғ.Ғ. Сәйетбатталов. – Өфө: «Китап», 1999. – 352 бит.
2. Сәйетбатталов, Ғ.Ғ. Башҡорт теле. II том. Ҡушма һөйләм синтаксисы / Ғ.Ғ. Сәйетбатталов. – Өфө: «Китап», 2001. – 432 бит.
3. Тикеев, Д.С. Хәҙерге башҡорт теле. Ябай һөйләм синтаксисы / Д.С. Тикеев. – Өфө: Ғилем, 2002. – 178 бит.
4. Зәйнуллин, М.В. Хәҙерге башҡорт әҙәби теле: Морфология / Юғары уҡыу йорттарының филология факультеты студенттары өсөн дәреслек / М.В. Зәйнуллин. – Өфө: Китап, 2005. – 264 бит.


© Ғәниева Ғ.Ғ., 2019


**_Дауытова Л.Р.,_**
*магистрант, БДУ, Өфө к.,*
**_Салауатова Ф. Р.,_**
*филол., ф. к., доцент, БДУ, Өфө к.*


# ҒАЙСА ХӨСӘЙЕНОВТЫҢ ТАРИХИ ОЧЕРГЫНДА ҠАРАҺАҠАЛ ОБРАЗЫ

Күренекле әҙип, танылған ғалим Ғайса Хөсәйенов очерк жанры үҫешенә ҙур өлөш индерҙе. Очерк хаҡында авторҙың күрәҙәселек итеп әйткән һүҙҙәре лә бар:

«Тикшерелмәгәне менән художестволы очерк үҙе бер донъя»[1]. Ысынлап та, әҙәби жанрҙар системаһында очерк жанрын күҙаллағанда, уны яңынан тикшереү талап ителә. Сөнки һуңғы йылдарҙа был жанрға арналған ғилми хеҙмәттәр әлегә юҡ.

Авторҙың 1998 йылда донъя күргән ”Ил азаматтары” китабы тарихи повестарҙан һәм тарихи очерк-портреттарҙан тора. Әгәр ҙә тарихи әҫәрҙәрҙә Иҫәнгилде батыр, Пугачев фельдмаршалы Бәҙәрғол Юнаев, рудасы Исмәғил Тасимовтарҙың тормошо һәм көрәш юлы һүрәтләнһә, “Тарихи портреттар” бүлегендә иһә йөҙәрләгән ил азаматтары араһынан егерме икеһенең әҙәби-тарихи һыны кәүҙәләндерелә.

Әҙип халыҡҡа аҙ билдәле тарихи шәхестәрҙе, улар тураһындағы мәғлүмәттәрҙе йәмәғәтселеккә еткереүҙе маҡсат итеп ҡуя. Бында беҙ Ҡараһаҡал, Батырша, Кинйә, Ҡаранай кеүек батырҙар, кантондар нәҫеленән Ҡыуатовтар, Буранбай сәсән һәм башҡа арҙаҡлы шәхестәр менән танышабыҙ. Авторҙың ниндәй генә очергын алма, әҙәби әҫәр һымаҡ уҡыла, ҡыҙыҡ һәм мауыҡтырғыс. Әҙип үҙенең очерктарын был жанрҙың бер үҙенсәлекле формаһына индереп, әҙәби очерк-портреттар тип юҡҡа атамай. Сөнки бында үҙе күҙәтеүсе лә, тарихсы ла һәм яҙыусы ла ролендә, һәр бер шәхес яҙмышын, уның хәрби эшмәкәрлеген, ҡаҙаныштарын, еңеү-еңелеүҙәрен төрлө ситуацияларға ҡуйып, тарихи сығанаҡтарға таяныр, тәрән һәм төплө күҙәтеүҙәре аша художестволы дөйөмләштереүгә килә.[2]

Әҙиптең «Ҡараһаҡал” исемле очергында Ҡараһаҡалдың хәрби эшмәкәрлеге бәйән ителә. Автор үҙе әйткәнсә, Ҡараһаҡал батырҙың шаҡтай серле һәм ғибрәтле шәхесен, ҡатмарлы ғүмер һәм яу юлдарын күпмелер белмәй тороп, XV быуаттағы Башҡортостан тарихын, уның героик һәм трагик биттәрен, көрәш майҙанына сыҡҡан яугирҙарын, ниһайәт, милли ғорурлығыбыҙ Салауат Юлаевты тыуҙырыуға килтергән социаль-тарихи шарттарҙы, героик традицияларҙы аҙағынаса төшөнөүе ҡыйын.

Ғайса Хөсәйенов очергында ике төп ваҡиғаны, йәғни 1740 йылдың августындағы һәм 1740 йылдың февраль урталарындағы хәл-ваҡиғаларҙы тәүге Ырымбур губернаһының генерал-лейтенанты кенәз Василий Алексеевич Урусовтың яуызлыҡтары менән бәйләп һүрәтләй.

Әүәлдән үк ҡанһыҙлығы менән яманаты сыҡҡан был түрәнең ихтилалда ҡатнашҡан яу башлыҡтарына һәм баш күтәреүселәргә ҡарата ҡот оскос яуызлығын тасуирлай автор. Майҙанға йыйылған халыҡ алдында Ҡараһаҡалдың иң яҡын яу-ярандары Йыһанғол Иҫәкәевты, Яныш Исмәғилевты, Ҡарабаш Уғлыйәновты, Яҡуп Ҡасимовты, татар Ҡаптырҙы, сыуаш Максимовты ҡаҙыҡҡа ултыртып үлтертә. Баш күтәреүселәрҙең күбеһен шулай язалау – башҡорт тарихының иң фажиғәле ҡара биттәренең береһе ул. Автор кенәз Урусов һәм генерал Соймонов бойороғо менән эшләнгән бындай ҡот осҡос язаларҙың А.С. Пушкиндың ”Пугачев тарихы” әҫәрендә ҡәһәрләнеүен, был хаҡта Мамин-Сибиряктың да үҙәк өҙгөс әрнеү менән ләғнәтләп яҙып үтеүен билдәләй.

Ә 1740 йылдың 10 февралендәге ваҡиғала иһә Тырнаҡлы волосының Мөхәммәт ауылында Йәрмөхәммәт ҡарттың өйөндә йыйылған күп кенә старшиналарҙың, батырҙың кәңәшмәһе тасуирлана. Әҙип был кәңәшмәнең әһәмиәтен юғары баһалап, тарихтағы бер бәләкәй ҡоролтайға тиңләй. Кәңәшмәне алып барған Әйле волосы старшинаһы Алан Ейәнғол халыҡты яуға күтәреү, ғәскәр туплау, ил-йортҡа баш булыр хан табыу кәрәклеген аңлата, хан исеменән яуға әйҙәгән Ҡараһаҡал менән таныштыра. Ул Солтангәрәй-Ҡараһаҡалдың бик уҡымышлы һәм диндар, тәҡүә әҙәм булыуын, хажилығын һөйләй, уны үҙе күреп белеүен, батырлыҡтарын, аҡыллылығын дәлилдәр

1 Хөсәйенов Ғ. Ил азаматтары. Тарихи шәхестәр тормошо. — Өфө: Башҡ. кит. нәшр., 1998 — 8-се б.

2 Юнысова Ф. Очерк жанрында тарихи шәхестәр // Ватандаш. – 2006. – №3. – 96-114-се биттәр.

менән үҙенсә раҫлай. Хандың үҙе артынан ҡаҙаҡ һәм ҡалмыҡтарҙы ла эйәртә аласағына ышандыра.

Әҙип башҡорт түрә-батырҙарының Ҡараһаҡал менән осрашҡандан һуң тыуған тәьҫораттары аша уның әҙәби портретын ифрат оҫта: һүрәтләй: «Алдарында баштан-аяҡ ҡоралланған бына тигән ун биш һыбайлы, шуның башында йылҡылдап торған ҡара атҡа атланған: өҫтөнә йылы тун, башына төлкө бүрек кейгән, ҡоңғорт йөҙлө, матур һаҡаллы, мөһабәт кәүҙәле Ҡараһаҡал баҫып тора. Атының эйәр-өпсөндәре затына тиң булғандай көмөш менән нағышланған, батырҙың билендәге көмөш ҡынлы кәкре ҡылысы фирүзә таштар менән биҙәлгән”.

Ҡараһаҡал – алыштарҙа ал бирмәҫ батыр, һүҙ ярыштарында ҙур ғилем эйәһе, хатта аҫыл затыменән хан булып танылған уҙаман. Уның төрлө илдәрҙе гиҙеүен, бик күп телдәр белеүен, үткер илсе-дипломат булыуын бәйән итеп, яҙмыш елдәре уны көтөүсенән аяныс ҡолға, ҡолдан ғәййәр батырға, батырҙан затлы ханға тиклем күтәреп, төшөрөп өйөрөлтөп йөрөткән, ти ул.

Очеркта Ҡараһаҡалдың рухи донъяһы тулы сағылыш таба. Быны беҙ ҡоролтайға йыйылған түрәләр, батырҙар алдындағы сығышында күрәбеҙ. Уның ил хәстәре менән йәшәүе, халҡының ирекле тормошо өсөн янып йөрөүе, етди ҡарашы һуңынан ғәскәр алдындағы телмәрендә лә сағыла. Үҙен Солтангәрәй хан тип таныштырғандан һуң, ҡоролтайға йыйылған башҡорт түрәләре ҡөрьән тотоп анттар биреп, Ҡараһаҡалды хан итеп күтәрәләр.

Ғайса Хөсәйенов Ҡараһаҡалдың төп сығышын һәм уның 1740 йылдағы яуҙы ойоштороу моментын тарихи сығанаҡтарға таянып, үҙенсә фаразлай. Бында Р. Игнатьевтың бай ғына архив материалдары нигеҙендә яҙылған “Ҡараһаҡал — Башҡортостандың ялған ханы” мәҡәләһендә башҡорт батырының шәхесе һәм тормошо күҙаллана. Шулай уҡ “Ырымбур тарихы” китабында Ҡараһаҡалдың бер ниндәй ҙә хан улы түгеллеге һәм ҡаҙаҡ та булмауы, бәлки бер башҡорт икәнлеген иҫбат итеүе телгә алына. Ҡараһаҡал яуҙарын үҙ күҙе менән күргән был рус тарихсыһы башҡорт батырының йәшләй тыуған яҡтарынан сығып китеп, Урта Азия, Кубань, Волга буйҙарын күп ҡыҙырыуын һәм шунда ҡалмыҡ тайшаһы Солтангәрәйҙең яҙмышын белеп, уны аҙаҡ үҙе итеп танытыуын раҫлай. Ғәмәлдә ҡалмыҡ ханы Солтангәрәй үҙ атаһынан Волга буйындағы ҡалмыҡтарға ҡасҡан була һәм шунда кемдәрҙер тарафынан үлтерелә. Ә үлгән йә үлтерелгән хан-батша урынына ялған хан-батшалар пәйҙә булыуын автор тарихта киң таралған ялған Дмитрий, Петр батша, Пугачевтар менән бәйләй, артабан Ҡараһаҡал ихтилалының сәбәптәрен, тарихи шарттарын төплө анализлай. Яуҙа уның ойоштороу һәләте, халыҡтың уға ҡарата ышанысы, ихтилалда ҡатнашыусыларҙың тоғролоғо һүрәтләнә.

Ҡараһаҡал башҡа яу башлыҡтарынан күп яҡтары менән айырылып торған. Берҙән, алда әйтеп үткәнсә, заманы өсөн бик уҡымышлы кеше, оҫта дипломат, батыр һәм сәсән. Икенсенән, уның төрлө халыҡтар, йорт-ерҙәр менән бәйләнеше көслө. Өсөнсөнән, Ҡараһаҡал үҙ абруйын ниндәй хәлдә лә һаҡлап ҡала алыр таһыллы зат.

Шулай итеп, Ғайса Хөсәйенов тарихи прозаның художестволы-документаль жанрында ысынында новатор булып сығыш яһай. Ул урта быуаттарҙан уҡ халыҡ ижадында һәм яҙма әҙәбиәттә йәшәп килеүсе ҡисса жанрын тергеҙә, уның нигеҙендә үҙенең киң танылған “Алдар батыр”, “Исмәғил Тасимов” һымаҡ әҫәрҙәрен яҙа. Ҡиссалар художестволы рәүештә тарихи шәхестәр тормошон мажаралы, шул уҡ ваҡытта тарихи осор дәһшәтлеге ярҙамында еткереүе менән айырыла. Тарихи очерк жанрында яҙылған әҫәрҙәрендә (“Ҡараһаҡал”, “Ҡаһарман кантон” һ.б.) Ғ. Хөсәйенов улар хаҡында һаҡланып ҡалған документаль мәғлүмәттәргә таянып эш итә. Был

осраҡта художестволы һүрәтләү документаль очеркты тулыландырыу, йәнләндереү хеҙмәтен үтәй. Тимәк, үҙенең тарихи прозаһында Ғ. Хөсәйенов ҡисса һәм тарихи очерк формаларындағы әҫәрҙәрендә, тәү сиратта, жанр оҫтаһы булып сығыш яһай.

ӘҘӘБИӘТ:

1. Хөсәйенов Ғ. Ил азаматтары. Тарихи шәхестәр тормошо. — Өфө: Башҡ. кит. нәшр., 1998 — 8-се б.
2. Әсфәндиәров Ә. Олатайҙарҙың бар тарихы. – Өфө: Китап, 1996. –190 б.
3. Юнысова Ф. Очерк жанрында тарихи шәхестәр // Ватандаш. – 2006. – №3. – 96-114-се биттәр.

***Даутова Р.А.,***
*122-се һанлы башҡорт гимназияһының*
*башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы, Өфө ҡ.*

## МОСТАЙ КӘРИМДЕҢ “ЕВРОПА-АЗИЯ” ШИҒЫРҘАР ЦИКЛЫНЫҢ ИДЕЯ-ТЕМАТИК ЙӨКМӘТКЕҺЕ

Мостай Кәримдең “Европа-Азия” шиғырҙар циклының яҙыла башлауы 50-се йылдар башына ҡарай. “Әҫәрҙәр үҙәгендә торған тыуған ил һәм халыҡ образдары поэтик һүрәтләнештең үҙенсәлекле бер яңы эске законсылыҡтары ерлегендә асыла. Тыуған ил образын конкрет тыуған ер төшөнсәһенән киң мәғәнәһенә, символикағаса үҫтереү, халыҡ образын шәхескә бәйләп яҡтыртыу тенденцияһы көслө.”[2;119] – тип билдәләй академик Ғ.Б. Хөсәйенов.

“Европа – Азия” шиғырҙар циклы “Кереш” исемле шиғыр менән асыла. Унда ауырлы ҡатын һәм тыуасаҡ бала образы үҙәктә тора. Автор иң үткер әсә күҙе һәм зирәк әсә ҡолағы аша киң донъяға ҡараш ташлай, йәшәүҙең мәғәнәһен, именлектең ҡәҙерен әсәләй тойоуға илтә.

Артабанғы шиғырҙар шағир исеменән алып барыла, хәл ваҡиғалар ағышы унын ҡарашы, мөнәсәбәте аша сағылалар. “Бер йыр йырлаған” тигән шиғырында иһә сабыйҙың донъяға килеп, бишек йырҙары тыңлауы, әсәһенең “алыҫҡа киткән һайын” биргән тормошсан кәңәш-төңәштәре хаҡында һөйләнелә.

“Шулай башлана йәшәү” шиғыры, исеме үк әйтеп тороуынса, сабыйҙың тәү тапҡыр имгәкләп тупһа аша ҡураға сығыуы, тәү тапҡыр тәпәй баҫыуы, ҡуранан сыҡҡан һуҡмаҡҡа – ҙур юлға сығыуы тураһында һөйләнелә.

*Донъяла иң тәүге юлын*
*Тап шулай башлай кеше.*
*Тап шулай башлана уның*
*Йәшәүе – бөйөк эше.*

Тимәк, сабый ҙур юлға, “йәшәү – бөйөк эшкә” һуҡмаҡ һала.

“Таңдың килеүе” өлөшөндә ауыл тарихы сағылыш ала. Халыҡтың ауыр көнкүреше, михнәт сигеүҙәре, “ғәжәйеп бер таңды” көтөүҙәре – барыһы-барыһы ла баланың күҙ алдында. Ошо уҡ хәл-ваҡиғаларҙың дауамы “Мин шаһитмын” шиғырында.

*Европаны гиҙҙем, Азияны,*
*Күп күрҙем мин матур, яҡшыны.*
*Беләм, ауылым илдәрҙә бер түгел,*
*Ләкин ерҙә ул иң яҡыны.*

Тимәк, был юлдарҙа, лирик геройҙың тыуған ауылына булған мөхәббәте сағыла. Яҙмыш юлдары ҡайҙа ғына илтмәһен, шағир өсөн тыуған ауылы һәр саҡ иң яҡыны һәм иң ҡәҙерлеһе булып ҡала.

“Тупрағым, һауам, һыуҙарым” әҫәрендә шағир тыуған иленә дан йырлай. Тәбиғәттең матурлығына, байлығына һоҡланып туя алмай, “шул тупраҡта тыуып-үҫеү үҙе бер бәхет” тип һанай. Ләкин тормош аллы-гөллө генә бармай. Ир-егет булып үҫеп екән сағында Ватанына дошман һөжүм иткәс, ошо хәтәр сәғәттәрҙә үҙ ауылының өс йөҙ егете менән өс йөҙ ат эйәрләп яуға китә. (“Өс йөҙ егет” шиғыры)

“Һабан туйы” шиғырында беҙ дошманды ҡыйратып ҡайтҡан, төрлө сынығыуҙар үткән, физик һәм интеллектуаль йәһәттән формалашып еткән шәхес булараҡ күҙ алдына баҫа, тыуған ауыл халҡының көнкүреше тыуған республикаһы менән бергә, ә бөтә башҡорт халҡының яҙмышы Бөйөк Рәсәй – Ватаны менән ҡушыла. Быға дәлил һәм “Европа – Азия” шиғырҙар циклының кульминацион өлөшө булып “Россиянмын” шиғыры тора.

*Рус түгелмен, ләкин россиян мин,*
*Россиян мин – ниндәй ғорурлыҡ!*
*Ун ғүмерең миңә кәрәк түгел,*
*Бер яҙмышым шуға торорлоҡ! –*

тигән ялҡынлы юлдар аша лирик герой Рәсәйгә дан йырлай, рус һәм башҡорт татыулығы алдында баш эйә.

Циклдың һуңғы бүлектәрендә шәхес яҙмышы тағы ла һуңғы бүлектәрендә шәхес яҙмышы, хатта тотош донъя яҙмышы менән берегә. Һөҙөмтәлә, конкрет һәм дөйөм, лирик һәм эпик сифаттар берегеп, образлылыҡ һыҙаттарын көсәйтә.

Шулай итеп, Мостай Кәримдең “Европа – Азия” шиғырҙар циклы – ул тыуған ауыл, ил, донъя хаҡындағы әҫәр. Шиғырҙарҙың эстәлеге, логик сюжеты аша беҙ тыуған ил төшөнсәһенең бик киң һәм шул уҡ ваҡытта үтә конкрет төшөнсә икәнлеген аңлайбыҙ. Әсә ҡарынынан алып, атай йорто, тыуған ауыл, тыуған ил төшөнсәләре ялғана барып, Ватандың оло образына тоташа.

ӘҘӘБИӘТ:


1. Кәрим М. Әҫәрҙәр биш томда, 1-се том: шиғырҙар, поэмалар, либретто. – Өфө: Башҡортостан “Китап” нәшриәте, 1995. – 416 бит
2. Хөсәйенов Ғ.Б. Мостай Кәрим. Шәхес. Шағир. Драматург. Прозаик. – Өфө: Башҡортостан “Китап” нәшриәте, 1994. – 366 бит


© Даутова Р.А., 2019

**Джанбеков Какаджан**
*Ученый секретарь Института языка, литературы и национальных рукописей им Махтумкули (Туркменистан)*

## РАШИДЕДДИН ВАТВАТ И ЕГО ЛИТЕРАТУРНОЕ НАСЛЕДИЕ

Пользовавшийся большой популярностью при дворе могущественных правителей государства Куняургенчских туркмен Решидеддин Ватват оставил богатейшее литературное наследие как автор созданных на арабском языке и фарси многочисленных поэтических сборников – диванов, аналитических книг, посвященных искусству стихосложения, а также высокохудожественных прозаических произведений. В арабских и персидских источниках сохранилось немало ценных сведений о жизни и

творчестве этого признанного мастера слова, прославившегося среди своих современников в качестве искусного оратора и ритора. Стоит упомянуть в связи с этим такие произведения как «Мугджамул удаба» Якута Хамави (1179-1229), «Тарихи Джахангуша» Алаэддина Ата Джувейни (умер в 1283 г), знаменитый «Бахаристан» Адбурахмана Джами (1214-1292), «Асарул билад» Закарийя Казвини (1203-1283), «Тазкирету-шуара» Давлетша Самарканди. Множество биографических и библиографических данных, касающихся Рашидеддин Ватвата, можно обнаружить и в книгах «Хафт иклым» Эммина Ахмед Рази, «Маджмаул фудала» Мухаммеда Арифа Бакайы, «Хуласатул ашар ве зубдатул афкар» Такиэддина Зикри Кашани.

Полное имя Рашидеддин Ватвата звучит как Сагдулмюльк Рашидеддин Мухаммед ибн Мухаммед Абдылджелиль Омари Балхи. Поэт широко прославился своим красноречием. Говорят, на одном из высоких собраний при дворе могущественного правителя государства Куняургенчских туркмен Атсыза Рашидеддину пришлось вступить в увлекательный спор. Правитель был поражен изысканным красноречием и выдающимся ораторским талантом поэта. Во все время спора перед Ватватом стояла чернильница. Атсыз, по-видимому, решился сам полушутя испытать изящество слога поэта и сказал: «Уберите чернильницу, дайте же нам, наконец, разглядеть, кто за ней прячется». Согласно источникам поэт был небольшого роста. Рашидеддин не задумываясь отпарировал на слова повелителя старинной арабской поговоркой: «Человек славен двумя самыми малыми частями своей плоти – сердцем и языком». Атсыз остался очень доволен ответом поэта.

По некоторым сведениям в источниках Рашидеддин Ватват родился в 1080-81 годах в городе Балхе, умер в 1177-78 годах в Хорезме в возрасте 97 лет. Ученый Н. Ю. Чалисова, занимавшаяся основательным изучением произведения поэта «Сады волшебства», также поддерживает гипотезу о том, что Ватват мог появиться на свет ближе к концу XI века.

В письменных источниках сохранилось крайне мало сведений о юных годах поэта. Известно, что важной вехой в становлении личности выдающегося мыслителя и великого мастера поэтического слога стал период обучения в духовной школе – медресе «Низамийе» [1], построенной в Балхе (408-410 гг. хиджры) по велению прославленного визиря правителей династии Великих сельджукидов – Низам ал-Мюлька. В данном духовном заведении получили блестящее образование многие выдающиеся ученые того времени. Особое внимание в духовной школе уделяли основательному изучению арабского языка. Большой вклад в углубление знаний и совершенствование выдающегося таланта Ватвата внес преподаватель арабского языка и известный ученый того времени Абу Сагыт Харави (умер в 1141 г.). Свидетельством тому является следуюшие строки письма, адресованного Ватватом своему мудрому наставнику [2]. Текст данного письма полностью приводится в книге Якута Хамави «Мугджамул удаба». Обладая обширными и глубокими знаниями в языках Рашидеддин одновременно преподавал арабский язык, создавал на арабском свои бессмертные поэтические творения и тут же переводил их на фарси.

Рашидеддин Ватват 30 лет верой и правдой служил при дворе правителя Атсыза и дослужился до почетной должности руководителя высшего правительственного собрания – дивана. Вместе с тем служба при дворе была сопряжена с известными грубостями - дважды за все время своей службы его отлучали от двора, однако ему удавалось вернуть себе расположение правителя и вновь обрести утраченные позиции.

В письменных источниках Рашидеддин характеризуется как высокообразованный, умеющий сохранять приличествующее достоинство царедворец, одновременно как

чрезвычайно красноречивый и в высшей степени талантливый человек. Острый язык множил число и без того немалой армии его непримиримых противников, но он же и выручал поэта в самые, казалось бы, трудные моменты. Красноречие его воспевалось даже в имевших в ту пору хождение в простонародье анекдотах. К примеру, в книге «Асарул билад» (Памятники стран) Закарийя Казвини говорится о том, что правитель Атсыз, чрезвычайно чтивший талант и ораторское дарование Ватвата, решил не расставаться с ним ни на минуту. С этой целью было велено выстроить для поэта роскошные апартаменты прямо напротив царских палат, чтобы могущественный правитель мог в любое время переброситься парой слов со своим мудрым приближенным. Говорят, острый, как перец, язык великого мыслителя задел за живое многих правителей и султанов. Досталось и прославленному султану Санджару – последнему представителю династии Великих Сельджукидов. Вот что пишет об этом Алаэддин Ата Джувейни в своей книге «Тарыхы Джахангуша». В 1147-1148 гг. Султан Санджар с целью наказать Атсыза за своеволие во главе огромного войска отправился в военный поход. Султану Санджару удается взять в плотное кольцо один из самых укрепленных редутов противника – крепость Хазарасп, которую он удерживает в жестокой блокаде в течение двух месяцев. Название крепости дословно переводится как «Тысяча скакунов». В этом походе славного султана Санджара сопровождал другой известный поэт Востока - Энвери. В угоду Санджару выдающийся мастер поэтического слога сложил прекрасное четверостишие:

*Мой повелитель, весь мир у твоих ног,*
*В твоих руках – судьбы самого государства,*
*Овладей сегодня Хазараспом, а завта –*
*Тысячи скакунов Хорезма – станут у твоих ног*

Рубаи султану очень понравилось. Повелитель повелел нанизать поэтическое сочетание на острие стрелы и пустить её в крепость противника. Воины Хорезма быстро донесли до Атсыза послание Санджара. Присутствовавший при этом Рашидеддин свойственным ему красноречием тут же сочинил достойный ответ противнику, который тем же способомбыл отправлен в расположение войск Санджара. Ответ, в частности, гласил:

*Мой повелитель, пусть хоть сам Рустам идет к нам с войском,*
*Не овладеть ему ничем, даже старым ослом.*

Дерзкий ответ сильно разгневал Санджара. Царедворцы не преминули сообщить ему, что именно авторство столь дерзновенных строк принадлежит Рашидеддину Ватвату. В гневе султан поклялся непременно захватить поэта и предать его жестокой и мучительной казни.

После падения крепости Ватват долгое время вынужден был скрываться. Спустя некоторое время поэту удалось снискать расположение главы – дивана при дворе султана Санджара Мунтеджибеддина Ады ибн Ахмеда, при посредничестве которого Рашидеддину было даровано высочайшее прощение.

Рашидеддин Ватват поддерживал близкие литературные контакты с такими известными мыслителями и поэтами своего времени, как Энвери, Хакани, Эдип Сабыр. Адресованные поэтом хвалебные оды-посвящения поэтам Хакани и Эдибу Сабыру позже были помещены им в авторский поэтический сборник – диван. Ватват высоко ценил творчество Амгака Бухари, Масгуди, Сагди Сельмана.

Владевший в совершенстве арабским и фарси поэт оставил нам в наследие созданные на этих языках многочисленные и высокохудожественные произведения. До наших дней сохранилось название 21-ого литературного опуса поэта, из которых до наших дней только 19 дошло. Среди них: поэтический сборник стихов – диван на фарси, содержащий около восьми с половиной тысяч написанных и классифицированных самим автором бейтов; сборник стихов – поэтический диван на арабском языке; произведение «Акбарул-афкар фи-р-расаил ва-л-ашар»; опус «Араисул-хаватир ванафаисун-навадир», содержащий в себе по 25 писем на арабском и фарси. Произведение «Расаилул араби» было создано в 1156-1173 гг. и посвящено внуку правителя Атсыза – Солтанша Махмуду. Известны также произведения «Гараибул-килам фи рагаибул-хикам»; «Гурарул-аквал ва-дурарул амсал», «Ал килам ан-насиха ва-л-хикам ас-салиха»; «Мафатихул-хикам ва-масабих аз-зулм» (данное произведение написано на фарси); «Мунййатул-мутакаллимин, ва-гунйатул-мутааллимин»; «Укудул-лаали ва суудул-лайали» (данное произведение до сих пор обнаружить не удалось); «Матлуб кулл талиб мин калам амирул-муминин Али ибн Абу Талиб» (это произведение написано на фарси и содержит в стихотворной и прозаической форме высказывания четвертого великого калифа Али); «Фаслул хитаб мин калам амирул-муминин Омар ибн Хаттаб» (имеется в наличии целый отрывок перевода данного литературного памятника, собранного в себе поэзию и прозу; этот опус автор посвятил сыну правителя Атсыза – Абул Фатху); «Тухфатус-садик ила-с-садик мин калам амирул-муминин Абу-Бакр Сыддик» (имеется перевод данного произведения в стихах и прозе на фарси); «Унсул-лахван мин калам имамул-муминин Осман ибн Аффан» (данное произведение было посвящено внуку Атсыза – Абулкасыму Махмыду); «Джовахырыл-калаид ва-завахират фараид» (высказывания выдающихся личностей и афоризмы); «Нукудуз-завахир ва-укудул джовахир»; «Рисалатул аруд» (данное произведение представляет собой небольшую рисалу, содержащую в себе 29 измерений стихосложения на арабском и фарси; каждое измерение в качестве примера подкрепляется двумя бейтами на фарси); «Бадайа ат тарсиат ва-равайа ат-тасджийат» (эта книга была посвящена сыну Атсыза – Абу Давуду Сулейману); «Рисалат тахсифат» (данная книга до сих пор не обнаружена); «Хадаикус-сихр фи-дакаикуш-шиир».

Даже простое перечисление данных произведений позволяет составить достаточно полное представление о масштабах и огромной художественной значимости оставленного Рашидеддином Ватватом литературного наследия. Большую часть произведений автор посвятил правителю могущественного государства Куняургенчских туркмен – Мухаммеду Атсызу, а также его сыновьям и внукам. Правитель, в свою очередь, оказывал поэту свое надежное покровительство. Ватват и сам занимался меценатством, приглашал в свой дом молодых и талантливых поэтов и ученых, стремился оказать им посильную помощь и поддержку.

Одним из самых популярным произведений Ватвата принято считать книгу «Официальные письма». Большая часть этих писем относится к правителю государства Куняургенчских туркмен – Атсызу. Подавляющая часть из размещенных в книге 112 официальных писем является историческими подлинниками, свидетельствующими о жизни и деяниях великих туркменских султанов. Часть этих писем была адресована халифу Багдада и его визирям. Кроме этого, имеются послания к различным местным управителям, выдающимся личностям того времени. Эти послания были написаны самим Рашидеддином в период с 1156 по 1173 годы.

Эпистолярное творчество Ватвата наглядно харак¬теризует не только образ жизни и деяния правителей государства Куняургенчских туркмен. Письма дают нам яркую

картину быта и уклада жизни туркменского народа в XII веке, особенности экономического и культурного развития региона, являя собой, таким образом, богатейший материал для фундаментальных научных исследований.

© Джанбеков Какаджан, 2019

***Дильмухаметов И.Т.,***
*ст. препод., Стерлитамакский филиал БашГУ*

## ОТРАЖЕНИЕ ФОЛЬКЛОРНЫХ ТРАДИЦИЙ БАШКИРСКОГО НАРОДА В РАССКАЗЕ М.КАРИМА «ПРИКЛЮЧЕНИЯ МЕДВЕДЯ»

«Приключения медведя» («Айыу мажаралары») рассказ для детей, впервые напечатан в 5-ти томном сборнике произведений М. Карима в 1972, переиздавался в 1983 и 2003 гг. в книге «Радость нашего дома» («Беҙҙең өйҙөң йәме»), и в журнале «Акбузат» 2004 году. Рассказ относится к одному из ранних произведений автора в прозе.

За основу рассказа взят простой сюжет - борьба медведя с огромной рыбой (Ҡырпа). Медведь в рассказе предстает перед нами в лучших традициях народных сказок, он немного глуповат, неповоротлив, косолап, живет своей безмятежной жизнью. Это демонстрирует автор в начале произведения, упоминая знаменитые сюжеты народных сказок «Медведь и пчелы», «Почему у медведя короткий хвост». По мнению Валеева И.И.: «Философия педагогики М. Карима дает ясную установку: общество может иметь прочный фундамент лишь на базе незыблемости традиций» [2; 42].

Общеизвестно, что М. Карим пришел в прозу уже известным поэтом, это нашло свое отражение в рассказе. В «Приключениях медведя» лирическое отступление – это повествование о р. Каридель. Автор подробно описывает ее географию, где берет начало, куда впадают ее воды и плавно возвращается к основному сюжету.

События начинают разворачиваться, когда медведь приходит на берег этой реки играет, плескается, купается, радуется жизни. Вода в мифологической символике несет двоякий смысл, она дает жизнь и забирает ее. «Вода является границей, местом перехода из одного мира в другой, из мира людей в потусторонний мир предков. В сказке «Булат батыр» герой переходит через воды огромного озера и оказывается во владениях дива [1; 44]. В знаменитом эпосе «Урал батыр» злые драконы появляются из воды и досаждают людям, в тоже время вода необходимый элемент для всего живого. Автор непроизвольно касается этой темы. Огромная рыба подплывает незаметно, как и все чуждое, злое, холодное. Сом хватает его за лапу и пытается утащить в свой мир. Во время схватки приходят люди и убивают рыбу, а медведя отправляют в зверинец. Писатель дает понять читателям, что медведь со сломанной лапой уже не сможет самостоятельно жить на воле.

В рассказе подчеркивается мысль: зло всегда наказуемо, а неосмотрительность и глупость приводят к печальным последствиям. Ломунова М.Н. приходит к выводу: «Задача детского писателя считает М.Карим, приблизить ребенка к реальным человеческим отношениям, бережно готовить его к испытаниям» [4; 150]. М. Карим простым, народным языком объясняет детям, как устроен наш мир, учит их правилам поведения, предвидеть последствия своих поступков, трезво смотреть в будущее.

ЛИТЕРАТУРА:

1. Аминев З.Г. Космогонические воззрения древних башкир. – Уфа: Башлингвоцентр, 2005. – 140 с.
2. Валеев И.И. Педагогика Мустая Карима / И. И. Валеев. - 2-е изд., испр. и доп. - Уфа: Китап, 2003. - 222 с.
3. История башкирской литературы в VI томах. Том V. – Уфа: Китап, 1993. - 598 с.
4. Ломунова М.Н. Мустай Карим: Очерк творчества. - М. : Худож. лит., 1988. - 206с.
5. Шарипова З.Я. Литературоведение и современность / З. Я. Шарипова. - Уфа: Китап, 2001. - 316с.

© Дильмухаметов И.Т., 2019

***Додонова С.Г.,***
*к.пед.н., доцент, КазГИК, г. Казань*

## СОВРЕМЕННОСТЬ ИДЕЙ МУСТАЯ КАРИМА В ЭПОХУ КУЛЬТУРНОЙ ГЛОБАЛИЗАЦИИ

Глобальные процессы неизбежно влияют на социально-общественное пространство - оно приобретает новые очертания. Утрачивается национальная самобытность, унифицируется и стандартизируется система образования, весь прагматический подход становится риском для общества и культуры. Когда, с одной стороны исчезает изолированное состояние культур, общественная замкнутость, демонстрируется открытость в политических, социальных, научных, культурных взглядов. С другой - теряется национально-культурная идентичность. Мы предлагаем проанализировать некоторые рассуждения, выводы, примеры одного из известных башкирских поэтов Мустая Карима, чьи взгляды и идеи актуальны и современны в сложившейся ситуации. Несмотря на то, что активное творчество поэта приходится на середину XX столетия, он использует современную, для того времени терминологию: интернациональность, коммунистические идеи, национальная форма и социалистическое содержание. Это говорит о том, что Мустай Карим - гражданин и патриот своего времени, искренне верил в то, чем жила страна. Но это не мешает нам выделить современность его взглядов в таком противоречивом явлении, как глобализация.

Мустай Карим поэт многожанровый. Его произведения соединены между собой философией развития творческой мысли. Исследователи драматургии Мустая Карима, отметили, что нет одинаковых пьес в творчестве автора, есть драма, романтическая драма, романтическая трагедия, лирическая комедия и т.д. При анализе в поиске общих признаков пришли к выводу, что драматургия Мустая Карима многогранна и ее нельзя охарактеризовать одним определением: «Подобное искусственное «выпрямление» творческого пути привело бы к подмене диалектической сложности всего процесса метафизической «восходящей» линией». Отмечают своеобразность, оригинальность, неповторимость открытий: «Одинокая береза» не уменьшает достоинства драмы «Свадьба продолжается», а трагедия «В ночь лунного затмения» - светлого юмора комедии «Похищение девушки» [2, с. 217]. В решении проблемы приемлемым считают стремление автора в наиболее значительных произведениях, таких как «В ночь лунного затмения», «Похищение девушки», «Не бросай огонь, Прометей!» к синтезу реалистического и романтического, гармонично перейти от бытового натурализма к достоверности и эмоциональной выразительности. Современники называли Мустая Карима пытливым поэтом, находящемся в вечном философском поиске и развитии:

«Каждое его новое произведение и сегодня вызывает такое ощущение, будто художник впервые выходит навстречу зрителю и читателю. Предельная эмоциональность и философская глубина – вот что характеризует каждое его новое драматургическое произведение» [2, с.219].

В искусстве Мустай Карим отметил выражение самосознания нации, «…проявлением его достоинства, оно вызывается к жизни необходимостью ее нравственного самоутверждения» [1, с.81]. Подлинное искусство, по мнению поэта, должно зарождаться в общении с другими народами, процессе культурного взаимообмена: «Лишь ветер времени, бродящий по странам и континентам, способствует щедрому оплодотворению деревьев духовного плодородия» [1, с. 81]. Сущность искусства раскрывал через единство национального интернационального. Невозможно рассматривать в искусстве отдельно национальное, как менее развитое и отсталое, и интернациональное – с его прогрессивными идеями. И если в произведение ограниченно в художественных средствах, нет мысли, неоправданная форма и т.д., то к искусству это не имеет никакого отношения.

Произведения искусства интернациональны по общечеловеческим факторам, проблемам. Эмоционально-чувственное восприятие - переживания, тревоги и радости, отношение к проблемам и бедам – не имеют национальных границ, все народы одинаково эмоционально окрашивают восприятие того или иного события, в силу темперамента и характера более или менее активно.

Проблему национального интернационального Мустай Карим связывал с формой и содержанием произведений искусства. Для лучшего понимания его идей, приводил в качестве примеров реалии жизни, тем самым делал доступным и понятным свои мысли: «Форма произведения – это не одежда, в которую можно одеть кого угодно, и не сосуд, в который можно что угодно влить. Форма и содержание в одном произведении рождаются вместе, живут вместе, в хорошем и дурном достойные друг друга, умирают вместе, коль это суждено. Овдовевшей формы не бывает» [1, с.83]. Интересны высказывания поэта об использовании национальных атрибутов в современном искусстве, направленных на представление необходимой эпохи, для усиления восприятия национального колорита, например, лисья шапка у башкир, длинный сарафан для исполнения русских песен, большой кинжал у горского танцора и т.д. Поэт подчеркивал, что ищет содержание в самом исполнении произведения, а внешний вид воспринимает отдельно, так как атрибуты иногда мешают восприятию сути, та же шапка закрывает вдохновленное лицо юноши. Для сравнения приводит балет «Спартак», в котором события тысячелетней давности актуальны и в наши дни. В этом, по словам Мустая Карима, и сила искусства, оно способно отображать тысячелетние события в один «прекрасный и величественный миг» [1, с.83].

Поэт называет несколько причин, мешающих полноценному взаимообмену между культурами разных народов. Одну из них поэт отмечает в некоторых театральных пьесах, в которых происходит преувеличенное использование этнографических подробностей, деталей быта, не раскрывающих национального образа как «..та символическая шапка, которая наполовину закрывает прекрасное лицо джигита». Такие произведения и вызывают споры о том, что национальные пьесы малопонятны, трудно воспринимаются другими этническими культурами, что иногда является большим препятствием для выхода на массовые сцены. Карим видит причину не в национальной специфике, а называет это художественной несостоятельностью, прикрытую спецификой.

Следующую причину Мустай Карим подмечает в поверхностном, не глубоком познании культур разных народов. Есть народы, схожие по языку, культуре и их взаимообмен опытом может служить обогащением для дальнейшего культурного развития. В качестве примера, поэт приводит свое творчество. Являясь башкирским поэтом, литератором, воспевая культуру своего народа, выполняет свой интернациональный долг, знакомит другие народы с особенностями своей культуры.

Творчество Мустая Карима приходится на середину годов прошлого столетия. Уже в конце 70-х он отметил две тенденции в литературе, а значит и в культуре в целом. Первая – когда одни представители считают себя сторонниками всеобщей цивилизации – интернационалистами, свободными от национальных особенностей и ограничений. Что мы сейчас называем последствием всеобщей культурной глобализации. И вторая, сторонники которой опирались только на свои традиции, мироощущение, опыт и т.д. Считали, что национальной искусство должно принадлежать только своей нации. Поэты данной тенденции, по словам автора, искренне оберегают свое национальное искусство от влияний других культур. Но это может привести к серьезным проблемам, застою в развитии, так как прекращается информационный поток, обогащающий нацию. Карим данный процесс сравнивает с речкой в ауле, которую запрудили, чтоб иметь больше воды, в результате пруд превратился в болото. Так и в искусстве: «Когда в литературе и искусстве начинают прудить только свои национальные пруды, то застой неминуем» [1, с.88]. Поэт не отрицает, что национальная литература возникает из устного народного творчества, опирается на эстетический опыт, но также говорит о гармоничном сочетании национальных традиций с новыми художественными решениями, о творческом поиске и освоении опыта других народов, не теряя достоинства своей особенности, самобытности. По мере формирования национального сознания, через свое национальное искусство народ приходит к познанию мировых шедевров. «И потому на смену довольства своим, только потому, что оно – свое, пришла потребность, чтобы в произведениях своего национального искусства ставились проблемы не только национальные, но и проблемы интернациональные, проблемы века» [1, с.89]. Сохранить свое традиционное, национальное необходимо и для того, чтобы обогатить и дополнить современную национальную культуру, дать развитие уже сложившимся формам на другом качественном уровне.

Таким образом, идеи, философские взгляды башкирского поэта Мустая Карима актуальны и современны. Как творческий человек, он предвидел опасность утраты аутентичных культурных традиции, национальных особенностей в погоне за соответствие новым форматам времени. Тогда он называл в стремлении к новым интернациональным изменениям, забывая про национальные особенности, в данное время мы называем результатом всемирной культурной глобализации, цифровизации.

ЛИТЕРАТУРА:


1. Карим М. С. Притча о трех братьях. Воспоминания. Раздумья. Беседы. – М.: «Сов. Россия», 1978. – 288с.
2. Кильмухаметов Т.А. Драматургия Мустая Карима (своеобразие жанровой эволюции). – Уфа: Башкирское книжное издательство, 1979. – 224 с.
3. Архипова О.В. Российское образование в контексте постнеклассической культуры и глобализации. Режим доступа – www.gramota.net/materials/3/2011/5-1/3.html


© Додонова С.Г., 2019

***Зөбәйерова Ҡ.Х.,***
*магистрант, БДУ, Өфө ҡ.*
***Вәлиева Г.Д.,***
*филол. ф. к., доцент, БДУ, Өфө ҡ.*

# МОСТАЙ КӘРИМДЕҢ "ЯРЛЫҠАУ" ӘҪӘРЕНДӘ ТЕЛ-ҺҮРӘТЛӘҮ САРАЛАРЫ

Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәримдең ижады уҡыусыларҙың ихтирамын яулап ҡына ҡалманы, бәлки башҡорт халҡының рухи ҡаҙанышы, милли ғорурлығы булып әүерелде. Мостай Кәрим әҫәрҙәренең иң яҡшы өлгөләре башҡорт әҙәбиәтенең алтын фондын тәшкил итә, уның ижады күп милләтле илебеҙҙең әҙәбиәт үҫешенә лә ыңғай йоғонто яһай.

Мостай Кәрим ижадының тел-һүрәтләү сараларына байлығы хаҡ. Уны өйрәнеп, беҙ туған телебеҙҙең хазиналары матурлығын, күркәм сараларҙың әҫәр рухын һәм тормош ысынбарлығын еткереүҙәге хеҙмәтен күҙәтә алабыҙ. Башҡортостандың халыҡ шағиры, мәҙәниәтебеҙ аҡһаҡалы Мостай Кәрим ижадына мөрәжәғәт итеүсе ғалимдар – Ғ.Ғ. Сәйетбатталов [4], В.Ш. Псәнчин [4], М.В. Зәйнуллин [1], һәм башҡа бик күп телселәр уның теленең үҙенсәлеклеген күрһәтә. Шулай ҙа, бөгөн дә, Мостай Кәрим ижадының телен өйрәнеүҙә актуаль мәсьәләләр етерлек. Уларҙың береһе – уның әҫәрҙәрендә үҙенсәлекле тел-стиль алымдары. Мостай Кәрим әҫәрҙәрендә традицион тел-һүрәтләү саралары – лексик һәм ассоцитив саралар яҡшы уҡ өйрәнелһә лә, яҙыусы тарафынан үҙенсәлекле рәүештә ҡулланылған лингвистик алымдар тикшеренеүселәрҙе көтә.

Быны иҫәпкә алып, үҙ эшебеҙҙә Мостай Кәримдең “Ярлыҡау” повесына мөрәжәғәт иттек. Халыҡ әҙибенең “Ярлыҡау” повесы Бөйөк Ватан һуғышы йылдарына арналған булыуынан бигерәк әҙәбиәтебеҙҙә һуғыш темаһына бәйле әхлаҡи проблемаларҙы күтәреп сығыуы менән оло ваҡиға булды. Заманаһына күрә “Ярлыҡау” повесы кешелеклек мәсьәләләренең ҡуйылышы күҙлегенән оло ҡыҙыҡһыныу уята. Повесть теле – үҙе үк үҙенсәлекле бер күренеш.

Повестың тәүге битен асайыҡ. Мостай Кәримдең моңло, фәлсәфәүи теле эске бер мәғәнәүи көс менән яңғырай. Уҡыусыға бындай тәҫьир итеү көсөн тыуҙырыуҙа халыҡ әҙибенә үҙенсәлекле тел-һүрәтләү саралары ярҙамға килә. Тәүге абзацты уҡыйбыҙ: “Үлем язаһын көтөүҙән дә ғазаплыраҡ, шомло, фажиғәле сәғәттә уйлай торған уймы инде был? Уй тигәнең уй ҙа түгел – хәтерләү генә. Ҡыуыш тышында йөрәк елкендергес айлы төн. Ҡыштыр-ҡыштыр япраҡ ҡойол. Йәнтимерҙең егерменсе көҙөнөң япраҡтары. Ҡайһы береһе,ергә һуғылып, сыңлап китә. Уғаҡ япрағы шулай сыңлайҙыр, моғайын. Ҡайындыҡы булмаҫ. Улар йомшаҡтар. Япраҡ менән бергә әллә ай нурҙары ла сыңлап һибеләме, тағы? …Тулған ай бала саҡтан уҡ Йәнтимерҙең күңеленә һағыш ҡатыш ниндәйҙер ғәм һала ине. Бына әле лә шулай. Алда икеһеҙ-сикһеҙ, яҡты төн. Ҡараңғы, яуымлы, елле булһа, бәлки, ул еңелерәк үтер ине. Тымыҡ күл шикелле, ул тынып ҡалған. Аҡмай ҙа, тулҡынланмай ҙа” (“Ярлыҡау”, 5-се б.) Бында Мостай Кәрим, иң беренсе, ҡабатлауҙарҙы ҡуллана: уй-уй, япраҡ-япраҡ. Икенсе осраҡта, яҙыусы әҙәбиәт өсөн хас үҙенсәлекле сара – пейзаж күренештәре менән кешенең хис-тойғоларын, эске донъяһын ағыштырыу ярҙамында психологик көсөргәнешлек тыуҙыра. Өсөнсөнән, яҙыусыға әҫәрҙә бигерәк тә киң ҡлуланылған синонимдар һәм эпиттеттар, сағыштырыуҙар ярҙамға килә:1) Синонимдар: ғазаплы, шомло; яуымлы, елле; тымыҡ, тын; 2) Эпитеттар: фажиғәле сәғәттә, тулған ай, яҡты төн, йөрәк елкендергес айлы төн; 3) Сағыштырыу: тымыҡ күл шикелле. Бындағы өҙөктә грамматик характерҙағы тел саралары ла байтаҡ. Мәҫәлән, алмаштарҙан төҙөлгән һөйләм: Бына, әле лә шулай; ҡылымдарҙан ғына тороусы һөйләм: Аҡмай ҙа, тулҡынланмай ҙа. Яҙыусы өҙөктә

риторик һөйләмдәрҙе киң ҡуллана: “Үлем язаһын көтөүҙән дә ғазаплыраҡ, шомло, фажиғәле сәғәттә уйлай торған уймы инде был? Япраҡ менән бергә әллә ай нурҙары ла сыңлап һибеләме, тағы?”

Әҫәр башындағы бер генә абзац өҙөгөн өйрәнеү Мостай Кәрим теленең повеста ни тиклем бай булыуын күрһәтә. Традицион тел саралары “Ярлыҡау”ҙа, ысынлап та, бик күп. Яҙыусы тарафынан ниндәй үңҙенсәлекле тел-һүрәтләү саралары ҡулланыла икән? Ниндәй грамматик күренештәрҙе йәки тел хазиналарын М. Кәрим стилистик маҡсатта уңышлы файҙалана. Беҙ ошо мәсьәләне асырға ынтылдыҡ.

Иң беренсе сиратта, Мостай Кәрим тарафынан кеше исемдәренең үҙенсәлекле ҡулланылышын әйтер инек. Ысынлап та, оло әҙиптең әҫәрендәге һәр исем үҙенә хас мәғәнәүи үҙенсәлекккә эйә һәм күркәм, мәҫәлән:

Любомир Зух. Автор төп геройға үҙенсәлекле исемде юҡҡа ғына һайламаған. Атама авторҙың фекерен белдерә һәм символик функция башҡара, Любомир Зух – мөхәббәт алдында кешенең төп тәғәйенләнеше, асылы ҡаршыһында һуғыштың ни тиклем түбән, хәшәрәт булыуынан һынландырыусы образ, унның исеме лә быны раҫлап тора; Любо+мир, йәғни донъяны яратыусы, донъяның ятратҡаны. Тимәк, антропонимға тәү сиратта символик һәм перспективалы (автор фекерен белдереү) функциялары хас.

Мария Тереза. Любомир Зухтың һөйәгәненә һайланған исем дә символик мәғәнәгә эйә. Ул эстетик һәм мифологик функциялар башҡара әҫәр телендә. Сөнки Мария – славян халыҡтары мәҙәниәтендә изгеләрҙән-изге исем булып “һөйөү, яратылыу” мәғәнәһен асыҡлаусы оним булһа, Тереза – католик дине мәҙәниәтендәге мифологик ырымдарға алып барып тоташтырып, тел аңында атаманың “боронғо хәтерен” актуалләштерә.

Йәнтимер Байназаров – антропоним әҫәр тексында эстетик функция башҡарып, һалдаттың ҡыйыулығына, рухи ныҡлығына ишара. Башҡорт халҡының яугирлығын һәм Бөйөк Ватан һуғышы йауҙарында дошманға ҡаршы батырлығын автор шул рәүешле тел сараһы ярҙамында сағылдыра.

Әҫәрҙең антропонимдар системаһында үҙҙәренә генә хас эстетик функция үтәүсе башҡа атамалар ҙа бар. Яҙыусының ижади фантазияһы һөҙөмтәһендә тыуған антропонимик материал әҫәр тексының үҙенсәлеген һәм шартлылығын тыуҙыра кеүек. Шундай атамалар араһында Петруська Демьянов, Мардан Гарданов кеүек исемдәрҙе осратабыҙ. Улар – авторҙың шартлылыҡҡа ишараһы ғына түгел, ә әҫәр тексының экспрессивлығын көсәйтеү маҡсатында, төрлө атамалар ҡулланыу, образлылыҡты арттырыу маҡсатындағы эше һөҙөмтәһе.

Әҫәрҙә рус һәм башҡа славян халыҡтарына хас антропонимдарҙың иркәләү-кесерәйтеү мәғәнәләрендә ҡулланылыуы уларҙың әҫәр тексындағы экспрессив функцияһын арттыра. Любо, Нюра, Васютка кеүек антропонимдар художестволы текстың реалистик һүрәтләү көсөн арттыра, хис-тойғо биҙәктәрен өҫтәй.

Художестволы маҡсаттан сығып, Мостай Кәрим үҙенең әҫәрендә донъя кимәлендәге әҙәби ижад емештәрендә сағылған йәки халыҡ әҙәбиәтенән билдәле антропонимдарҙы ла ҡуллана. “Ярлыҡау” тексында Эсмеральда, капитан Феб, Квазимодо кеүек атамалар осрай, улар инглиз теленән килеп ингән һәм донъя мәҙәниәте өсөн әһәмиәтле исем-символдар. Автор антропонимдарҙы телмәрҙе байытыу һәм геройҙарҙы ҡылыҡһырлау өсөн ҡуллана.

Мостай Кәрим “Ярлыҡау” повесы телендә һуғыш осоронда киң ҡулланылған жаргонизмдарҙы, һалдат һөйләшендә ҡулланылған һүҙҙәрҙе киң файҙалана. Улар әҫәр теленә үҙенсәлекле колорит биреп, уны биҙәй, һуғыш ысынбарығына яҡынайта, айырым бер стилистик биҙәк өҫтәй. Мәҫәлән: “Лейтенантиктар-касатиктар”, – тип кенә тора (16-

сы б.). “Хотел”дең ишектәре teләһә кемгә асыҡ, документ һорап та, алып та тормайҙар (17-се б.) Ашау эсеү мәшәҡәте булмаған, йыбанып тормай, “купец” бәхетен юллап, үҙ кәсебе артынан китте, Ласточкин аҙыҡ-түлек фронтындағы эҙләнеүҙәрен дауам итергә йүнәлде (27-се б.). Улар “виллистары”на ултырып китеп тә барҙы (121-се б.). Былдай төр лексик берәмектәр, күбеһенсә рус теленән булһа ла, һуғыш мәле һүҙҙәренә ҡарауы менән бик үҙенсәлекле. Улар повесть телен байтып, уны дөйөм әҙәби телдән айырып киләләр.

Мостай Кәримдең әҫәрҙәрендә тел-һүрәтләү сараларына мөрәжәғәт итеп, беҙ халыҡ яҙыусыһы ижадының ни тиклем бай булыуын, уның үҙенсәлеклеген күрҙек. Әҙип һүҙ ынйылары менән маһир эш итә, уның телендә традицион тел саралары яңы төҫ ала. Шуның менән бергә, Мостай Кәрим башҡорт әҙәби теленең башҡа мөмкинлектәрен дә белеп, уларҙы “Ярлыҡау” повесында уңышлы файҙалана. Мәҫәлән, геройҙарының исеменә үҙенсәлекле мәғәнәләр һалыу, һуғыш ваҡыты жаргон теле берәмектәрен биреү – былар , һис шикһеҙ, Мостай Кәримдең тел табыштары.

ӘҘӘБИӘТ:


1. Зәйнуллин М.В. Хәҙерге башҡорт теле: морфология. – Өфө, 2002. – 423 б.
2. Кәрим М. Ярлыҡау. – Өфө: Башҡ. Китап нәшриәте, 1986. – 302 бит.
3. Псәнчин В.Ш. Телдең күркәмлек саралары. – Өфө, 1984. – 224 бит.
4. Сәйетбатталов Ғ.Ғ. Башҡорт теленең стилистикаһы һәм пунктуацияһы. –Өфө, 1978. – 211 бит.
5. Сәйетбатталов. Стилистика: 6 том. – Өфө: Китап, 2006. – 487 бит.
6. Сәйетбатталов. Стилистика: 9 том. – Өфө: Китап, 2009. – 480 бит.


© Зөбәйерова Ҡ.Х., Вәлиева Г.Д., 2019

***Ибраһимова Т.Т.,***
*магистрант, БДУ, Өфө ҡ.*
***Гәрәева Г.Н.,***
*филол. ф. д, профессор, БДУ, Өфө ҡ.*

**ГӨЛСИРӘ ҒИЗЗӘТУЛЛИНАНЫҢ “ҺӘҘИӘ” РОМАНЫНДА ӘҘИБӘ ҺӘМ УСМАН ОБРАЗДАРЫ**

Башҡорт әҙәбиәтендә роман жанрының тамырҙары үткән быуаттың 20-се йылдарына барып тоташа. Ғәйнан Хәйри тарафынан яҙылған “Боролош” романы башҡорт әҙәбиәтендә был жанрға нигеҙ һалғандан алып бөгөнгө көнгә тиклем тиҫтәләгән роман яҙыла. Роман жанрының йөкмәткеһе, формаһы, стилендәге сыбарлыҡ, схематиклыҡ, натурализм, һәм башҡа кире яҡтар бөтөрөлә.

Бөгөнгө XX быуаттың 70-80-се йылдар башҡорт романдары художестволылығы, юғары кимәле, йөкмәткеһе, стиле менән айырыла. Был хаҡта Ә.Х. Вахитов: “Современный башкирский роман - это целый художественный мир с большим идейно-эстетическим и социально-нравственным содержанием, разнообразными типами формы, богатым поэтическим арсеналом”, - ти [1, 25].

Хәҙерге әҙәбиәт донъяһында кешенең күңел донъяһына тәрән үтеп инеү, уның хис-тойғо кичерештәре донъяһының ҡуйы картинаһын тыуҙырыу әҙәби оҫталыҡтың билгеһе тип һанала. Фәндә әҙәби әҫәрҙең эмоциональ торошо, хис-тойғо биҙәктәренең байлығы һәм күңел нескәлеге “психологизм” алымына бәйләнә. Ошо өлкәлә

Гөлсирә Ғиззәтуллина ижады үҙенсәлеклеге менән айырылып тора. Был автор башҡорт ҡатын-ҡыҙының рухи донъяһын, психологияһын нескә аңлаған һәм үҙенең әҫәрҙәрендә бик оҫта сағылдырған яҙыусы. Уның трагик яҙмышлы Һәҙиә Дәүләтшинаға арналған “Һәҙиә” романы ҙур популярлыҡ яуланы. Яҙыусы һәр образдың психологик яҙмышын асыҡ итеп һүрәтләүгә ирешә.

Күренекле ғалим Г.Н. Гәрәева билдәләүенсә, Г. Ғизззәтуллина-Ғайсарова әҫәрҙәре – ҡатын-ҡыҙ яҙмыштарынан тыҡылған һәм яҙыусының күңел донъяһы аша һыҙылып үткән ғүмер тәжрибәһе емеше ул. [2, 38] Яҙыусы ҡәләме хикәйә-повестарҙа шымарып, тормошсан образдарҙың эске халәтен биреү оҫталығына ирешә. Г. Ғизәтуллина-Ғайсарова үҙенең тәүге “Һәҙиә” романын тамамлап, 2007 йылда уны “Ағиҙел” журналы биттәрендә баҫтырып сығара.

“Һәҙиә” романы – хәҙерге әҙәбиәттә һәр яҡлап үҙенсәлекле әҫәр. Уның үҙәгендә башҡорт әҙәбиәте тарихында яҡты эҙ ҡалдырған күренекле әҙибә – Һәҙиә Дәүләтшинаның трагик яҙмышы тора. Роман сағыу психологик стилдә яҙылған, уға эмоциональ-экспрессив һүрәтләү алымдары, эске драматизм һәм ҡуйы хистәр, сағыу буяуҙар хас.

“Һәҙиә” романындағы психологик һүрәтләү алымдары Г. Ғиззәтуллина ижадында яңы художестволы үрҙәрҙе аса.

Психологизмдың сағыу бер өлгөһө булған “Һәҙиә” әҫәрен Г. Ғиззәтуллина ике образ тирәләй ҡора. Нимә ул образ? Художестволы образ – ул әҫәрҙең йөкмәтке менән форма берлеген сағылдырыусы төп берәмек. Образ төшөнсәһе дүрт мәғәнәлә йөрөй: Беренсенән, образ тип художестволы әҫәрҙә һүрәтләнгән кешене – затты атайҙар. Персонаж, герой, характер тигән күренештәрҙең барыһы өсөн ул дөйөм исем вазифаһын үтәй. Икенсенән, әҫәр тарафынан һүрәтләнгән тормош картиналарының дөйөм һанын атау. Өсөнсөнән, образ тигәндән беҙ ысынбарлыҡтың дөйөм ҡанундарына хас булған иң типик үҙенсәлектәрҙе шиғриәтле итеп сағылдыра алған тормош күренештәре. Дүртенсенән, «образ» һүҙенә ҡайһы ваҡытта үтә тар йөкмәтке лә һалып йөрөтәләр, шиғри телмәргә конкретлыҡ һәм нәфислек биреүсе һәм күбеһенсә символик характерҙағы әйбер һәм хайуандарҙы шулай атайҙар.

Образ төшөнсәһенең дүрт мәғәнәһе лә йәшәүгә хаҡлы. Уның дөйөм һәм абстракт төшөнсәләргә, идеяларға, йән өрә алыусы, уларҙы кешенең көндәлек тормошона яҡынайта алыусы конкретлыҡ сифатына иғтибарҙы айырыуса йүнәлтергә кәрәк. Художестволы образдың тағы бер мөһим үҙенсәлеге – ассоциативлыҡ [5, 33].

Шулай итеп, Г. Ғиззәтуллинаның геройҙары Әҙибә һәм Усмандың уй-кисерештәре, күңел тороштары, тойғолар һәм хәтирәләр донъяһы әҫәрҙең композицион бөтөнлөгөн һәм төп художестволы һыҙаттарын билдәләй. Авторҙың хәл-ваҡиғаларҙы һүрәтләүе ниндәйҙер ҡалыптарҙан азат, сөнки тасуирлау геройҙарҙың холоҡ-фиғелдәре, ҡылған ҡылыҡтарын, хәтирәләрен сағылдырыу аша бара. Романдағы өҙөк-өҙөк тасуирлауҙарҙы Әҙибә-Усман мөнәсәбәттәре өлкәһенә индерергә булыр ине. Әммә әҙибәнең тормошо, ил, халыҡ тураһындағы уйланыуҙары, төрмә хәтирәләре һәм һығымталары геройҙың эске донъяһын асыуҙы күҙаллай һәм уға арналған бүлектәр персонаждың психологик портретын биреүҙе маҡсат итеп ҡуя.

Усман образы ла романдың художестволы төҙөлөшөн билдәләй, сөнки айырым бүлектәрҙә автор Усмандың тормош тәжрибәһен, юғары партия эшендәге хеҙмәт дәүерен, Әҙибә менән булған осрашыуҙарынан ҡалған тәьҫораттарын һүрәтләй һәм уның характерын асырға тырыша.

Әммә Усман образы психологик роман төҙөлөшөндә күберәк Әҙибәнең рухи асылына ҡапма-ҡаршы ҡуйылған образ, минеңсә. Ул психологик һүрәтләү барышында инсаф тәбиғәтле Әҙибәгә контраст булып тора.

"Һәҙиә" романында ижтимағи мөнәсәбәттәрҙең йөкмәткеһе һәм асылы геройҙар Әҙибә һәм Усмандың шәхсән кисерештәре һәм хәтирәләре призмаһы аша бирелә. Яҙыусы илдә барған ваҡиғаларға, осорға хас ҡатмарлы ижтимағи күренештәргә, мәҫәләнән, репрессияларға, партия ҡарарҙарына, идеологияһына тап Усман һәм Әҙибәнең донъяға ҡараштары, хәтирәләре һәм уй-кисерештәре аша баһа бирә. Эске психологизм "Һәҙиә" романының төп сюжет өлөшөн алып тора, геройҙарҙың кисерештәре бөтә әҫәр буйынса эҙмә-эҙлекле үҫтерелә килә. Яҙыусы геройҙарҙың тойғо-кисерештәре менән эш итә, уларға йән өрә. Бына Усмандың Әҙибәнең әҫәрен "күсерер" алдынан тойғо-кисерештәренән бер һүрәтләмә: "Теләк мейенең бер аулаҡ ҡына күҙәнәгендә тамырланды ла, нығынғандан-нығынып, үҙенең айырым бер тормошо менән йәшәй башланы"[4, 39]. Тышҡы психологизм "Һәҙиә" романында урыны-урыны менән һүрәтләү барышында килеп инә.

Г. Ғиззәтуллина хәҙерге прозала психологик пейзаж оҫтаһы булараҡ билдәле, әммә "Һәҙиә"лә пейзаж мотивтары бер-нисә урында ғына экспрессия тыуҙырыу сараһы булараҡ килеп инә. Уның ҡарауы, психологик портрет геройҙың эске кисерештәренә үтеп инеү алымы сифатында бик урынлы файҙаланыла. Бер генә миҫалға иғтибар итәйек: " Урламаным мин, - тип ҡысҡырып ебәрҙе. – Урламаным. – Кеҫәһенән ҡулъяулығын алып, битенә бәреп сыҡҡан һалҡын тирен һөртә-һөртә ялбарҙы"[4, 40].

Яҙыусы персонаждарҙың ысынбарлыҡҡа бәйле төрлө психик хәленә бер яҡлы ғына түгел, күп ҡырлы ҡылыҡһырлау аша, йәғни геройҙарҙың ҡиәфәтендәге, үҙ-үҙен тотошондағы, телмәр, ҡул-ишара, кешенең төрлө физиологик үҙгәрештәрендәге характерлы күренештәрҙе сағылдырыу ярҙамында ирешә. Был осраҡта автор кеше организмында барған үҙгәрештәргә лә иғтибар итә, психологизм өсөн бөтә төр психик һәм физиологик үҙгәрештәр ҙә мөһимлеген иҫкә алып ижад итә.

Гөлсирә Ғиззәтуллинаның "Һәҙиә" романы һәр йәһәттән башҡорт прозаһында йөкмәткеһе буйынса ла, Һәҙиә Дәүләтшина образын фәлсәфәүи, экспрессив планда асыуы, художество үҙенсәлектәренең сағыулығы яғынан да ваҡиға булырлыҡ әҫәр. Роман, тәү сиратта, Һәҙиә Дәүләтшина шәхесенә бөгөнгө замана бейеклегенән, хәҙерге башҡорт зыялылары ҡараштарынан сығып баһа биргән, әҙәби процесҡа яңы һулыш индереүсе әҫәр булып тора.

ӘҘӘБИӘТ:


1. Вахитов А.Х. Жанр и стиль в башкирской прозе. Литературоведческая монография. – Уфа: Башкирское книжное издательство, 1982. – 352 с.
2. Гәрәева Г.Н. Башҡорт прозаиктары: әҙәби портреттар. – Өфө: Китап, 2010. – 485 б.
3.Гәрәева Г.Н. Хәҙерге проза үҙенсәлектәре. – Өфө, 2009. – 212 б.
4. Гәрәева Г.Н. Замана көҙгөһө: геройҙың рухи донъяһы. – Өфө, 2003. – 247 б.
5. Ғайсарова - Ғиззәтуллина Г. Һәҙиә: роман // Ағиҙел. – 2007. – №5. – 5–91 биттәр.
6. Әхмәтйәнов.К.Ә. Әҙәбиәт теорияһы. – Өфө, 2014. – 390 бит


© Ибраһимова Т.Т., Гәрәева Г.Н., 2019

***Иҙелбаев М.Х.,***
*филол. ф. д., профессор,БДУ, Өфө ҡ*

# МОСТАЙ КӘРИМДЕҢ ”САЛАУАТ” ТРАГЕДИЯҺЫ: ТӨП ГЕРОЙ ОБРАЗЫ ҺӘМ ӘҪӘРҘЕҢ ЖАНР ТӘБИҒӘТЕ

Халҡыбыҙҙың милли геройы Салауат Юлаев образы башҡорт совет әҙәбиәтенең бөтә жанрҙарында ла тиерлек билдәле дәрәжәлә сағылдырылған. Драма әҫәрҙәре был йәһәттән айырым урын алып тора. Сәхнәлә Салауат образын тыуҙырыуҙың үҙ тарихы бар тиһәк тә, хата булмаҫ. Ул башҡорт совет драматургияһының тарихы менән тығыҙ бәйләнгән.

Быйыл М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры үҙенең йөҙөнсө миҙгелен асты. 1919 йылда Стәрлетамаҡ ҡалаһында ойошторолғанда уҡ унын сәхнәһенә Салауат образы иң тәүге репертуарҙар иҫәбендә сыға. Республиканың тәүге дәүләт театрын булдырыу уңайы менән Ырымбурҙан махсус саҡырылған режиссер Вәлиулла Мортазин иң тәүгеләрҙән М. Буранғоловтоң «Ашҡаҙар» һәм Ф. Сөләймәновтың (Абдулҡадир Инандың) “Салауат” драмаларын сәхнәләштерә. Шул ваҡыттан алып бөгөнгө көнгә тиклем төрлө авторҙарҙың (Сәғит Мирас, Дауыт Юлтый, Баязит Бикбай менән Ғ. Сәләм, Мостай Кәрим һ. б.) милли батырыбыҙға арналған драма әҫәрҙәре Башҡортостан театрҙырында ҡуйыла килә. Тимәк, Салауат Юлаевтың да драматургиялағы һәм театр сәхнәһендәге образына йөҙ йыл, тигән һүҙ. Ошо күренешкә үҙенең тос өлөшөн индергән Мостай Кәримдең шулай уҡ йөҙ йыллыҡ юбилейы айҡанлы был мәҡәләлә уның “Салауат” трагедияһына ғына туҡталабыҙ.

Трагедия ХХ быуаттың 70-се йылдары башында донъя күрҙе. Композитор Заһир Исмәғилевтың Баязит Бикбай либреттоһына ижад иткән “Салауат Юлаев” операһының тамашасыларға тәү башлап күрһәтелеүенән һуң егерме йылға яҡын ваҡыт үткәйне инде. Был осор эсендә башҡорт драматургияһы ҙур үҙгәрештәр кисереп өлгөрә. Проблемалар киңлеге, конфликттар ки9кенлеге, характерҙар сағыулығы менән ул ил кимәлендәге иң һәйбәт өлгөләргә тиңләшә, тормоштоң социаль күренештәрен анализлауҙа, персонаждарҙың эске донъяһын асыуҙа күҙгә күренерлек уңыштарға өлгәшә. “Салауат” трагедияһы “Ағиҙел” журналында баҫылып сыҡҡас та, бер үк ваҡытта тиерлек Башҡорт дәүләт академия театрында, Сибай дәүләт театрында ҡуйыла. «Ай тотолған төндә» трагедияһы, «Айгөл иле» романтик драмаһы кеүек үк, илебеҙҙең башҡа халыҡтары сәхнәһенә сыға. “Салауат”ты күҙ уңында тотоп, кабардин-балҡар шағиры Ҡайсын Кулиев: «һуңғы йылдарҙа иң күренекле драма әҫәрҙәренең башҡорт шағире тарафынан яҙылыуына мин бик шатмын»,— тип белдерә.

Һәр автор үҙенең геройҙарын уларға ҡарата мөнәсәбәтенән, шәхси концепцияларынан сығып, әҫәрҙә ҡуйылған проблемаларға буйһондороп сағылдыра. Ошо маҡсаттан сығып, «Салауат» трагедияһында М. Кәрим ғәжәп ҡатмарлы композиция төҙөлөшөн һайлаған. Тәү ҡарамаҡҡа хәл-ваҡиғалар теҙмәһе эҙмә-эҙлекле түгел һымаҡ: ихтилал баҫтырылғандан һуң халыҡ araһында Салауатты язалау -- батырҙың зиндандағы уйҙары -- Бердала Пугачев станы -- һуғыштың иң дәһшәтле күренешәренең береһе -- тағы зиндан -- Балтик диңгеҙендәге утрау. Ләкин Салауат образы, автор бирергә теләгән идея менән бергә тамашасының күҙ алдында эҙмә-эҙлекле үҫә барып, бөтә тулылығында кәүҙәләнә. Юғарыла һанап кителгән хәл-ваҡиғаларҙы Мостай Кәрим әҫәргә индерелгән шағир образының өн аралаш төштәре рәүешендә килтереп ҡуя. Был яңы форма халыҡтың героик үткәнен күтәренке-романтик һәм фәлсәфәүи-трагик планда һындандырырға, бынан ике быуат элек булғанды бөгөнгө менән айырылғыһыҙ килтереп бәйләргә ярҙам иткән. Персонаж-шағир ул ваҡиғаларҙы

хәҙерге заман күҙлегенән ҡарай, тарихи шәхестәрҙе лә бөгөнгө көн баһаһы аша күҙ алдынан үткәрә. Шағир аңында тыуған герой образы ниндәйҙер һыҙаттары менән ысынбарлыҡтағы Салауаттан бәлки айырылалыр ҙа. Сөнки автор уны, әйткәнебеҙсә, беҙҙең көндәр һулышына бәйләп күҙ алдына килтерә. Салауат сиркәү аҫтындағы дымлы зинданда үҙенең ҡылған эштәренең дөрөҫмө-түгелме икәнлеге хаҡында баш вата икән, быны беҙ һис тә батыр ысынбарлыҡта шулай уйланғандыр, тип ҡабул итмәйбеҙ, ә драматургтың теләгенә ярашлы рәүештә, легендар батырҙың ысын асылын, ихтилалдың быуаттарға һуҙылған тарихи әһәмиәтен, шул дәһшәтле ваҡиғаларҙың бөгөнгөгә тығыҙ бәйлелеген асығыраҡ тоябыҙ. Трагедия картиналарын өн аралаш төш итеп күреүсенең философ йәки тарихсы, йә булмаһа башҡа һ0нәр эйәһе түгел, ә фәҡәт шағир тип алыныуына иғтибар итәйек. Ярһыу һәм шиғри күңеле менән Салауат ошо шағирға оҡшаш. Тимәк, уның күңел рухы ла беҙҙең көндәр рухына килеп тоташа. Шәфҡәтлелек, кешелеклелек үлсәмдәре Салауат өсөн дә, хәҙерге заман кешеһе өсөн дә бер үк. Дошманына ҡарата саҡ ҡына ла йәлләү, аяу тойғоһо булмаған Салауат яҡшылыҡҡа ғәжәп һиҙгер итеп кәүҙәләндерелә әҫәрҙә. Шағир-Салауаттың шул сифатын һыҙыҡ өҫтөнә алыусы айырыуса асыҡ бер эпизод бар. Уны үлтерергә килгән Байыш тархан улы Илеш, батырҙың абруйын, ҡөҙрәтен, хаҡ эшен күреп, уйынан кире ҡайтҡас, яңы ғына ҡан дошманы булған кешеһенең ышандырырлыҡ йөрәк һүҙен ишетеп, Салауат уға:

*Һүҙ көсөнә ышанамын — мин шағирмен,*
*Һүҙең менән еңдең мине, Илеш,*
*Эргәмдә ҡал,* --
*тип яуап бирә [1, 145].*

Әҫәрҙә Салауат үҙенең бөтә булмышы менән халыҡ күңеленә шул ҡәҙәре һеңгән -- уның образының иң характерлы һыҙаттары башҡа персонаждарҙың мөнәсәбәте аша тағы ла сағыуыраҡ асыла. Бына Салауаттың халыҡ күңеленә яҡынлығы, бөйөклөгө:

**Беренсе кеше.** Батыр! Беҙҙең ҡандан, беҙҙең йәндән
*Яралдың һин. Һәм бөтәбеҙ өсөн*
*Күтәрәһең ауыр ғазаптарҙы [1, 104]*

Батырҙың һоҡландырғыс сифаттарын дошмандың да танымай сараһы юҡ. Уға ҡылған эштәренән ваз кисеп, тәүбә ҡылырға тәҡдим яһаған Язалаусыны һорауының нәфрәт менән кире ҡағылыуы ярһыта. Геройҙың тәбиғи матурлығын биреү өсөн ифрат оҫта алым ҡулланылған: уның йөҙөн, ҡиәфәтен автор ентекләп тасуирләп тормай, уларҙы бөтә тулылығында образлы сағылдырыу өсөн шул уҡ Язалаусы ауыҙынан әйттерә:

*Эйе, батыр, һин ереңә ғашиҡ,*
*Илеңә ғашиҡ, ҡатыныңа ғашиҡ.*
*Ғашиҡ булған өсөн матурһың һин,*
*Яуыз! [1, 109].*

Тамашасы ла әҫәрҙе шағир образы күҙлегенән күрә. Юҡ, ихтилал һәм уның юлбашсылары бер генә кешенең ҡарашынан сығып баһаланмай, һәр образда, ваҡиғала, күренештә объектив дөрөҫлөк ярылып ята: ихтилалдың рухи көсө, тарихи роле, әһәмиәте, Салауаттың бөйөклөгө, ялҡынлы һүҙе, халыҡтың уға хөрммәте, еңелүүҙең әсе кисерелеше, баш күтәреүселәрҙең ғорурлығы — барыһы ла художестволы ысынбарлыҡҡа яҡынайта .

Әҫәрҙең ғәҙәттән тыш формаһы образдарға ҙур йөкмәтке һалған. Ш а ғ и р Салауат менән бөгөнгө көн араһындағы рухи уртаҡлыҡты билдәләй. Я з а л а у с ы Байыш тархан менән аҡ батша араһында торған бөтә дошмандарҙың кәүҙәләнешен бирә,

Г ө л н ә з и р ә, А н у, П е т р, И л е ш һәм башҡаларҙың һәр ғайһыһы айырым социаль төркөм вәкилен тәшкил итә. Ә С а л а у а т исеме герой образын сағылдырыу менән генә сикләнмәй, ул тарих, бөгөнгө ысынбарлыҡ, ваҡыт һәм мәңгелек мәғәнәләренә эйә. Шағир образының аҙаҡҡы монологында был мәғәнәләр һыҙыҡ өҫтөнә алып бирелә. Ваҡытты туҡтатып булмаған кеүек, шағирҙең: «Туҡта, Салауат! Туҡта! Эштәрең хаҡ, ғазаптарын изге, гөнаһтарын юҡ һинең. Салауат!»—тип саҡырыуына иғтибар итмәй, төп герой диңгеҙ төбөнә, мәңгелеккә инеп юғала. Шағир һүҙҙәре менән әйткәндә: «Әгәр ҙә беҙ йәшәйбеҙ икән, тимәк, ул тере!..»

”Салауат”тың ошондай тамамланышына бәйләп, уның жанр тәбиғәтенә бер аҙ туҡталыу урынлы булыр. Әйтергә кәрәк, милли геройыбыҙ образы башҡорт әҙәбиәтенең бөтә төрҙәрендә лә сағылыш тапты. Шиғриәттә уға мөрәжәғәт итмәгән шағир юҡтыр, тиһәк тә хата булмаҫ. Эпик төрҙә, бигерәк тә романдарҙа Салауат образы һуңлабыраҡ, асылда XX быуат аҙағынан ғына һынландырыла башланы. Шуларҙың бөтәһе араһында төп геройҙың яҡты донъянан китеүе тәү башлап Мостай Кәрим трагедияһында ҡуҙғатылды. Хәтеремдә, әҫәр театр сәхнәләренә сыҡҡас, Салауаттың диңгеҙ төбөнә китеүе тамашасыларҙа төрлөсә тәьҫир ҡалдырҙы; күптәр был эпизодты геройҙың үҙенә ҡул һалыу, тип ҡабул итте һәм, әлбиттә, бының менән һис тә ризалашырға теләмәне. Төрлө имеш-мимештәр ҙә тарала башланы. Хатта Мәскәү баҫмаларының береһендә Салауат Юлаевҡа арналған бер мәҡәлә “он покончил собой” тип тамамланғайны.

Мостай Кәрим әҫәре 1970 – 1971 йылдарҙа ижад ителгән. Ә Салауаттың үлеменә ҡағылышлы документ тәүге тапҡыр 1973 йылдың ғинуарында баҫылып сыҡты. Милли геройыбыҙ тураһындағы быға тиклемге сәхнә әҫәрҙәренән айырмалы рәүештә, автор трагедия жанрын һайлаған. Трагелияла төп герой фажиғәһе мотлаҡ сағылыш сағылыш табырға тейен ине... Драма төрөнөң драма жанрында ла үҙәк образ йыш ҡына һәләк була. Унан айырмалы рәүештә, трагедияла герой йәмғиәттең үҙгәртә алмаҫлыҡ законлыҡтарына ҡаршы сыға, шул арҡала ҡотолғоһоҙ фажиғәгә дусар ителә. Трагедия фажиғәһе бары тик үлем генә тигәнде аңлатмай. Салауаттың яҙмышы – уның ап-асыҡ миҫалы. XVIII быуат Рәсәйе шарттарында күтәрелгән ихтилал еңелгәндән һуң үлем язаһына хөкөм ителмәй, Рогервик крепосына ғүмерлек каторгаға ебәрелеүе -- шулай уҡ ҡотолғоһоҙ, бәлки үлемдән дә аяуһыҙыраҡ фажиғә. Трагедияла ошо фажиғәгә лә нигеҙләнеп була ине. Заманында авторҙың үҙе менән һөйләшкәндә, ул: “Диңгеҙгә инеп юғалыуҙы мин үлем түгел, ә мәңгелеккә инеү тип күрһәтергә теләнем”, -- тип яуап биргәйне. Күрәһең, былай ҙа мөмкиндер. Тамашасыларҙың төрлөсә ҡабул итеүе – икенсе мәсьәлә.

Бер һүҙ сыҡҡанда, милли геройыбыҙ яҙмышына бәйле өсөнсө мәсьәләне лә ҡуҙғатмау мөмкин түгел. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, уның аяуһыҙ фажиғәһе бөгөнгө көндә ҡайһы бер замандаштарыбыҙ аңында юйыла төшкәнгә оҡшай башланы: тотҡондоң каторга дәүеренә ҡағылышлы документаль сығанаҡтар менән һис ниндәй уртаҡлығы булмаған бүтән төрлө имеш-мимештәр тамыр йәймәксе. XX быуат аҙағында Башҡортостандан Эстонияның Палдиски ҡалаһына барған делегацияны урындағы Салауат Юлаев музейы менән таныштырған хеҙмәткәр: “Салауатҡа башҡорт байҙары аҡса ебәреп торған, шуға күрә ул каторга шарттарында ла оҙаҡ йәшәгән”, -- тимәһенме! Хәҙерге көндә ошондайыраҡ һүҙҙәр донъяны баҫып бара. Күптән түгел БСТ каналында йәштәр менән әңгәмә үткәргән ихтирамлы бер шәхесебеҙ: “Салауат Рогервик крепосында үҙ аҡсаһына сиркәү төҙөткән, бына кемдән үрнәк алырға кәрәк” – тип хәбәр һала. Ә бит ихтилалдан һуң Салауат Юлаевтың ҡайҙа ебәрелгәнлеге Башҡортостанда 1940 йылда ғына билдәле була. Былай барһа, йәш быуын берәй заман Салауаттың кем икәнлеген дә онотмаҫмы?

Милли геройыбыҙҙың тере образын күреү өсөн һүҙ сәнғәтендә иң яйлыһы, моғайын, драма төрөләр. Уның яҙмышына иң ярашлыһы иһә, әлбиттә, трагедия жанры. Үрҙә әйтелгәндәрҙе иҫкә алғанда, йәш быуын өсөн Салауатҡа арналған тағы бер трагедия ла ҡамасауламаҫ ине. Бының менән мин һис тә Мостай Кәрим “Салауат”ы үҙ тәғәйенләнешен үтәп, урынын бушатырға тейеш, тип әйтергә теләмәйем. Әҫәрҙе ҡабат-ҡабат уҡып, театр сәхнәләрендге ҡуйылыштарын ҡалдырмай ҡарап, ни бары бер нисә генә кәлимә иҫкәрмә әйтерлек урындар таба алдым.

Драматургик материалда Юлай Аҙналиндың вазифаһы “кантон”, Салауаттыҡы “старшина” тип ысҡындырыла [1,113, 12]. Башҡортостанда кантонлыҡ тәртиптәре 1798 йылда индерелә; Өфө һәм Сембер генерал-губернаторы И. А. Игельстромдың тәүге ынтылыштары ла 1789 йылға ҡарай. Был ваҡыттарҙа каторгала ултырған Юлайҙың кантон башлығы булыуы мөмкин түгел. Ә Салауат Шайтан-Күҙәй олосоноң старшинаһы вазифаһын Емельян Пугачев менән осрашҡан саҡта түгел, атаһы Польша походына киткән йылдарҙа ғына (1771 - 1772) башҡара. Байыш тархан Башҡортостанда хан булырға тырыша, тип күрһәтелә [1, 154]. Был исемгә, тарихта билдәле буйынса, Сыңғыҙ хан вариҫтары ҡына дәғүә итә алған. Алтын Урҙа дәүләтенең аҙаҡҡы дәүерендә бөтә Еваразияны тиерлек үҙ ҡулына төшөргән Аҡһаҡ Тимер ҙә хатта үҙен хан тип түгел, әмир тип атаған.

Күрәһегеҙ, былдай ғына теүәлһеҙлектәр трагедияның художество ҡиммәтенә бер нисек тә йоғонто яһай алмай. Художестволылыҡ тураһында һүҙ ҡуҙғатылғас, әйтеп китәйек: әҫәрҙең, шулай уҡ Мостай Кәрим ижадының иң ҙур ҡаҙаныштарының береһе – Көнсығыш һүҙ сәнғәте традициялары нигеҙендә ҡапма-ҡаршылыҡҡа – һүҙ-ара, һүҙбәйләнеш-ара, һөйләм-ара антитезаларға, антетик күренештәргә ҡоролоуы. Бының өсөн миҫалдар килтерә алмайым: трагедияны тотошлай уҡып сығыу ғына кәрәк.

ӘҘӘБИӘТ:


1. Әхмәтйәнов К. А. Әҙәбиәт теорияһы. – Өфө: Башҡ. кит. нәшр., 1971. - 358 б.
2. Кәрим Мостай. Әҫәрҙәр. Биш томда, IV т. – Өфө: Башҡ. кит. нәшр., 1972. - 416 б.


© Иҙелбаев М.Х. 2019


***Исянгулова Г.А.,***
*д. филол. н., доцент, БашГУ, г. Уфа*
***Ишкильдина И.Г.,***
*магистрант, БашГУ, г. Уфа*


## ПОДРАЖАТЕЛЬНЫЕ СЛОВА, ВЫРАЖАЮЩИЕ ВНУТРЕННИЕ ОЩУЩЕНИЯ И ЧУВСТВА ЧЕЛОВЕКА, В СОВРЕМЕННОМ БАШКИРСКОМ ЯЗЫКЕ

По семантическому различию подражательные слова в современном башкирском языке делятся на звукоподражательные и образоподражательные [2, 343].

Звукоподражательные слова (өноҡшатыу һүҙҙәре) передают звуки, производимые теми или иными живыми существами, различными предметами и природными силами. Они обозначают понятия о звучании и часто употребляются самостоятельно. Например: *сый итте*! (завизжал), *сип-сип* (писк цыпленка), *безззз* (жужжание насекомых), *дөп-дөп* (глухой удар, стук), *геү* (шум), *шығыр-шығыр* (скрип), *быш-быш* (шептать), *туҡ-туҡ* (стук), *келт-келт* (тиканье часов) и т.д. Примеры: Аяҡ аҫтында ҡар шығыр-шығыр килә

«Под ногами снег хрустит». Стеналағы сәғәт келт-келт минуттарҙы һанай «Настенные часы, тикая, считают минуты».

Образоподражательные слова (һыноҡшатыу һүҙҙәре) выражают образы, представления о световых явлениях, впечатления от движения и состояния. Они редко употребляются самостоятельно, часто сопровождаясь словами, уточняющими их значение. Например: *йылт-йылт итә* (сверкание), *ем-ем килә* (блеск предмета), *елбер-елбер килә* (легкое колыханье), *йылп итеү* (мгновенно исчезнуть), *тырт-мырт итеү* (капризное поведение) и т.д. Пример: Азат ҡурҡышынан йылп итеп ҡалды «Азат от страха мгновенно исчез».

Каждая из указанных групп имеет общие и отличительные признаки. Как отмечает Н. А. Баскаков, «общим у них является то, что они выражают не названия звуковых и двигательных образов, а являются непосредственными их выражениями. А их отличие заключается в том, что звукоподражательные слова передают звуки, производимые теми или иными живыми существами, предметами или природными силами, а образоподражательные слова дают представление о движениях и световых явлениях, возникающих по принципу своеобразного подражания, но перенесенного в область чувственных реакций человека (зрительное восприятие, движение и т.д.)» [1: 235].

Таким образом, подражательные слова обозначают подражание различным звучаниям, выражают представление о световых явлениях, создают образ или впечатление о действии или состоянии.

Образоподражательные слова, имея непосредственную связь с чувственно-зрительным восприятием действия или состояния, представляют собой как бы снимок реального образа. Некоторые из них передают сложную картину, состоящую из целого ряда образных представлений.

В современном башкирском языке образоподражательные слова можно классифицировать следующим образом:

1) слова, выражающие движения людей. Это образные слова, которые выражают различные манеры ходьбы, походки. Сюда же относятся слова, выражающие движения головы, глаз, бровей, ресниц, губ, ушей человека;

2) слова, выражающие движение животных, птиц, насекомых;

3) слова, выражающие движение неодушевленных предметов;

4) слова, передающие цвето-световые впечатления. В словах данной группы отражаются различные виды световых эффектов, воспринимаемых зрительным органом человека: мерцание звезд; сверкание молнии; вспышка, мелькание и мигание света, движение огня и т.д.;

5) слова, выражающие внезапность, мгновенность, стремительность движения и другого рода действий;

6) слова, выражающие внутренние ощущения и чувства.

Внутренние ощущения и чувства человека выражают следующие образоподражательные слова.

*Дер-дер*

Подражание дрожанию от испуга или нервного напряжения. Например: Дер-дер ҡалтырана ҡатыны «Жена дрожит от страха» (Д.Буляков). Мәстүрә балаһын ҡосаҡлаған килеш былар янына йүгереп килде лә дер-дер ҡалтырап торған иренең күкрәгенә ҡапланды «Мастура с ребенком на руках прибежала к ним и прижалась к груди дрожавшего мужа» (А.Хаким). Ул, әйтерһең, үтәнән-үтә туңған: дер-дер ҡалтырана «Он как будто замерз насквозь, дрожит как осенний лист» (М.Карим). Ҡурҡыуынан ни үле, ни тере, дер-дер ҡалтырап ятҡан Ғәлиәхмәт, иламһырап иңрәне «Галиахмет, который

лежал ни жив, ни мертв от страха, зарыдал» (Ф.Исянгулов). Береһе, тапма тоҡтандай дер-дер ҡалтырап, үкһергә тотондо «Одна начала рыдать, дрожа от страха» (А.Хаким).

*Дерт-дерт*

Подражание дрожанию от страха. Например: Йөрәк дерт-дерт итеп тора «Сердце сжимается от страха» (К.Мэргэн).

*Дрр*

Подражание дрожанию от холода. Пример: Тулҡындар килеп бәрелһә, дрр… тәнең семерҙәп китә «Если волны на тебя накатывают, по телу пробегают мурашки» (А.Бикчентаев).

*Жыу*

Передает ощущение сильного биения сердца и выражает страх. *Йөрәк жыу итеү*: фразеологизм со значением «сердце замерло, сердце оборвалось, ёкнуло». Например: Йөрәгем жыу итеп ҡалды «Мое сердце ёкнуло» (Д.Буляков). Ошо уйынан һуң йөрәге «жыу!» итеп ҡалды «Когда подумала об этом, сердце ёкнуло» (Д.Буляков). Ҡыҙҙың йөрәге жыу итеп китте «Сердце девушки ёкнуло» (З.Биишева). Шул саҡ Хәлфетдиндең йөрәге «жыу» итеп китте «Сердце Хальфетдина ёкнуло» (М.Карим). Беҙҙең кескәй йөрәктәребеҙ, ниндәйҙер бәлә һиҙеп, жыу итеп китте «Наши маленькие сердца, почувствовав беду, затрепетали» (М.Карим).

*Зембер-зембер*

Подражание ощущению судорог. Например: Бүлмәгә ингәс, аяҡтар зембер-зембер килеп йән әсеһенә әрнергә тотондо «Когда зашли в дом, ноги начали отчаянно ныть, их сводило судорогой» (Б.Нугуманов).

*Леп-леп, леп-леп-леп*

Подражание биению сердца. Например: Бер мәле йөрәге өс тапҡыр леп-леп-леп итеп сәнсешеп тибеп ҡуйған «Ее сердце три раза кольнуло» (М.Карим). Тигеҙ тын алып йоҡлай сабый, йөрәге леп-леп тибә «Малыш спит, его сердце бьется ровно» (Б.Нугуманов). Йөрәк, күбәләк кеүек осоноп, леп-леп тибә «Сердце трепещет, как бабочка» (Г.Лукманов).

*Лерк*

Подражание трепету, вздрагиванию. Например: Йөрәгем лерк итеп ҡалды, ҡыуанысымдан ҡанат үҫкәндәй булды «Сердце затрепетало от радости, как будто у меня выросли крылья» (Н.Мусин). Ишек алды яҡтараҡ торған егетте күргәс, Сәлимгәрәйҙең күңеле лерк итеп ҡалды «Увидев парня, стоявшего у дверей, Салимгарей вздрогнул» (Н.Мусин).

*Семер-семер*

Подражание ощущению озноба, мурашек на теле. Пример: Ҡуҙғалмаҡсы инем, тәнем тыңламай, семер-семер килеп, барлыҡ тамырҙарым тартыша «Хотел встать, тело не слушается, мышцы немеют, будто мурашки по телу бегают» (Б.Нугуманов).

*Терт*

Подражание вздрагиванию (от испуга). Примеры: Фәйрүзәнең йөрәге терт итеп ҡалды «Сердце Файрузы ёкнуло» (Д.Буляков). Шул саҡ Сынбулаттың һиҙгер йөрәге терт итеп ҡалды «Чуткое сердце Сынбулата вздрогнуло» (Д.Буляков). Ҡапыл телефон шылтыраны, Фәйрүзә терт итеп ҡалды «Зазвенел телефон, Файруза вздрогнула» (Д.Буляков). Ағаһы шуны йырлаһа, Ғәмбәрә терт итеп ҡала «Когда брат поет эту песню, Гамбаре становится не по себе» (Ф.Исянгулов). Ҡәләмдәров терт итеп ҡуйҙы «Калямдаров вздрогнул» (Ф.Исянгулов). Ток һуҡҡан ише терт итеп ҡалдым «Вздрогнул, будто меня током ударило» (Ф.Исянгулов).

*Терт-мерт*

Подражание вздрагиванию (от испуга). Пример: Йомошсо егет мадъяр бейҙәренең киләсәген инеп әйткәс, күңеле терт-мерт итеп кенә торған Әмәшәнең ҡото осто «Когда слуга сообщил о визите мадъярских беев, Амаша, которая вздрагивала от любого шороха, пришла в ужас» (Б.Рафиков).

*Терт-терт*

Подражание вздрагиванию (от испуга). Пример: Ҡыҙҙың тубыҡтары ҡалтырана, йөрәге, сабыйҙыҡы һымаҡ, терт-терт тибә ине «У девушки загибаются колени, сердце вздрагивает, как у младенца» (Н.Мусин).

*Тырҫ-мырҫ*

Подражание вздрагиванию. Пример: Өйрәнмәгән ерҙә Гөлназ әллә ни эшләп тырҫ-мырҫ килеп кенә йоҡлай, иртүк уяна «В чужом месте Гульназ спит очень чутко, вздрагивает, рано просыпается» (Б.Нугуманов).

*Тырҫ-пырҫ*

Подражание резким движениям при приступах гнева, при обиде. Пример: Ҡыҙыҡай тырҫ-пырҫ баҫып сатыр артына инеп китте «Девушка, обидевшись, ушла за шатер» (Б.Рафиков).

*Тырт-мырт*

Подражание резким движениям при приступах гнева, при обиде. Примеры: Ҡунаҡтың кем икәнен белгәс, тәүҙә тырт-мырт баҫып, өҫтәл артындағы икәүгә һыртын биреп йөрөгән, кухняла һауыт-һабаны шылтыратып иҙәнгә төшөргән «Узнав, кто пришел в гости, обиделась, отвернулась, гремела посудой на кухне» (Ф.Исянгулов). Шул саҡ эргәмә әлеге Абдразаҡ тырт-мырт баҫып килде лә: «Уйындың тәртибен боҙма!» – тине «В это время подошел обиженный Абдразак и сказал: «Не мухлюй!» (Н.Мусин). Бигерәк әллә нисек һөйләшәһең инде, Айытбай, өҙөп-йолҡоп, тырт-мырт итеп «Как-то не так ты разговариваешь, Аитбай, нехотя, с обидой» (Н.Мусин). Хәтирә тырт-мырт атлап өйгә бер инде, бер сыҡты, ниндәй эшкә барып тотонорға белмәй йөрөнө «Обидевшись, Хатира то заходила в дом, то выходила, не знала, чем себя занять» (Н.Мусин).

*Һулҡ-һулҡ*

1. В значении «напряженно думать» или «болит голова». Примеры: Мейеһе ошондай уйҙарҙан һулҡ-һулҡ килде «Мозги закипели от мыслей» (З.Ураксин). Һәр хәрәкәт һайын мейеһе һулҡ-һулҡ килә, хатта тәненә тир бәреп сыҡты «От любого движения голова раскалывалась, от напряжения даже вспотел» (Н.Мусин).

2. Подражание сердцебиению. Например: Фәһимдең йөрәге һулҡ-һулҡ итте «Сердце Фагима затрепетало» (И.Гиззатуллин). Һулҡ-һулҡ йөрәге сәнсеп алды «Сердце защемило» (Б.Нугуманов). Тәрәнгәрәк төшкән һайын йөрәге һулҡ-һулҡ «Чем ниже спускался, тем сильнее билось сердце» (Б.Нугуманов).

Итак, в данную лексико-семантическую группу входят 15 образоподражательных слов.

Как видно из примеров, подражательные слова широко употребляются как в устной речи, так и в художественной литературе, вызывая конкретный, яркий, картинный образ отражаемых ими звучаний, движений, явлений, подчеркивая их выразительность, живость и динамичность.

ЛИТЕРАТУРА:

1. Баскаков Н.А. Каракалпакский язык. Т. 2. Фонетика и морфология. Ч. 1. Части речи и словообразование. – М.: Изд-во АН СССР, 1952. – 544 с.

2. Грамматика современного башкирского литературного языка. – М.: Наука, 1981. – 495 с.
3. Йосопов Х.Ғ. Башҡорт телендә оҡшатыу һүҙҙәре. – Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1971. – 88 бит.
4. Исянгулова Г.А. Подражательные слова в современном башкирском литературном языке (структурный, лексико-семантический и синтаксический аспекты). – Уфа: РИЦ БашГУ, 2015. – 136 с. – 8,5 п.л.
5. Исянгулова Г.А. Словарь подражательных слов башкирского языка. – Уфа: РИЦ БашГУ, 2015. – 84 с. – 5,25 п.л.
6. Исянгулова Г.А. Лексико-семантическая классификация образоподражательных слов в современном башкирском языке // Вестник Башкирского университета. – 2012. – Т. 17. № 3 (I). – С. 1490-1491.
7. Ишмухаметов З.К. Звукоподражательные слова башкирского языка: автореф. дисс. … канд. филол. наук. – Уфа, 1970. – 20 с.

© Исянгулова Г.А., Ишкильдина И.Г., 2019

***Иҫәнғолова Г.А.,***
*филол. ф. д., доцент, БДУ, Өфө ҡ.,*
***Йылҡыбаева Р.И.,***
*магистрант, БДУ, Өфө ҡ.*

## ХӘҘЕРГЕ БАШҠОРТ ТЕЛЕНДӘ СИФАТ (ЛЕКСИК-СЕМАНТИК ҺӘМ ФУНКЦИОНАЛЬ АСПЕКТТАР)

Сифат предметтарҙың, әйберҙәрҙең, күренештәрҙең, хәл-ваҡиғаларҙың, кешеләрҙең һәм башҡа йән эйәләренең төрлө билдәләрен статик планда, йәғни даими белдереүсе һүҙ төркөмө һанала. Мәҫәлән: Яландарҙы ужымдың йәшел балаҫы япҡан. Һәйбәт ҡышланы быйыл арыш, уңыш насар булмаҫҡа тейеш. Ә тау битләүҙәрендә, өрһәң, осоп китерҙәй генә тойолған елбәҙәк йәшеллек тора: унда ҡайындар ҡыуанышып япраҡ ярған. Ергә һылашып ятып ҡышлаған, үҙ ғүмерҙәрен киләсәк өсөн һәләк иткән ҡаулан төптәренән кемуҙарҙан нәфис, йомшаҡ үләндәр ҡуйы булып шытып сыҡҡан (Н. Мусин). Аҡ блузка, ябай ғына итеп тегелгән ҡара юбка; күҙҙәре – һоро, ғәжәп асыҡ, балаларса эскерһеҙ ҡараш йөрәгеңә үтеп инә; йөҙө аҡ, унан яңы һауған һөттән бәрелгән төҫлө ниндәйҙер күңел иреткес хуш еҫ бөркөлгән кеүек. Сәстәре оҙон, икенән үреп түшенә һалындырылған (Н.Мусин).

Морфологик йәһәттән сифаттар үҙгәрмәүсән һүҙ төркөмөнә ҡарай, тик төп сифаттар ғына дәрәжә формалары менән үҙгәрә. Яһалышы буйынса сифаттар түбәндәге төрҙәргә бүленә:

1. Тамыр сифаттар. Миҫалдар: Оҙон ҡара сәстәре майлайына шыуышып төшкән, шоморт ҡара күҙҙәре, яуап көтөп, өмөт менән ҡарай (Н. Мусин). Аҡ халатлы ҡыҙ, аҡ күбәләктәй, палатанан шым ғына атлап сығып китте (Н. Мусин). Пинжәгенең төймәләрен, хатта күлдәк иҙеүен дә ысҡындырып ебәргән. Зәңгәр галстугы ултырғысы башында элеүле тора. Бөҙрәләнгән ҡуйы сәсенең бер шәлкеме артыҡ тәрән булмаған һырҙар ҡаплаған киң маңлайына һалынып төшкән. Атаһы мәхрүмгә оҡшап, киң яурынлы, көрәктәй ҡуллы; алға сығып торған ыҡсым эйәге, танау япраҡтары эргәһенән түбәнгә табан тартылған тәрән һыҙаттар уға ҙур ихтыяр көсөнә эйә булған кеше ҡиәфәтен бирә. Ә бына дуғаланып торған, ҡыҙҙарҙыҡынса нескә ҡаштары уның ҡырыҫ ҡиәфәтен йомшарта төшкән кеүек (Н. Мусин).

2. Яһалма сифаттар. Миҫалдар: Төптән йыуан Ҡара Йомағол, шешенке ҡабаҡтары аҫтындағы ҡыҫыҡ күҙҙәрен сылт-сылт йомоп, Оло инәйемә инәлә һалды (М. Кәрим). Инсафлы ҡыҙҙар һымаҡ шым ғына аҡкан йылға буйына урынлашҡан был йәйләү артыҡ ҙур түгел (К.Мәргән). Ниса апайым сыҙаманы, теге йырыҡ ауыҙҙар алдына килеп баҫты (М.Кәрим). Райвоенкоматтан аҡһаҡ капитан бик йәтеш кәңәш бирҙе (М.Кәрим).

Хәҙерге башҡорт телендә түбәндәге сифат яһаусы аффикстар продуктив иҫәпләнә:

-лы, -ле, -ло, -лө: йәйәү+ле, дәрәжә+ле, кәрәҙ+ле, борос+ло. Миҫалдар: Төпкө бүлмәнән ҡыҫҡа еңле крепдешин күлдәк кейгән еңел кәүҙәле ҡыҙ килеп сыҡты (Н. Мусин). Күҙ йәшендәй саф һыуҙарын ғүмер баҡый төбөндә ятып йышылып-йомроланып бөткән эреле-ваҡлы таштарға бәрә-бәрә, сылтырап ҡына ағып ята (Н. Мусин). Уға аҡыллы күҙҙәре менән һүҙһеҙ генә ҡарап торҙо (Н. Мусин). Ашнаҡсыларҙы интектереп, оло ҡаҙанда оҙаҡ ҡына ҡайнаған һарыҡ ите сүмәләләй өйөлгән хәлдә, ләззәтле боҫ сығарып, тәмле еҫ борҡоп, табын уртаһына килеп ултырғас ҡына, ҡунаҡтарҙың күҙендә йәнләнеү күренде (К.Мәргән).

-һыҙ, -һеҙ, -һоҙ, -һөҙ: сик+һеҙ, тәм+һеҙ, тоҙ+һоҙ, йүн+һеҙ. Миҫалдар: Торғаны бер һис ниндәй гонаһһыҙ бала (Н. Мусин). Ул ошо зарарһыҙ тәҡдимдең үҙе өсөн ыңғай яғын күптән тотоп алған (К. Мәргән). Иҫәнғол аңһыҙ түрә түгел ине (К. Мәргән). Уңышһыҙ юл Шаҡман түрәнең кәйефен боҙҙо (К.Мәргән). Элеккесә ҡотһоҙ бәндәнең алдына килеп баҫҡанын күргәс, күптәнге танышын ҡаршылағандай, ул хатта аяғүрә торҙо (К.Мәргән). Ҡатындар күңеле төпһөҙ даръя, төбөндә ниҙәр ятҡанын ҡайҙан беләһең?! (М.Кәрим). Гонаһһыҙ сабыйға хәтерем ҡалды шул саҡ (М.Кәрим).

-сан, -сән: һүҙ+сән, эш+сән, мауығыу+сан. Миҫалдар: Ул Тамъян ерендәге башҡорттарҙың ғәжәйеп эскерһеҙ, кешегә тиҙ ышаныусан, бер ҡатлы икәнлеген күреп, сикһеҙ шатланды (К. Мәргән). Бөйөк аллаға тағы бер мөрәжәғәт иткән дә ер йөҙөндә уның тыңлаусан ҡолдары барлығын әйткән (К. Мәргән). Уйсан һәм моңсан тәбиғәтле яҡташтарының йөрәге аша үтеп, киләсәк быуындарға барып етерлек күренекле һәм ғибрәтле ваҡиға булып күҙ алдына баҫты (К.Мәргән).

-ғы, -ге, -ғо, -гө, -ҡы, -ке, -ҡо, -кө: һуң+ғы, ҡыш+ҡы, өҫ+кө, төн+гө. Миҫалдар: Көҙгө мәлде көтөп торманы, тап йәйге йыйын ваҡытында ҡып итеп килеп тә төштө (К. Мәргән). Үҙенән олораҡ һәм дәрәжәлерәк башҡа хандар үрнәгендә ул да кәйефле сағында барып ҡайтыу өсөн, дәрәжәлерәк ҡунаҡ килгәндә сығып елләнеп, кәйеф-сафа ҡороп алыу өсөн, йәйге һарай булдырырға ҡарар иткәйне (К.Мәргән).

Ҡышҡы кистәр күкһеллеге аша

Эҙҙәр һалып күпме үтмәнем? (М.Кәрим).

-лыҡ, -лек, -лөк, -лоҡ: ҡабым+лыҡ, аҙна+лыҡ, йыл+лыҡ, доктор+лыҡ. Миҫалдар: Таш эшенә тигән һүҙ, бигерәк тә хан һарайына булһа, ғүмерлек һөргөн тигән һүҙ (К. Мәргән). Үҙенең ҡара көсө менән донъяһын аҡтарып, меңәр алтынлыҡ мал килтерерлек таҙа беләкле, мыҡты кәүҙәле егеттәр килеп эләкте (К. Мәргән). Ләкин төбәлгән ер алда ине әле, сама менән тағы бер нисә аҙналыҡ юл ҡалған булырға тейеш ине (К. Мәргән).

-сыл, -сел, -сөл: көн+сөл, ҡунаҡ+сыл, бәлә+сел, ваҡ+сыл. Миҫалдар: Бигерәк бәләсел кеше шул! (Н. Мусин). Баҫҡан еренән ут сығарып торған, егәрле, тәрбиәсел киленен ярата ине ҡарт (Н. Мусин). Ләкин уның хәсрәте бүтән, үлемсел хәсрәт түгел (М.Кәрим).

-ғыс, -гес, -ҡыс, -кес, -гөс, -көс: йонсот+ҡос, тонсоҡтор+ғос, иҫерт+кес. Миҫалдар: Фал китабын асып, Шаҡман түрәнең үткәнен һәм бәхетле киләсәген әйтеп биргәндән һуң, төрлө мауыҡтырғыс ваҡиғалар менән тулған яҙма китап уҡып күрһәтте (К. Мәргән). Тәбиғәттең һоҡланғыс мәле бар: таң алды (К. Мәргән). Солан ишеген асыу менән, уны һөттә генә ыҙырап, бығыр-бығыр бешеп ултырған тары бутҡаһының иҫерткес еҫе ҡаршы

алды (М.Кәрим). Нөгөш буйҙарына етер алдынан улар икеһе өсөн дә сикәнес һәм өшөткөс тойғо килтергән илгә тап булдылар (К.Мәргән).

-ма, -мә: ҡой+ма, һайлан+ма, йыйыл+ма. Миҫалдар: Хужаһынан ҡалған яҙма китаптарҙы тейәп, Ҡазан ҡалаһына килде (К. Мәргән). Хан менән бергә мул ғына тәғәм итеп алырға ниәтләнгән вәзирҙәрҙең йөҙөндәге яһалма йылмайыу юғалды (К.Мәргән). Шешмә ҡабаҡтарын ҡалҡытып, йот күҙҙәре менән яңы килгән яугирҙе баштан-аяҡ йүгертеп ҡарап сыҡты (К.Мәргән). Һарайын да киңәйтте, өҫтәмә бүлмәләр эшләтте (К.Мәргән).

3. Ҡушма сифаттар. Улар өс төркөмсәгә бүленә:

Парлы сифаттар. Миҫалдар: Әлеге магнолия япрағына икенсе көндө мин ошондай уҡ моңһоу-шаян хат яҙҙым (М.Кәрим). Уның аҡ яулыҡ түгел, аҡлы-ҡыҙыллы яулыҡ болғауын үтендем (М.Кәрим). Оло инәйем ул йылды йомортҡа һалмай дуғаҙаҡ йөрөгән ала ҡаҙҙы аҡлы-ҡаралы миҙгелдең төҫө итеп миңә атаған (М.Кәрим). Ҡара көҙҙөң ел-дауыллы ҡараңғы төнө ине (М.Кәрим).

Бәйле сифаттар. Миҫалдар: Тәҙрә ҡапҡастарын йәшелгә, түбәһен асыҡ ҡыҙылға буятты (М.Кәрим). Бауыр ауырыуы менән яфаланған ҡара һары битле, кибеп күгәргән иренле, быҫҡып ҡына торған һоро күҙле капитан Зухты йөҙөн һытып тыңланы (М.Кәрим).

Ҡабатлаулы сифаттар. Миҫалдар: Мәрәһим дә, ҙур-ҙур усмаларҙы, ҡарағош ҡанат елпегән һымаҡ һелтәп, артына йышыраҡ әйләнеп һала башланы (М.Кәрим). Борма-борма тау юлы, бөркөү һауа беҙҙе бик ныҡ йонсотто (М.Кәрим). Тар-тар урамдар, кәкре-бөкрө тыҡрыҡтар буйлап, әле тегендә, әле бында боролоп, байтаҡ ара үттек (М.Кәрим). Ағас ҡырҡтылар улар, йыуан-йыуан таҡталар ярҙылар (К.Мәргән).

Синтаксик планда сифат ғәҙәттә һөйләмдә аныҡлаусы функцияһын үтәп йөрөй. Мәҫәлән: Бәлә тап ана шул Шүшмә буйҙарына һуҙылған ҡалын урман эсендә килеп баҫты уның алдына (К.Мәргән). Алты мөйөшлө, бейек болдорло, ҡалай түбәле йорт һалдырҙы Талип (М.Кәрим). Шәфҡәтһеҙ һүҙҙәр, шәфҡәтһеҙ команда (М.Кәрим). Әллә ниндәй ырымлы, мөғжизәле төн булды был (М.Кәрим).

Сифаттар хәбәр вазифаһында ла килеүе мөмкин. Мәҫәлән: Һеҙ йәшһегеҙ, матурһығыҙ, уңғанһығыҙ (М.Кәрим). Ул әүәлгесә үк – үҙе баҫалҡы, үҙе алсаҡ, үҙе итәғәтле (М.Кәрим). Серҙең ҡанаты етеҙ (М.Кәрим). Ат тәпәшәк, ер йомшаҡ (М.Кәрим). Ҡулығыҙ бәләкәс, ҡаҡса икән (М.Кәрим). Минең был иремдең ҡулдары ҙур, итләс. Ул бик көслө (М.Кәрим). Ҡатынығыҙҙың күҙҙәре аҡыллы (М.Кәрим). Бөтә ҡиәфәте – хәүефле, бөтә хәрәкәттәре – ҡурҡыныс (М.Кәрим).

Исемләшкән сифаттар килеш, күплек, эйәлек, хәбәрлек аффикстары ҡабул итәләр. Улар һөйләмдә эйә, хәбәр, аныҡлаусы, тултырыусы функцияһын башҡаралар. Миҫалдар: Ул аҡты ҡаранан айырмаҫ булды (М.Кәрим). Улар араһында ла төрлөһө килеп сыға: яҡшыһы бар, яманы бар, уҫалдары ла бар, ғүмер буйы башын эйеп, билен бөгөп йөрөгән мәхлүктәре лә бар (К.Мәргән). Аштың олоһо ла, кесеһе лә бар икән шул (М.Кәрим). Сыҙамһыҙға әйләнде йәштәр (М.Кәрим).

Сифаттарҙы семантик йөкмәткеһе һәм ҡулланылышы яғынан түбәндәге семантик төркөмдәргә бүлергә мөмкин:

1. Предметтарҙың, әйберҙәрҙең, төрлө күренештәрҙең төҫтәрен белдереүсе сифаттар: Төтөн бөтә тирә-яҡҡа таралды, ер өҫтөнә зәңгәрһыу монар булып ҡапланды (К.Мәргән). Бер аҙҙан инде күк йөҙө аллана төштө һәм күп тә үтмәй һарғылт төҫкә күмелде (К.Мәргән). Урамға ҡараған бер нисә тәҙрәгә эстән күкһел пәрҙә ҡоролған (К.Мәргән). Йылтыр ҡара төҫлө һарғылт ҡырыйлы алтын кирбес, өҫтәлдә тора (М.Кәрим). Уның көлһыу-һарғылт йөҙөнә ай яҡтыһы ятты (М.Кәрим). Ә тегендә диңгеҙ аҫтынан тәгәрәп

ай сыға. Ул – ҡып-ҡыҙыл (М.Кәрим). Күршебеҙҙә генә Сәғиҙә исемле сөм ҡара сәсле, ап-аҡ йөҙлө ярты етем һылыу ҡыҙ үҫте (М.Кәрим).

2. Кешеләрҙең физик, социаль һәм рухи хәлен, характерын, ҡылығын, аҡылын, холҡон, ғәҙәтен, эске һәм тышҡы ҡиәфәтен һәм башҡа сифаттарын белдереүсе сифаттар. Миҫалдар: Ҡаты бәғерле, һаран ҡуллы булып сыҡты ире (М.Кәрим). Ул һаран да, ҡомһоҙ ҙа түгел, киреһенсә, йомарт һәм игелекле кеше (М.Кәрим). Ул тәүге сәғәттә үк үҙен хәстәрсән, өлгөр иптәш итеп күрһәтте (М.Кәрим). Тыңсыл, уңған малай йорт эшендә лә, ҡыр эшендә лә йылдам булды (М.Кәрим). Ләкин ул ғәҙәттәгесә уйынсаҡ, һүҙсән түгел ине (М.Кәрим).

3. Хайуандарҙың һәм башҡа йән эйәләренең төрлө билдәләрен һәм үҙенсәлектәрен (холҡон, тышҡы ҡиәфәтен һ.б.) белдереүсе сифаттар. Мәҫәлән: Баяғы ялбыр Гусар (эт) тағы килеп сыҡты, йыуаш ҡына өргөләп, ҡунаҡты бер аҙ оҙата барҙы ла туҡтап ҡалды (М.Кәрим). Ала кәзә бер генә тапҡыр мекерләне лә тынды (М.Кәрим). Әммә йыш ҡына ерән эткә һелтәнгән таяҡ ҡара эт башына төшөргә мөмкин (К.Мәргән).

4. Предметтарҙың, әйберҙәрҙең күләмен, формаһын, үлсәмен, бүтән төрлө тышҡы күренештәрен, эске билдәләрен, предметтың урыны буйынса билдәһен белдереүсе сифаттар. Миҫалдар: Ҙур бүлмәлә – түшәк-яҫтыҡһыҙ алты карауат (М.Кәрим). Мин ике ҡул урынына түп-түңәрәк ҡалын көлсә төҫлө ике ус ҡыҫтым (М.Кәрим). Оло инәйем менән беҙгә урыҫ ҡапҡалы, ҡалай түбәле, бейек болдорло өйҙәрҙең дә, ергә һеңеп бөткән балсыҡ аласыҡтарҙың да ишектәре шар асыҡ (М.Кәрим). Минзәләне байтаҡтан бирле йыйыштырылмаған бәләкәс кенә өй ҡаршыланы (К.Мәргән).

5. Тәмде белдереүсе сифаттар телдә киң ҡулланыла. Был төркөм сифаттар, башлыса, аҙыҡ-түлектең ниндәй тәмгә эйә булыуын белдерә. Миҫалдар: Башта беҙ берәр стакан әскелтем аҡ шарап эстек (М.Кәрим). Сөсө күмәс телде йоторлоҡ тәмле ине (М.Кәрим).

6. Предметтарҙың һәм әйберҙәрҙең билдәһен ваҡыт һәм урын буйынса белдергән сифаттар. Ваҡытты белдереүсе сифаттар йыл миҙгелдәрен һәм тәүлектең конкрет ваҡытын күрһәтә. Мәҫәлән: Ҡышҡы шатлыҡтың үҙ тарихы бар (М.Кәрим). Атаһы иҫкә төштөмө, Мозафар үҙенең бөтә тормош юлын хәтерләй башлай, төнгө йоҡолары оса (Н.Мусин).

*Яҙғы һалҡынса таң ине,*
*Аяҙ ине күк йөҙө,*
*Ай көмөш тәңкәләр сөйҙө*
*(М.Кәрим)*

Сифаттар үҙҙәренең лексик-грамматик һәм морфологик үҙенсәлектәренә ҡарап, ике төргә бүленәләр: 1) төп сифаттар, 2) шартлы сифаттар.

Төп сифаттар предметтарҙың, әйберҙәрҙең, хәл-ваҡиғаларҙың саф билдәләрен, йәғни үҙенә генә хас үҙенсәлектәрен туранан-тура, йәғни башҡа предметтарға мөнәсәбәтһеҙ белдерә: бай, ҙур, яҡшы, аҡыллы, зирәк, оло, матур, йәш, һомғол, йәшел, ҡыҙыл, түңәрәк, әсе. Миҫалдар: Таҙа, һылыу күңелле, киң яңаҡлы, йәйенкерәк танаулы, ҡуйы ҡара ҡашлы был егет шағир һәм полководец Салауат Юлаев ролен сәхнәлә уйнарға хыяллана ине (М.Кәрим). Аҡйондоҙҙоң матур ирендәрендә беленер-беленмәҫ кенә йылмайыу сағылып ҡалды (М.Кәрим). Үҙәк урамдарҙың береһендә беҙгә хайран сибәр, хайран һылыу бер ҡыҙ тап булды (М.Кәрим).

Шартлы сифаттар, киреһенсә, предметтарҙың, әйберҙәрҙең билдәләрен икенсе предметтарға бәйләнештә, мөнәсәбәттә сағылдыра, йәғни ваҡыт (йәйге көн), урын (ауылдағы йорт), материал (алтын сәғәт) яғынан билдәләй. Миҫалдар: Был төнгө хәлдәрҙе тикшергән хөкөм белгестәре иртәгәһен үҙҙәре шаҡ ҡатты (М.Кәрим). Ҙурыраҡтар өлөшөнә мулыраҡ та төштө: быларға еҫле һабын, бармаҡ буйы ғына

һауыттарҙа хушбый, кәкре тараҡ, кершән, баҡыр балдаҡ, тимер ҡумыҙ, аллы-зәңгәрле сәс үргес, еҙ эҫкәк шикелле нәмәләр эләкте (М.Кәрим). Унының аяғында ап-аҡ ойоҡ, тәрән резина калуш (М.Кәрим). Күк алашаны, бер келәтте, тимер һабан менән ағас тырманы, арба менән сананы яҙҙырып ҡайтты (М.Кәрим).

Төп (саф) сифаттар менән шартлы сифаттар араһында түбәндәге айырмалар бар: 1) төп сифаттарҙың дәрәжә формалары актив ҡулланыла, шартлы сифаттарҙың дәрәжә категорияһы юҡ; 2) шартлы сифаттар һөйләмдә, нигеҙҙә, рәүеш функцияһын үтәмәй, уларҙың ҡылым формалары яһалмай; 3) шартлы сифаттар төп сифаттарҙан конкрет мөнәсәбәттәрҙе белдереү йәһәтенән айырыла.

Шулай итеп, үҙенең семантик, морфологик һәм семантик үҙенсәлектәре буйынса, сифат башҡа һүҙ төркөмдәренән ныҡ айырыла.

ӘҘӘБИӘТ:
1. Башҡорт теле грамматикаһы. 2 том. Морфология / Яуаплы мөхәррире Х.В.Солтанбаева. – Өфө: Китап, 2018. – 312 бит.
2. Башҡорт телендә сифат һүҙ төркөмө. Методик күрһәтмәләр / Төҙөүсеһе М.Ә.Әхмәтов. – Өфө: БДУ, 1988. – 53 бит.
3. Башҡорт теле. Педагогия колледждары һәм училищелары өсөн дәреслек / Яуаплы мөхәррирҙәре Ғ.Ғ.Сәйетбатталов, Х.В.Солтанбаева. – Өфө: Китап, 2010. – 480 бит.
4. Грамматика современного башкирского литературного языка. – М.: Наука, 1981. – 495 с.
5. Зәйнуллин М.В. Хәҙерге башҡорт әҙәби теле. Морфология. – Өфө: БДУ, 2013. – 353 бит.

© Иҫәнғолова Г.А., Йылҡыбаева Р.И., 2019

***Иҫәнғолова Г.А.,***
*филол. ф. д., доцент, БДУ, Өфө ҡ.,*
***Хафизова А.А.,***
*магистрант, БДУ, Өфө ҡ.*

## Н.МУСИНДЫҢ "МӘҢГЕЛЕК УРМАН" ӘҪӘРЕНДӘ ҠУЛЛАНЫЛҒАН ФРАЗЕОЛОГИЗМДАРҘЫҢ ТӨРҘӘРЕ

Фразеологик берәмектәрҙең һәр саҡ берҙәм, бөтөн мәғәнәләре була. Ләкин фразеологизмдың дөйөм мәғәнәһе уны төҙөүсе компоненттарҙың мәғәнәләре ҡушылмаларына тиң булмаҫҡа мөмкин. Ошо яҡтан сығып, хәҙерге башҡорт телендәге фразеологик берәмектәрҙе лә өс төркөмгә бүлергә мөмкин: фразеологик ҡушылмалар (фразеологические сращения), фразеологик берҙәмлектәр (фразеологические единства) һәм фразеологик бәйләнештәр (фразеологические сочетания) [6, 88].

Ирекле һүҙбәйләнештәрҙең дөйөм мәғәнәһе тулыһынса ошо һүҙбәйләнештәрҙе төҙөүсе һүҙҙәрҙең лексик мәғәнәләренә бәйле: уларҙа дөйөм мәғәнә ошо һүҙбәйләнештәрҙе төҙөгән һүҙҙәрҙең мәғәнәләрен ҡушыуҙан килеп сыға. Мәҫәлән, утын килтереү һүҙбәйләнешенең дөйөм мәғәнәһе тулыһынса утын һәм килтереү һүҙҙәренең мәғәнәләренән барлыҡҡа килә. Ә фразеологик ҡушылмалар составындағы һүҙҙәрҙең айырым-айырым мәғәнәләре менән шул фразеологизм белдерә торған дөйөм мәғәнә араһында һис бер эске бәйләнеш булмай. Икенсе төрлө әйткәндә, фразеологик ҡушылмаларҙың дөйөм мәғәнәһе уларҙы төҙөүсе һүҙҙәрҙең лексик мәғәнәләре ҡушылмаларынан сыҡмай [1].

Фразеологик ҡушылма төҙөүсе компоненттарҙың береһе ошо фразеологик берәмектә генә ҡулланылып, үҙ аллы лексик мәғәнәгә эйә булмаһа, фразеологизмдың дөйөм мәғәнәһе менән уны төҙөүсе компоненттарҙың мәғәнәләре араһында бәйләнеш булмай. Мәҫәлән, башҡорт телендә зил-зибәр килтереү тигән фразеологик берәмек булһа ла, зил-зибәр тигән айырым ҡулланылған үҙ аллы һүҙ юҡ. Бында мәғәнәһеҙ "һүҙҙең" (зил-зибәр) мәғәнәле һүҙ (килтереү) менән ҡушылмаһы нисек итеп "юҡ итеү, ҡыйратыу" мәғәнәһе биреүе бер нисек тә аңлашылмай. Шуға ла фразеологизмдың дөйөм мәғәнәһе менән уны төҙөүсе компоненттарҙың мәғәнәләре араһында бәйләнеш булыуы мөмкин түгел. Бындай фразеологик берәмектәр фразеологик ҡушылмалар була [2].

Н. Мусиндың әҫәрҙәрендә фразеологик ҡушылмалар нығынған һүҙбәйләнештәрҙең иң ҙур лексик-семантик төркөмөн барлыҡҡа килтерә. Миҫалдар: "Апайым күренмәҫме икән?" – тип ян-яғына күҙ ташлап алды ("Мәңгелек урман", 241-се бит). Мин дә теле–телгә йоҡмай шәп һөйләүсе бисәләрҙән бер ҙә ҡалышманым, тиһәм дә дөрөҫ булыр ("Мәңгелек урман", 241-се бит). Байгилдененң быны күреп үтә һарыуы ҡайнаны ("Мәңгелек урман", 105-се бит). Миңлегөл ләстит һатыусы ҡатындар янына туҡталды ("Мәңгелек урман", 270-се бит). Тышҡа сыҡҡас та, һалҡындан тыны ҡурылғансы ишек алдында йүгереп йөрөнө ("Мәңгелек урман", 298-се бит). Баяр күрәм тип килгән халыҡ зыҡ ҡупты ("Мәңгелек урман", 278-се бит). Ҡот осҡос язалы үлемде лә, иҫ киткес тыныс һәм ғорур ҡабул иттеләр ("Мәңгелек урман", 296-сы бит). Старшина ла теңкәһен ҡоротто ("Мәңгелек урман", 259-сы бит).

Былар барыһы ла хәҙерге башҡорт телендә фразеологик ҡушылмалар була. Шул уҡ ваҡытта, фразеологик ҡушылмалар араһында үҙ аллы йәшәмәгән һүҙҙәр менән бер рәттән хәҙерге башҡорт телендә булған һүҙҙәрҙән генә торғандары бар. Фразеологик берәмектең мәғәнәһе уны төҙөгән һүҙҙәрҙең мәғәнәләре ҡушылмаларынан килеп сыҡмағас, улар ҙа фразеологик ҡушылмалар була. Мәҫәлән, борсаҡ сәсеү фразеологизмы шундай фразеологик ҡушылмалар рәтенә инә. Уның сәбәбе бына нимәнән килеп сыға. Хәҙерге башҡорт телендә борсаҡ тигән исем дә, сәсеү тигән ҡылым да бар. Әммә был һүҙҙәрҙең мәғәнәһе борсаҡ сәсеү фразеологизмының дөйөм мәғәнәһе ни өсөн "маҡтаныу" була икәнен асыҡлауға ярҙам итмәй. Ысынлап та, борсаҡ менән сәсеү һүҙҙәренең бында ниндәй ҡыҫылышы бар һуң? Борсаҡ (үҫемлек) исеме менән сәсеү (таратыу, һибәләү) ҡылымы борсаҡ сәсеү һүҙбәйләнеше төҙөп, нисек "маҡтаныу" мәғәнәһе алған? [3] Быны аңлатыуы ҡыйын. Ләкин шуныһы асыҡ: фразеологизмдың дөйөм мәғәнәһе уны төҙөүсе һүҙҙәрҙең мәғәнәләре ҡушылмаларынан килеп сыҡмаған. Һәр хәлдә уны дәлилләүе ауыр.

Шулай итеп, составында хәҙерге телдә үҙ аллы, айырым һүҙ булып ҡулланыла торған һүҙҙәрҙең булыу-булмауына ҡарап, фразеологик ҡушылмаларҙың үҙен ике төркөмгә бүлеп ҡарарға мөмкин:

1) составында хәҙерге телдә үҙ аллы, айырым һүҙ булып ҡулланылмаған компоненты булған фразеологик ҡушылмалар: Баярҙың идараһына инеп пыр туҙҙырырға ниәтләнде ("Мәңгелек урман", 211-се бит). Бөтә урманға уны саҡырып яр һалып ебәрмәһенме! ("Мәңгелек урман", 266-сы бит);

2) составы хәҙерге телдә ҡулланылған һүҙҙәрҙән генә торған фразеологик ҡушылмалар: Старшина һәм баярҙар менән көрәшеп йөрөгәнендә лә ут йотто ("Мәңгелек урман", 310-сы бит). Эйе, Миңлегөлдөң йөрәге яныуын бер кем дә белмәй ине ("Мәңгелек урман", 301-се бит).

Фразеологик ҡушылмалар составындағы айырым һүҙҙәрҙе башҡа һүҙҙәр менән алмаштырыу йәки уларҙың тәртибен боҙоу мөмкин түгел. Улар шул борон-борондан ҡатып ҡалған формаларҙа ҡулланыла. Бындай фразеологик берәмектәр халыҡтың

һөйләү телендә киң таралған һәм экспрессив-эмоциональ төҫмөргә бай булыуҙары менән айырылып тора. Фразеологик ҡушылмалар фекерҙе туранан-тура битараф (нейтраль) атау менән генә, коммуникатив функция башҡарыу менән генә, сикләнмәйҙәр, бәлки әйтелә торған фекергә һөйләүсенең модаль мөнәсәбәтен, баһаламаһын асыҡ итеп сағылдыралар. Мәҫәлән, арыным тип әйтеүгә ҡарағанда арманһыҙ булдым, хәлдән тайҙым тип һөйләү күп тапҡыр үтемлерәк һәм тәьҫирлерәк. Шул рәүешле, фразеологик ҡушылмалар фекерҙе асыҡ, сағыу итеп белдереүҙә иң үткер, көслө сара хеҙмәтен үтәйҙәр. Миҫалдар: Старшинаның, киреһенсә, Уйылдандың Төлкөсураға һөйләгәне өсөн дә, йөрәге ҡабынып китте (“Мәңгелек урман”, 312-се бит). Етмәһә, урманды һатып һәм халыҡтың көнөн юҡ итте, үҙ башынан себен осорҙо (“Мәңгелек урман”, 321-се бит). Юҡһа уның ҡурҡаҡтың теле сиселеп, беҙҙең башты ашап ҡуйыуы ихтимал бит (“Мәңгелек урман”, 323-сө бит).

Фразеологик ҡушылмалар мәғәнәләре менән айырым һүҙҙәргә яҡын тора. Шуға күрә күп осраҡта уларҙы бер һүҙ менән алмаштырып була. Тимәк, фразеологик ҡушылма – тарҡалмай торған берҙәм мәғәнәле берәмек итеп билдәле грамматик категорияға килтерелгән һүҙҙәрҙең эквиваленты ул. Н. Мусин әҫәрендә был төр фразеологизмдар иң ҙур лексик-семантик ҡатламды тәшкил итә.

Н. Мусиндың “Мәңгелек урман” романында фразеологик берәмектәрҙең икенсе төрөн фразеологик берҙәмектәр тәшкил итә. Улар ҙа, фразеологик ҡушылмалар кеүек, тарҡалмай торған берҙәм мәғәнәгә эйә, ләкин уларҙың дөйөм мәғәнәһен үҙҙәрен төҙөүсе һүҙҙәрҙең күсмә мәғәнәләренән сығып аңлатырға була. Айыу майы һөртөү һәм ҡул һалыу тигән ике фразеологик берәмекте сағыштырып ҡарайыҡ. Улар икеһе лә бер үк “урлау” мәғәнәһенә эйә. Ләкин дөйөм мәғәнәләрҙең ул һүҙбәйләнештәрҙе төҙөүсе һүҙҙәр мәғәнәһенә бәйләнгәнлек дәрәжәһе уларҙа бер төрлө түгел. Айыу майы һөртөү фразеологизмының мәғәнәһе уны төҙөүсе һүҙҙәр мәғәнәһе менән дәлилләнмәгәнлектән, ул типик фразеологик ҡушылма иҫәпләнә. Айыу майы һөртөү фразеологизмына синоним булған ҡул һалыу фразеологик берәмегенә ҡарата быны әйтеп булмай. Бында ҡул һалыу һүҙбәйләнеше ни өсөн “урлау” мәғәнәһе алыуын һүҙҙәрҙең күсмә мәғәнәләренән сығып, ситләтеп аңлатырға мөмкин: ҡул һалыу – күрһәтмәй алыу – урлау.

Ошонан сығып, дөйөм мәғәнәһе үҙен төҙөүсе компоненттарҙың күсмә мәғәнәләре менән дәлилләргә мөмкин булған фразеологизмдар фразеологик берҙәмлектәр була. Тимәк, фразеологик берҙәмлек булып ойошҡан берәмектәрҙең ни өсөн шул мәғәнәгә беркетелеү сәбәптәрен логик яҡтан аңлатырға мөмкин. Фразеологик берҙәмектәрҙең күбеһе айырым һүҙбәйләнештәрҙең күсмә мәғәнәлә йөрөүҙәре һөҙөмтәһендә теге йәки был мәғәнәлә нығынып ҡалған. Мәҫәлән: Был йыйылыштан һуң уға аяҡ салып маташты (“Мәңгелек урман”, 295-се бит). Төлкөсура йән әсеүе менән һикереп торҙо (“Мәңгелек урман”, 325-се бит). Йөрәгем ярыла яҙҙы. Үлгән (“Мәңгелек урман”, 326-сы бит). Уйылдан, башын баҫып, өнһөҙ-тынһыҙ сығып китте (“Мәңгелек урман”, 326-сы бит). Ул иләк ауыҙ менән эш бешмәҫ тип кеһелдәне ҡарт (“Мәңгелек урман”, 328-се бит). Старшина ҡурайына бейеүҙән уҙмаҫ (“Мәңгелек урман”, 328-се бит). Ул күкрәгенә һыймаған билдәһеҙ ҡыуаныстан баҫҡыстан йүгерә-йүгерә төштө (“Мәңгелек урман”, 33-сө бит). Урыҫ баяры, йөҙө ҡара, үҙенә йәлеп иткән (“Мәңгелек урман”, 339-сы бит).

Роман телендә фразеологик берҙәмлектәрҙең метафорик алым сифатын алыуҙары шик тыуҙырмай. Шуға күрә фразеологик берҙәмлектәрҙе үҙенсәлекле фразеологик метафоралар тип ҡарарға була.

Фразеологик ҡушылмалар кеүек үк, фразеологик берҙәмлектәр ҙә айырым һүҙҙәр менән синонимлашып килергә мөмкин. Мәҫәлән: Төлкөсура, эсендә ас бүреләр олоһа ла,

өйөнә ҡайтып етергә тырышты (“Мәңгелек урман”, 338-се бит). Уларҙы тишек кәмәгә ултыртыу бер ни түгел (“Мәңгелек урман”, 334-се бит).

Фразеологик берҙәмлектәр ингән текстарҙы тәржемәләргә тура килгәндә, ғәҙәттә, ул фразеологизмдарға мәғәнәләре менән тап килгән (йәки яҡын булған) фразеологизмдар эҙләнә. Бындай фразеологизмдар рус һәм башҡорт телдәрендә үҙ-ара эквиваленттарға эйә. Н. Мусин романында ла бындай ныҡыннан һүҙбәйләнештәр күпләп осрай: Сажидәнең был хәбәргә иҫе лә китмәне (“Мәңгелек урман”, 324-се бит). Миңлегөл ағаһының ҡайтыуына тип телде йоторлоҡ ҡоймаҡтар бешергәйне (“Мәңгелек урман”, 339-сы бит). Төшөп ҡалғандарҙан түгел, ревизор кеүек әҙәмдәрҙең ялыуҙарына ғына тешен ҡыҫып түҙер, көрәшер (“Мәңгелек урман”, 341-се бит). Тел осонда ғына торған һүҙҙе әйтә алмай бер сама шым торҙо (“Мәңгелек урман”, 140-сы бит). Эш күрһәтәм тип күҙ буяуҙан артыҡ уңыштарға өлгәшеп булмаҫ (“Мәңгелек урман”, 90-сы бит).

Ләкин был фразеологик берҙәмлектәрҙе бер телдән икенсе телгә һүҙмә-һүҙ тәржемә итеп була икән, тигән һүҙ түгел әле. Бындай фразеологизмдар һәр телдә үҙаллы барлыҡҡа килеп, тап килешкән фразеологик берәмектәрме, әллә улар бер телдән икенсе телгә һүҙмә-һүҙ тәржемәләнгән (калькалаштырылған) берәмектәрме, – әйтеүе ҡыйын. Донъяны танып белеү уртаҡ билдәләр, предметтар, сағыштырыуҙар аша барғанға күрә, улар һәр ике телдә үҙаллы тыуған булырға ла мөмкин.

Шулай итеп, Н. Мусиндың әҫәрҙәрендә фразеологик берҙәмлектәр, һүрәтләү сараһы булараҡ, киң ҡулланыла. Улар фекерҙе асыҡ итеп күрһәтергә ярҙам итә. Фразеологик ҡушылмалар менән бер рәттән бындай берәмектәр Н.Мусин әҫәрҙәрендә ифрат күп һәм уларҙы яҙыусы маҡсатлы һәм урынлы итеп ҡуллана.

Дөйөм мәғәнәләре уларҙы төҙөүсе компоненттарҙың мәғәнәләре менән еңел аңлатыла торған фразеологизмдар фразеологик бәйләнештәр тип атала.

Фразеологик бәйләнештәрҙе төҙөүсе компоненттар күп осраҡта фразеологизмдың дөйөм мәғәнәһен туранан-тура белдерәләр, йәғни фразеологик бәйләнештәрҙе төҙөүсе компоненттарҙың мәғәнәләре менән дөйөм мәғәнә араһында тығыҙ бәйләнеш, уртаҡлыҡ була.

Фразеологик бәйләнештәр төҙөүсе компоненттарҙың береһе сикле, ә ҡалғандары ирекле ҡулланылышлы йәки компоненттар тулыһы менән ирекле ҡулланылышлы булырға мөмкин. Мәҫәлән:

а) компоненттарҙың береһе сикле ҡулланылышлы булған фразеологизмдар: Кит, ауыҙыңдан ел алһын, мәйет алдында ундай хәбәрҙәр һөйләргә ярамай (“Мәңгелек урман”, 330-сы бит). Был тайғаҡ, етмәһә күҙ асҡыһыҙ буран ҡупты (“Мәңгелек урман”, 178-се бит). Төлкөсура типһә тимер өҙөрлөк егеттәрҙе йыйып бергә көрәшергә булды (“Мәңгелек урман”, 199-сы бит). Баяр йортон яндырғандан һуң яңы эшкә тағы ла керешергә башҡа тай типмәгән (“Мәңгелек урман”, 210-сы бит). Арт һабағы уҡыттыҡ быларҙың тип шатланды Роман (“Мәңгелек урман”, 301-се бит).

Күҙ асҡыһыҙ, ҡолаҡ ҡарпайтыу кеүек фразеологик бәйләнештәрендә алыу һүҙе алғыһыҙ формаһында килә ала, ҡарпайтыу һүҙенең ҡулланылышы сикле: улар тик шул һүҙҙәр менән генә бәйләнешкә инеп, ярашлы рәүештә “көслө”, “һағайыу” мәғәнәләрен бирә. Ә килтерелгән фразеологик бәйләнештәрҙең икенсе һүҙҙәре ҡулланылыштары буйынса ирекле: улар башҡа һүҙҙәр менән дә бәйләнешкә инә ала;

б) компоненттарының барыһы ла ирекле ҡулланылышлы фразеологик бәйләнештәр: Йүгерә-йүгерә йән тиргә батты (“Мәңгелек урман”, 241-се бит). Ҡыҙым, сабырлыҡтың төбө һары алтын, ҡайтыр ағайың (“Мәңгелек урман”, 174-се бит). Силәгенә күрә ҡапҡасы, атаһынан ары китмәгән (“Мәңгелек урман”, 71-се бит).

Был фразеологизмдарҙағы һәр һүҙ башҡа һүҙҙәр менән ирекле бәйләнешкә инә ала.

Был төркөмгә ҡараған фразеологик берәмектәрҙе төҙөүсе компоненттар тура мәғәнәлә ҡулланылырға ла, ҡулланмаҫҡа ла мөмкин. Әйтәйек: Уйылдандың Миңлегөлдө күреү менән ауыҙы йырылды (337-се бит). Был фразеологизм тик күсмә мәғәнәлә генә ҡулланылып, тотороҡло ғына булһа, Алма ағасынан алыҫ төшмәй, атаһы яҙмышын ҡабатлар ул ("Мәңгелек урман", 347-се бит) кеүек һүҙбәйләнештәр күсмә мәғәнәлә лә, тура мәғәнәлә лә ҡулланылып, тотороҡло ла, ирекле лә була ала.

Шулай итеп, Н. Мусин әҫәрҙәрендә бөтә төр фразеологизмдар ҙа актив ҡулланыла. Улар художестволы тел нәфислеген булдырыуҙа, роман телен күркәмләндереүҙә ҙур хеҙмәт үтәй.

ӘҘӘБИӘТ:


1. Йосопов Х. Ғ. Башҡорт теленең фразеологияһы. Методик ҡулланма. – Өфө, 1963. – 98 бит.
2. Кейекбаев Ж. Ғ. Хәҙерге башҡорт теленең лексикаһы һәм фразеологияһы. – Өфө, 1966. – 218 бит.
3. Ҡаһарманов Ғ.Ғ. Башҡорт теленең лексикаһы һәм фразеологияһы. – Стәрлетамаҡ, 2002. – 240 бит.
4. Мусин Н. Мәңгелек урман. 1 китап. – Өфө, 1977. – 428 бит.
5. Мусин Н. Мәңгелек урман. 2 китап. – Өфө, 1977. – 464 бит.
6. Әхтәмов М. Х. Лексикология, фразеология, лексикография. – Өфө: БДУ, 2002. – 208 бит.


© Иҫәнғолова Г.А., Хафизова А.А., 2019

***Ишмуратова Л.Н.,***
*к. филол. н, доцент, БашГУ, г. Уфа*

## ЯЗЫКОВАЯ КАРТИНА МИРА: СОПОСТАВИТЕЛЬНО-СЕМАСИОЛОГИЧЕСКИЙ АНАЛИЗ ЛЕКСИЧЕСКИХ ЕДИНИЦ СО ЗНАЧЕНИЕМ «ЖИЛИЩЕ» (на материале русского и башкирского языков)

Язык – важнейший способ формирования знаний человека о мире. Отображая в процессе деятельности объективный мир, человек фиксирует результаты познания в словах. Совокупность этих знаний, запечатленных в языковой форме, и представляет то, что принято называть «языковой картиной мира».

Каждый язык имеет собственную языковую картину мира, в соответствии с которой носитель языка организует содержание высказывания. Именно так проявляется специфически человеческое восприятие мира, зафиксированное в языке.

Язык представляет собой одно из средств познания окружающей действительности. Человек, познавая окружающие его предметы и явления, номинирует их; в результате чего формируются новые понятия, выражаются чувства, определяются оценки и различного рода намерения. При номинации объектов окружающей действительности он обобщает и дифференцирует их свойства, хранит и передает опыт социума, отражающийся в семантике и наименованиях языковых единиц.

Национальные особенности восприятия людьми мира, различные способы мышления и интерпретации языковой и неязыковой действительности, специфика языковых картин мира наиболее ярко высвечиваются на фоне сопоставления лексики

различных языков, поскольку именно при помощи лексических средств языка человек стремится передать свои знания, впечатления и мироощущения.

Сопоставительный анализ системы номинации предметов и явлений окружающего мира в таких разноструктурных языках, как башкирский и русский, несомненно, выявляет универсальные и индивидуальные свойства языков в членении и категоризации объективной действительности. Универсальные свойства обусловливаются единством окружающего мира и единством человеческого мышления благодаря единой системе органов чувств человека. [1, 228].

Индивидуальные свойства языков в нашем исследовании определяются самим материалом анализа – лексикой, отражающей «жилище».

Жилище – жилое помещение для жизни людей либо животных – используется для укрытия от природных явлений, места для сна, выращивания потомства, хранения вещей, отдыха. Само слово «жилище» происходит от русского слова «жить».

К общим наименованиям жилья в русском и башкирском языках можно отнести следующие лексемы: дом (русск.) и өй (башк.), йорт (башк.), бина (башк.) – жилое строение; квартира (русск.) и фатир (башк.) – помещение в доме; угол (русск.) и мөйөш (башк.) – часть комнаты, сдаваемая в наём; обиталище (русск.) и торлаҡ (башк.) – жилище, место, где кто-нибудь живёт, пребывает и др.

В зависимости от стиля речи можно выделить разговорные и просторечные наименования жилья. Первые звучат более торжественно, почётно. К таким можно отнести дворец (русск.) и һарай (башк.) – монументальное парадное здание; апартаменты (русск.) и апартаменттар (башк.) – большое парадное жилое помещение; замок (русск.) и һарай (башк.) – дворец владетельного рода; чертог (русск.) – большое великолепно убранное помещение; палата (русск.) и булат (башк.) – великолепное здание; крепость (русск.) и ҡәлғә (башк.) – укреплённый пункт, представляющий собой круговую систему долговременных оборонительных сооружений. Более иронично звучат такие слова, как: хижина (русск.) и бәлкәй өй (башк.) – небольшой домик, избушка; лачуга (русск.) и аласыҡ, ашнаҡ (башк.) – небольшая, плохо построенная или разваливающаяся изба; притон и оя (башк.) – помещение, в котором собираются с преступными целями; клоповник (русск.) и ҡандала ояһы (башк.) – грязное, запущенное место; халупа (русск.) и аласыҡ, ташландыҡ өй (башк.) – небольшая, обычно бедная хата; хибара (русск.) – небольшой и убогий домик.

В зависимости от географического расположения и этнических особенностей различные народы именует место жительства по-разному: чум – шалаш, который изготавливают из жердей и покрывают берестой, оленьими шкурами либо войлоком, используется в Сибири; яранга – традиционное переносное жилище у некоторых кочевых народов; сакля – татарская хижина или плетёная избушка, хата; шатёр – временная лёгкая постройка из тканей, кож или ветвей, разновидность палатки; изба – деревянный дом в сёлах России; юрта – переносное каркасное жилище с войлочным покрытием у тюркских и монгольских кочевников; голомо – жилище, покрытое корой и дёрном, используется у народов Сибири.

Дома могут быть и сезонными. В зависимости от того, в какое время года используют помещение, можно поделить их на зимние: зимник, зимовка, зимовье (русск.) и ҡышлау (башк.) и летние: дача, фазенда, беседка (русск.) и бурама, ҡыуыш, аласыҡ (башк.).

Если в доме живет несколько семей, есть разные варианты наименования таких построек: квартира (русск.) и фатир (башк.) – помещение в доме, имеющее отдельный вход, обычно с кухней, передней; коммуналка (русск.) – квартира, в изолированных

жилых помещениях, в которой проживают несколько семей; общежитие (русск.) и дөйөм ятаҡ (башк.) – помещение с общими спальнями или отдельными комнатами для лиц одной общественной группы, профессии и т.д.

Если жилая площадь используется не в постоянных целях, это временное жилище. Такие дома могут быть оборудованы для спасения в чрезвычайной ситуации (бункер, убежище (русск.) и нығытма (башк.) – специально оборудованное подземное укрытие); для отдыха (гостиница, отель, хостел, кемпинг, мотель, пансион, лагерь (русск.) и ҡунаҡхана (башк.) – постройки для туристов, гостей); для лечения и спасения людей, оставшихся без жилья (богадельня (русск.) и ҡарт-ҡоролар, ғәриптәр йорто (башк.) – благотворительная постройка для призрения инвалидов и престарелых людей; детдом (русск.) и балалар йорто (башк.) – для осиротевших детей; приют (русск.) и етемдәр йорто (башк.) – место, где можно спастись, отдохнуть; палата (русск.) – для размещения заболевших; интернат (русск.) – школа, в которой учащиеся находятся на частичном государственном обеспечении; бокс (русск.) – для изоляции больных людей); для укрытия (землянка (русск.) и ер өй (башк.) – вырытое в земле); защиты от непогоды (шалаш (русск.) и ҡыуыш (башк.) – простейшее лёгкое укрытие, представляющее собой сооружение, изготовлённое по технологиям плетения из жердей и палок; шатёр (русск.) и сатыр (башк.) – временная лёгкая постройка для жилья; балаган (русск.) и таҡта аласыҡ (башк.) – временная лёгкая, обычно дощатая, постройка для различных надобностей; барак (русск.) – лёгкая постройка, предназначенная для временного жилья).

К временным жилищам относятся и постройки, в которые человек может попасть не по собственной воле: карцер (русск.) – комната для одиночного заключения, тюремная камера, тюрьма и төрмә (башк.) – исправительное учреждение.

К помещениям, служащим для хранения различного имущества или продуктов питания относятся такие, как: сарай (русск.) и һарай (башк.) – крытое неотапливаемое, нежилое помещение; погреб (русск.) и баҙ, мөгәрәп (башк.) – постоянное помещение для хранения припасов; кладовка, чулан (русск.) и солан (башк.) – подсобное помещение хозяйственного назначения; клеть (русск.) и күтәрмә, келәт (башк.) – постройка хозяйственного назначения; чердак (русск.) и сарлаҡ (башк.) – необорудованная комната под крышей дома; мансарда (русск.) – эксплуатируемое чердачное пространство; балкон (русск.) – площадка с перилами. Постройки, являющиеся вспомогательными, могут выполнять различные функции: баня (русск.) и мунса (башк.) – помещение, оборудованное для мытья человека; гараж (русск.) – помещение для стоянки и ремонта транспортных средств.

Жилые помещения могут служить и для профессиональной деятельности человека: мастерская (русск.) и оҫтахана (башк.) – помещение хозяйственного назначения; келья (русск.) и хөжрә, монах бүлмәһе (башк.) – отдельная, одиночная комната монаха; трюм (русск.) – пространство в корпусе судна для размещения грузов; кабинет (русск.) – рабочая комната; пустынь (русск.) – одинокое жилье отшельника; скит (русск.) – небольшое жилье для монаха-отшельника, находящееся в отдалении от остальных построек; пещера (русск.) и мәмерйә, мәғәрә (башк.) – жилище монаха, отшельника; резиденция (русск.) – место постоянного пребывания правительства или вообще местопребывание кого-либо.

К устаревшим названиям жилья относятся: сень (русск.) и ҡаплам, ышыҡ күләгә (башк.) – укрытие для человека из ветвей деревьев; куща (русск.) и сатыр (башк.) – крытое зелёными ветвями временное жилище; кров (русск.) и торлаҡ (башк.) – дом,

жилище; виталище (русск.) – место обитания, жилище; палата (русск.) и булат (башк.) – дворец, великолепное здание.

В русском языке могут использоваться и заимствованные слова, обозначающие жилище: хаус – от англ. «дом»; флэт – от англ. «квартира»; коттедж – от англ. cottage – индивидуальный городской или сельский жилой дом; пентхаус – от англ. Penthouse – помещение для жилья на крыше небоскрёба; таунхаус (от англ. town – «небольшой город, посёлок» и house – «дом») – малоэтажный жилой дом.

Не стоит забывать, что жильё необходимо не только человеку, но и всем живым существам. Так, берлога (русск.) и өң (башк.) – жилище медведя; гнездо, гнездовье (русск.) и оя (башк.) – жилище птиц; термитник (русск.) – жилище муравьёв-термитов; улей (русск.) и умарта (башк.) – жилище пчёл; муравейник (русск.) и ҡырмыҫҡа иләүе (башк.) – жилище муравьёв; дупло (русск.) и ағас ҡыуышы (башк.) – жилище птиц либо белок; хатки (русск.) – жилище бобров; сарай (русск.) и һарай (башк.) – жилище домашнего скота; будка (русск.) – жилище собаки; клетка (русск.) и ситлек (башк.) – жилище домашних животных и птиц; панцирь (русск.) – жилище черепахи; вольер (русск.) – жилище хищных животных и др.

Это деление является условным, так как многие слова не обладают семантической устойчивостью. Одно и то же слово может употребляться в различных, порой противоположных контекстах: палата (русск.) – дворец, великолепное здание либо помещение в больнице для размещения больных; һарай (башк.) – монументальное парадное здание либо жилище домашнего скота и другие.

Итак, в лексико-семантической группе «жилище» в русском и башкирском языках отражён большой опыт оседлого образа жизни и связанный с ним опыт строительства, причём для каждой этнической группы он различен.

Таким образом, сравнивая средства обозначения в разных языках, сопоставляя соотносительные номинации и принципы наименования различных реалий, мы познаем национальное своеобразие этих языков и выявляем, как работает механизм языкового сознания их носителей.

ЛИТЕРАТУРА:

1. Закирьянов К.З. Сопоставительно-типологическое описание русского и башкирского языков (лингвометодический аспект): Пособие для учителя. – Уфа: Китап, 2007. – 232 с.

2. Ибрагимова В.Л., Фаткуллина Ф.Г. Отражение межкультурного взаимодействия в башкирской и русской языковых картинах мира // Язык и культура: проблемы соотношения и взаимодействия в полиэтническом пространстве Всероссийская научно-практическая конференция (с международным участием), посвященная 80-летию академика АН РБ М.В. Зайнуллина: в 2-х частях. – 2015. – С. 100 – 106.

3. Ишмуратова Л.Н., Галлямов А.А., Силиванец А.В. Занятия, образ жизни и традиции башкир: Учебное пособие по развитию устной речи нерусских студентов (на материале краеведения). – Уфа: РИО БашГУ, 2003. – 112 с.

4. Фаткуллина Ф.Г. Языковая картина мира: ее основные признаки, типология и функции // Современные проблемы науки и образования // 2013. – № 4; URL: http://www.science-education.ru/110-9954 (дата обращения 26.08.2013).

5. Фаткуллина Ф.Г. Отражение национальной языковой картины мира в реалиях Башкортостана: Актуальные вопросы межнационального взаимодействия и

межкультурной коммуникации в образовании: материалы Городской науч. - практ. конф. Москва, 24 ноября 2014 г. – М.: ФГБОУ ВПО МГЛУ, 2014 – С. 190 – 197.
6. Ожегов С.И. и Шведова Н.Ю. Толковый словарь русского языка. – М.: Мир и образование, Оникс, 2011. – 736 с.
7. Русско-башкирский словарь. – В 2 томах / Под редакцией З.Г. Ураксина. – Уфа: Башкирская энциклопедия, 2005.

© Ишмуратова Л.Н., 2019

***Ишмырҙина Р.К.,***
*филол. ф. к., Жәлил Кейекбаев йорт-музейы директоры*

## ПРОФЕССОР Ж.Ғ. КЕЙЕКБАЕВ – ХАЛЫҠ-АРА ИСЕМЕ БУЛҒАН МӘШҺҮР БАШҠОРТ ҒАЛИМЫ

Жәлил Ғиниәт улы Кейекбаевтың исеме тыуған ергә, туған телгә хеҙмәт иткән һәр кем өсөн ҡәҙерле. Атаҡлы башҡорт ғалимы, донъя тюркологияһында киң билдәле фән әһеле һәм талантлы әҙип, педагог, филология фәндәре докторы, профессор Жәлил Ғиниәт улы Кейекбаевтың ғилми-теоретик һәм әҙәби мираҫы башҡорт филологияһы һәм төрки тел ғилеме тарихында, ғөмүмән, башҡорт халҡының тарихи-мәҙәни үҫешендә айырым урын тота.

Жәлил Кейекбаевтың мемориаль-биографик музейында ғалимға атап яҙылған егермеләп хат һаҡлана. Улар уның ғилми эшмәкәрлеген һәм бай йөкмәткеле тормошон тулыраҡ күҙ алдына килтерергә ярҙам итә.

Бына, мәҫәлән, Баҡынан атаҡлы төркиәтсе, «Совет тюркологияһы» журналының баш мөхәррире М. Ширалиев былай тип яҙа: «Һеҙҙең хатығыҙҙы алдым һәм эшмәкәрлегегеҙ хаҡында күп ҡыҙыҡлы нәмә белдем. Әгәр «Алтай телдәренең сағыштырма тарихи морфологияһы»н ҙур булмаған тираж менән сығарып, республикаларға таратһағыҙ, һәйбәт булыр. Ул саҡта Урал-Алтай телдәренең ҡәрҙәшлеге хаҡындағы бәхәсле мәсьәлә буйынса фекер алышыу уҙғарырға ла булыр ине. Һеҙгә уңыштар теләйем…»

Х. Машаков, Ашхабад университеты доценты: «Хөрмәтле Жәлил Ғиниәт улы! Һеҙ «Тюркологияға инеш һәм төрки телдәренең сағыштырма грамматикаһы курсы» программаһын төҙөй икәнһегеҙ. Һеҙҙең хеҙмәтегеҙ төрки телдәр уҡытылған юғары уҡыу йорттары өсөн бик кәрәкле, ҡиммәтле әйбер», – тип яҙа.

Сыуашстандың халыҡ шағиры Яков Ухсайҙың хаты ла иғтибарға лайыҡ. Ул ғалимдың, йәштәшенең, ҡорҙашының лингвистика өлкәһендәге уңыштарына шатланыуын белдерә, үҙенең ижади пландары менән уртаҡлаша.

Хаттар исемлеген тағы ла дауам итергә була. Мәҫәлән, Үзбәкстандың Хәмзә исемендәге педагогия институтынан Ф. Абдуллаев, Литва ССР-ынан М. Тинфович, Яҡутстандан М. Черосов, ҡалмыҡ АССР-ынан Ц. Номинханов һәм башҡалар төрки телдәр проблемалары буйынса кәңәш һорай, фәнни хеҙмәттәре менән алмашыу тураһында фекерҙәрен белдерә.

Туғандаш республикаларҙан кандидатлыҡ йәки докторлыҡ дәрәжәһенә дәғүә итеп яҙылған авторефераттар, уларға ғалим яҙған рецензиялар бар. Иң ҡәҙерле экспонаттар, дуҫлыҡ ептәрен күрһәтеүсе сығанаҡтар улар.

Бына миҫалға Үзбәкстандан Д. Ниязовтың кандидатлыҡҡа дәғүә иткән «Интонация повествования в современном узбекском литературном языке», «О жанровых особенностях поэзии башкирского народа» тигән авторефераттары, Эстония ССР-ы Тарту университеты ғилми яҙмаларының баҫмалары, ошо уҡ баҫмаларҙың береһендә

Жәлил Кейекбаевтың «О происхождении некоторых падежных форм в урало-алтайских языках в свете теории определенности-неопределенности» кеүек ғилми мәкәләһен дә уҡый алабыҙ.

Жәлил Кейекбаевтың 1967 йылдың 27 мартында яҙған хатында туғандаш республикаларҙың йәш ғалимдарына күрһәткән ярҙамы, ихтирамы, хәстәрлеге, дуҫлыҡ тойғолары күренә. Хат, яҙылып та, ебәрелмәй ҡалдымы икән? Уныһы билдәһеҙ. Адресаттың исеме генә телгә алына. Ләкин иғтибарға бик лайыҡлы булғанлыҡтан, уны тулыһынса килтерергә булдым. Бында ла яҡташыбыҙҙың башҡа телдәргә ҙур һөйөү менән ҡарағанлығын тояһың.

«Ҡәҙерле Леонид! Хатығыҙ өсөн ҙур рәхмәт. Яуапты хәҙер үк бирергә ашығам, сөнки онотоп ҡуйыуым ихтимал.

Күптән түгел генә Ҡаҙанда булдым. Һеҙҙе һораштым. Алабуғала икәнлегегеҙҙе белдем. Институтта һеҙҙең «Диалектологик атлас»ығыҙҙы күрҙем, яҡшы, ҡыҙыҡлы атлас. Һеҙҙең планығыҙ татар-мари телдәренең лексик параллелдәре буйынса эшләү икән, ысын күңелдән тәбрикләйем. Был бик яҡшы һәм иң кәрәкле эш. Күптән тотонорға кәрәк ине.

Минең «Урал-Алтай телдәренең сағыштырма грамматикаһы» тигән китапҡа килгәндә, эшләүҙе дауам итәм. 2 – 3 йыл элек мәсьәләләр асыҡлана төштө, материалдар йыйыла. Мин уны яңынан яҙам, күләме лә ҙур булмаясаҡ. Беренсе вариантында күп ҡабатлауҙар бар ине.

Хәҙер «Урал-Алтай тел ғилеменә инеш» курсы айырым уҡытыла. Бер курстың программаһы наборҙа, апрелдә сығасаҡ. Программа инеш бүлеккә теоретик нигеҙҙәр менән проспект рәүешендә төҙөлдө (күләме 2 баҫма табаҡ). Әгәр ҙә һеҙҙең институттан рәсми заказ булһа, был программаны ла, «Төрки телдәрҙең сағыштырма грамматикаһы курсы» программаһын да ебәрә алабыҙ.

Мари һәм татар телдәрен сағыштырып өйрәнеүҙе һеҙгә хәҙер үк башларға кәрәк. Әгәр ҙә һеҙ удмурт, мордва телдәрен дә, фин, уғыр телдәрен дә, мари һәм татар телдәренең факттарын иҫәпкә алып, сағыштырып өйрәнһәгеҙ, бигерәк тә яҡшы булыр ине.

Беҙ «Урал-Алтай» йыйынтығын сығарырға йыйынабыҙ. Һеҙҙең беренсе күҙәтеүҙәрегеҙҙе лә ошо йыйынтыҡта күрергә мөмкин булыр (яҡынса 12 − 15 бит).

Беҙгә грамматика (морфология) буйынса сағыштырып өйрәнеү кәрәк. Мин һеҙгә (һис кисектермәйенсә) мари теле менән шөғөлләнеүҙе тәҡдим итәм, сөнки уның буйынса әҙәбиәт күп. Йәки һеҙ Йошкар-Олаға барып, унда белгестәр, телселәр, диалектологтар менән һөйләшә алаһығыҙ, мәҫәлән, профессорҙар Пенгиров, Галкин, Иҫәнбаевтар менән. Йошкар-Ола бит һеҙҙән алыҫ түгел. Был иптәштәр һеҙгә кәңәштәре менән ярҙам итерҙәр. Бер уңайҙан әҙәбиәт менән танышырһығыҙ. Һәр хәлдә, һеҙ мари телен ғәмәлдә беләһегеҙ. Һеҙгә еңел булыр. Материалдарҙы мари теле һәм башҡа фин-уғыр телдәре буйынса йыйырға кәрәк. Һеҙҙе тиҙҙән раҫлаясаҡтар. Мин һеҙгә шул шатлыҡлы көндәрҙе теләйем.

Һеҙ Йошкар-Олала (Пенгировта) педагогия институтына, йәки (Галкинда) Мари ғилми-тикшеренеү институтында урынлаша алаһығыҙ. Үҙегеҙҙең киләсәк эшмышығыҙ тураһында ла уйларға кәрәк. Ҡаҙан тел, әҙәбиәт, тарих фәнни-тикшеренеү институтында хәҙергә урын юҡ, тиҙәр. Ләкин унда һеҙ тик татар теле буйынса ғына эшләй алаһығыҙ бит. Һеҙгә, һис һүҙһеҙ, үҙ туған телегеҙ буйынса шөғөлләнергә кәрәк. Бөтә күңелдән уңыш һәм һаулыҡ теләйем.

Сәләм менән, һеҙҙең Ж. Кейекбай».

Ниндәй бай йөкмәткеле, оло хәстәрлек, атайҙарса кәңәш биреү хисе менән һуғарылған был хат. Улай ғына ла түгел, туғандаш ҡәрҙәш телдәргә ҙур хөрмәт, иғтибар күрһәтеү менән, телдәрҙең үҫешен тиҙләтеү йөҙөнән шул милләт йәки халыҡтың тел ғилеме юлына яңы аяҡ баҫҡан йәш ғалимдарына юл күрһәтеүсе маяҡ та булған ул. Үҙе иҫән саҡта донъя күрә алмаған «Урал-Алтай тел ғилеменә инеш» хеҙмәте ғалим үлгәндән һуң ғына баҫылып сыҡты.

Немец, венгер, ҡазаҡ, ҡараим, үзбәк, яҡут, татар, төркмән, сыуаш, удмурт, мари, һәм, хатта грузин, һ.б. ғалимдарҙың яҙған хаттарында Ж. Ғ. Кейекбаев менән тел проблемалары буйынса кәңәшләшеүҙәр, фәнни хеҙмәттәр алмашыу тураһында эшлекле тәҡдимдәр бар. Жәлил Ғиниәтович 1964 йылдың 14 ноябрендә Мирфәтих Зәки улына Эстонияла дүрт телдә (рус, немец, инглиз, француз) лингвистик журнал сыға башлауы тураһында хәбәр итә.

«Шундай уҡ журналды төрки телдәре өсөн дә сығарһалар ине. Йәле, шуны ҡуйыртайыҡ. Мин профессор Баскаковҡа яҙырға әйтәм. Юҡһа теге «Вопросы языкознания» тигән журнал беҙҙе (тюркологияны) ҡәнәғәтләндермәй. Ул журналды Ҡазанда йә Ташкенттә сығарғанда шәп булыр ине. Был фантазия, әлбиттә».

«Советская тюркология» журналы 1970 йылда Баҡы ҡалаһында сыға башлай. Тик был шатлыҡлы ваҡиғаның шаһиты булырға Ж.Ғ. Кейекбаевҡа насип булмай. Ғалимдың бай архивы туғандаш республикаларҙан кандидатлыҡ һәм докторлыҡ дәрәжәһенә дәғүә итеп яҙылған авторефераттар һәм Жәлил Ғиниәт улының уларға яҙылған рецензияларын да һаҡлай.

Докторлыҡ дәрәжәһенә диссертацияһын (темаһы «Тюркские глаголы с основами, заимствованными из русского языка») 1967 йылда Ҡазанда яҡлаған ҡаҙаҡ телсеһе Валентина Исенғәлиеваға ла Ж.Ғ. Кейекбаевтың ярҙамы ифрат ҙур булыуы хаҡында һөйләй ҡаҙаҡ ғалимәһенең остаҙына яҙған хаттары:

«Дорогой наш Джелиль Гиниятович! Хочу поделиться своей радостью. 9 февраля пленум ВАК утвердил мою диссертацию. Мы очень рады, что скоро увидим Вас у нас. До свидания, дорогой, шексіз кымбатты, шексіз кадірлі Джелиль Гиниятович! 19 февраля 1968 года».

Был хаттарҙан башҡорт мәҙәниәтен генә түгел, ә Рәсәйҙең төрлө милләт халыҡтарының мәҙәниәтен үҫтереүҙә арымай-талмай эшләгән киң күңелле, бүтәндәр ҡыуанысы өсөн ысын йөрәктән шатлана белгән эскерһеҙ кеше образы күҙ алдына баҫа.

Ж.Ғ. Кейекбаев аспирантура аша фән кандидаттары әҙерләүгә айырыусы ҙур әһәмиәт биргән, үҙенең лингвистик мәктәбен булдырған, йәштәргә фән өлкәһендә үҫергә ярҙам иткән. Татар тел ғалимы М. Закиевҡа 1964 йылдың 6 мартында яҙған хатында үҙенең аспиранты В. Псәнчин тураһында яҙа:

«Оҙаҡламай беҙ Һеҙгә аспирант Вәли Псәнчиндең диссертацияһын ебәрергә торабыҙ (Тел тарихы буйынса). Эше ярарлыҡ яҙылған, үҙегеҙ баһаларһығыҙ. Ул егет – йәш түгел, университетка тиклем үк армияла булған, унан һуң 2-3 йыл мәғариф министерствоһында эшләне, фирҡә ағзаһы, тотанаҡлы, баҫалҡы егет».

Ғалимдың хаттарында үҙенең башҡа аспиранттары Зәйнуллин М.В., Аҙнабаев Ә.М, А.А. Ғәлләмовтар тураһында ла хәстәрлекле юлдар бар:

«...беҙҙең Аҙнабаев (Әхмәр Мөхәмәтдин улы) бик инсафлы баҫалҡы егет, партия ағзаһы, диссертацияһы рус телендә яҙылған, мин уға үҙем русса яҙырға тәҡдим иткәйнем. Шул Аҙнабаевҡа рәсми (беренсе) оппонент булһағыҙ, бик шәп булыр ине, ярҙам йөҙөнән. Вәли Псянчинды бик уңышлы үткәргәнһегеҙ икән, мин бик шатмын һәм Һеҙгә ҙур-ҙур рәхмәт!»;

«...күҙгә минең тағы бер аспирант яҡлай, Ғәлләмов фамилиялы, диссертацияһы «Башҡортса грамотаға өйрәтеү» тип атала. Ул Башҡортостанда баш методист, бик белемле егет, бик күп уҡыны, ныҡ эшләне. Ул да бик инсафлы, Башминпрос тирәһендә абруйлы кеше. Дәреслектәр авторы. Беҙ уның менән хәҙер педучилищеләргә дәреслек яҙып ятабыҙ, 1966 йыл планында тора. Бәлки һин Ғәлләмовҡа рәсми оппонент булырһың?».

Ә бына бер аспирантының Ж.Ғ. Кейекбаевҡа Мәскәүҙән яҙған хаты:

«Һаумыһығыҙ, Жәлил Гениәтович! Һеҙгә уңышлыҡтар һәм күп сәләмдәр ебәреп Әхмәр. Жәлил Гениәтович, мин бөгөн Өфөгә күсереүҙе һорап, Решетовҡа ингәйнем. Ул ризалыҡ бирҙе. Бәлки, барып сыҡһа, тиҙ үк Өфөгә ҡайтырмын. Һеҙҙе научный руководитель итеп һораным. Тик Һеҙ хәҙергә бер кемгә лә әйтмәй тороғоҙ, барып сыҡмаһа, хөрт булыр. Ҡайтаһы килә, бында бер нәмә лә оҡшамай; ятаҡ бик йыраҡ, 2 сәғәт бараһың, 2 сәғәт ҡайтаһың. Тик диссертацияның темаһы асыҡланмаған. Мин «айырымланған эйәрсен киҫәктәрҙе һәм хәл әйтемдәрен уҡытыу методикаһы» тигән тема алғайным. Бик оҡшай ине, ҡатмарлы пунктуация... Һеҙ ниндәй кәңәш бирерһегеҙ. Бәлки, Һеҙ тәҡдим итерһегеҙ. Диссертацияның темаһын хәл итмәйенсә ҡайтып булмай. Шуға ла Һеҙ үҙ фекерегеҙҙе тиҙерәк яҙып ебәрһәгеҙ, бик шәп булыр ине. Ваҡытығыҙ булһа, яуап яҙыуығыҙҙы һорайым, шул тема ярармы юҡмы икән?»

Профессор Ж.Ғ. Кейекбаев үҙенең шәкерттәрен Мәскәүгә, ғилми үҙәктәргә, уҡырға ебәрергә тырышҡан. Мәскәүҙән Башҡортостанға ҡайтҡыһы килгән был шәкертен дә ғалим үҙенең ярҙамынан ташламай. Артабан был аспирант өс йыл аспирантурала уҡып, педагогия фәндәре кандидаты дәрәжәһенә диссертация яҡлап ҙур ғалим булып китә. Оҙаҡ йылдар КПСС-тың Башҡортостан өлкә комитетында фәндәр бүлеген етәкләй.

Ғәжәп көслө ихтыярлы, изгелекле, итәғәтле, ижади интеллигенция өсөн өлгө булырлыҡ шәхес ине Жәлил Ғиниәт улы. Жәлил Ғиниәт улы Кейекбаев донъя кимәлендәге ғалим ине. Төрлө илдәрҙәге дуҫтары – фекерҙәштәре менән хат алышып тора, бер ҡасан да бәйләнеште өҙмәй. Хатта үлгәс тә Америка ҡушма Штаттарының Гарвард университетынан бер хат килеп төшә. «Беҙҙең университетта биш кеше башҡорт телен өйрәнә, һеҙҙең ярҙамығыҙға мохтажбыҙ», – тип яҙа улар.

Яҡын дуҫы, немец ғалимы Фридрих Вольф 1939 йылда уҡ: «Һинең һуңғы хатыңды алдым, бик таҙа Берлин диалектында яҙылған, башҡа яҙыусыларға ла уҡып ишеттерҙем, ә үҙем әлеге көндә башҡорт телен өйрәнәм, яуап хаты һинең әсә телеңдә булыр», – тип яҙа.

Интернационализм тойғоһо, дөйөм эшкә − фәнгә хеҙмәт итеү − был йылдарҙағы хат алышыуҙарға бына нимә хас. Уларҙа Жәлил Кейекбаевтың изге күңеле, алсаҡлығы, эскерһеҙлеге төҫмөрләнә, күҙ алдына илебеҙҙең төрлө халыҡтарының тел ғилеменең сәскә атыуына баһалап бөткөһөҙ өлөш индергән ғалим-интернационалистың титаник фигураһы, образы килеп баҫа.

Жәлил Ғиниәт улы Кейекбаев тюркология ғилемендәге уңыштары менән сикһеҙ һоҡландыра. Башҡорт халыҡ мәҡәле шулай ти: «Атаң улы ғына булма − халҡыңдың да улы бул». Эйе, исеме бөтөн донъяға таралған телсе, яҙыусы, филология фәндәре докторы, профессор Жәлил Кейекбаев башҡорт халҡының ғына түгел, ә төрлө милләт халыҡтарының да һөйкөмлө, яратҡан улы булып ҡалды һәм ҡаласаҡ.

© Ишмырҙина Р.К., 2019

***Йомағолова Г.К.,***
*Өфө статистика, информатика һәм иҫәпләү техникаһы колледжы; Өфө к.;*
***Хафизова Р.Ф.,***
*Өфө автотранспорт колледжы; Өфө к.*

## БАШҠОРТ ТЕЛЕН УҠЫТЫУ БУЙЫНСА СИФАТЛЫ УҠЫУ АЛЫМДАРЫ

Тел- һәр милләттең оло хазинаһы. Телен һаҡлаған илен һаҡлар, ти халыҡ. Илен, милләтен һаҡлар өсөн халыҡ иң элек телен һаҡларға тейеш. Башҡорт теле – башҡорт донъяһына алып инеүсе балаларына, шулай уҡ башҡа милләт балаларына башҡорт теле сит тел булараҡ уҡытыла. Шуға ла уҡытыусыларға бөтә нәмәне яңынан башларға: балаларға өндәрҙе дөрөҫ әйтергә өйрәтергә, һәр һүҙҙең мәғәнәһен аңлатырға, һөйләмдәр төҙөтөргә һәм уҡыусыларҙың телмәрен үҫтерергә тура килә. Уҡытыусы, балаларҙың башҡорт телен белеү кимәлен иҫәпкә алып, йәшәү үҙенсәлектәрен өйрәнеп, был мәсьәләләрҙе сисеү юлдарын һәм телде үҙләштереүгә йүнәлтелгән эффектлы алымдарҙы эҙләй. Бер телде лә кәмһетмәй, башҡорт теленә өйрәтеүҙе көсләп түгел, ә ҡыҙыҡһынып өйрәнеүгә ирешеү - уҡытыусыларҙың төп бурысы.

Нисек предметҡа ҡарата уҡыусыларҙа ҡыҙыҡһыныу уятырға һуң?

Башҡорт телен аңламаған балаларҙы нисек башҡортса һөйләшергә өйрәтергә, нисек уларға аңлы уҡыу, яҙыу күнекмәләрен бирергә, ниндәй юлдар менән балаларға башҡорт теленә һөйөү тәрбиәләргә? Әлбиттә, был уҡытыусының тырышлығына, оҫталығына, белеменә бәйләнгән. Урыҫ мәктәптәрендә башҡорт телен өйрәнеү буйынса һәр төрлө эш уҡытыусыларҙа тел өйрәнеүгә ҙур теләк тыуҙырырлыҡ, башҡорт телен яратырлыҡ, был телде белеү менән ғорурланыу тойғоһо уятырлыҡ булып башҡарылырға тейеш.

Башҡорт теле дәрестәрендә төрлө алымдарҙы ҡулланыу ыңғай һөҙөмтәләр бирә. Һәр дәрескә теләк менән килһен өсөн, уҡыусыларҙа ғәжәпләнеү, һоҡланыу, ҡәнәғәтләнеү тойғоларын уятырлыҡ эш алымдарын һайларға кәрәк. Башҡорт теленең моңло ла,нәзәкәтле лә, илһамлы ла икәнен балаларҙың күңеленә еткерергә кәрәк. Уҡыу материалын үҙләштереүгә уҡыусыларҙың үҙҙәренә әүҙем ҡатнаштырырға кәрәк. Был йәһәттән хор менән уҡыу, ятлау, рәсемдәр һәм картиналар буйынса әңгәмәләр, йырҙар өйрәнеү, мауыҡтырғыс күнегеүҙәр ҡулланыу,уйын алымдары һәм башҡа бик күп эш төрҙәре дәресте ҡыҙыҡлы, файҙалы, ижади итеп үткәрергә ҙур мөмкинселек бирә. Башҡорт өндәрен дөрөҫ әйтеү, телмәргә иғтибар итеү, көн дә яңы һүҙҙәр туплау - беҙҙең көндәлек эшебеҙ.

Дәрестең темаһын, ребус, кроссвордтар сисеп, уҡыусыларҙан әйттерәбеҙ. Дәрес башында тасуири шиғыр уҡыу ҙа бик отошло. Шиғырҙың йөкмәткеһенән сығып, уҡыусылар теманы билдәләй. Һәр дәрес фәһемле үтһен өсөн, уның маҡсатын шулай уҡ уҡыусылар билдәләй. Шулай уҡ һәр дәрескә проблемалы һорау ҡуйыу һәм дәрес аҙағында шул һорауға яуап алыу ҙа уңышлы. Дәрестә һәр бер эш төрө ошо проблемалы һорауға яуап биреүгә ҡоролорға тейеш. Яуаптар миҫалдарға таянып, сағыштырылып өйрәтелә. Һәр һорау уҡыусыларҙы ижади фекерләргә өйрәтә.

Унан оло маҡсатҡа өлгәшеү юлдарын һәм алымдарын һайлайбыҙ. Беренсе сиратҡа уҡыусыларҙың иғтибарын йәлеп итеүҙе ҡуябыҙ. Был йәһәттән, дәресте шиғыр юлдарын хор менән әйтеп башлайбыҙ. Тел өйрәтеүҙә иң эффектлы алымдарҙың береһе - хор менән һөйләү. Дәрес алдынан поэтик әҫәргә мөрәжәғәт итеү: беренсенән, бала сит тел рухына сума; икенсенән, иғтибар туплана. Дәресте йыл миҙгеленә йәки темаға ҡағышлы йырҙар менән башларға була. Поэтик тел, музыкаль элементтар ҡоро һөйләүгә ҡарағанда нығыраҡ тәьҫир итә, балаларҙың күңеленә үтеп инә.

Башҡорт телендәге үзенсәлекле өндәрҙе дөрөҫ әйтергә өйрәнеү һәр дәрестә ныҡлы урын алырға тейеш.  Өндәрҙе өйрәнгәндә һүрәт менән эш итеү бик аңлайышлы. Тәүҙә һүрәттә нимә төшөрөлгәнен балалар русса әйтә, тәржемәләйбеҙ. Һуңынан хәрефтәр яҙабыҙ, ә башҡорт өндәрен дөрөҫ итеп ҡысҡырып уҡыйбыҙ. Хәрефтән ижек барлыҡҡа килтерәбеҙ, ижектән һүҙ төҙөйбөҙ. Шулай итеп, һүрәттә ниндәй предметтарҙы күрәбеҙ, барыһын да атап сығабыҙ. Һуңынан уҡыусылар шул һүҙҙәр менән һөйләм төҙөйҙәр. Һөйләмдән һуң улар әкренләп һүрәт буйынса инша яҙыуға өлгәшәләр. Бындай эш алымы уҡыусыларҙа түбән кластарҙан алып телмәр үҫтереүгә  булышлыҡ итә. Өндәрҙе дөрөҫ әйтеү беренсе  кластан ныҡлы үҙләштерелһә, артабан уҡырға, яҙырға өйрәнеүгә етерлек нигеҙ була. Был өндәр менән эшләгәндә, уҡыусыларҙың ауырлыҡ кисереүҙәрен иҫәпкә алып, һәр дәрестә фонетик күнегеүҙәр башҡарыу маҡсатҡа ярашлы. Рифмалы юлдарҙы балалар тиҙерәк хәтерҙә ҡалдыра. Үтелгән темаға бәйле бәләкәй текстарҙы ятлатыу телмәрҙе әҙер лексик берәмектәр менән байыта.

Күп уҡыусылар һүҙҙә башҡорт өндәрен, һуҙынҡы өндәрҙе, хәреф-ҡушымсаларҙы бутайҙар, дөрөҫ яҙмайҙар. Бының өсөн беҙ “Ниндәй хәреф төшөп ҡалған?” уйынын үткәрәбеҙ. Яуапты уйлайбыҙ, ҡағыҙҙа менән нығытабыҙ. Бында уҡыусыларҙың төрлө дөрөҫ булмаған яуаптарын  да ишетергә  тура килә. Был осраҡта теманы үҙ-ара фекер алышыу, миҫалдар ярҙамында нығытыу файҙалы була.

Һөйләмдә һүҙ тәртибен дөрөҫ ҡулланмау осраҡтары йыш осрай. Бындай хатаны булдырмау өсөн схемалар менән эшләү отошло. Бер һөйләмде төрлөсә төҙөп, дөрөҫ вариантты һайлай белергә өйрәтеү мөһим.

Коллектив, парҙар менән эш төрҙәре лә уңышлы һөҙөмтә бирә. Мәҫәлән, бирелгән темаға төркөмләп хикәйә, диалог төҙөү, яуаптар яҙыу отошло. Һуңынан һәр төркөмдөң эштәрен сағыштырыу, уңышлы алымдарын өйрәнеү кәрәк.

Күп кенә балалар шиғырҙы тиҙ ятлай алмай. Шуның өсөн ҡыҙыҡһындырыу маҡсатында, шиғыр ятлауҙы уйын рәүешендә үткәрергә була. “Һөйләргә һәм хәрәкәт итергә” тигән принцип  менән эшләү ыңғай һөҙөмтәләргә килтерә. Телмәр менән хәрәкәт бергә килгән шиғырҙы ятлау тиҙ иҫтә ҡалдырырға мөмкинселек бирә. Шулай уҡ шиғырҙағы һүҙҙәрҙе һүрәттәр менән йәки һүҙҙәрҙең беренсе хәрефтәре ярҙамында ятлау баланың һүҙ байлығын арттырыуҙа, хәтерен, иғтибарын нығытыуҙа, башҡорт теленә ҡыҙыҡһыныу уятыуҙа ҙур урын  алып тора.

Башланғыс класс уҡыусыларының уҡыу тиҙлеген үҫтереүгә лә ныҡлы иғтибар бүлергә  кәрәк. Бала уҡырға өйрәнгәндә иң элек хәрефтәрҙең исемдәрен әйтеп уҡыусан була. Ошо өндәрҙе бергә ҡушып, һүҙҙе ижекләп уҡыуға күсеү ҡыйын этаптарҙан һанала. Был ҡыйынлыҡты бер аҙ еңеләйтеү өсөн Н.А.Зайцевтың таблицалар һәм кубиктар менән эшләү технологияһы файҙалы.

Уҡыу процессында мауыҡтырғыс күнеүҙәр ҡулланыу ҙур әһәмиәткә эйә. Дәрестәрҙә мауыҡтырғыс күнегеүҙәр ҡулланыу материалды ҡыҙыҡлы, аныҡ, йәнле һәм аңлайышлы итеп биреү менән бергә уҡыусыларҙа актив фекерләү тәрбиәләй.

Һәр башҡорт теле дәресе күргәҙмәлелек менән ныҡ ота. Бәләкәй класс уҡыусыларының психологик үҙенсәлектәренән сығып,  шуны әйтәһе килә: бала нимәне күрә – шуларҙың бөтәһен дә тиерлек хәтерендә оҙаҡ һаҡлай ала. Дәрестәрҙә картиналар, сюжетлы һүрәттәр, уйынсыҡтар, дидактик карточкалар, техник саралар ҡулланыу балаларға белем алыуға ыңғай ҡараш тәрбиәләй. Дәрестәрҙә күргәҙмә материалды эффектлы файҙаланыу уҡыусыларға материалды яҡшыраҡ иҫтә ҡалдырырға булышлыҡ итә.

Ижади эшләгән, үҙ дәрестәрен ҡыҙыҡлы, мауыҡтырғыс итеп үткәрә белгән уҡытыусылар ғына башҡа милләт балаларына башҡорт теленә өйрәтеүҙе уңышлы

башҡара  ала. Барыһы ла уҡытыусының үҙенән тора. Эшләргә теләмәһәң, сәбәп эҙләйһең, эшләргә теләһәң юлдарын, ысулдарын табаһың, ти халыҡ. Шулай итеп, үҙ эшебеҙгә ижади ҡарап, телебеҙҙең бәҫен үҫтереп, мәртәбәһен арттырып,ең һыҙғанып эшләйек. Ә былдай эштең һөҙөмтәһе мәғәнәле буласаҡ.

ӘҘӘБИӘТ:

1. Р.F.Аҙнағолов. Хәҙерге дәрес: уҡыу ҡулланмаһы. Үҙгәрешле, икенсе баҫма. — Өфө: БДУ, 2011. — 155 бит.
2. Баһауетдинова М. И., Йәғәфәрова Г. Н. Башҡорт телен һәм әҙәбиәтен
заманса уҡытыу: уҡытыусылар өсөн ҡулланма. – Өфө: Зәйнәб Биишева
исемендәге “Китап” нәшриәте, 2009. Өфө: Информреклама, 2003.
3. Википедия и информационное общество. Сборник материалов открытой
международной научно-практической конференции, посвященная 10-летию Башкирской Википедии, 24-26 апреля 2015 г. – Уфа, 2015. – 87с.
4. Иҙелбаев М.Х. Хәҙерге заман технологиялары һәм яңылыҡлы дәрестәр//Башҡортостан уҡытыусыһы. - 2015. - : [9, 6-10].
5. Нафиҡова Ф.Р  Һөйләгәндә ишетеү һәм аңлау аша телмәр үҫтереү. “Башҡортостан уҡытыусыһы”, 2014 й. - : [10, 14],  [1, 12].
6. Толомбаев Х. А., Алсынбаева Р. Р. Башҡорт телен уҡытыуҙа актив формалар һәм алымдар: Уҡытыусылар өсөн ҡулланма. – Өфө: БМҮИ нәшриәте, 2006

***Йәғәфәрова Г.Н.***
*филол. ф. к., доцент, РФА ӨҒТҮ ТТӘИ, Өфө ҡ.*

## МОСТАЙ КӘРИМ ЛИРИКАҺЫНДА ЗӘҢГӘР ТӨҪ

Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәримдең лирикаһы – башҡорт поэзияһының иң сағыу өлгөләренең береһе. Әҙиптең ижадында башҡорт әҙәбиәтенең барлыҡ алдынғы традициялары сағылыш таба, ул үҙе эшләгән төрлө жанрҙарҙы тәбиғәттән килгән һәләте, халыҡсан һүҙе һәм аҡыл хазинаһы менән байыта, башҡорт әҙәбиәтен тағы ла бер баҫҡысҡа юғарыраҡ күтәрә, донъя кимәлендә танытыуға өлгәшә. Шиғырҙарында фәлсәфәүи тәрәнлек, һығылмалылыҡ, форма яғынан эшкәртелгәнлек, шул уҡ ваҡытта новаторлыҡ һыҙаттары хас.

Мостай Кәрим ижады тураһында Р. Бикбаев тарафынан әйтелгән һүҙҙәр хаҡ: «Мостай Кәримдең барлыҡ тормош һәм ижад юлы – оло мөхәббәттең тыуыуы һәм үҫеүе, яңынан-яңы буяуҙарҙа балҡып йәшәүе ул» [1, 5]. Нәҡ ошо буяуҙар, уларҙың дөйөм таралыш тапҡан мәғәнәләре лә, шағир ижад иткән үҙенсәлекле мәғәнәүи биҙәктәре лә М. Кәрим лирикаһын сағыу, күп төҫлө, ҡабатланмаҫ, шул уҡ ваҡытта ябай, халыҡсан итеп күрһәтә. Шағирҙың ижади асыштарын һәм ҡаҙаныштарын тулы күҙ алдына баҫтырырға ярҙам иткән төҫтәр тикшеренеү объекты булараҡ бик ҡыҙыҡлы материалды тәшкил итә. Был мәҡәләлә шағирҙың донъяға ҡарашын сағылдырыуҙа бик мөһим роль уйнаған төҫтәргә туҡталып үтмәксебеҙ. Анализ өсөн «Башҡортостан китап нәшриәте»ндә 1987 йылда баҫтырылып сығарылған 4 томлыҡтың 1-се томында урын алған шиғырҙар һайланды, уларҙа төҫтәрҙең мәғәнәүи йөкмәткеһенә байҡау яһалды.

Ғөмүмән, шиғриәт төҫтәрҙән башҡа була алмай, буяуҙар, төҫтәр символикаһы уҡыусыға йәки тыңлаусыға әҙәби эҫәрҙең йоғонто яһау көсөн арттыра, матди һәм рухи донъяны сағыу рәүештә һүрәтләргә бушылыҡ итә, кешенең хис-тойғоларына туранан-тура тәьҫир итә. Шағирҙар ғәҙәттә төҫтәрҙе кинәйәләп әйтергә тырышҡанда, шиғырҙың

төп фекерен күсмә планда киң рәүештә һүрәтләгәндә, төрлө параллелдәр эшләгәндә ҡулланыусан.

Асыҡланыуынса, Мостай Кәрим ижадында төҫтәр гаммаһы бик йыш файҙаланыла. Иҫәпләүҙәребеҙ күрһәтеүенсә, беҙ анализлаған йыйынтыҡта урын алған 1936-1985 йылдарҙа ижад ителгән шиғырҙарҙа тәүге осорға ҡараған әҫәрҙәрҙә төҫ атамаларын белдергән һүҙҙәр аҙыраҡ ҡулланылһа, һуңғы осор ижадында, инде өлгөргән тәжрибәле шағир булараҡ, М. Кәрим төҫтәрҙең һәр төрлөһөн ҡуллана. Араларында иң йыш осрағаны *кара* төҫ булды, унан ҡала – *аҡ*, артабан – *зәңгәр, йәшел, ҡыҙыл, һоро*, иң һирәк осрағандары – *көрән, һор*. Әлбиттә, бының үҙенең сәбәптәре бар. Мәҫәлән, *аҡ* төҫө телгә алынған шиғырҙар һуғыш йылдарына ҡарамай – һуғыш тематикаһы шатлыҡ, бәхет, сафлыҡ мәғәнәһенә эйә булған аҡ төҫөн йыш ҡулланырға мөмкинселек бирмәй. Киреһенсә, һуғыш осоро шиғырҙарында *ҡара* төҫөнөң өҫтөнлөк итеүе күҙәтелә, әлбиттә, был да дәүерҙең драматизмына бәйле рәүештә хасил була. М. Кәрим “Гөрләп үтте тәүге күкрәү…” (1943) шиғырында һуғыш шарттарында сәскә атып ултырған зәңгәр сәскәләрҙең ни тиклем урынһыҙ булыуын, шулай ҙа уларҙың йәшәүгә өмөт биреүен, шуның менән нәҡ урынында икәнлектәрен һыҙыҡ өҫтөнә ала:

*Гөрләп үтте тәүге күкрәү,*
*Шауланы яҙғы ямғыр;*
*Күгәрсен күҙе күгәртте*
*Окобым тирә-яғын.*
*...Ләкин күгәрсен күҙҙәре*
*Асыла төнгә табан,*
*Зәңгәрһыу керпектәренән*
*Йәш түгел, йәшәү тама (Гөрләп үтте тәүге күкрәү…)*

Шулай итеп, шиғриәттә төҫтәр һүрәтләнгән дәүергә ҡарата төрлөсә күрһәтелергә мөмкин. Әҙәбиәтселәр уны герой концепцияһына бәйле рәүештә асыҡлай. Был турала Р.Д. Мостафина түбәндәгеләрҙе билдәләп үтә: «Башҡорт әҙәбиәтендә, дөйөм алғанда, төҫтәрҙең ҡулланылышы герой концепцияһына ярашлы түбәндәгесә күренә. 20-се йй. әҙәбиәте Октябрь инҡилабын тормошҡа ашырған, яңы йәмғиәт төҙөүгә тотонған яңы кеше образының тәүге үрнәктәрен бирһә, утыҙынсы йылдарҙа яңы социалистик ҡоролоштоң яңы кешеһен, дәүерҙең типик характерын һынландырыуҙа ныҡышмалы эҙләнеүҙәр барҙы. Был осор әҙәбиәтендә ҡыҙыл төҫө өҫтөнлөк итә. <…> Һуғыш осоро әҙәбиәтендә ҡыҙыл күберәк башҡа ахроматик төҫтәр менән – аҡ һәм ҡара менән – ҡулланылды. Һуғыштан һуңғы әҙәбиәттә яуҙан еңеп ҡайтып, илде яңынан аяҡҡа баҫтырыуға ең һыҙғанып тотонған “погонһыҙ һалдаттар”, ауыл хеҙмәтсәндәре, девон ҡатламындағы нефть эсөн көрәшеүселәр, ауыл менән һаман да иҫкесә етәкселек итеүгә ҡаршы сыҡҡан новатор-геройҙар һәм башҡа образдарҙа актив герой концепцияһы яңылыҡ– йәшел, тыныслыҡ – күк, зәңгәр төҫтәр аша асылды. 60-70-се йылдар геройы — фәнни-техник революция осоро, коммунистик йәмғиәт кешеһе. <…> Был осор замандаш образын тасуирлағанда инде төҫтәрҙең күп төрлөлөгө ҡулланылды, шуның менән тормоштоң бай, күп яҡлы һәм тулы ҡанлылығы дәлилләнде» [4, 13-15].

Бынан тыш, һәр бер төҫтөң үҙенең символикаһы булыуы мәғлүм. Әйтәйек, дәүләт флагында ла зәңгәр, аҡ һәм йәшел төҫөндәге горизонталь тигеҙ буйлы һыҙаттар, уртаһында һары түңәрәк эсендә һары төҫтәге ҡурай сәскәһе төшөрөлгән. Зәңгәр төҫ күк йөҙөн, ғәҙеллекте һәм уй-ниәттәренең сафлығын аңлата. Аҡ төҫ — республика халыҡтарының тыныслыҡты һәм татыулыҡты һөйөүен белдерә. Йәшел төҫ — азатлыҡ һәм тормоштоң мәңгелеген билдәләй.

Йышлыҡ буйынса Мостай Кәрим лирикаһында 3-сө урында *зәңгәр* төҫө тороуын билдәләп үткәйнек. Мәҡәләбеҙҙә был төҫкә ентекләберәк туҡталып үтмәксебеҙ.

Башҡорт тел картинаһында зәңгәр төҫө бик актив ҡулланылғандарҙан түгел. Был төҫтөң семантикаһын халыҡ телендә йышыраҡ *күк* йәки *йәшел* һүҙҙәре асыҡлап йөрөй: *зәңгәр* һүҙенең килеп сығышы монгол телендәге *цэнхэр* һүҙенә барып тоташа, был ике тел өсөн уртаҡ лексема иҫәпләнә [2, 25]. Шуға бәйле рәүештә халыҡ телендә лә зәңгәр тип атау бик киң таралмаған. Һүҙҙең ҡулланылыуы, бәлки, һуңғы бер быуат эсендә телдә нығынып ҡалды, айырыуса рус теленең йоғонтоһо арҡаһында ‘синий’ менән ‘голубой’ төҫтәрҙе айырып ҡарай башлау менән мәғәнәүи яҡтан икеһе ике һүҙҙә беркетелде: *зәңгәр* – синий, *күк* – голубой. Халыҡ ижады әҫәрҙәрендә иһә һәр ике осраҡ өсөн дә *күк, күкһел, күгелйем* көүек төҫтәрҙе белдергән лексемаларҙы осратабыҙ.

Мостай Кәримдең лирикаһында, юғарыла телгә алынған йыйынтыҡта зәңгәр төҫөнөң символикаһы тәүге шиғырҙарында уҡ сағылыш таба. Тәү сиратта, уның аша тәбиғәт күренештәре ҡылыҡһырлана, әлбиттә, даръя-диңгеҙ тасуирлана:

*Диңгеҙ – сикһеҙ зәңгәр бишек,*
*Ай юлы йыраҡ, йыраҡ... (“Ай юлы”).*
*Башта һағынды Уралын,*
*Унан эйәләште,*
*Һөйҙө зәңгәр Байкалды һәм*
*Һылыу кәләште (“Йыр”).*

Зәңгәр төҫтөң тынысландырыусы, талғынлаштырыусы көскә эйә булыуы болотһоҙ һауа төҫө булыуынан киләлер. Асыҡ күк йөҙөн һүрәтләү зәңгәр сифаты аша күрһәтелә, сөнки зәңгәр күк – башҡорт әҙәбиәтендә тыныслыҡты, хәүефһеҙлекте, сикһеҙлекте, йыһанды белдереүсе ҡалыплашҡан образ:

*Һауалар зәп-зәңгәр бында,*
*Һауалар шундай бейек. (“Тупрағым, һауам, һыуҙарым”).*

*Һин яратырға өйрәттең*
*Һәр бер биҙәген ерҙең,*
*Йондоҙло зәңгәр күктәрҙең*
*Серҙәрен асып бирҙең(“Уҡытыусыма”).*

*Көҙ ҡояшы йөҙә зәңгәр күктә,*
*Шаян елдәр уйнап үтәләр. (“Көҙ”).*

Шуға бәйле рәүештә *зәңгәр* тирә-яҡ тормоштағы хәүефһеҙлекте, талғынлыҡты белдерә:

*Зәңгәр колонналар булып,*
*Барабан ҡағып,*
*Колхоз урамдары буйлап*
*Уҙған балалыҡ (“Балалыҡ”).*
*Мостай Кәрим лирикаһында зәңгәр күк – киске мәл, эңер төҫө:*
*Апрель кисе зәңгәр пәрҙә тартты,*
*Төн һыйынды Иҙел битенә. (“Тулҡындар”).*

Үҙ сиратында, киске мәл һыуыҡ һәм ҡайғы, һағыш һәм серлелек символы булып тора:

*Зәңгәр күк тәрәнлегендә*
*Тулған ай йөҙә,*
*Һағына һалдат һөйгәнен*

*Ят, йырак ерҙә. (“Һалдат һағына һөйгәнен”).*
*Елбәҙәкле зәңгәр яулык булып,*
*Йондоҙло күк япты төн битен (“Ерҙәге йондоҙҙар”).*
*Күрмәç инем тонок төн күленең*
*Алыçтағы зәңгәр ярҙарын (“Якты төн”).*

Яһалмалылыҡ, тәбиғи булмағанлыҡты ла символлаштыра ала зәңгәр:

*Зәңгәр уттар янған бүлмә эсендә*
*Үлем менән йәшәү көрәште ...*
*Зәңгәр уттар һүнде. Бүлмә эсенә*
*Ҡояш тағы эйелеп ҡараны (“Ул ҡыҙ мине ташлап китмәне”).*

Мифологик аңда күк һәр ваҡыт аллалар, рухтар, әруахтар, фәрештәләр йәшәгән урын булараҡ баһалана; шуға күрә зәңгәр төçөнә тағы бер символ хас, ул да булһа – илаһилыҡ. Уға серлелек, мистицизм, изгелек, сафлыҡ, тоғролоҡ, камиллыҡ, хаҡлыҡ төшөнсәләре бәйле.

*Зәңгәр* – таҙалыҡ, юғары романтика символы. Айырыуса *күҙҙәр* менән бергә килгәндә:

*Зәңгәр күҙҙәрҙе яҙаһың,*
*Буй зифа, ҡаштар ҡара. (“Күршемдең теләге”).*

Күңел сафлығы, таҙалыҡ, паҡлыҡ, донъяға ғәжәпһенеп, сабыйҙарға хас булғанса күҙҙәрҙе ҙур итеп асып ҡарау “Кескәй Алһыуға” шиғырында сағыла. Әçәрҙә тематик ҡабатлау булараҡ *зәңгәрҙең* төрлө сағылыштары урын таба: *зәңгәр тауҙар, зәңгәр ямғыр, зәңгәр йәйғор, зәңгәр офоҡ, зәңгәр даръя, зәңгәр кәмә, зәңгәр йондоҙ* зәңгәрҙең бергә ҡулланыла алмаçтай һүҙбәйләнештәрҙә, мәçәлән, *зәңгәр иген баçыуҙары, зәңгәр урман буйҙары, зәңгәр өндәр, зәңгәр елдәр,* бергә килә алыуын, шуның менән ғәжәпләнеү хисен биреүгә өлгәшә автор:

*Ни мөғжизә, ни ғәжәп был? –*
*Бар донъя зәңгәр бөгөн,*
*Зәңгәр ҡояш сәсә ергә*
*Зәңгәр нурҙар бөртөгөн. (“Кескәй Алһыуға”).*

*Зәңгәр шулай ук матурлык билдәһе булыу функцияһын да үтәй. Мәçәлән,*
*Зәңгәр моң арбай һауаны (“Әлдә гармунсы түгелмен”).*

Һыуыҡ йыл миҙгеленең бер саҡтыһы булараҡ, *зәңгәр* сифаты һыуыҡтың символына әүерелә, *зәңгәрләнеү* ҡылымын барлыҡҡа килтерә:

*Быйылғы ҡыш үтә зәһәр булды,*
*Зәңгәрләнеп туңды күктәре. (“Һоро турғай”).*

Шулай итеп, Мостай Кәрим лирикаһында зәңгәр төç ярайһы ҙур урын алып тора. Төçтәр спектрының береһе булыуҙан тыш, зәңгәрҙең башҡа мәғәнәүи нескәлектәре лә асыҡлана, бүтән символдар рәүешендә ҡулланылыуы билдәләнә.

Яҙыусының образлы фекерләү сараһы булараҡ, төç субъектив модаллек мәғәнәһенә тап килә, төçтәр авторҙың күренеш-ваҡиғаларға мөнәсәбәтен күрһәтеүҙә мөһим сығанаҡ була, авторҙарҙың геройҙарына булған мөнәсәбәттәрен асыҡлауға булышлыҡ итә. Шул нигеҙҙә төçтәр шиғри әçәр туҡымаһына ике төрлө маҡсатта индерелә: беренсенән, пейзажды тасуирлау өсөн, икенсенән, геройҙарҙың йәки лирик геройҙың эске донъяһын сағылдырыу өсөн.

Пейзажды һүрәтләгәндә башҡа төçтәр менән бер рәттән зәңгәр төçө лә актив ҡулланыла. Халыҡ ижады әçәрҙәренә нигеҙләнгән традицион эпитеттарҙан *аҡ ҡар, аҡ*

*бәхет, ҡыҙыл офоҡ, күк офоҡ, йәшел хәтфә үлән* һ.б. кеүектәр араһында *зәңгәр күк, зәңгәр даръя* кеүек образдар поэзияның сығанаҡтарын тәшкил итә. Шағирҙарҙың төҫтәргә биргән индивидуаль баһалары иһә лириканың ғөмүмән ғәҙәттән тыш субъектив әҙәби төр булыуына бәйле. Мостай Кәрим ижады ла башҡорт халыҡ рухи ынйыларының иң күркәм өлгөләренә нигеҙләнгән, шуның менән бер рәттән уның уникаль ижади мираҫы үҙенсәлекле, тәрән йөкмәткеле, төрҙәргә, жанрҙарға бай, әҫәрҙәренән ойошҡан лирик хазина донъя әҙәбиәте ҡаҙаныштарының иң сағыуҙарының береһен тәшкил итә.

ӘҘӘБИӘТ:

1. Бикбаев Р. Халыҡ илсеһе // Кәрим М. Әҫәрҙәр. 4 томда. 1-се том. Шиғырҙар, поэмалар. – Өфө: БКН, 1987. – 400 бит.
2. Ишбердин Э. Ф. Историческое развитие лексики башкирского языка. – М.: Наука, 1986. – 152 с.
3. Мостай К. Әҫәрҙәр. 4 томда. 1-се том. Шиғырҙар, поэмалар. – Өфө: БКН, 1987. – 400 бит.
4. Мостафина Р.Д. Егерменсе быуаттың утыҙынсы йылдарында башҡорт әҙәбиәте (төп үҫеш тенденциялары һәм герой проблемаһы). Уҡыу әсбабы. – Өфө: БДУ нәшриәте, 2010. – 13-15-се биттәр.

© Ягафарова Г.Н., 2019

***Кажигалиева Г.А.,***
*д. пед. наук, профессор,*
*КазНПУ им. Абая,*
***Кажигалиева Гж.А.,***
*к. филол. н, и.о профессора,*
*КазгосженПУ,*
*Казахстан, г. Алматы*

## ЛИНГВОКУЛЬТУРНЫЙ МИР МУСТАЯ КАРИМА В КОНТЕКСТЕ ПРЕПОДАВАНИЯ РУССКОГО ЯЗЫКА КАК НЕРОДНОГО В КАЗАХСТАНСКОМ ПЕДАГОГИЧЕСКОМ ВУЗЕ

Произведения Мустая Карима, как известно, еще при его жизни стали классикой. И это неудивительно! Как писал замечательный балкарский поэт Кайсын Кулиев: «Если бы я ничего не читал о Башкирии, кроме книг Мустая Карима, и не видел ни одного башкира, кроме Мустая, то и тогда я мог бы считать, что знаю Башкирию и ее народ. В сказанном мною не только нет ничего странного, но и никакого преувеличения. Давно известно, что поэзия любого народа — лучшее выражение его души и характера, а поэт становится как бы обобщенным национальным типом. Именно с таким художником мы имеем дело, когда речь идет о Кариме. (Башкирия) – самая большая его любовь. Через нее он открывает для себя весь мир. Она – начало и конец его песни, радость и смысл его жизни» [4]. Именно потому, что поэзия Мустая Карима является квинтэссенцией накопленного веками поэтического опыта башкирского народа, прошедшего через сложнейшие исторические испытания, духовные потрясения, его творческого потенциала и современного эстетического мировоззрения, она и привлекает к себе многочисленных читателей. Творчество Мустая Карима - это символ башкирской национальной культуры, поскольку он как истинно национальный поэт сумел увидеть своим зорким поэтическим взглядом горизонты будущего, место своего народа, его

духовности в контексте прошлого и настоящего человечества, что, безусловно, стало сегодня ориентиром и направлением последующего роста и развития башкирской национальной духовности и культуры. Поэтому творческое наследие Мустая Карима неподвластно времени.

Поэзия Мустая Карима – это яркое и концентрированное олицетворение, башкирскости, и даже в переводе она не теряет, напротив, на наш взгляд, полно (заслуга и переводчиков в том числе!) передает национальное своеобразие башкирской культуры / лингвокультуры, башкирского национального мира. Именно поэтому произведения Мустая Карима стали предметом лингвокультурологического анализа на наших нескольких занятиях по общеобразовательной дисциплине «Русский язык»: работа велась со студентами искусствоведческих специальностей, изучающих русский язык как неродной. Также в данном выборе сыграла свою роль тема контактов, взаимосвязей между родственными тюркскими литературами и культурами.

Почему в нашем случае мы избрали лингвокультурологический подход? В первую очередь, потому, что лингвокультурология, как одно из направлений современной лингвистики, рассматривает язык с позиций культуры, базируется на положении о том, что в основе языковых структур лежат структуры культурные. Лингвокультурология воплощает собой диаду *язык – культура*. В определении лингвокультурологии мы придерживаемся позиции одного из родоначальников этого направления лингвистики Воробьева В.В.: «Лингвокультурология – это комплексная научная дисциплина, изучающая взаимосвязь и взаимодействие культуры и языка в его функционировании и отражающая этот процесс как целостную структуру единиц в единстве их языкового и неязыкового (культурного) содержания» [2, 26].

Таким образом, лингвокультурология обладает выраженным лингводидактическим потенциалом, лингвообразовательными возможностями. И, как показывает практика преподавания, а также анализ научно-методической литературы, наблюдения за учебным процессом изучение языка с опорой на возможности лингвокультурологии облегчает понимание собеседника, формирует восприятие на интуитивном уровне. То есть овладение языком будет полноценным, если обучающийся будет использовать единицы языка не только как носителя лексического и стилистического значения, но и как носителя национально-культурного феномена. К тому же использование лингвокультурологического подхода в лингвообразовательном процессе способствует развитию *лингвокультурной компетенции* обучающихся, под которой нами понимается владение субъектом базовыми лингвокультурными, коммуникативно-культурными нормами определенной национальной лингвокультуры. Соответственно у каждой национальной лингвокультуры есть свои базовые знания, отражающие национальную специфику этой культуры, ментальность данной нации. Помимо этого, становление лингвокультурной компетенции при использовании лингвокультурологического подхода формирует, в свою очередь, ценностные ориентиры обучающихся, поскольку, как отмечает Н.Ф. Алефиренко, «ценностно-познавательное пространство языковой картины мира» «составляет основной предмет лингвокультурологии» [1, 5].

Итак, на трех занятиях по дисциплине «Русский язык» (но в целом наша работа с использованием лингвокультурологической методики не ограничивается этими тремя занятиями; она проводится нами регулярно) мы анализировали лингвокультурные особенности поэтического мира Мустая Карима, его ключевые лингвокультуремы, являющиеся базовыми в башкирской национальной культуре. При этом лингвокультурологический подход реализовывался нами через лингвокультурологический комментарий соответствующих базовых лингвокультурем.

Лингвокультурологический комментарий трактуется нами как выявление и определение лингвокультурологического смысла, транслируемого отдельными языковыми единицами (слово, словосочетание, предложение, текст). Под лингвокультурологическим смыслом понимается едино-раздельное представление собственно языкового значения и культурно-понятийного компонента в содержании актуализированной языковой единицы, то есть лингвокультуремы (единицы исследования в лингвокультурологии [2]).

Также важно здесь отметить, что лингвокультуремы, являющиеся базовыми, обладают безусловной лингвокультурологической актуальностью, в которой мы, в свою очередь, выделяем: две ее разновидности: а) универсальная, «общечеловеческая» лингвокультурологическая актуальность и б) оригинальная, локальная лингвокультурологическая актуальность. И если лингвокультурема обладает, главным образом, универсальной лингвокультурологической актуальностью, то необходимость в лингвокультурологическом комментарии отпадает, если же лингвокультурологической единице характерна оригинальная, локальная лингвокультурологическая актуальность, то она обязательно становится объектом лингвокультурологического комментария. В случае же с лингвокультуремами из произведений Мустая Карима мы акцентировали свое внимание на единицах, относящихся ко второй группе.

Лингвокультурологический комментарий, в нашем случае, проводится, как правило, преподавателем чаще всего в форме устного сжатого изложения лингвокультурологического смысла выделенных в соответствующем художественном тексте лингвокультурем, которое параллельно конспектируется (аналогично конспектированию лекций) студентами, или же в случае, к примеру, объемности информации студенты снабжаются письменными вариантами лингвокультурологического содержания выделенных языковых единиц текста. Третий вид ознакомления обучаемых с лингвокультурологическим смыслом соответствующих лингвистических фактов художественного текста – самостоятельная внеаудиторная работа учащихся над предоставленными письменными вариантами содержания лингвокультурем с последующим письменным оформлением в сжатом виде данного содержания в своих рабочих тетрадях (конспект, интеллект-карта, опорная схема, таблица, кластер и т.д.).

После осуществления лингвокультурологического комментария студентами выполняются репродуктивные и продуктивные речевые задания для актуализации новых лингвокультурем в своем коммуникативном словаре.

Впоследствии в блочной или итоговой форме в целях реализации контроля полученных знаний, умений и навыков по лингвокультурологической теории и практике проводится тестирование на основе тестовых заданий, в которых «зашифрованы» изученные лингвокультурологические единицы, а также отдельные положения лингвокультурологической теории.

Итак, в ходе знакомства с произведениями Мустая Карима студенты одновременно узнали о лингвокультурологическом смысле следующих базовых в башкирской лингвокультуре лингвокультурем: *Башкирия / Башкортостан, Ик, Яик, Акманай, Девичья горка, курай, Урал, конь, Идель*. В силу ограниченности объемов настоящей статьи мы приведем здесь описание проведенной работы только с лингвокультуремой *курай*.

Первоначально ребята знакомятся с краткой справкой о жизни и творчестве Мустая Карима, в том числе и в виде компьютерной презентации, затем ребята читают представленные им произведения поэта, анализируют данные тексты, после чего

проводится вся вышеуказанная работа, связанная с осуществлением лингвокультурологического комментария.

К примеру, студенты читают следующие строки из стихотворения «Обрушился с вечера шторм» Мустая Карима:

*Обрушился с вечера шторм. И всю долгую ночь*
*И стонет* ***курай****, и ликует* ***курай****: "Мой* ***Урал****!*
*О, вечный* ***Урал*** *мой,* ***Урал*** *мой!.." И в эту минуту*
*Сквозь десять веков я на жарком* ***коне*** *проскакал*
*Туда и обратно - сквозь десять столетий как будто...*
*И древняя песня, бурля, устремила свой бег*
*По жилам моим, запылала, забилась жар-птицей...*

Для полноценного восприятия идеи данных поэтических строк надо знать культурно-понятийное содержание базовых для башкирской лингвокультуры лингвокультурем (выделены нами в приведенном тексте): *курай, Урал, конь*.

Так, о культурно-понятийном содержании лингвокультуремы *курай* студенты узнают следующее:

***Курай*** (башк. курай) – башкирский духовой музыкальный инструмент. Имеет несколько разновидностей, отличающихся конструкцией и материалом изготовления. Традиционный материал для изготовления - срезанные и высушенные стебли уральского реброплодника; в настоящее время широко используются современные материалы (строганый шпон, металл). Название происходит от древнетюркского *qağuray*, корень «qaq» соответствует значению «*сухой*», «*высушенный*».

Возникший в глубине веков курай за долгий исторический период совершенствовался как сольный аккомпанирующий и ансамблевый инструмент, мастерская игра на нем сопровождала и пение песни, и узляу (вид особого, горлового, пения). Тема курая отражена и в башкирском фольклоре: курай упоминается в эпических сказаниях «Акбузат», «Кара юрга», «Заятуляк и Хыухылыу», «Куныр буга». Именно в сопровождении курая исполняются протяжные мелодии *озон-кюй* («Ашкадар», «Баяс», «Тафтиляу», «Буран-бай», «Бейеш», «Азамат» и др.). Курайное музицирование сопровождало сказительские, певческие, танцевальные импровизации. Мастера-кураисты были почитаемыми людьми в обществе, значимость йыйынов (торжественных мероприятий, празднеств, собраний) определялась присутствием на них знаменитых кураистов. Главный приз майданов завоевывал мастер, который исполнял несколько мелодий, предварительно рассказав их истории, а звук его курая должен был быть слышен на 10 верст по ветру. Выразительным искусством звукоподражания, имитацией голосов птиц, животных владели отдельные мастера-кураисты [3, 408].

Как было уже отмечено нами в предыдущих исследованиях фольклорного наследия народов края, в начале XXI века из репертуара народных исполнителей исчезли частушки на темы рекрутской службы, Империалистической и Гражданской войн. Вместо них появились частушки на «политические темы», в которых содержатся критика представителей и руководителей различных партий, размышления о годах перестройки и современных нововведениях [5, 133]. В Кармаскалинском районе от жителя деревни Старобабичево М. Н. Камаловой нами было записано несколько частушек такого характера: «Оптимизация тигәне, // Килеп сыкты ҡайҙарҙан? // Ҡыҫҡартыу тигән нәмәне, // Башлаһаңсы баҙарҙан»; «Инфляция булмаһа, // Таҡмаҡтар тыумаҫ ине. // Халыҡ алдап, һатыусының // Кеҫәһе тулмаҫ ине»; «Коррупция бөттө, тиҙәр, // Бөттөмө икән, белмәйем. // Инде нисек йәшәрҙәр, тип, //Түрәләрҙе йәлләйем». Часто встречаются в репертуаре современных информантов антиалкогольные частушки: «Алай итәйек әле, // Былай итәйек әле. // Араҡы эсеүҙе ташлап, // Донъя көтәйек әле».

Быт и повседневные заботы являются для создателей и исполнителей частушек главными. Это людские судьбы, любовные и дружеские взаимоотношения, коллективный труд. Нередко частушки локализованы: «Олокүлдең сибәрҙәре // “Саратовский” уйната. // Һүнеп барған йөрәктәрҙә // Йәшәү дәрте уята»; «Олокүл ауылы аша // Поездар китә икән. // Хаҡтар арта, гармун тарта // Олокүл сибәрҙәре»; «Ҡырмыҫҡалының баҙары// Көн һайын булһа ине. // Хаҡтарының гөлләмәһе, // Боҙ булып, туңһа ине!» (записано от М. Н. Камаловой, 1946 г. рожд., в дер. Старобабичево Кармаскалинского района).

Традиционным остается для частушек поэтический прием, связанный с повтором слов: «Хорошо, хорошо, // Хорошо играете. // Ваше сердце не болит, // Про мое не знаете»; «Ох, какая была я! // Вот какая стала я... // Вот какому хулигану // Подчиняться стала я»; «Ал итә, итә, итә, // Гөл итә, итә, итә. // Яндарыңа барыр идем, // Ял итә, итә, итә» (записано от О. А. Дмитриевой, 1930 г. рожд., с. Ефремкино Кармаскалинского района).

В частушках также рельефно воспроизводится полиэтническая действительность Башкортостана: «Полюбила я татарина, // А мамка не велит. // По татарине сердечушко

// Ещё больше болит» (записано от З.В. Чебыкиной, 1945 г. рожд., в с. Ногуши Белокатайского района). Во многих песнях и частушках прославляется дружба народов края: «Башҡортостандың ерҙәре, // Күп милəттең илдәре. // Күп милəттең илдәре, // Сәскә ата гөлдәре»; «Урыҫ-башҡорт дуҫлығы – // Илемдең оло көҙгөһө. // Халҡымдың борондан килгән // Аҡылының өлгөһө» (записано от М. Н. Камаловой, 1946 г. рожд., в дер. Старобабичево Кармаскалинского района).

Таким образом, частушки как активно функционирующий в настоящее время фольклорный жанр отличаются идейно-тематическим богатством и ярко высвечивают актуальные проблемы современного общества. С сожалением вынуждены констатировать, что традиционные формы фольклора постепенно уходят в прошлое и воспринимаются в наши дни как поэтическое наследие предков. Так, в багаже современных информантов практически нет материалов по кубаирам-сказаниям, баитам. Исследование особенностей межэтнических взаимодействий в фольклоре может способствовать выявлению важных подходов к пониманию актуальных в современном полиэтническом обществе феноменов межэтнической толерантности и межкультурных связей.

ЛИТЕРАТУРА:

1. *Лазутин С. Г.* Русская частушка: вопросы происхождения и формирования жанра. – Воронеж, I960. – 264 с.; *Калецкий П. И.* О поэтике частушек // Литературный критик. – 1936. – № 9. – С. 186-206; *Кулагина А. В.* Параллелизм и символика в частушках // Фольклор как искусство слова. – Вып. 5.-М., 1981. – С. 102-126 и др.
2. *Зырянов И. В.* О внутрижанровой классификации частушек // Русский фольклор. – Вып. 9. – М. – Л., 1964. –С. 122-131; *Аникин В. П.* Традиции жанра как критерий фольклорности в современном творчестве // Русский фольклор. Вып. 10. - М.-Л., 1964. – С. 82-96; *Лазарев А. И.* Поэтика частушки //Трудные темы изучения фольклора. – Челябинск, 1998. – С.187-195 и др.
3. *Зырянов И. В.* Поэтика русской частушки. – Пермь, 1974. – 173 с.
4. Частушки (устами русских). Сбор материала, составление, вступительная статья, словарь и фотоматериалы И. Е. Карпухина; комментарии Э. А. Карпухиной; нотные расшифровки и пояснения к ним – М. В. Гарбуз. – Уфа: Китап, 2006. – 776 с.
5. Современное состояние преданий, частушек и быличек северо-восточной Башкирии: сборник фольклорных текстов. Составители: Б. Г. Ахметшин, И. Г. Кульсарина, Н. Г. Кульсарин. Под общ. ред. Б. Г. Ахметшина. – Уфа: РИЦ БашГУ, 2013. – 212 с.

*Статья подготовлена в рамках поддержанного РФФИ научного проекта №18-412-020021 р_а.*

© Кульсарина И.Г., Кульсарин Н.Г., 2019

***Кульсарина И.Г.,***
*к. филол. н., доцент, БашГУ, г. Уфа*

## ТВОРЧЕСТВО РУССКИХ ПИСАТЕЛЕЙ В ХУДОЖЕСТВЕННОМ МИРЕ МУСТАЯ КАРИМА

Творчество известного классика башкирской литературы М. Карима отличается глубоким патриотическим пафосом, богатой афористичностью и философскими

обобщениями. В его художественном мире гармонично сосуществует опыт двух великих культур – Востока и Запада. Важную роль в творческой эволюции М. Карима сыграла русская культура. Писатель назвал русский язык великим толмачом мыслей и страстей народов, сделавший поэзию нерусских поэтов достоянием всей страны [1, 157]. Значение русского языка для себя башкирский поэт определил так: «Я пишу и думаю по-башкирски, но для меня русский язык существует как эталон. Поэтому, работая над словом, подсознательно проверяю себя по-русски. Точно ли ложится мое башкирское слово? Обращение к русской речи помогает мне глубже постичь тайны моего родного слова» [1, 241].

Анализируя сборник «Цветы на камне», А. Парфенов утверждает, что по включенным в него стихам легко можно «обнаружить плодотворное влияние на М. Карима Пушкина и Лермонтова, патриотической взволнованности поэзии В. Маяковского и живой песенной интонации М. Исаковского» [2]. Неслучайно эпиграфом к своим стихам М. Карим нередко подбирает строки из русской классики. Например, к стихотворению «Киев» предпосланы слова А. С. Пушкина «Как тополь киевских высот…», а известные строки «…чувства добрые я лирой пробуждал» предваряют стихотворение «Разговор со своей песней». Они служат камертоном к произведениям башкирского поэта. Так, стихотворение «Мой край, возлюбленный навеки!» М. Карима открываются эпиграфом, состоящим из строк стихотворения А. Блока «На поле Куликовом» «О, Русь моя! // Жена моя!», и завершаются словами: «Башҡортостан, һөйгән йәрем!» («Башкирия, моя возлюбленная!»). Как и русский поэт, М.Карим пишет о своих нежных чувствах к своей родной земле, которую он называет влагой для своих корней, источником вдохновенья и силы.

В творчестве М. Карима отмечается плодотворное влияние русской поэзии XX века, в частности К. Симонова, А. Твардовского, С. Есенина. Так, объектом сравнительного анализа литературоведов стали поэмы «Василий Теркин» и «Ульмясбай». А. Твардовский помог башкирскому писателю также в определении названия трагедии «Салават». Как вспоминает М. Карим: «Написав трагедию о башкирском национальном герое – поэте Салавате Юлаеве, я дал своему сочинению название «Плач поэта». Это название я оправдывал тем, что плачет не Салават, а современный поэт по Салавату. …. Александр Трифонович …добавил: «Точнее название, чем «Салават», и не может быть для поэмы о нем. Ничто так верно и полно не скажет о Салавате, нежели его собственное имя…» [3, 306].

В произведениях М. Карима нередко можно встретить цитаты из творчества русских авторов. Например, обращение к русской классике в пьесе «Свадьба продолжается» помогло не только расширить её художественное пространство, но и углубить идейное содержание. Один из героев пьесы Малих во время свадебного торжества, вынув приколотые к груди молодоженов цветы и поставив их в воду, произнес такое напутственное им слово: «Туй мәлендә был сәскәләр өҫтәл өҫтөндә торорҙар. Ә һуңынан Гөлшат уларҙы алыр ҙа берәй шиғыр китабы эсенән һалыр. Бик оҙаҡ йылдар үтер, бәлки. Бер саҡ ҡапыл китап эсенән ике сәскә килеп сығыр. Пушкин шиғырындағы кеүегерәк. Был сәскәләрҙең яҙы, уларҙы өҙөүселәрҙең һәм күкрәктәренә ҡаҙап йөрөүселәрҙең яҙы шунда уҡ күҙ алдына килер» [4, 13]. В данном случае речь идет о стихотворении А. С. Пушкина «Цветок», в котором автор размышляет о быстротечности человеческой жизни. Лирический герой находит между листов книги засушенный цветок и это незначительное событие вызывает много вопросов: кто, когда и зачем положил цветок в книгу? Свидетелем каких страстей, каких событий был хрупкий стебелек и лепестки, утратившие былую яркость? Однако череда вопросов

остается в стихотворении без ответа. В пьесе М. Карима Малих уверен в том, что молодые, обнаружив через многие годы приятную находку в книге, вспомнят о весне своей юности. А Салах, продолжая тост Малиха, пожелал, чтобы Гульшат положила пока эти цветы в книгу Пушкина, а когда будет издан сборник стихов Малиха, переложила их в его книгу. В данной пьесе М. Карим обращается и к творчеству М. Горького. Крылатые слова из его «Песни о соколе» «Безумству храбрых поем мы песню» стали отправной точкой для размышлений лейтенанту Горячеву и Загиру о ратных неудачах, а также смелости и подвигах в бою. На вопрос «Что такое храбрость?» Загир отвечает: «Батырлыҡ ул – тормошҡа, үҙеңдең йәшәүеңә ышаныу. Батыр кеше үзен ерҙә шундай ныҡ һиҙә, хатта ул үҙенә әжәл ҡағылыуҙы башына ла килтермәй» (букв.: «Храбрость – это вера в жизнь и уверенность в своем существовании. Смелый человек чувствует себя на этой земле так уверенно, что даже не представляет о прикосновении когда-нибудь к нему смерти» [4, 26]. Для Горячева, после неудачных военных операций, это прежде всего, не считаясь с опасностью и рискуя собой, идти вперед к цели.

В повести «Долгое-долгое детство» М. Карим приводит на русском языке песню о тонкой рябине, «мечтающей перебраться к дубу» [5, 507-508]. Эту песню, когда-то сочиненную И. З. Суриковым и ставшую в наши дни народной, поет вечерами один из больных в лечебнице Румынии. Слушая данную заунывную мелодию вдали от Родины, лирический герой чувствует себя таким же одиноким, как тот дуб.

В либретто для оперы «Гульзифа» М. Карима разыгрывается мотив «золотой рыбки», широко известный по произведению А. С. Пушкина «Сказка о рыбаке и рыбке». Рыбак, один из героев вышеназванного произведения, поймав необычный улов, делится своей радостью с окружающими и предлагает всем загадывать желание и просить об его исполнении у золотой рыбки. Если кто-то просит об исцелении больного зуба, то школьнику нужны отличные оценки, а старик Ямай хочет унять болтливость своей старушки. Абделхак же высказал свое желание жениться на чувашской девушке Гульмарии и отметить это событие пышной интернациональной свадьбой [5, 336]. Широко известный мотив помог автору разносторонне показать характеры героев и углубить идею произведения.

В литературной сокровищнице М. Карима есть стихи, имеющие подзаголовок «из». Например, стихотворение «Первые капли» содержит пояснение «из Фета». Содержание первой строфы «Весеннего дождя» русского автора в башкирском тексте передано во втором куплете. Если у А. Фета «Еще светло перед окном, // В разрывы облак солнце блещет», то у М. Карима «Ҡояш та бөркәнсек ябынды, // Өйҙәрҙә тәҙрәләр ябылды» (букв.: И солнце накрылось накидкой,// В домах закрылись окна» [6, 34]. В башкирском тексте наблюдается стремление к конкретизации и динамике. Так, у А. Фета во второй строфе описывается опушка леса, окрашенная в золотые краски, то у М. Карима лирический герой наблюдает за стаей грачей, пролетающих низко и с шумом: «Түбәндән шаулашып, гөрләшеп, // Үттеләр бер төркөм ҡарғалар» [6, 34]. В пейзажной зарисовке русского поэта мы не встречаем слова «дождь». Данное природное явление умело передано контекстными синонимами - «завеса», «что-то барабанит», «две капли». В стихотворении М.Карима мы чувствуем запах дождя: «Ел бөгөн, хәбәрсе шикелле, // Ямғырҙың хуш еҫен килтерҙе» [6, 34]. Яркая выразительная картина весеннего дождя передается авторами с помощью разных средств выразительности. В отличие от А. Фета у М. Карима чаще используется прием олицетворения (болоттар ҡабара, ҡояш бөркәнсек ябынды, ел ... ямғырҙың хуш еҫен килтерҙе, тамсылар һикерҙе).

В творчестве М. Карима удачно продолжены художественные традиции Л. Толстого. Это рельефно проявляется в его книге «Долгое-долгое детство», успешно продолжающую линию автобиографических повестей в отечественной литературе. Неслучайно в читательском восприятии первая картина повести, рисующая образ раненого солдата, лежащего на поле брани, и в бредовом сознании которого проносятся прошлые события из его мирной жизни, вызывает *аллюзию* на эпизод «встречи» А. Болконского с дубом из романа «Война и мир» Л. Толстого. Наиболее ощутимо влияние русского классика в военной прозе Мустая Карима – в правдивом описании трагических событий и раскрытии психологии человека на войне, в изображении героического и возвышенного в самых будничных ситуациях, в органическом переплетении великого и низменного, радости и горя.

В пьесе «Пеший Махмут» Замзагуль, которая принимает заказы в ателье, увлекается игрой в театр. В её галерее персонажей-манекенов есть и героиня романа Л.Н.Толстого Наташа Ростова. «Йән киçәккәйем Наташа Ростова! Исмаһам, һин аҙыраҡ күҙ-ҡолаҡ булыр инең шул Дон Жуанға» (букв.: Душенька, Наташа Ростова! Хоть бы ты присмотрела за Дон Жуаном»), – так обращается она манекену [5, 136]. В данном эпизоде автор умело использовал уникальное свойство прецедентных имен литературных героев. За повесой и обольстителем женских сердец Дон Жуаном Замзагуль просит присмотреть героиню Л. Н. Толстого, олицетворяющей собой идеал женщины-матери, хранительницы семейного очага.

Необходимо отметить высокое мастерство М. Карима в использовании классических литературных образов и мотивов, которые внедрены в художественную ткань произведений как бы невзначай, но при этом имеют большую смысловую нагрузку. Например, в повести «Долгое-долгое детство» имеется такой эпизод: «Мин Сәлих ағайымды оҙатам. Ағайым аҙ ғына ҡыҙмаса. «Соландағы ҡумтала беҙҙең тракторҙың асҡыстары ята, - тип шыбырай ул еңгәмдең ҡолағына, - шуларҙы иртәгә үк Сәйфуллаға илтеп тапшыр... Донъяла иң кәрәкле нәмә – асҡыс ул. Ни өсөн тиһең алтын асҡыс тураһында әкиәт сығарғандар...». В последней фразе данного отрывка упоминается сказка о золотом ключике. Скорее автор намекает на повесть-сказку А. Н. Толстого «Золотой ключик, или Приключения Буратино», представляющую собой литературную обработку сказки Карло Коллоди.

О благотворном влиянии русской литературы на художественное сознание М. Карима ярко свидетельствуют его статьи и заметки «Великий Человекопоклонник» (о М. Горьком), «Как удар сердца» (о А. Блоке), «Его присутствие» (о А. Твардовском), «Воспоминания у кромки моря» (о К. Симонове), «Дудин мне говорил…» (о М. Дудине), «Пора душевного плодородия» (о И. Снеговой). В них башкирский писатель размышляет о роли М. Горького в развитии национальных литератур России, вполне справедливо отмечая о том, что «каждое поколение, каждое время по-своему будет открывать Горького, иногда вступать с ним в спор. Ибо великий писатель немало спорил с жизнью, человеком, временем» [3, 294]. В статье о А. Блоке башкирский поэт пишет: «За недолгий свой путь написав тома шедевров, Александр Блок преподал урок поэтам, что талант не имеет права быть ленивым, что гений и нерадивость – несовместимые. … Александр Блок оставил после себя несказанный праздник влюбленности – влюбленности в Жизнь, Революцию, Женщину, Мечту. Этот праздник мы называем Поэзией» [3, 295]. Все эти наблюдения над творческим опытом и мировоззрением русских писателей были успешно использованы и развиты в художественном мире М. Карима, о чем ярко свидетельствует его богатое литературное наследие.

ЛИТЕРАТУРА:


1. Мустай Карим. Притча о трех братьях. – М.: Современник, 1988. – 366 с.
2. Парфенов А. Стихи Мустая Карима// Октябрь. – 1950. – № 4. – С. 190.
3. Мустай Карим. Собрание сочинений. В 3-х т. Т.3. Долгое-долгое детство: повесть; Притча о трёх братьях; Статьи, воспоминания, беседы. – М., 1983. 480 с.
4. Мустай Карим. Сочинения. Т.3. Пьесы, либретто. – Уфа, 2012. – 608 с. (на башк. яз.).
5. Мустай Карим. Сочинения. В 4 тт. Т.3. Пьесы, повести, рассказы. –Уфа, 1987. – 592 с. (на башк.яз.).
6. Мустай Карим. Сочинения. Т.1. Стихотворения, поэмы. – Уфа, 2009. –512 с. (на башк. яз.).


© Кульсарина И.Г., 2019

***Кәлимуллина Л.Р.,***
*магистрант, БДУ, Өфө к.*
***Гәрәева Г.Н.,***
*д. филол. н., профессор, БДУ, Өфө к.*

## КИРӘЙ МӘРГӘН ӘҪӘРҘӘРЕНДӘ БАЛАЛАР ПСИХОЛОГИЯҺЫ БИРЕЛЕШЕ

Утыҙынсы йылдар аҙағында Кирәй Мәргән балалар өсөн проза әҫәрҙәре өҫтөндә эшләй. “Ҡунаҡ”, “Йәүгилде бабай әкиәте” кеүек хикәйәләре кесе йәштәге балаларҙы персонаж итеп алыуҙары менән генә түгел, тәрбиәүи йүнәлештең өҫтөнлөк итеүе менән дә балалар әҙәбиәте әҫәрҙәре булараҡ ҡарала алалар. [1, 59]

Кирәй Мәргәндең балалар прозаһы өлкәһендәге иң күренекле әҫәрҙәре – “Ҡариҙел серҙәре” һәм “Юйылған эҙҙәр” повестары.

Тәүге повесть беренсе ҡат 1949 йылда “Ҡариҙел” исеме менән баҫылды. Уның был вариантында сюжет әллә ни ҡатмарлы түгел. Бер нисә йәш үҫмер, “Пионерская правда” газетаһынан Алтай пионерҙарының йәйге каникул ваҡытында поход ойоштороуы тураһында хәбәр уҡып, үҙҙәре лә Ҡариҙел буйлап кәмәлә шундай сәйәхәткә сығырға булалар.[2, 370] Әҫәрҙә Юлай, Сабит, Иршат һ.б. бер нисә уҡыусының, ошо поход ваҡытында, юлда тап килгән ауырлыҡтарҙы үтеп сығыу процесында, характерҙары артабан нығыуы, балаларҙың холоҡ-ҡылыҡ ҡаршылыҡтарын, улар араһында осраған төрлө етешһеҙлектәрҙе еңә барып, берҙәм коллективтың ойошоуы күрһәтелгән. Повестың сюжетына Ҡариҙел яры буйында ниндәйҙер шикле кешеләр менән осрашып, уларҙың кемлеген асыҡларға тырышыу, граждандар һуғышында һәләк булған геройҙарҙың иҫтәлегенә бәйле материалдар, боронғо шәжәрәләр эҙләү, командарм Блюхерҙың граждандар һуғышында батыр разведчик булған Зиннәт Сәйфуллиндың һәләк булыуы тураһында уның ата-әсәләренә яҙған хатын табып алыу, ә ахыр сиктә иһә ысынында иҫән ҡалған Зиннәт ағай менән осрашыу, бөтә шундай факттар менән мағыуып, “Партизандар” китабы төҙөй башлау һ.б. күп кенә мажаралы, мауыҡтырғыс күренештәр индерелә.

Әгәр повестың тәүге вариантында балалар үҫемлек һәм таштар менән ҡыҙыҡһынған булһалар, хәҙер улар ырыуҙар тарихы, халыҡ ауыҙ ижады һәм тарихи ҡомартҡылар менән мауығалар. Тәүге вариантта мәктәптең һәм ата-әсәләрҙең балаларҙы Ҡариҙел буйлап бер нисә көнлөк сәйәхәткә үҙҙәрен генә сығарып ебәреүҙәре күрһәтелһә һәм,

ғөмүмән, кәмәлә йөҙөүсе үҫмерҙәр үҙҙәре генә тиерлек һүрәтләнһә, хәҙер инде уларҙың походы менән етәкселек итеүсе вожатый Фатима образына ла ҙур ғына урын бирелә. Шулай уҡ йылға буйында төрлө шарттарҙа осраған серле бакенщик Закирйән (ул - ысын йөҙөн йәшергән революция дошманы Сахай Тахаев булып сыға), уны тотоуҙа ҡатнашыусы Самбосәйет, Зиннәт Сәйфуллин һ. б. байтаҡ ҡына яңы образдар өҫтәлгән. Балалар хәҙер ауылдарҙа һабан туйҙарында ла булалар, йөҙйәшәр ҡарттар менән осрашып, боронғо риүәйәттәрҙе, тарихи иҫтәлектәрҙе тыңлайҙар, үҙҙәре күҙ үк эҙтабарҙар, үткәндәге ҡомартҡылар менән ҡыҙыҡһыныусы тиҫтерҙәре менән танышалар. [3, 210]

Бына шулар бөтәһе повестың йөкмәткеһен бик ныҡ үҙгәрткән һәм байытҡан. Унда балалар йәнле образ булараҡ төрлө яҡлы кәүҙәләнеү менән бергә, ҙурҙар тормошо һәм ғөмүмән халыҡтың көнкүреше лә тулыраҡ төҫмөрләнә, һөҙөмтәлә әҫәрҙең ижтимағи-социаль яңғырашы ныҡ ҡына көсәйгән.

Кирәй Мәргәндең «Юйылған эҙҙәр» (1973) повесы үҙенең йөкмәткеһе менән дә, образдар эшләнеше менән дә «Ҡариҙел серҙәре»нең логик дауамы төҫөндә. [4, 195] Унда ла тыуған яҡта булып үткән тарихи факттарҙы, айырым шәхестәрҙең заман серҙәре менән ҡапланған яҙмыштарын юллаусы эҙәрмәндәр һүрәтләнә. Фәтхетдин Имашев тигән кеше тарафынан күсерелгән шәжәрәлә «1919 йылда ҡыҙыл ғәскәрҙәр тарафынан атылмыштар» тип ҡуйылһа ла, халыҡ хәтерендә Совет власы өсөн көрәшсе булараҡ һаҡланып ҡалған Ҡәнзәфәрҙең яҙмышын асыҡлау өсөн бөтә тырышлығын һалған Фаршат исемле уҡыусы баланың мажаралары, уның ауылдағы һәм тирә-яҡтағы өлкән кешеләр менән осрашыуҙары повестың сюжеты нигеҙендә ята. Тәүҙә үҙ яҡтарында йәш эҙәрмәндәр өсөн һис бер соҡсоноп торор урын юҡ, хәтерҙә ҡалырлыҡ эре ваҡиғалар ҙа булмаған, тип иҫәпләгән балалар данлы исеме яуыз ниәт менән бысратылған ҡаһармандарҙың тарихтағы ысын урындарын асыҡлауға әһәмиәтле өлөш индерәләр.

Балалар тормошон сағылдырған хикәйәләре араһынан “Шифалы айран” әҫәренә туҡталып китәйек. “Шифалы айран“ хикәйәһендә Сабит исемле малайҙың алты саҡрым алыҫлыҡтағы Көтөртауҙа бесән сабыусы атаһына айран илткән юлының кешелек сифаттарына һынау булыуын яҙыусы бәләкәй генә эпизодтарҙа нескә психологизм, такт менән һүрәтләп бирә. Был хикәйәнең күтәргән идеяһы, сюжеты, хикәйәләү алымы менән башҡорт халыҡ әкиәттәре традицияларына яҡын икәнлеге лә күҙгә салына.

Иртә таңдан бесән сабырға киткән атаһынан йоҡлап тороп ҡалғанына эсе бошоп йөрөгән малай әсәһенең сабынлыҡҡа һалҡын айран илтергә ҡушыуын шатланып ҡабул итә. Самаһыҙ эҫе, бөркөү көндә колхоз баҫыуҙары буйлап үткән саңлы юлдан бесәнлеккә ашыҡҡан Сабиттың тирә-йүнде күҙәтеп китеп барыуын хикәйәләгәндә, яҙыусы әленән-әле бер фразаны ҡабатлай тора, кескәй геройҙың үҙ бурысын еренә еткереп үтәргә ынтылыуына баҫым яһай: «Ҡулында уның атаһы өсөн тип алып сыҡҡан бер көршәк айран да бар». Яңы ғына баш ҡоҫҡан, быуынға һикергән арыш баҫыуын үтеп, бойҙай сәселгән участкаларға килеп етеүгә, Сабит алдына бәләкәс кенә тракторҙа кукуруз культивациялап йөрөүсе тракторист килеп туҡтай. Малайҙың ҡулындағы көршәктә һыу түгел, ә атаһына тәғәйенләнгән айран икәнлеген белгәс, ымһынып ҡалған балалай, кипкән ирендәрен ялай-ялай кире машинаһына боролған трактористы йәлләп, Сабит уға айран эсерә. Һалҡын айранды мул ғына һемергән ағай рәхмәт әйтеп, атайыңа оҡшағанһың икән тип маҡтап, йәһәт кенә эшкә ҡуҙғала. Сабит та юлын дауам итә. Көн тағы ла ҡыҙыулана төшһә лә, малайҙың күңеле күтәрелә генә, әммә автор геройҙың психологик хәлен туранана-тура аңлатмай, белмәмешкә һалышып, кинәйә менән еткерә: “ көршәктәге айран кәмегәнгәме, әллә бүтәнгәме, уға хәҙер барыуы ла еңелерәк һымаҡ».

Ҡантамыр һымаҡ бүртенә биреп ҡалҡынған ҡарабойҙай ерҙәре буйлап ашығып китеп барған герой алдында ҡапыл әбей менән бабай пәйҙә була. Районда килгән машинанан төшөп ҡалып, ауылға тиклемге юлды ошондай эҫе көндә йәйәүләп үтергә мәжбүр булған ҡарттарҙы йәлләп, Сабит уларға ла айран эсерә. Кем улы булғанын белешкән бабай: «Әфләтуновтар заты икәнһең. Молодец, игелек күр. Олатайың да шәп кеше ине һинең», - тип рәхмәтен белдерә. Бынан һуң Сабитҡа тирә-йүн яҡты, сағыу буяуҙарҙа күренә: «Баҫыу уға киң ҡоласын йәйҙе. Юлды ике яҡлап һуҙылған сәсеү ерҙәре йылмайышып оҙатҡан һымаҡ тойолдолар. Көршәк тә хәҙер еңеләйгәйне, күңел түренә лә әллә нindәй аңлатып булмай торған еңеллек килде. Көтөртау хәҙер бөтөнләй яҡынайып китте».

Атаһы бесән сапҡан Көтөртау итәгенә аяҡ баҫыуға, герой алдына арбалы ат килеп сыға. Уттай эш өҫтөндә ҡаты ауырып киткән ҡатынын дауаларға алып китеп барған ағайҙың хәсрәтле һүҙҙәрен тыңлаған, врач хаҡында һорашыуҙарына яуап биргән Сабит, был ауыр хәлдә үҙенең дә ҡатнашы бар һымаҡ тойоп, нисек тә уларҙың хәлен еңеләйтмәксе була, арбала һуҙылып ятҡан еңгәгә айран тәҡдим итә. Һыуһап, тамағы кибеп ятҡан хәлһеҙ ҡатынына шифалы айран эсергән ағай ысын күңелдән рәхмәтен белдерә: “Рәхмәт”.

Яубүләк малайы тинеңме әле? Яубүләктекеләр һәр саҡ шулай йомарт булдылар. Игелек күр».

Күңелендә аңлатып биргеһеҙ бер еңеллек, матур тойғолар кисергән малай, бер-ике генә йотом айран ҡалған көршәкте тотоп, сарсаған, тамағы сатнап кипкән, улын ашҡынып, һөйөнөп ҡаршы алған атаһы янына килеп туҡтай, уның алдында үҙен сикһеҙ ғәйепле тойоп, тамағына төйөр ултыра, ике күҙенә ике бөртөк йәш килеп тығыла. Юлдағы хәлдәрҙе бәйнә-бәйнә һөйләп биргән һәм, нindәй генә яза булһа ла, түҙергә әҙерләнеп торған улына ҡарап, атаһы: «Молодец, улым, был юлы һин миңә айрандың иң тәмлеһен, иң ҡәҙерлеһен килтерҙең. Хәҙер мин һиңә һәр ваҡыт таяна алам. Һин ысын кеше булып етешкәнһең», - тигән баһаһын еткерә. Шулай итеп, Кирәй Мәргән ябай ғына бер ваҡиға – геройҙың атаһына айран илткән юлын хикәйәләү аша уның эске булмышын, иғтибарлылыҡ, намыҫ, бурыс, выждан, изгелек төшөнсәләрен бәләкәй йөрәгенә һыйҙырған ысын кеше булып үҫеп килеүен күрһәтеп бирә, яҙыусы шулай уҡ малайҙың атаһы, юлда осраған башҡа персонаждар йөҙөндә замандаштарының тыйнаҡлыҡ, инсафлыҡ, әҙәплелек, тәрбиәлелек бөркөлөп торған гүзәл кешелек сифаттарын үткер психологик деталдәр, подтекст, тос һүрәтләү саралары ярҙамында ыҡсым сюжет һыҙығында балҡытып асып ебәрә.

ӘҘӘБИӘТ

1. Аҙнағолов Р.Ғ. Яҙыусының серле донъяһы // Сәйләндәрем төҫлө-төҫлө. – Өфө: Китап, 2007. – 59 бит.
2. Башҡорт әҙәбиәте тарихы: 6 томда: - Т.3. Хәҙерге әҙәбиәт / Яуаплы ред. Р.Н.Байымов. - Өфө: Китап, 1996. - 370 бит.
3. Кирәй М. Эҙләнеү. Хикәйәләр. – Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1938. – 210 бит.
4. Кирәй М. Ҡабалан кеше. Хикәйәләр. – Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1939. – 195 бит.

© Кәлимуллина Л.Р., Гәрәева Г.Н., 2019

***Ҡазыханова И.У.,***
*магистрант, БДУ, Өфө к.*
***Ҡунафин Ғ.С.,***
*филол. ф. д., проф., БФА-ның мөхбир ағзаһы,*
*БДУ, Өфө к.*

# ТИМЕР ЙОСОПОВ ШИҒРИӘТЕНДӘ ҠАБАТЛАУҒА НИГЕҘЛӘНГӘН СТИЛИСТИК ФИГУРАЛАР (ҠАЙҺЫ БЕР КҮҘӘТЕҮҘӘР).

Поэзияны замандың поэтик йылъяҙмаһы тип йөрөтәләр. Хәҙерге башҡорт поэзияһы ла илебеҙҙә, бөтә донъяла барған мөһим хәл-ваҡиғаларҙы, кешенең рухи донъяһын шиғри һүҙ аша шаҡтай асыҡ сағылдыра. Хәҙерге шиғриәттә, ысынлап та, замандың һулышын, замандаштарыбыҙҙың уй-кисерешен асыҡ тойорға мөмкин.

“XX быуаттың һикһәненсе-туҡһанынсы йылдарындағы башҡорт поэзияһы ҙур ижади уңыштарға өлгәште, уның граждандлыҡ пафосы көсәйҙе: шағирҙар бөтә кешеләрҙе уйландырған, борсоған мәсьәләләрҙе ҡыйыуыраҡ күтәрә башланы, шиғри һүҙҙең бәҫе, тәьҫир көсө артты” [2; 217 б.].

Алтмышынсы йылдарҙың икенсе яртыһынан алып ике меңенсе йылдарҙың башына тиклемге осорҙа Тимер Йосопов үҙ дәүер ҡәләмдәштәре менән барыһынан алда тормоштоң иң үҙәк ваҡиғалары менән тығыҙ бәйләнештә ижад итте, замандың киҫкен хәлдәрен йөрктән үткәрҙе, ил һәм халыҡ яҙмышы тураһында борсолоп уйланды.

Тимер Йосопов поэзияһының иң яҡшы өлгөләре йәшәү, тормош, тыуған ил һәм халыҡ тураһында тәрән уйланыу, ватансылыҡ тойғоларын йырлау менән һуғарылған.

Халыҡ шағиры ижадының үҙенсәлекле төп һыҙаттарының береһе – бөгөнгөнөң тарихи үткән менән тығыҙ үрелеп килеүендә. Ғөмүмән әйткәндә, уның шиғриәтенең тематик һәм идея даирәһе киң һәм бай. Унда барлыҡ буяуҙарҙы һәм биҙәктәрҙе лә табырға мөмкин.

Тимер Йосопов үҙенең шиғырҙарында байтаҡ стилистик фигураларға мөрәжәғәт итә. Һүҙҙәрҙең фразаға һәм һөйләмгә ойошоу үҙенсәлектәренә нигеҙләнгән һүрәтләү саралары стилистик фигура исеме менән йөрөй.

“ Таңғы баҫыуҙан ҡайтабыҙ” исемле шиғырында шағир анафора фигураһын ҡулланған. Унда иң мөһим һүҙҙәргә баҫым яһалған. Анафорала бер үк һүҙҙәр йәки һүҙбәйләнештәр шиғырҙағы һәр бер юлдың башында ҡабатланып килә. Был фигурала иң мөһим һүҙҙәргә иғтибар итеү өсөн файҙаланыла. Шуның өҫтәүенә ул, рифма кеүек үк, строфаның бөтөнлөгөн дә тәьмин итә. Сөнки күпселек осраҡта ул бер строфа сигендә генә ҡулланыла. Ҡабатланыусы һүҙҙәрҙең бөтөүе, куплеттың да тамамланыуын аңғарта [3, 185 б.].

*Йәшлек тигән иртәбеҙҙең*
*Ҡәҙерен белеп кенә*
*Ҡайтабыҙ елеп кенә:*
*“Каруан килә,*
*Каруан килә*
*Каруан килә теҙелеп,*
*Һөйәм уны,*
*Һөйәм уны,*
*Һөйәм уны өҙөлөп”*

Һирәкләп булһа ла, бер нисә строфаның бер үк һүҙҙәр менән башланыу күренеше лә осрай. Фигураның бындай төрөн таркау анафора тип атарға мөмкин [3; 185 б.]. Был

стилистик фигура төрөн дә “Ағыла ла болот ағыла” шиғырында күрергә мөмкин. “Ағыла ла болот ағыла” юлы тарҡау анафора булып килгән.

*Ағыла ла болот ағыла,*
*Тейер теймәҫ үтә тауҙарға.*
*Киткәндәргә тыгыс йоҡо теләп,*
*Ғүмер генә теләп һауҙарға.*
*Ағыла ла болот ағыла,*
*Тауҙарыма килеп абына.*
*Китеп бара тыуған яғыма,*
*Йөрәгемә минең ҡағыла,*
*Уйҙарыма минең ҡағыла*
*Ағыла ла болот ағыла...*

Шиғыр юлдары аҙағындағы һүҙҙәрҙең ҡабатланыуы эпифора тип атала. Башҡарған вазифаһы яғынан эпифора анафоранан айырылмай тип әйтерлек: ул да уҡыусының иғтибарын иң әһәмиәтле фекерҙәргә ылыҡтыра, строфаның бөтөнлөгөн тәьмин итә. Тарҡау эпифора булғанда, бер нисә строфа бер үк һүҙҙәр менән тамамлана [3; 186 б.]. Тимер Йософов үҙенең “Шәбәйеп киттем” шиғырында тап ошо тарҡау эпифораны ҡулланған:

*Донъяларға һыймаҫ һукмыш егет –*
*Әҙәм араһында колға ғына.*
*Елдәр һуғылмаған был кәбәк баш,*
*Тора микән әсә тулғағына.*
*Өмөтөмдөң йәшел тәлгәштәре*
*Ҡалмаһынсы көҙҙөң туңғағына.*
*Эт һуғарып йөрөй бер ялбыр баш, –*
*Тора микән әсә тулғағына.*
*Бик шәбәйеп киттем һуңғы ваҡыт,*
*Аттарымды борам уңға ғына.*
*Эй Хоҙайым,*
*Хаталарҙы ҡылдым,*
*Торам микән әсәм тулғағына?*
*Тағы ла миҫалға “Ҡурай” шиғырын килтерергә мөмкин:*
*Һығылып та сыҡты ҡурай моңо,*
*Иңрәп сыҡты күңел түренән.*
*Тояҡтарҙан уттар сәсрәйме ни,*
*Яу уҙамы тауҙар үренән.*
*Һығыла ла иңрәй ҡурай моңо,*
*Бар тирә-йүн моңға тулышҡан.*
*Аҫыл ирҙәр һуғышҡамы инә,*
*Әллә сыға микән һуғыштан...*
*(“Ҡурай”)*

Был шиғри өҙөк “Ҡурай” исеме менән аталған, эпифораның автор өсөн иң мөҡәддәс фекерҙәре, әҫәрҙең төп идеяһына бәйләнешле иң кәрәкле мотивтарҙы һыҙыҡ өҫтөнә алыныуы тағы ла ныҒыраҡ асыҡлана төшә.

Эпанастрофа – эпифора менән анафораның үҙенсәлектәрен берләштереүсе фигура ул. Был осраҡта шиғыр юлдарының йәки строфаның береһе үҙенән алда килгән юлдың (строфаның) аҙағындағы һүҙҙәр менән башланып китә [3; 187 б.]. Шағирҙың “Ямғырҙан һуң” шиғырында “яҙамынмы” һүҙе эпанасрофа булып килә:

*Был донъялар бигерәк ҡыҙыҡ инде,*
*Йөрәккәйең янһа ялҡында,*
*Бүтән хаҡында мин яҙамынмы,*
*Яҙамынмы үҙем хаҡында.*

Әҙәби әҫәрҙәге төп һүрәтләү предметының ҡапыл, көтөлмәгәндә бөтөнләй башҡа поэтик объект менән алмаштырылыуы көтөлмәгәнлек эффекты була [3; 199 б.]. Мәҫәлән "Тауыш-һындарын үҙгәртеп" шиғырында:

*Тауыш-һындарын үҙгәртеп,*
*Гел килтереп рәтенә.*
*Малай килеш,*
*Индең инде*
*Һин бабай сүрәтенә.*
*Белдең микән*
*Һин булмышын,*
*Ҡылығын ҡарт боландың.*
*Әллә ниңә йәш сағында*
*Оло булып ҡыландың.*

Фигуралар шағирҙар тарафынан уйлап сығарылған яһалма бер әҙәби алым түгел, улар кеше күңеленең хисле-тойғоло мәлен, кәүҙәләндереүсе мөһим стилистик сара булып торалар. Тимер Йосопов та үҙенең шиғырҙарында был сараны бик оҫта итеп ҡулланған. Үҙенең эске кисерештәрен, халҡына, иленә булған хис-тойғоларын, уйланыуҙарын ошо стилистик фигуралар аша ул асып һалған.

ӘҘӘБИӘТ:


1. Йосопов Т. Һайланма әҫәрҙәр IV том: шиғырҙар / Тимер Йосопов. – Өфө: Китап, 2019. - 368 бит.

2. Хөсәйенов Ғ.Б. Башҡорт шиғыры. Шиғриәт һүҙлеге. Ғ.Б. Хөсәйенов. Өфө: Ғилем, 2003. 480 бит.

3. Әхмәтйәнов К.Ә. Әҙәбиәт теорияһы. – 4-се баҫма. – Өфө: Китап, 2018. - 400 бит.



© Ҡазыханова И.У., Ҡунафин Ғ.С. 2019



***Ҡаскынова Г.Н.,***
*филол. ф. к., доцент, БДУ-ның Бөрө филиалы,*
*Бөрө ҡ.*


## ХӘҘЕРГЕ БАШҠОРТ ӘҘӘБИӘТЕНДӘ ҺӘМ МОСТАЙ КӘРИМ ШИҒРИӘТЕНДӘ МӘҪНӘҮИҘӘР

Революцияға тиклемге башҡорт әҙәбиәтендә киң таралған шиғри жанр формаларының береһе булып иҫәпләнгән мәҫнәүиҙәр замандаш әҙиптәребеҙ тарафынан бөгөн дә киң ҡулланыла.

Мәҫнәүи ҙур эпик форма һәм эске, пар рифмалы шиғыр формаһы мәғәнәһен бирә. Рифмалар схемаһы: а-а, б-б, в-в...

Хәҙерге башҡорт шиғриәтендә мәҫнәүи формаһы ваҡыт арауығы тарафынан йотолмаған. Боронғо строфа формаһы яңы йөкмәткене асыуҙа әле лә мөһим роль уйнай. Шиғырҙың төҙөлөш закондары әҙиптәргә уй-кисерештәрҙе, ваҡиғаларҙы һүрәтләгәндә аҙ һүҙлелек аша оперативлыҡҡа, теремеклеккә, фекер тослоғона ирешергә ярҙам итә.

Шуны ла билдәләп үтеү мөһим: мәҫнәүи строфаһы нормалары нык эшләнгән булһа ла, иркен, ирекле формаларға күнеккән башҡорт шағирҙары ҡалыптың эсенә, ҡайһы бер урындарҙа, шәхси үҙгәрештәрен дә индереп ебәреүҙәре мәғлүм: мәҫәлән, Рауил Бикбаевтың "Йәрем йәндең бар тәҡәтен..."шиғырында эске рифмалар һәр саҡ күҙәтелмәй, юл эсе рифмалары, аллитерацион принцип өҫтөнлөк ала. Фәкиһа Туғыҙбаеваның иһә "Буйһонғанда кемдәргәлер буй-һындарым.." шиғырында рифмалашыу тәртибе һаҡланған хәлдә лә, тәүге строфаның һигеҙ юлға тупланып бирелеүе кеүек күренештәр һ.б. иғтибарҙы тарта. Һыҙыҡ өҫтөнә алып әйткәндә, хәҙерге башҡорт әҙәбиәтендә саф мәҫнәүи ҡанундарын һаҡлаған шиғырҙарҙы осратыуы ауыр. Әммә ләкин улар яҙма поэзияның был ҡалыбына әллә ни хилафлыҡ килтермәүен дә әйтеп үтергә кәрәк.

9-9 ижекле строфалар йыш ҡына осраһа ла, мәҫнәүиҙең ҡан тамырҙарына борондан уҡ һеңгән Көнсығыш поэзияһының строфикаһы (11-11 ижекле Аҡмулла шиғыры, 12 ижекле үлсәм) йышыраҡ ҡулланыла. Йыйнап әйткәндә, Шәреҡтән килгән был рифмалашыу ҡалыбы башҡорт шиғриәте ерлегендә үҙ йөҙөн һаҡлап ҡалған.

Күренекле ғалим Ким Әхмәтйәновтың "Әҙәбиәт теорияһы" исемле киң билдәле хеҙмәтендә М.Кәримдең "Башҡорт халҡына яуап хат", "Һабан туйы" һ.б. йәнәш рифмаға нигеҙләнгән ике строфалыҡ шиғырҙары ғәзәл иҫәбенә индерелә. "..оло быуын әҙиптәрендә лә, йәшерәк шағирҙарҙа ла саф ғәзәлгә ҡарағанда уның башҡа рифма формалары менән аралашып килеү осраҡтары ҙурыраҡ урын ала. Ә инде поэзия үҫешенең бөгөнгө этабында ғәзәл ҡанундарын эҙмә-эҙлекле һаҡлаған әҫәрҙәрҙе табыуы ҡыйын. Ғәзәлдең башҡа ҡағиҙәләренә тоғро ҡалған хәлдә лә, күп кенә әҫәрҙәрҙә һәр бер бәйеттең айырым рифмаға нигеҙләнеү тенденцияһы бик көслө", – тип дәлилләй тәнҡитсе үҙ ҡарашын [2, 229] .

Беҙҙең күҙлектән, был шиғырҙар ғәзәлгә ҡарағанда эске рифмаһын һаҡлап ҡала алмаған мәҫнәүи ҡанундарына күберәк яуап бирә. Тематик даирәнең мөхәббәт өлкәһенән ситләшеп китеүе лә шиғырҙы ғәзәл тип нарыҡламаҫ өсөн конкрет ерлек тыуҙыра.

Мостай Кәримдең традицион хат стиленә яраҡлаштырып яҙылған "Башҡорт халҡына яуап хат" шиғырына мөрәжәғәт итәйек.

" "Ваҡиғалар ваҡыттарҙан киң саҡта, һәр көнөбөҙ мәңгелеккә тиң саҡта, ябай ирҙәр арыҫлан булған мәлдә, батырҙарҙың дандары шаулағанда һәм ғүмерҙәр мәңгелек яулағанда" яҙылған был яуап хатының халыҡ поэзияһындағылай юғары пафослы башланышы, ҡобайыр формаһына тартым строфаһы уны баштан уҡ героик эпостарға яҡын итә" [1; 49], – тип билдәләгәйне филология фәндәре докторы Ғ.Б. Хөсәйенов.

Шиғыр 11-11 ижекле Аҡмулла строфаһына ҡоролған, йөҙҙән ашыу бәйеттән тора. 6 мәғәнәүи өлөшкә бүленгән. Тәүге бүлек 21 ике юллыҡтан ҡоршалған. Хат алыу шатлығы – инеш өлөш булып формалаша:

Тыуған Башҡортостан, һинең хатыңды
Юлығып алдыҡ беҙ әсәлек хаҡыңды.

Бында шиғырҙың рифмалары түбәндәгесә: *киң саҡта – тиң саҡта, осоронда – ҡырында, шаулағанда – яулағанда, ай-алҡаһын – ер арҡаһын, хатыңды – хаҡыңды* һ.б. Йәғни мәҫнәүи ҡанундары талап иткәнсә, һәр бәйет яңы йәнәш рифмаға нигеҙләнгән.

II бүлек яуап хаты яҙырға ниәтләү тураһында һөйләй:

Ҡулыбыҙға ҡәләм-таш алмаҡ булдыҡ,
Ҡош телендәй сәләм-хат яҙмаҡ булдыҡ.

Атап үтелгән бәйеттә мәҫнәүи строфа формаһы өсөн мотлаҡ эске рифма (*ҡәләм-таш – сәләм-хат*) уңышлы, урынлы ҡулланыла.

Артабанғы өлөш 12 юлдан (6 бәйеттән) ғибәрәт. Ваҡыт арауығы беҙҙең халҡыбыҙға биргән антыбыҙҙы онотторманы, тигән фекерҙе еткерә хаттың был өлөшө. Ә ваҡыттың байтаҡ ҡына үткәнен беҙ анафора күренеше аша күҙаллайбыҙ:

Өсөнсө көҙ алтынлатты яланды,

Өсөнсө ҡат кәкүктәр һаҡауланды...

Шағирҙың һүҙҙең бәҫен, эске мәғәнәһен аңлап, тойоп эш итеүе ассонанс, аллитерация кеүек күренештәр шиғырҙың уңышлы яңғырашына булышлыҡ итеүендә лә асыҡ сағыла. Ассонансҡа миҫал:

Күргән саҡта төтәтелгән ауылды,
Йөрәктәрҙе дөрләгән ялҡын алды.

Аллитерация күренеше киләһе бәйеттә бигерәк тә сағыу:

Ҡый үләндәй ҡыйып, ҡырып ташланыҡ
Һәм ҡырмыҫҡа иләүендәй тапаныҡ.

Ғөмүмән, был строфала юл эсе рифмаһы ла (*кыйып - кырып*) ритм теүәллеген арттыра.

Шиғри хаттың йомғаҡлау өлөшө, традицион хат стилендәгесә, изге теләктәр менән тамамлана. Әлбиттә, был теләктәр һәм еңеүгә булған ныҡлы ышаныс юғары пафос менән һуғарылған:

Беҙ ҡайтырбыҙ бәхеткә хайран көндө,
Беҙ ҡайтырбыҙ бер оло байрам көндө.

Шағирҙың фәлсәфәүи фекер тәрәнлеге менән уйҙарға һалған "Әйләнә карусель..." исемле шиғырында мәҫнәүи формаһы уй-хистәрҙе һығылмалы рәүештә асып һалырға ярҙам итә. Шиғыр ун һигеҙ бәйеттән һәм төрки телле халыҡтар поэзияһындағы иң боронғо форма – өс юллыҡ строфанан төҙөлгән. Строфалар һуңғы осор поэзияһында йыш ҡына ҡулланылған 9-9 үлсәменә ҡоролған. Рифмалар системаһы ла традиция талап иткәнсә: аа, бб, вв, гг... Әҫәрҙең төп лейтмотивы булып үткән:

Әйләнә карусель, әйләнә,
Карусель ҡоролған хәйләгә, –

тигән юлдары бер-нисә урында ҡабатланыуы әҙиптең әҙер ҡалыпты ҡабул иткән хәлдә лә уй-фекерен үҙенсә генә теҙә белеүен, эске һәм тышҡы камиллыҡты бер бөтөн итә алыу маһирлығына эйә булыуын күрһәтә.

Бер аҙым арала – даръялар,
Күктәргә ҡаҙалған ҡаялар, –

был юлдарҙа ассонанс күренеше (а өнөнөң сағыштырмаса йыш ҡабатланып килеүе) араларҙың алыҫлығы, аяуһыҙлығы тойғоһон тағы ла көсәйтеп ебәрә.

Ғөмүмән, бындай поэтик табыштарға Мостай Кәрим шиғриәте ғәйәт бай. Ассонанс күренешенең юл эсе рифмаһын тыуҙырыуы шуға миҫал.

Күҙгә - күҙ, ҡулға – ҡул үрелә -
Өрөлә ике гөл бөрөлә.

Аллитерацияға миҫал:

Толпарын малай эй ҡамсылай,
Ҡамсылай... Шиге юҡ тамсылай.

Был юлдарҙа "Ҡ", "М", "С", "Л", "Й" өндәренең йыш ҡабатланып килеүенең сәбәпсеһе - эпанастрофа һәм юл эсе рифмаһы.

Шағирҙың "Тағы ла яҙ..." тип аталған шиғыры иһә бәйеттәрҙең һәр бер мисрағы (юлы) айырым һөйләмдәрҙән тороуы менән иғтибарҙы йәлеп итә. Алты строфанан торған был мәҫнәүи үҙенең ғәжәйеп төҙөлөшө, пропорционаллеге менән таң ҡалдыра: тәүге, өсөнсө һәм бишенсе, йәғни таҡ һанлы бәйеттәрҙә ижектәр һаны цезуралар иҫәбенә

күберәк кеүек тойола. Ун бер ижекле үлсәмгә ҡоролоуы көнсығыш поэзияһы строфикаһы әлеге көндә лә уңышлы ҡулланылыуына тағы ла бер дәлил.

Мостай Кәримдең “Һабан туйы”, “Йырҙарымды һауаларға ашырҙым”, “Батҡан ҡояшҡа ҡыҙынып...”, “Төн ҡыҫҡартып...” , Хәниф Кәримдең “Ҡайын еләге”, Миәссәр Басыровтың “Йөрәк”, “Улар йомшаҡ, йомшаҡ мамыҡтан”, Сафуан Әлибайҙың “Турғай”, “Гел тынлыҡты эҙләгәнгә”, “Сабый шатлығы”, “Туғайҙа”, Мәхмүт Һибәттең “Туҡай”, Марат Кәримовтың “Талдарға тотоноп...”, Тамара Искәндәриәнең “Матурлыҡ” шиғырҙары һ.б. бихисап теҙмә әҫәрҙәр шулай уҡ мәҫнәүи строфаһы талаптарына (эске рифма һаҡланмауға ҡарамаҫтан) яуап бирәләр, ун бер ижекле үлсәмгә ҡоролғандар.

Рухи йән талабы саҡырыуы буйынса, мөрәжәғәт итә башҡорт шағирҙары был боронғо формаға. Шағирә Зөлфиә Ханнанованың “Тартылыу” шиғыры тап шул турала бәян итә: *Булғаным һуң бармы минең Көнсығышта?! // Бик оҙаҡ та булғаным юҡ, ашығыс та. // Күргем килә Сәмәрҡәндтең ҡорамдарын, // Гиҙгем килә Бохараның урамдарын. // Ингем килә иң боронғо мәсеттәргә, // Тынысльғын юйған йәнгә көс өҫтәргә. // Бөткән сакта тәкәттәрем, түҙемдәрем, // Өҙөп ҡапҡым килә баллы йөҙөмдәрен. // Шағирҙарын күргем килә Фирғәнәнең, // Шәреҡ моңдарында килә тибрәләһем. // Нисек кенә түҙмәк кәрәк был һағышҡа, // Ниҙер тарта мине һәр саҡ Көнсығышҡа.*

Анализлап үтелгән шиғырҙарҙы эске рифмаһын һаҡлап ҡала алмаһа ла, *аа, бб, вв, гг...* тибында рифмалашыуы, тартынҡы һәм һуҙынҡы өндәрҙең гармониялы ҡабатланып килеүе, юл эсе рифмалары менән байытылыуы мәҫнәүи шиғыр формаһы традицияларына ҡарай, тип иҫбатларға ерлек тыуҙыра.

ӘҘӘБИӘТ:


1. Хөсәйенов Ғ.Б. Мостай Кәрим: – Шәхес. Шағир. Драматург. Прозаик. – Өфө: Башҡортостан “Китап” нәшриәте, 1994. – 49-сы бит.

2. Әхмәтйәнов К.Ә. Әҙәбиәт теорияһы. –Үҙгәрешле 3-сө баҫма. – Өфө: Китап, 2003. – 229-сы бит.



© Ҡаскынова Г.Н., 2019



***Кунафин Ғ.С.,***
*филол. ф. д., проф., БФА-ның мөхбир ағзаһы.*
*БДУ, Өфө ҡ.*
***Килмөхәмәтов Т.Ә.,***
*филол. ф. д., проф. БДУ, Өфө ҡ.*


## М. КӘРИМ ШИҒРИӘТЕНЕҢ ОБРАЗЛЫЛЫҠ ҮҘЕНСӘЛЕКТӘРЕ ( ҠАЙҺЫ БЕР КҮҘӘТЕҮҘӘР)

Шағир, драматург, прозаик һәм публицист Мостай Кәрим ғүмере буйына тыуған ер хәстәре, халыҡ хәстәре менән йәшәгән оло ижади шәхес булуы. Бөтә йәшәйеш ерҙән башланған шикелле, уның ижтимағи эшмәкәрлегендәге бөтә йүнәлештәр, ижадындағы бөтә мотивтар, образдар ана шул ил-ер хәстәренән үҫеп сыға.Был уның шиғриәтендә айырыуса күҙгә ташлана. М. Кәримдең шиғриәткә килеүе ун дүрт йәшендә С. М. Кировтың үлтерелеүе хаҡындағы хәбәрҙе ишеткәндән һуң яҙылған элегик шиғыр яҙыуҙан башлана. Ил, халыҡ ҡайғыһы уны ла тетрәткән, уның шәхси ҡайғыһына

әүерелгән. Уның артабанғы бөтә ижады ана шулай үҙ заманының берсә хәсрәтле, берсә шатлыҡлы ваҡиғаларына бәйләнеп тыуа һәм йәшәй. Әле ижадының башланғыс дәүерендә үк үҙе йәшәгән осорҙо маҡтап йырларға ынтылыу 1936 йылда яҙылған «Күҙ» шиғырында үҙенсәлекле кәүҙәләнә. Шағир тәбиғәт күҙен тасуирлай ҙа уның һары япраҡтары һибелгән ошо илдә тормош яҙы балҡыуын әйтә. Социалистик йәмғиәттең 30-сы йылдарҙағы аҙымдарын шағир ана шулай, тормош яҙы, тип атай. Шиғырҙа публицистик фекер лирик картина һәм интонацияларҙа бирелә. Төп поэтик фекер тәбиғәт күҙе менән тормош яҙы тигән төшөнсәләрҙең ҡапма-ҡаршылығын асыу рәүешендә барлыҡҡа килә, эмоциональлек шағирҙың көтөлмәгәнсә һығымтаға килә алыуына бәйле рәүештә тыуа. Шағирҙың бындай ҡыйыулығы тертләтеп ҡуя, ә ул арткандан арта бара. Бер-бер артлы «Ленин», «Туҡайға», Пушкинга арналған «Диңгеҙ ярында» кеүек шиғырҙары барлыҡҡа килә. Гениаль шәхестәр тураһындағы бер туҡтауһыҙ үҙен-үҙгәрештә, хәрәкәт булған төрлө яҡлы уйланыуҙар уны Пушкин, Туҡай, Лениндың вариҫтары йәшәгән үҙ заманына алып ҡайта һәм бөйөк кешеләр хыял иткән кешелекте социаль һәм рухи азат итеү юлында оло ҡаһарманлыҡ яһаусы замандаш образын тыуҙыра. Уның иң сағыуы «Дуҫтың үлеме» шиғырындағы һуғышсы комсомолец образы. М. Кәрим ижады тураһында яҙған әҙәбиәт белгестәре ошо әҫәргә йыш мөрәжәғәт итә, унда яңы тормош өсөн көрәшсенең романтик образы тыуҙырылыуын билдәләйҙәр. Шулай уҡ шиғырҙа автор образы ла бар һәм был образда бирелгән идея-эстетик йөкмәтке Мостай Кәримдең рәссамлыҡ ҡараштарын асыҡлау өсөн бик мөһим. Шиғыр ошондай строфа менән башлана:

*Комсомоллыҡ билетымды*
*Ҡулыма алған һайы,*
*Хәтерләйем фронтташтың*
*Билетҡа тамған ҡаны.*

Дуҫының үлеменә шаһит булган «фронтташ» - уның комсомол билетын ҡабул итеп ала. Ҡаһарман комсомолецттың фронтташ дуҫына күскән комсомол билеты яңы тормош осөн көрәш эстафетаһының дауам ителеше рәүешендә поэтиклаштырыла. Шиғыр-мәрҫиәлә йәш быуындың романтик ҡаһарманлығы данланы. Унда поэтик фекер публицистик үткерлек, декларативлыҡ менән әйтеп бирелә. Шиғыр былай тамамлана:

*Күҙгө япраҡтар шикелле,*
*Кипкән, хәлһеҙ иренен*
*Тын ғына ҡыймылдатты ла*
*Беҙгә һуҙҙы билетын:*
*-Теләгем һеҙҙең йөрәктә.*
*Намыҫым үҙем менән,*
*Үлем өсөн йәшәмәнем,*
*Ә йәшәү өсөн үләм...*

Шағирҙың ошо рәүешле әҙәбиәткә аяҡ баҫҡан дәүерҙә үк мәңгелек һыҙаттарына эйә шәхестәр образына мөрәжәғәт итеүе ижтимағи - рәссамлыҡ ҡараштарының билдәле бер йүнәлештә формалаша барыуы хаҡында һөйләй. Уның үҙ әҫәренең төп фекерен афористик һүҙ булып китерлек фразеологик берәмек кейеменә кейендереүе тәрән мәғәнәгә эйә: “Үлем өсөн йәшәмәнем,ә йәшәү өсөн үләм” үлем хаҡындағы шиғыр бына шулай үлемһеҙлеккә йыр булып яңғырай. Ошондой афористиклыҡ һәм парадоксаллек, артабан нығынғандан-нығына барып, М. Кәрим эстетикаһының төп күрһәткестәренә әүерелә.

Ғөмүмән, Мостай Кәрим шиғриәтендә ике дарья бергә ҡушыла: береһе — тормош конкретлығы, икенсеһе фәлсәфәүи уйланыуҙар. Европанан Азияға сығып барыусы

ҡырмыҫҡа хәрәкәтенә ҡарап ул йәшәйеш өсөн кешелектең шартлы сиктәр менән бүлгеләнеүе ни тиклем яһалма икәнлеген күрҙе. Йөрәктәрҙе ҡағып уҙыр өсөн иң тәүҙә ишектәрҙе асып инеү, йырға күтәрелер өсөн иң тәүҙә юлға сығыу, халыҡ араһында булыууның өсөн аксиома.Унының ижадындағы иң оло поэтик фекерҙәр тормош күренештәрен бәйнә-бәйнә күҙәтеү һәм тасуирлауҙан тыуа.

*Йәйге ямғыр көмөш булып*
*Һибе гән саҡта,*
*«Үҫәм» тип, малай ваҡыт ул*
*Яланбаш сапты.*
*Үҫте, ямғыр һуғарғанда*
*Игенле ҡырҙы,*
*Иҙеү сисеп, бураҙнала*
*Кәпәсһеҙ торҙо,*
*Һыуһаны ул, күккә ҡарап,*
*Ҡорораҡ йылды,*
*Һәр болотто тыны менән*
*Тартырҙай булды.*
*Бөгөн дә шул тамсы-тамсы*
*Көмөш ҡойола.*
*Тик бөгөн һалдат ҡыуанмай,*
*Кәйефе йонсоу —*
*Шинелгә үткән, окопта*
*Тубығынан һыу.*
*—Ямайһы ине, исмаһам,*
*Был туҙган күкте! —*
*Ул ғүмерендә тәүге ҡат*
*Ямғырҙы һүкте.*
*Болоттар ярылды ҡапыл.*
*Йәшен яктырҙы.*
*Ул күрҙе Тыуган илдәге*
*Игенле ҡырҙы.*
*Иҙелдә тулҡын, бәүелеп,*
*Ярҙарҙы ҡаға,*
*Ә Илгиз исемле улы*
*Яланбаш саба.*
*—Өйҙә булһаң ине, — тине. –*
*Ошондай йәйҙә.*
*(Еүеш шинелгә төрөндө):*
*—Яуһын әйҙә!*

Әҫәрҙә тормош атрибуттары шул тиклем ишле һәм шул тиклем ысынбарлыҡтағыса килтерелгән, хатта улы Илгиздең исеме аталған. Быларҙың бөтөһө тулҡынландырырлыҡ итеп, ышандырырлыҡ итеп әҫәрҙең тел төбөн, уның төп фекерен күтәрә: кеше һуғыш өсөн яралмаған, уға һуғыш ғәме менән йәшәгәнгә ҡараганда, ер хәстәре менән йәшәү тәбиғи һәм яҡын. Конкрет предметлылыҡ ялған пафослылыҡтан ҡотҡара. Яҙыусы бик ныҡ һоҡланғанда ла предметһыҙ һүҙгә төшөп китмәй, нимә ғәжәпләндергәнен әйтә. Йомро Талип, мәҫәлән, һуғыштан иҫ киткес байлыҡ тейәп ҡайта: ике таҡмаҡ, бер бейеү, бер йыр! Ергә ереккәнлек һәм юғары уй-хистәр М. Кәримде бер үк ваҡытта ҡырыҫ реалист һәм философ-романтик итә.

Мостай Кәрим шиғриәтенең образдары һәм образлылыҡ үҙенсәлектәре ифрат бай, бөтөн бер донъя. Улар икеһе лә поэтик йөкмәткене барлыҡҡа килтерешә. Ләкин образ ижадтың берәмеге, ә образлылыҡ поэтик фекергә өлгәшеү ысулы.

*Ейән — йәш арыҫлан. Бар ҡеүәте*
*Тимер тырнағында.*
*Атаһы — йөк аты. Бар мөлкәте*
*Алтын тояғында.*
*Олатаһы — терпе. Унын инде*
*Хәле аяныслы:*
*Тырпайырға торған энәләре —*
*Барлыҡ таянысы.*

Был осраҡта төп образ — кеше. Уның ғүмеренең төрлө дәүерҙәрен күҙ алдына баҫтырыу өсөн шағир сағыштырыу алымы ҡулланған. Был осраҡта «йәш арыҫлан», «йөк аты», «терпе»- кеүек образдар образлылыкты булдырышыусылар. Мостай Кәрим әҫәрҙәрендә образлылыҡ нигеҙҙәрен барлыҡҡа килтерә торған бер нисә әҙәби күренеш бар. Шуларҙың иң ныҡ таралғаны поэтик йәнәшәлек. Тәбиғәт күренештәре менән кеше күңеле араһындағы оҡшашлыҡтарҙы йәнәшә ҡуйыу аша художестволы фекерҙе формалаштырыу. Мәҫәлән:

*Тәбиғәттә шундай миҙгел бар:*
*Ел тынғас та япраҡ тирбәлә,*
*Ҡояш бата тауҙар артына.*
*Нуры бүленеп ҡала түбәлә.*
*Тәбиғәттең шундай миҙгелен*
*Күрһә ине минең йырҙарым:*
*Мин киткәндә, берәй быуатҡа*
*Бүленеп ҡалһа ине йырҙарым.*

Ҡояш батҡандан һуң түбәлә бүленеп ҡалған уның нурҙары — үтә предметлы күргәҙмәле образ булһа, шағир киткәндән һуң берәй быуатҡа бүленеп ҡалған йырҙар иһә фәлсәфәүи образ. Был фекерҙе, киң мәғәнәлә алғанда, кеше, ниндәй һөнәр эйәһе булыуға ҡарамаҫтан, үҙенә ҡайтып ҡала. Тышҡы яҡтан бер-береһенә оҡшаш күренгән әйберҙәрҙең мәғәнә айышы рәуешендәрәк тыуған поэтик фекер эмоциональ көскә эйә. Йәнәшәлеккә ҡоролған образлылыҡ әҫәргә сәнғәтсә ситләтеп әйтеү мөмкинлектәрен бирә. М. Кәрим үҙ шиғырҙарының тәбиғәт күренештәре менән эске бәйлелеген һүҙмә-һүҙ ҙә әйтеп бирә:

*Йыһандың һун миндә ни ҡайғыһы?*
*Бына миндә йыһан хәстәре:*
*Аяҙ булһа, шиғырҙарым шаттар,*
*Болот ҡунһа, түгелә йәштәре.*

Тәбиғәт күренештәрендәге мәңгелек һыҙаттары, олпатлыҡ, мәғрурлыҡ Мостай Кәримгә йәшәү мәғәнәһе, ғүмерҙең ҡиммәте һәм башҡа шундай тәрән фәлсәфәүи уйланыуҙарға юлығырға бер уңай осраҡ. Аҡ ҡар, ләйсән, ҡайын япрағы уға оло художестволы дөйөмләштереүҙәргә мөмкинлек асҡан образдар. Был ҡыҫҡаса ғына. әйтелгәндәр Мостай Кәрим әҫәрҙәрендә поэтик йәнәшәлек образлылыҡтың нигеҙен тәшкил итеүен хаҡында һөйләй. Был хәл уның ижадына ассоциативлыҡ. эмоционаллек, төҫтәр байлығы бирә. Поэтик фекергә өлгәшеүҙә образлылыҡтың икенсе бер күренеше диалектик бер бөтөндө тәшкил итеүсе берәмектәрҙе ҡапма-ҡаршы ҡуйыу.

*Дуҫтар, дуҫтар. Таралышмай,*
*Тарҡауландыҡ.*

*Балҡып түгел, быҫҡып яныр*
*Көнгә ҡалдыҡ.*
*Хатта ағас, хатта утын,*
*Күрсе, ана,*
*Өйөбөрәк бергә яҡҡас.*
*Дөрләп яна.*

Бындай шиғыр - аң-аҡыл менән ҡабул итә торған шиғыр. Мостай Кәрим кешеләрҙең шатлыҡтарын ғына түгел, үкенестәрен, әрнеүҙәрен лә илһамланып йырлай. Шуға күрә уның әҫәрҙәрендә бер-береһенә ҡапма-ҡаршы берәмектәрҙе ҡушыу аша образлы фекерга килеү йөкмәткенең формаға тәбиғи күсеше кеүек ҡабул ителә. Талантлы әҙип-шағир, прозаик, драматург ижады һәр саҡ айырылмаҫ бер бөтөндө тәшкил итә. Был бөтөнлөк уның әҫәрҙәренең геройҙары, идеялары, тема һәм образлылығынан барлыҡҡа килә. Бындай ҡәләм оҫтаһының һәр әҫәрендә уның художество индивидуаллеге ярылып ята. Ҙур әҙип ижадына хас бындай системалы бөтөнлөк ҡасандыр табылған һам нығытылған эстетик күренештәрҙе ҡабатлауҙан тыуа тип уйларға ярамай. Мостай Кәрим талантлы һүҙ оҫтаһының ижады сағыу, уның һәр яңы әҫәре быға саҡлы асылганды ла балҡытып ебәреү, тема, идея, геройҙар, һүрәтләү саралары йәһәтенән туҡтауһыҙ үҫеш һәм төрләнеү ул.

© Ҡунафин Ғ. С., Килмөхәмәтов Т.Ә., 2019

***Латыпова А.А.,***
*аспирант, БашГУ, г. Уфа*

## ПИСАТЕЛЬСКИЙ ДНЕВНИК КАК ЖАНР ПУБЛИЦИСТИКИ (НА ОСНОВЕ ДНЕВНИКА М. КАРИМА)

Публицистика - происходит от латинского слова "publicus", что означает "общественный" [2]. К публицистике относятся ряд произведений, цель которых осветить актуальные проблемы общества. Главные свойства публицистики - передача информации, воздействие на читателя. В публицистике рассматриваются только актуальные вопросы, решение которых имеет особое значение в жизни народа.

Данная тема изучена во многих исследовательских трудах. Среди авторов можно назвать З.С. Смелкову, Л.В. Ассуирову, М.Р. Саввову, О.А. Сальникову, А.А. Тертычный и др.

В публицистике выделяют следующие жанры: информационные - заметка, репортаж; аналитические - рецензия, статья; художественно-публицистические - эссе, очерк. Данные жанры в периодических печатях выступают как основные носители информации, которые разрешают публике вести мониторинг наиболее значимых, интересных событий. Доступности информации способствует жанровое разнообразие информационных сообщений.

Цель нашей статьи с помощью сравнительного метода выделить общие черты между писательским дневником и жанрами публицистики и доказать, что дневник М. Карима можно рассматривать, как жанр публицистики.

Дневник М. Карима является уникальным произведение башкирской литературы. М. Карима мы знаем как башкирского советского поэта, писателя и драматурга. Он народный поэт Башкортостана, лауреат Ленинской и Государственной премий СССР, Герой Социалистического Труда. Его воспоминания, содержащиеся в его дневниках, имеют для нас большое значение. Знакомясь с его дневниковыми записями, мы не

только узнаем о его известных современниках, но и получаем материал об их творчестве. "Писательский дневник" - уникальное произведение мировой литературы.

Над исследованием писательских дневников наиболее глубоко работал русский лингвист И. Волгин. Однако Волгин не конкретизирует, а обобщает жанровые особенности дневника (на основе текстов дневника Ф. Достоевского). По его мнению, две ключевые моменты определяют природу дневника писателя: первое - это индивидуальные особенности писателя-художника, второе - исторические условия современной ему действительности.

На основе "писательского дневника" жанр "дневник" можно рассматривать как публицистическое произведение. Текст дневника, принадлежащий писателю, с точки зрения публицистики, информирует читателей о нынешних событиях и фактах из жизни современников, т.е. описывается внешнее время. Но в тоже время вся информация проходит через мировоззрение писателя, что говорит о наличии авторского "Я", т.е. отражается и внутреннее время. Автор пишет так, как представляет окружающий мир, как понимает данную проблему. Текст писательского дневника соответствует языку публицистического стиля, другими словами, язык дневника - литературный, обладающий, в большей или меньшей степени, письменно закрепленными нормами. Значит, в плане понимания, язык дневника доступен каждому.

Рассмотрим жанрообразующие признаки писательского дневника, позволяющие включить его в систему публицистических жанров.

Писательский дневник является одним из ключевых средств духовного самоопределения личности, выработки собственной идентичности, кроме того он представляет сведения относительно исторических событий, быта и нравов определенной эпохи [3, 13].

Дневниковые тексты привлекают исследователей тем, что они не до конца изучены. Спор вызывает и своеобразие дневника. Некоторые ученые дневник считают жанром литературы, а для других - это междужанровое явление. Например, Лидия Гизбург еще в начале XIX века дневник обозначила как промежуточный жанр. А О. Г. Егоров пишет о литературных дневниках в ракурсе психологической литературы. А.Г. Тартаковский рассматривает дневниковую литературу как жанр мемуарной прозы [6, 24].

Жанровое своеобразие, типология, хронотоп, образы авторов и современников, лексико-стилистические особенности дневника привлекают внимание исследователей.

Сравним тексты писательского дневника с жанрами публицистики - репортажем, очерком, рецензией. В качестве писательского дневника рассмотрим дневниковые записи башкирского писателя М. Карима.

У башкирского народного писателя два дневника. Дневник начал вести в военное время. Последняя запись датирована 15 апреля 1942 года. Данный сборник записей М. Карим назвал "Первой тетрадью". После долгое время он дневник не вел, через некоторое время кое-какие свои наблюдения, мысли стал записывать на бумаге. Вот эти записи двух десятков лет и составили то, что потом он назвал "Второй тетрадью". Если каждодневные хроники отражают внешнее время, в котором человек действует, то подробные записи отражают внутренне время поэта, ни зависящее ни от кого и ни от чего. Таким образом, данные дневниковые записи отражают столкновение этих двух времен. Дневники велись на башкирском и русском языках.

Для выявления общих признаков между писательским дневником и информационными жанрами публицистики сравним дневниковые записи М. Карима и текст репортажа.

Репортаж - информационный жанр публицистики, где дается сообщение с места события. Спецификой данного жанра является оперативность. Для этого жанра характерно беспристрастное оповещение событий (без оценок). Автором является репортер, который является очевидцем или участником описываемого.

Структурными элементами репортажа являются заголовок, основное ядро (детали, диалоги, действия, герои и повествование), анализ или вывод (если это аналитический репортаж), подпись автора (если же автор не предпочитает остаться анонимным). Например,

**День города (заголовок).**

*Осенний загадочный вечер. Мы находимся на центральной пощади г. Баймак. Сегодня здесь проходит День города. С праздником горожан поздравляют знаменитые выходцы из Баймакского района. Венцом концертной программы станет выступление российской группы "СМЭШ". Несмотря на пасмурную погоду, собралось много народа - вышли на торжество все: от мала до велика. Мероприятие, посвященное празднованию 100-летия города, проводится с 9 часов. Завершится вечер праздничным салютом* ***(основное ядро).*** *Все организовано на высоком уровне. Оказавшись здесь, каждый чувствует себя частью большой и крепкой семьи. Всем хорошего настроения!!! Спасибо за внимание.* ***(вывод)***

Первым общим признаком писательского дневника и репортажа является спонтанность. Данный признак в лингвистике впервые употребил Ш. Балли при анализе диалогической речи. Дневниковый текст, как и текст репортажа характеризуется спонтанностью, т.е. события фиксируются сразу, записи создаются "по горячим следам". Например: **31 октября.** "***Сегодня*** *получил (прош.вр.) пенсионную книжку. Тяжело переживаю по этому поводу. Словно сам себя приговорил (прош.вр.) к старости. Целый год тянул (прош.вр.) с приговором"* [4, 122].

***4 апреля***. *"****Сегодня*** *в Ленинском комитете утвердили (прош.вр.) общий список. В нем есть и мое имя. Радости нет. Все мысли об Ильясе . Если уйдет в эти часы, я буду чувствовать себя виноватым"* [4, 159].

***19 февраля.*** *"****Сегодня*** *настроение немного успокоилось (прош.вр.). Даже поработал (прош.вр.)немного. А все душа не на месте"* [4, 154].

***27 марта.*** *"****Сегодня*** *уезжаю. Здесь прошли (прош.вр.) мои 60 дней. Чувствовал(прош.вр.) давно не изведанную внутреннюю свободу, с мыслями, чувствами, огорчениями, заботами жил "один на один"* [4, 176].

***27 января.*** *Переделкино. "****Сегодня*** *ночью сверчки не пели. До этого ночами не умолкали..."* [4, 196].

***4 апреля***. *"****Сегодня*** *в Ленинском комитете утвердили общий список. В нем есть и мое имя. Радости нет..."* [4, 159].

***21 января***. *Малеевка. "****Сегодня*** *в Московском Новом драматическом театре состоялась премьера "Прометея". Спектакль понравился только пляски харит пришлись не по душе..."* [4, 153]

***17 января***. *Малеевка. "****Сегодня*** *написал первые строки. Решил назвать "Помилование". Начинал несколько раз, не по душе как-то все. Решил: как пойдет, так пойдет"* [4, 151].

***20 февраля***. *Голицыно.* ***"Сегодня*** *уезжаю в Москву на съезд партии, хотя он открывается 25-го. Наши приезжают 22-го утром..."* [4, 169]

***10 января. Малеевка***. *"****Сегодня*** *дописал основную часть "Помилования". Привел Марию Терезу к могиле Любомира Зуха. Так мы и расстались"* [4, 165].

***6 января. Малеевка.*** *"**Сегодня** буран усилился. Какой-то тревожный буран. В этот буран расстреляли Любомира Зуха. Его в сентябре 1942 года расстреляли, а сегодня во вророй раз - уже навсегда..."* [4, 165]

***5 января. Малеевка***. *"... **Сегодня** проснулся с мыслью о ней. Душа сразу стала полной. Как приеду, надо найти письма, написанные ей с фронта"* [4, 164].

По вышеперечисленным примерам из дневника М. Карима можно сказать, что дата действий, описываемых писателем в дневнике, совпадает с датами написания текста дневника. Доказательством является наречие "сегодня".

Спонтанность является общим жанрообразующим признаком дневника и репортажа. Мы выявили и различия между жанрами: в дневнике автор фиксирует информацию в конце дня, показателем этого является использование глаголов в прошедшем времени: "сегодня я получи**л**...", "словно сам себя приговори**л**" и т.д., а в репортажах действие происходит в настоящее время (сейчас), используются глаголы в форме настоящего времени. Например, "мы находимся, проходит, поздравляют..." (настоящее время).

Наряду с информационными жанрами выделяют и аналитические жанры, цель которых не только передать информацию, но и подчеркнуть актуальность события. Осмысление проблемы осуществляется с помощью анализа, рассуждения и цепи аргументов.

К аналитическим жанрам относятся статьи, отчеты, обозрения и рецензии. Главное в аналитических жанрах - это воздействие на публику, которое происходит благодаря доказательствам. Рассмотрим структуру рецензии.

Рецензия - вторичный текст, имеющий языковые стандарты и структурные особенности. Цель данного жанра - дать критический отзыв научному или художественному произведению.

Структура рецензии: предмет анализа, актуальность темы, краткое содержание, оценочная часть (собственная позиция), выводы (аргументы).

В тексте писательского дневника, как и в рецензии мы наблюдаем проявление авторской оценки - субъективности. Именно в оценочной части рецензии мы видим отражение собственной позиции рецензента. Например, в рецензии по дипломной работе "Учет и анализ финансовых результатов предприятия" студента экономического факультета Ивановой Г.Г. мы наблюдаем положительный отзыв (субъективность) проверяющего (рецензента) Максимова Н.С.

***Оценка.***

*"Автор курсовой работы Иванова Г.Г. хорошо сформулировала собственную позицию по данной теме. Результаты работы достаточно обоснованы. Данная работа может быть использована в практической деятельности студентов по специальности "Экономика".*

*Недостатков в курсовой работе нет.*

*Оформление работы Ивановой Г.Г. полностью соответствует предъявленным требованиям.*

*Курсовая работа рекомендована к защите и заслуживает оценки "отлично."*

*Рецензент: главный бухгалтер ООО "Сервис - тур" Максимов Н.С."*

В писательском дневнике мы также наблюдаем присутствие субъективности. Здесь автор не только дает оценку, но и собственную позицию по проблеме подтверждает аргументами. Например, в дневниковых записях 12 октября башкирский писатель М. Карим пишет: *"Люблю ходить по осеннему лесу. Пожелтевшие листья, поникшие, почерневшие цветы ни тоски, ни уныния в душе не рождают. Напротив, они*

*взгляд тешат, душу успокаивают. Потому что уходят они, оставляя миру красоту. Вот только увидев облетевшего куста птичье гнездо, оставшуюся от птенцов маленькую колыбельку, вздрагиваю. "Где они? В каких странах летают они!"* [4, 176]

Вначале М. Карим называет тему суждения - прогулка по осеннему лесу. Далее дается оценка - *"Пожелтевшие листья, поникшие, почерневшие цветы ни тоски, ни уныния в душе не рождают."* Собственную позицию автор доказывает аргументами: *"Потому что уходят они, оставляя миру красоту".*

Таким образом, писательский дневник и аналитические жанры объединяет общий признак - субъективность.

На страницах дневника всегда будет присутствовать авторская точка зрения, так как писатель внешнюю информацию пропускает через свое сознание. Это, в свою очередь, дает право тексты дневника называть "эго-текстами". Этот термин вел профессор Амстердамского университета Жак Прессер в целях объединения в одну группу документальные произведения: автобиографии, мемуары, личные дневники, письма. По мнению исследователя, в дневнике наличие "Я" следует рассматривать как субъект описания, который одновременно пишет и присутствует в тексте.

Третий жанр публицистики - это художественно-публицистический. Текст художественно-публицистического стиля выполняет несколько функций: информационную, экспрессивную, познавательно-просветительскую, гедонистическую и т.д. Данный жанр относится к "писательской" журналистике. Характерной чертой является требовательность к языку художественной образности, эмоциональной насыщенности текстов, глубине авторского обобщения действительности. Художественная образность, эмоциональная насыщенность контекста повышается с помощью использования в тексте средств художественной выразительности, фигуры речи, фразеологизмов, афоризмов и т.д. [1]

Язык дневника М. Карима как и язык художественно-публицистических жанров богат фразеологизмами. Устойчивые словосочетания в основном использованы для характеристики внутреннего, психо-эмоционального состояния человека. Рассмотрим некоторые из них. Например, в дневнике М. Карим при описании эмоций, которые он испытывает при общении с женой, использует глагольные фразеологизмы, выражающие внутренние переживания, "кольнуло в сердце" в предложении *"...когда услышал голос ее (жены), кольнуло в сердце"* [4, 196], "душа отходит" в контексте *"после взаимных обид не скоро душа отходит"* [4, 172]. Также есть фразеологизмы со структурой простого двусоставного предложения с открытой позицией субъекта характеристики. Например, *"суматоха в стране душу мутит, взбалтывает, дух от нее млеет*" [4, 182]. М. Карим обращается также к субстантивным фразеологизмам с компонентом "сердце". Например, *"также звериные укусы оставляют* ***шрамы на сердце****... "* [4, 199].

Использование писателем фразеологизмов с компонентами "сердце" и "душа" помогает в создании представлений о состоянии человека. Особенно часто "сердце", "душа" символизируют любовь, соединяющую в себе самые разнообразные переживания. Эти слова имеют несколько лексических значений.

В дневнике М. Карима использовано большое количество афоризмов, что также придает записям образность, эмоциональную насыщенность. Например, *"У добра нет края, у зла нет дна"* [4, 144]. *"При случае ум спрятать можно, вот только глупость никак не спрячешь"* [4, 149]. *"Вошедшее в уши холодное слово на сердце ложиться льдинкой"* [4, 149]. *"Чистые слезы меня потрясают всегда. От них под зонтик не спрячешься"* [4, 157].

Таким образом, между писательским дневником и художественными жанрами публицистики есть общий признак - это использование различных средств художественной выразительности, афоризмов, фразеологизмов и т.д. Тем самым можно определить общую функцию текстов - это произвести эмоционально-образное впечатление. Авторы, используя всю палитру художественно-выразительных средств и реальные факты, создают собственную реальность в текстах. Главная задача авторов - дать оценку событиям. Прослеживается сочетание высокого гражданского пафоса, что характерно для публицистики, и личностное отношение к предмету речи. В результате образуется индивидуальный стиль писателя-журналиста.

Сравним художественно-публицистический жанр - очерк с текстом писательского дневника.

Очерк - это публицистический жанр, который характеризуется документальностью. Очеркист описывает реальных людей и настоящие события. В данном сочинении проскальзывает мысль автора, есть достоверная информация, факты, раздумья над решением проблемы. Очерк пишется в описательном стиле, от вида очерка зависит присутствие или отсутствие субъективной оценки. Выделяют следующие виды очерка - это портретный, путевой, научно-популярный, событийный, социологический, проблемный, судебный. Самыми популярными являются путевой, передающий впечатления от путешествия конкретного лица, и портретный, где раскрывается внутренний мир человека с помощью словесного портрета. Рассмотрим текст портретного очерка.

*"Хочу рассказать про своего любимого учителя, Носова Ивана Валерьевича, который преподавал у нас в университете с 1-го по 3-й курс. Это был упитанный мужчина лет пятидесяти, невысокого роста, с лысиной на голове, орехового цвета узкими глазами. Мне больше всего запомнился его заинтересованный взгляд, который окрылял нас, охота было с ним разговаривать и разговаривать. Он любого слушал так внимательно, как будто ощущал самочувствие собеседника, понимал его...*

*Вот такой был интересный человек. Мы все тянулись к нему, он был для нас родным человеком"* (Из газеты "Родник").

В данном тексте очеркист описывает реального человека, что является подтверждением документальности жанра.

Текст дневника М. Карима также характеризуется достоверностью материала. Ценность изучения писательского дневника усиливается тем обстоятельством, что наиболее полно и объективно описываются важные события в области политики, экономики, культуры, истории, литературы и др. Как отмечал Ф. Достоевский, дневник - это "отчет о виденном, прочитанном, слышанном." В дневнике писателя мы видим связь записей с текущими, а не с давно прошедшими событиями. Например, трагедия в Чечне случилась в 1999г., и в этом же году М. Карим в своем дневнике пишет: *"Трагедия Чечни, неспособность российских властей, центральные издания, радио, телевидение, подливающие масло в огонь... И какое право у Ельцина ради неправого дела проливать кровь наших детей, бросать их в огонь?"* [5, 15]

*"**29 августа.** Пятый день идет сессия Верховного Совета СССР. Это напоминает драку сыновей на руинах отцовского дома.*

*Горбачев сидит как призрак, иногда что-то говорит, но внутри у него ничего нет... У нас в Уфе нападают на Рахимова, обвиняя его за нейтральную позицию..."* [4, 200]

*"**17 января.** Переделкино. В восемь утра позвонил Муса. Америка начала войну против Ирака. Беда на беду"* [4, 196].

Данные примеры подчеркивают документальность изложенного материала. Общим признаком очерка и писательского дневника является достоверность информации.

В статье мы сравнивали дневник М. Карима с жанрами публицистики - рецензией, репортажем, очерком. Сопоставление писательского дневника с жанрами публицистики позволило выделить ряд общих признаков, что дает право рассматривать дневник как жанр публицистики. Это спонтанность, субъективность, достоверность. Главная функция таких текстов - это оказание эмоционально-образного впечатления. Таким образом, дневник М. Карима - это жанр публицистики, где авторское повествование не ограничено рамками традиционного жанра, где информация излагается "по горячим следам", весь материал писатель пропускает через свое сознание, который характеризуется достоверностью информации (документальностью). Но у писательских записей есть признаки, присущие только дневниковому жанру - это датируемость, регулярность, дискретность.

ЛИТЕРАТУРА:

1. Абелева И. Ю. Речь о речи. Коммуникативная система человека Текст. / И. Ю. Абелева. М. : Логос, 2004. - 304 с.
2. Большая литературная энциклопедия Текст. / Красовский В. Е. и др. -М. : Филолог, о-во «Слово» : ОЛМА-ПРЕСС Образование, 2004. -845 е.: ил.
3. Егоров О.Г. Дневники русских писателей 19 века: Исследование / О.Г.Егоров. М.: Флинта: Наука, 2002. 288 с.
4. Каримов И. М. Год без Мустая/ И. М. Каримов, А. М. Каримова // Уфа: Издательство Инеш, 2006. - 216 с.
5. Николенко И.А. Без поэзии сердце остынет. URL: http://www.agidel.ru].
6. Тартаковский А. Г. Русская мемуаристика XVIII - первой половины XIX в.: От рукописи к кн. / А. Г. Тартаковский; АН СССР, Ин-т истории СССР. – М.: Наука, 1991. – 286с.
7. Фаткуллина Ф. Г Лингвопрагматика рекламного дискурса // актуальные вопросы теории и практики филологических исследований: мат-лы III междунар. научно-практ. конф. Прага: Vedecko vydavatelske centrum "SociosferaCZ", 2013. С. 81–84.

© Латыпова А.А., 2019

***Минлебаева Н.А.,***
*магистрант, БДУ, Өфө к.*
***Ҡунафин Ғ.С.,***
*филол. ф. докт., проф., БФА-ның мөхбир ағзаһы*
*БДУ, Өфө к.*

## ФӘРЗӘНӘ АҠБУЛАТОВА ХИКӘЙӘЛӘРЕНЕҢ КОМПОЗИЦИЯҺЫ

«Әҫәрҙең йөкмәткеһе менән формаһына ҡағылышлы компоненттар, әлбиттә, әҙәби-эстетик категорияларҙың күбеһенә органик рәүештә бергә ҡушылып килә. Шулай ҙа художестволы форманың әҫәр йөкмәткеһенә тура килеү-килмәүен башҡа бөтә компоненттарға ҡарағанда ла тулыраҡ сағылдыра торған бер күренеш бар, ул да булһа – копозиция» [Әхмәтйәнов К.Ә.,2003;85].

Композиция – йөкмәткегә образлылыҡ биреүсе сараларҙың иң мөһиме. Икенсе төрлө әйткәндә, композиция – образлы итеп ойошторолған йөкмәтке: сюжет нигеҙенә һалынған ваҡиғалар, пейзаж, портрет, лирик һәм публицистик сигенеү, һөйкәлмә ваҡиға һәм образдар үрелеп, аралашып киләләр. Эпилог, прологтар, әҫәрҙең бүлектәргә бүленеүе лә композиция төшөнсәһе.

Композиция, художестволы йөкмәтке һәм форманың үҙенсәлекле берлеген күрһәтә. Ул әҫәрҙең жанрына, авторҙың алдына ҡуйған идея-эстетик маҡсаттарына ҡарап төрлөсә: ябай һәм ҡатмарлы булырға мөмкин.

Ф. Аҡбулатованың “Туғайҙарҙа турғай” хикәйәһе, хәтерләүҙәрҙән тора. Төп герой Ғәйнетдиндең ауылы Аҡбатыр төпкөлдә булғанлыҡтан бөтөрөлә, халҡы күсеп китә. Шул арҡала егет иң яҡын кешеһе, синыфташы Фәнисәне лә юғалта. Төйөнләү өлөшө булып авторҙың автобуста йырсы Ғәйнетдинде осратыуы, уның менән әңгәмә ҡороуы тора.

Композицион яҡтан әҫәр ике бүлексәнән тора. Ваҡиғаларҙың художестволы йөкмәткеһен байытыр өсөн автор тәбиғәт күренештәрен, уларға ҡағылған ырымдарҙы ҡуллана. Улар Аҡбатыр ауылының ҡороуына битараф булмаған, аҙаҡҡа тиклем өмөтөн юғалтмай йәшәгән ҡайһы-бер кешеләрҙең ҡайғыһын һүрәтләүгә булышлыҡ итә автор.

Ваҡиғалар үҫеше төп герой Ғәйнетдиндең иҫтәлектәренә, бала сағына алып ҡайта. Әҫәрҙең идея-проблематикаһы ла шунда асыла. Ауыл кешеләренең үҙ ерҙәрен ташлап китеп, ҡала шарттарына яраҡлашыуы ауыр кисереүен автор психологик планда аса.

Хикәйәлә бер сюжет һыҙығынан икенсеһе үрелеп сыға. Сиселеш өлөшөндә Ғәйнетдин үҙе лә һиҙмәҫтән яратып йөрөгән мөхәббәте Фәнисәне Аҡбатырҙа осрата.

Шулай итеп, әҫәрҙең төп проблемаһы булып ауылдың бөтөүе, халыҡтың тыуған ерен, ауылын уратып алған тәбиғәтен онота алмауы, уны, уның халҡын юҡһыныуы тора. Ауылдың юҡҡа сығыу проблемаһы, йәштән дуҫ булып йөрөгән ике тиҫтерҙең юлын икегә айырышыуға һәм ғүмерлеккә аҙашыуға сәбәп була ла инде.

«Бөйөк Еңеү байрамы иң күркәм һарайҙарҙың береһендә уҙасаҡ. Ҙур концерт. Унда бөтә теләгәндәрҙе лә саҡыра алмайбыҙ. Ә һеҙ ана шул тантаналы кисәлә сығыш яһаясаҡһығыҙ. Сәхнәгә сығырға теләүселәр былай ҙа етерлек буласаҡ. Уйлап ҡарағыҙ әле…» - тигән тура телмәрҙән башланып китә Ф. Аҡбулатованың “Ун биш минут” хикәйәһе. «Һуғышта булған берәй хәл-ваҡиға тураһында һөйләрһегеҙ. » - тип, һаман да өгөтләүен белә егет һуғыш ветеранын. Ошо ике кешенең һөйләше әҫәрҙең төйөнләү өлөшөн тәшкил итә.

Кульминацияның иң юғары нөктәһе булып ҡарт менән концерт ойоштороусылар араһында тыуған конфликт.

Сиселештә, урам буйлап таяҡҡа таянған оҙон буйлы, киң күкрәкле ҡарттың аҡһай-аҡһай поезға ҡабаланыуы һүрәтләнә. Ҡарт үҙендә ниндәйҙер еңеллек тоя. Әйтерһең дә, яҡтары атлап түгел ә осоп бара. Йөрәк ауыртыуы, тән һыҙлауы ла юҡҡа сыға.

Яҙыусы был бәләкәй генә хикәйәһен ябай композицион алымға ҡорған. Ветерандың иҫтәлектәре, хәтерләүҙәре сюжет линияһын хасил итә. Был алым геройҙың уның йәштән ниндәй кеше булғанлығын асыҡларға булышлыҡ итә.

“Бүләк” хикәйәһе лә композицияһы яғынан алда күрһәтелгән «Ун биш минут» әҫәренә оҡшаш. Бер сюжет һыҙығы эсендә икенсеһе асыла. Хикәйәнең сюжеты мауыҡтырғыс башланып китә. Ҡышты Мирзаһит элеккеләре менән сағыштырғанда ауырыраҡ үткәрә. Шуға берәй яҡҡа барып дауаланырға уйлай. Ә уға тиклем ҡыҙы менән икәүләп кенә урманға барып ҡайтырға һөйләшәләр. Тик колхоз рәйесе көтөүҙе көтөргә кеше юҡ, быйылға ғына ал инде, көҙөн үҙеңде иң шәп санаторийға ебәрермен, тип

вәғәҙәләр биреп ялбарғас, Мирзаһит ризалаша. Бына шундай төйөнләүҙән һуң ваҡиғалар үҫеп, трагедияға алып килә.

Сиселештә, ветеран был байрамдан күңеле күтәрелеп түгел, ә киреһенсә тиҫкәре тойғолар менән ҡайтып китә. Урамда ул мәрхүм булған күршеһенең ҡыҙына, атаһының иҫтәлегенә бүләк бирҙеләр, тип, үҙенең транзисторын бирә. Кешенең эшен, тормошон дауам итеп балаһы ҡала. Ул уның өмөтө, һағышы, шатлығы һәм хыялы. Кем дуҫ, кем дошман хәҙерге донъяла, билдәһеҙ. Ҡыҙ был бүләктең кемдеке икәнен Ноғман бабай вафат булғас ҡына белә. Тыуған ауылына ҡайтҡас, туғандарынан Мирзаһит урманы барлығын белә.

Шулай итеп был бәләкәй хикәйәлә автор «Үлеләрҙең ҡәберен бел, тереләрҙең ҡәҙерен бел» тигән мәҡәлдә сағылыш тапҡан идеяны алға ҡуя.

ӘҘӘБИӘТ:

1. Аҡбулатова Ф.Ф. Уның исеме – мөхәббәт. Повестар, хикәйәләр[Текст]/ Ф. Ф. Акбулатова. – Өфө: Китап, 2007. – 312 б.
2. Гәрәева Г.Н. Хәҙерге проза үҙенсәлектәре [Текст]/ Г.Н. Гәрәева. – Өфө: Китап, 2009. – 224 б.
3. Гәрәева Г.Н. Башҡорт прозаиктары: Монография [Текст]/ Г.Н. Гәрәева. – Өфө: БДУ, 2012. – 495 б.
4. Әхмәтйәнов К.Ә. Әҙәбиәт теорияһы. – Үҙгәрешле 3-сө баҫма [Текст]/ К. Ә. Әхмәтйәнов. – Өфө: Китап, 2003. – 392 б.
5. Шаһиев Р.В. Әҙәбиәттә герой орбитаһы: әҙәби тәнҡит мәҡәләләре, рецензиялар, ижади портреттар[Текст] Р. В. Шаһиев. – Өфө: Китап, 2010. – 176 б.

© Минлебаева Н. А., Ҡунафин Ғ.С., 2019

***Мостафина Р.Д.,***
*филол. ф. к., доцент, БДУ, Өфө ҡ.*

## БАШҠОРТ ӘҘӘБИӘТ ҒИЛЕМЕНДӘ МОСТАЙ КӘРИМ ИЖАДЫН ӨЙРӘНЕҮ ТОРОШО

Башҡорт әҙәбиәте классигы Мостай Кәримдең ижады һәм тормош юлы башҡорт әҙәбиәте ғилемендә ярайһы ғына киң өйрәнелгән. Башҡа милли әҙәбиәт теоретиктары һәм тәнҡитселәренең дә яҙыусы ижадын төрлө яҡлап асҡан ғилми хеҙмәттәре, тәнҡит мәҡәләләре билдәле.

Башҡорт әҙәбиәтенең үҫеш тарихына арналған башҡорт һәм рус телдәрендә төрлө йылдарҙа сыҡҡан фундаменталь хеҙмәттәрҙә, мәҫәлән, “Башҡорт әҙәбиәте тарихы” 6 томлығының 5-се томында, “Егерменсе быуат башҡорт әҙәбиәте” юғары уҡыу йорто студенттары өсөн дәреслектә М.Кәрим ижадына хронологик байҡау яһала.

“Егерменсе быуат башҡорт әҙәбиәте” дәреслегенә М.Кәрим хаҡындағы бүлекте ғалим Р.Байымов яҙған. Әҙәбиәт тарихы буйынса хеҙмәттәрҙә яҙыусы ижады хаҡында яҙғанда традицион хронологик принцип һаҡлана: яҙыусының биографияһына ҡағылышлы мәғлүмәттәр, башланғыс ижады һәм артабанғы ижады, ғөмүмән, әҙәби процеста, әҙәбиәт тарихында тотҡан урыны һ.б. Р.Байымов мәҡәләһенең иғтибарҙы йәлеп иткәне - традицион хронологияны ҡоро статистика килтереүгә ҡормай, М.Кәрим ижадының эволюцион үҫеше хаҡында тулы картинаны күҙ алдына баҫтыра. Мәҡәләнең башында уҡ автор ошо хаҡта әйтеп тә ҡуя: “Әҙиптең эҙләнеүҙәргә һәм асыштарға бай

ижады башҡорт әҙәбиәтенең 30-сы йылдар аҙағынан бөгөнгө көнгәсә булған барлыҡ юғары һәм мөһим күренештәрен сағылдыра килде” [3; 347].

Ғалим шағирҙың башланғыс осор һәм унан һуңғы йылдар шиғриәте лирик геройы концепцияһын юллай: һуғыш осоро шиғриәтенә романтик рухлы һәм граждандлыҡ теремеклеге хас булған, уйҙары киләсәккә, бәхетле тормошҡа төбәлгән, тыуған ер, тыуған ауыл менән бәйләнгән лирик герой хас булһа, һуғыштан һуңғы йылдар геройы интернациональ һәм милли характерлы булыуы менән айырылып тороуын билдәләй.

Р.Байымов шағирҙы унын бөтә ижады буйына йәмғиәт һәм кеше яҙмыштары, шәхес азатлығы мәсьәләһе борсоуын һыҙыҡ өҫтөнә ала. Әле утыҙынсы йылдар аҙағында ҡырҡынсы йылдар башында яҙылған “Таныш булмаған ҡунаҡ”, “Декабрь йыры” кеүек иң тәүге поэмаларында уҡ әҙип йәмғиәт һәм шәхес мәсьәләһен үҙәккә ҡуйыуын шул яғы менән поэмалар әҙиптең шиғриәттәге яңы һүҙе булыуын билдәләй.

Драматургияһы, прозаһы хаҡында һүҙ йөрөткәндә лә Р.Байымов сәхнә һәм сәсмә әҫәрҙәренең проблематик яңылығы, яҙыусының жанр өлкәһендәге новаторлығы, оҫталыҡ мәсьәләләренә иғтибарын йүнәлтә.

Ғөмүмән әйткәндә, монографик күҙәтеүҙә үҙәктә яҙыусы ижадының әҙәби процеста тотҡан урыны, әҙәби оҫталыҡ мәсьәләләре ҡуйылған.

Т.Килмөхәмәтовтың 2016 йылда сыҡҡан “Һайланма әҫәрҙәр”енең 3-сө томына “Халыҡ шағиры Мостай Кәрим театры” тигән ҙур ғына мәҡәләһе ингән. Ғалим үҙе билдәләүенсә, мәҡәләлә Мостай Кәримдең барса пьесалары анализлана. Ғалимдың анализлана, тип әйтеүенә, мин шағир драматургияһында оҫталыҡ мәсьәләләре ҡарала тип өҫтәр инем. Мәҡәләне автор бәләкәй генә бүлексәләргә бүлгән. Мәҡәләнең һәм бүлексәләрҙең исеменән үк күренеүенсә, автор әҙәби оҫталыҡ мәсьәләләрен үҙәккә ҡуя. Мәҫәлән, яҙыусының драматургияһындағы типологик художество һыҙаттары, пьесаларҙағы символизм һәм символик образдар, конфликт ҡороуҙағы типология, конфликт ойоштороуҙағы парадоксаллек хаҡындағы ҡыҙыҡлы һәм ентекле тикшеренеүҙәрҙә М.Кәримдең индивидуаль ижад үҙенсәлеге тигән донъяның ҡайһы бер һыҙаттары асыла.

М.Кәрим драматургияһы хаҡында Т.Килмөхәмәтов былай ти: “Тормошҡа үтә оҡшатырға тырышыу М.Кәримгә ят. Әҙәби әҫәр – поэма, пьеса, повесть – унын өсөн сәнғәт ҡанундары буйынса ижад ителгән тормош” [5; 216].

М.Кәримдең ижади таланты хаҡында ғалим тағы ла шундай тос фекрен еткерә: “Уның эшмәкәрлеге йәнә бер тапҡыр иҫкереү белмәҫ бер хәҡиҡәтте раҫлай: әҙәбиәт үҫеше тарихи үҫештән айырылғыһыҙ. Күренекле яҙыусылар бер үк ваҡытта халыҡтың теге йәки был дәүерҙәге социаль, әхлаҡи-этик, психологик йөҙөнөң йылъяҙмасыһы булып та сығыш яһай. Мостай Кәрим ана шундай рәссамдарҙың береһе” [5; 221].

Т.Килмөхәмәтовтың ошо фекерҙәре Р.Байымовтың М.Кәримдең ижады башҡорт әҙәбиәте тарихының үҫеш эволюцияһын күҙ алдына баҫтыра тигән һүҙҙәрен тағы ла бер тапҡыр раҫлай.

Беҙ был мәҡәләбеҙҙә М.Кәрим ижады, әҙәби оҫталығы хаҡында ике мәҡәлә хаҡында ғына һүҙ йөрөттөк. Киләсәктә М.Кәримдең ижади портретын юллаған, тотош ижадын анализлаған фундаменталь хеҙмәттәр һәм әҙәби-тәнҡит мәҡәләләренә ентекләберәк һәм тулыраҡ туҡталып үтербеҙ.

ӘҘӘБИӘТ

1. Гареева Г.Н., Мустафина Р.Д., Каскинова Г.Н., Алибаев З.А., Давлеткулов А.М. Психологизм как художественная категория. Man in India. Том: 97. -№.21. -2017 г. Стр. 273-285.
2. Гареева Г.Н., Мустафина Р.Д. Новаторство башкирской прозы в отображении реалий современности в тридцатые годы XX века. //Вестник Башкирского университета. -2018. -№ 23. –Стр. 462-467.
3. Егерменсе быуат башҡорт әҙәбиәте. Юғары уҡыу йорттары өсөн дәреслек. –Өфө: Полиграфкомбинат, 2003. – 575 бит.
4. Ильясова Ә., Мостафина Р.Д. Мостай Кәрим һәм Рәсүл Ғамзатов шиғриәтендә троптар. Вопросы духовной культуры народов Урало-Поволжья: история и современность (к 100-летию образования Республики Башкортостан и 110-летию Башкирского государственного университета). Сборник материалов Всероссийской научно-практической конференции (с международным участием) молодых ученых, аспирантов, магистрантов, студентов. Уфа, 2019 РИЦ БашГУ, 2019.- 145- се бит
5. Килмөхәмәтов Т.Ә. Һайланма әҫәрҙәр. 3-сө том. Әҙәби процеска күҙәтеүҙәр, әҙәби-художестволы публицистика, әҙәби-тәнҡит мәҡәләләре, әҙәби-ғилми тикшеренеүҙәр. –Өфө: китап, 2016. – 408 бит.
6. Мостафина Р.Д. Композиционные особенности башкирских драм послевоенных лет (1945-1970). Актуальные проблемы башкирской, тюркской и угро-финской филологии и культуры. Материалы Всероссийской (с международным участием) научно-практической конференции, посвященной 95-летию народного поэта Башкортостана, Героя Социалистического труда, лауреата Государственной премии СССР Мустая Карима и 80-летию литературного объединения «Шонкар» («Кречет») Башкирского государственного университета. Редакционная коллегия: Г.С.Кунафин (Ответственный редактор); Г.Н.Гареева (Ответственный секретарь). РИЦ БашГУ, 2014. Стр. 388-394.

© Мостафина Р.Д., 2019

***Муллағәрәева Г.Р.,***
*магистрант, БДУ, Өфө к.*
***Солтанбаева Х.В.,***
*филол. ф. д., проф., БашДУ, Өфө к.*

## БАШҠОРТ ДОНЪЯ ТЕЛ КАРТИНАҺЫНДА «БАЛА САҠ» КОНЦЕПТЫ (М. КӘРИМДЕҢ «ОҘОН-ОҘАҠ БАЛА САҠ» ӘҪӘРЕНӘН АЛЫНҒАН МАТЕРИАЛДАР НИГЕҘЕНДӘ)

Донъя картинаһының бик күп билдәләмәләре бар, сөнки ул гуманитар фәндәрҙең үҙәк төшөнсәһенең береһе булып тора. Һәр билдәләмә, мәҫәлән донъя тел картинаһы һүҙбәйләнеше алдынан торған дефферент билдәгә бәйле. Ю.А. Апресян фекере буйынса һәр тәбиғи тел билдәле ҡабул итеү ысулдарын һәм донъя ойошмаһын сағылдыра. Донъя картинаһында кешенең бер ҡатлы эске тормошо күрһәтелә. Шулай уҡ үткән быуындың тәжрибәһен конденсиялай һәм шул тормошҡа беҙҙе индерә ала.

Лингвистика методологик алым итеп донъя картинаһын үҙ эсенә индерә һәм элек иғтибарға алынған күренештәрҙе күрергә ярҙам итә.

Донъя картинаһы идеяһы XX быуат башында барлыҡҡа килә. Уны О. Шпенглер «Закат Европы» тигән хеҙмәтендә күҙ уңында тота: «Һәр бер мәҙәниәткә тәбиғәтте

үҙенсә күреү һәм өйрәнеүҙең шәхси ысулдары хас. Һәр кемдең үҙенә бер төрлө тәбиғәте бар һәм шул уҡ күренештә башҡа кеше уны күрә алмай» [6, 198].

Донъя тел картинаһы тел саралары ярҙамында сағыла һәм үҙ эсенә милли характер индерә. Ул кешеләрҙең тирә-яҡ мөхит менән бер бөтөн булып донъяны, ысынбарлыҡты күрә белеүендә күренә.

Милли донъя тел картинаһы теге йәки был халыҡтың милли-мәҙәни тел үҙенсәлектәрендә сағыла. Ул донъя картинаһының донъны һиҙемләү базаһы аша бөтә билдәле өлгө һәм варианттары һалынған һәм йыйылған мәҙәниәт материалдары ярҙамында синтезлана.

Шулай уҡ автор йәки индивидуаль донъя тел картинаһы тигән төшөнсә бар. Милли донъя тел картинаһының тел саралары аша белдерелгән һәм ҡушма өлөшө булып торған айырым шәхси телдең донъяһын күреү, тойоу һәм билдә биреү – автор донъя тел картинаһы тип атала.

Донъя тел картинаһы билдәләмәһен асыҡлағанда беҙ айырым тел шәхесенең теленә мөрәжәғәт итәбеҙ. Кеше аралашып йөрөгән телде тикшереү идеяһы боронғо замандарҙан уҡ тел ғилеменә билдәле.

Тел шәхесе теорияһы килеп сығыу тарихы В. Фон Гумбольд, А. Шахматова һәм башҡаларҙың ғилми эштәрендә сағылыш тапҡан. Шәхси тел төҙөлөшөндә мөһим урынды тел концептуалтзацияһы, телдең билдәләрендә донъяның сағылышы, мөһим роль уйнай. Был эшмәкәрлектең һөҙөмтәһе төрлө ысынбарлыҡтың тап килгән фрагментын, мәғәнәһен аңлатҡан концептарында сағыла.

Концепт – ул төрлө маҡсат өсөн эшкәртелгән һәм аң менән кодировать ителгән мәғлүмәт. Концепт кеше аңында ике төп функция башҡара: 1) мәҙәниәт ярҙамында тел шәхесенең аң һәм хис өлкәһенә үтеп инә; 2) концепт аша кеше мәҙәниәткә ылыға һәм уның өлөшө була.

Беҙҙең тикшереү эшенең объекты булып Мостай Кәримдең «Оҙон-оҙаҡ бала саҡ» әҫәре ярҙамында «Бала саҡ» концептын тикшереү тора. Был өлкәлә тикшеренеүҙәр автор донъя тел картинаһының моделен төҙөргә ярҙам итә һәм авторҙың бала сағына булған мөнәсәбәтен асыҡлайбыҙ.

Мостай Кәримдең шәхси теле киң аңлы һәм төрлө яҡлап үҫешкән. Авторҙың әҫәрҙәре тормош тәжрибәһен тәшкил итә, шуға ла яҙыусының донъя тел картинаһы киң ҡырлы.

Мостай Кәримдең бала сағы бала саҡ уйындары, йырҙар, әкиәттәр менән үткән. Шул хаҡта уҡығанда шундай «Бала саҡ» концепттарын табырға була: *1) Ағас тирәләй* ***ҡулға ҡул тотоношоп****, ваҡ балалар* ***әйлән-бәйлән уйнай.*** *2) Башта беҙ күңелле* ***йыр йырлайбыҙ,*** *шаярып зыҡ ҡубабыҙ. 3)* ***Борон-борон заманда*** *бер бабай буйға еткән улына кәләш әйттермәк булған икән. 4)Үҙе әле тыумаған да, уны инде ҡара урман эсендәге түңәрәк күл буйында керт-керт үлән утлап йөрөгән* ***Аҡбуҙат көтә****, атты ҡороҡларға арҡан да әҙер.*

Туғандар, дуҫтар һәм иң яҡын кешеһе Оло инәй тураһындағы иҫтәлектәр ҙә яҙыусының бала сағын асыҡларға ярҙам итә: *1)Улар араһында мин дә, минең кесе туғандарым* ***Сәлисә*** *менә* ***Ильяс*** *та бар. 2) Был имән минең* ***Оло инәйем*** *булып сыға, уның тирәһендә инде балалар ғына түгел, беҙҙең бөтә* ***ғаиләбеҙ – атайым, кесе инәйем, ағайҙарым, апайҙарым*** *әйләнә. 3) Минең Оло инәйемде* ***«кендек әбейе»,*** *ә үҙемде* ***«кендек бабайы»*** *тип атайҙар. 4) Асыҡ хәтерләйем: ғүмеремдә мине беренсе тапҡыр* ***етәкләп алған ҡул*** *– уның ҡулы булды.*

Кеше ҡушаматтары балалыҡтың бер өлөшө булып тора: *1) Арабыҙҙа иң көслөһө* ***Шәһиҙулла үҙе «Рәсәй»ҙе*** *алды, унан ҡала* ***тыңҡыш Вәлетдин «Америка», Искәндәр***

***Ибрайы «Япония»*** *булды. 2) – Минең ҡушаматым* ***«Һары серәкәй», -*** *тине. 3)* ***«Рукавказ»*** *минең икенсе ҡушаматым – һуғышсан ҡушамат.*

Урам ҡушаматтары: *1)Күп тә үтмәй,* ***Өс әтәс урамында*** *Ҡәҙерғол ҡарттың ете йыл буйы бәпес килтермәй йөрөгән йәш бисәһе малай тапты. 2) Бәләкәс кенә буйлы, төптән йыуан Йоморо Талип* ***Ябалаҡ урамында*** *тора. 3) Әсғәттәр урамын* ***«Губернатор урамы»*** *тип йөрөтәләр.*

Беренсе мөхәббәт: *1)* ***Фәриҙә*** *әгәр етем булмаһа, үгәй әсәһе уны йәберләтмәһә, бәлки, мин уға* ***ғашиҡ*** *та булмаç инем. 2) Минең күңелемә* ***иләç-миләç уйҙар*** *ҡағылып үткәнде дуçым һиҙмәне. 3) Уҙған йыл партала* ***йәнәшә ултырған ҡыҙ*** *менән ярты ҡышҡа тиклем* ***яныл-көйөп*** *көн һайын* ***хат алыштыҡ****, һәр кис һайын тегегә* ***оҙон-оҙон хаттар*** *яҙам.*

Беренсе тапҡыр мәктәпкә барыу: *1)* ***Мәктәп*** *мине артыҡ хайран ҡалдырманы. 2) Ике йылдан һуң һеңлем Сәлисә менән бергә мин йәнә* ***беренсе синыфҡа килдем****. 3) Беҙҙе йәш кенә* ***уҡытыусы апай*** *уҡыта.*

Яңы кейем, тәмле ашамлыҡҡы бәйле иçтәлектәр: *1) Уның башы –* ***ҡара бәрхәт түбәтәй*** *менән бер пар* ***резинка галош*** *булды. 2) Оло инәйем, үҙемә үлсәп, аҡ буйлы ҡыҙыл* ***киндер ыштан*** *тегеп ҡуйҙы – ике кеçәле. 3) Яңы ыштандың бер кеçәһенә* ***көнбағыш****, бер кеçәһенә* ***кипкән муйыл*** *тултырып мин ҡапҡа төбөнә сығып баçтым. 4)Берәүҙәр* ***тәбикмәк****, икенселәр* ***ҡоймаҡ,*** *өсөнсөләр* ***ҡыçтыбый,*** *дүртенселәр* ***май ҡумәсе*** *бешерә.*

Шулай итеп М. Кәримдең бала саҡ уйындары, йырҙары, әкиәттәре; туғандар, дуçтар, иң яҡын кешеһе Оло инәй; кеше, урам ҡушаматтары; беренсе мөхәббәт, мәктәпкә тәү тапҡыр барыу һәм яңы кейем, тәмле ашамлыҡтар тураһында яҙыуҙары аша «Бала саҡ» концептын «әйлән-бәйлән уйнай», «борон-борон заманда», «Ильяс», «кендек әбейе», «кендек бабайы», «уҡытыусы апай», «киндер ыштан», «тәбикмәк», «Ябалаҡ урамы», «Рукавказ», «Губернатор урамы» һ.б. һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр аша асыҡларға була.

ӘҘӘБИӘТ:


1. Брутян Г.А. Язык и картина мира. – М.: Филологические науки, 1973. – 169 с.
2. Воробьев В.В. Лингвокультурология. – М.: Книга по Требованию, 2012. – 284 с.
3. Сабитова З.К. Лингвокультурология. – М.: Академия, 2010. – 208 с.
4. Султанбаева Х.В., Назырова З.У. Репрезентация концептуальной сферы «Родина» в башкирской языковой картине мира (на материале творчества М. Карима). – Уфа: Вестник Башкирского университета, 2016.
5. Мостай Кәрим «Оҙон-оҙаҡ бала саҡ». - Өфө: Баш. кит. нәшр., 1981. – 296 бит.
6. Шпенглер О. «Закат Европы». – М.: Юрайт, 2017. – 307 с.


© Муллагареева Г.Р., Султанбаева Х.В., 2019

***Муллағолова Ә.М.,***
*филол. ф. к., ГУП ТРК "Башҡортостан", Өфө к.*

## ХАЛҠЫБЫҘҘЫҢ РУХИ КӨҘРӘТЕ

Ваҡыт көслө ырыу-ҡәүемдәрҙе, таш диуарҙарҙы, илдәрҙе үҙе менән алып китә. Әммә бөйөк шәхестәр, йылдар, быуаттар сылбыры аша үтеп, ил улы, ил ҡыҙы булып күңелдәрҙә йәшәй бирәләр. Мәçәлән, Гомер, Гете, Толстой, Руставели, Салауат, Туҡай, Дәүләтшина...

Халҡыбыҙҙың рухи ҡөҙрәте булған Мостай Кәрим хаҡында һүҙ йөрөткәндә, уның яҡты шәхсиәте, оло ижады, кешелек донъяһы буйлап оҙон-оҙаҡ йылдар, дәүерҙәр, хәрәкәт-бәрәкәт итере күҙ алдына килә.

Башҡортостандың халыҡ шағиры, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, СССР-ҙың Дәүләт, Ленин, Рәсәйҙең Станиславский исемендәге дәүләт премиялары лауреаты, Социалистик Хеҙмәт Геройы, әҙәбиәтебеҙ бәһлеүәне, олпат шәхес Мостай Кәрим әҫәрҙәре бәләкәйҙән ҡанға һеңгән. Хәреф танымағанда радио, телевидение тапшырыуҙары йә сәхнәләштерелгән өҙөктәр аша, ә уҡырға өйрәнеү менән бихисап әҫәрҙәре арҡылы беҙ Йәмил, Оксана, Зөбәржәт, Аҡйегет, Мәрәһим, Аҡйондоҙ, Салауат, Прометей һәм башҡа геройҙар галереяһы менән осраштыҡ. Уларҙың йәшәйешенә, рухына һоҡландыҡ, фәһем алдыҡ. Аҙаҡ, уҡытыусы һөнәренә эйә булғас, быуын-быуын йәштәрҙе Мостай ағай әҫәрҙәре миҫалында тәрбиәләй башланыҡ.

Хәйер, уҡытыусы һөнәрен һайлауымда ла әҙип йоғонтоһы ҙур булды. Уның түбәндәге поэтик юлдарын һәр бала кеүек мин дә яратып уҡый инем:

*Һин уҡытыусым,*  
*шундай наҙлап*  
*Ҡараның күҙҙәремә.*  
*Һүнмәҫлек ҙур*  
*дәрттәр һалдың*  
*Бәләкәс йөрәгемә...*

Кескәйҙәр йөрәгенә изге, сәләмәт орлоҡтар сәсеү теләге мине Сибай педагогия училищеһына алып килде. Ундағы уҡытыусы Рәсимә Ураҡсина етәкселегендә төркөмдәр араһында төрлө пьесаларҙы сәхнәләштереү традицияға ингән ине. Студенттар “Айгөл иле”, “Ай тотолған төндә”, “Ҡыҙ урлау”, “Туй дауам итә” әҫәрҙәрен кинәнеп сәхнәләштерәләр, әҙәби кисәләрҙә “Ҡайын япрағы тураһында”, “Россиянмын” һәм башҡа шиғырҙарын йәки “Үлмәҫбай”, “Ҡара һыуҙар” поэмаларын тасуири яңғыраталар.

Донъя әҙәбиәтенә, милли телебеҙгә, ғөмүмән, һүҙ сәнғәтенә һөйөү мине 1982 йылда ҡасандыр Мостай Кәрим уҡыған Башҡорт дәүләт университетына алып килде. Тап шул йылда миңә шағирҙы менән тәү тапҡыр күреү бәхете тейҙе.

Ҙур залда - шығырым тулы халыҡ. Көҙгө шиғыр кисәһе. Мостай ағайҙың талғын, ышаныслы, фәһемле һүҙҙәре бөгөнгөләй хәтерҙә: “Был уҡыу йорто – минең дә белем усағым, ғилем бишегем. Донъя классиктарының аҫыл ижадтары менән танышырһығыҙ һеҙ бында. Тик китапты күңелегеҙгә һеңдереп уҡырға өйрәнегеҙ. Ғүмер буйына өс китап уҡып, унан әллә күпме һабаҡ алғандар, камиллыҡҡа ынтылғндар була, йәки өс йөҙ китап уҡып та, башында ел уйнағандар осрай. Һеҙ һуңғы төргә ҡарауҙан һаҡланығыҙ!. Эйе, тарих тирмәненә гәрәбәләй төшкән кеше яҙмыштары, әхлаки матурлыҡҡа һәм батырлаҡҡа һынау тотҡандар хаҡында тәрәндән уйланып ижад итте Мостай Кәрим. Донъяның алыҫ сиктәрен, заман һыҙаттарын асыҡ һәм үткер күрә белгән бай тәжрибәле һүҙ оҫтаһы ул. “Әҙәбиәт сығанағы – әлбиттә, тормош. Унда һәр әҙиптең үҙ утрауы бар,” - тиер ине Мостай ағай. Ә бит барса утрауҙар өҫтөндә бер үк ҡояш булһа ла, һәр ижадсы донъяны үҙенсә, үҙ утрауынан күрә, ысынбарлыҡҡа үҙ баһаһын бирә. Шул йәһәттән ҡарағанда ла Мостай Кәрим ижадта ғына түгел, йәшәйештә лә ҡиммәтле һүҙҙе үҙ мәлендә ҡыҫҡа һәм тос рәүештә халыҡҡа еткерер йәмәғәт эшмәкәре, ил уҙаманы булып танылды. Бер генә миҫалды телгә алыу ҙа етә. Мәҫәлән, 2003 йылдың 3 декабрендә республикабыҙҙа Президент һайлауҙары алдынан урында йәшәгән йөҙләп милләт вәкиленә Башҡортостан алған курстың һыналған булыуын, изге эштәр башында

ышанислы етәксе Мортаза Рахимов тороуы хаҡында үҙ ҡараштарын асыҡ һәм теүәл еткерҙе.

Халҡыбыҙҙың рухи остазы Мостай Кәримде тәү күргәндән һуң, тағы ла өс мәртәбә миңә хәтирәле осрашыуҙарҙың шаһиты булырға тура килде. Республика һынлы сәнғәт гимназияһында эшләп йөрөгәнемдә, рәссам буласаҡ уҡыусылар янына саҡырҙыҡ беҙ уны. "Бәхет төшөнсәһен нисек аңлайһығыҙ?" - тигән традицион һорау бирҙе балалар. "Бәхет – күп мәғәнәле төшөнсә. Ул күктән төшмәй. Бәхет өсөн көрәшәһең дә, уны көтәһең дә, сабыр ҙа итәһең. Бер мәл килеп моратыңа етәһең. Кемдер өсөн яҡтылыҡтан–сыраҡтан мәхрүм кешегә бер мәл килеп быяла киҫәгенә төшкән ҡояш нурын күреү - бәхет һ. б. Бәхет төшөнсәһе һәр кешенең күңел палитраһында мең-мең төҫтә балҡый ул", - тип яуапланы әҙип. Ә яуаптарында балаларҙың яҡты хыялдарына ҡанат ҡуйыуҙы ла, үҫмерҙәрҙе ололар донъяһына яҡынайтыуҙы ла тойорға мөмкин ине. Ғөмүмән, Мостай ағайҙың тормош гөлдәре булған балаларға иғтибары ҙур булды. Улар донъяһы ҡараштар иңләп етмәҫлек мөһабәт һәм, шул уҡ ваҡытта, һаҡһыҙ ҡағылыуҙан ыуалырға торған донъя булыуын да күрһәтте ул үҙенең әҫәрҙәрендә.

Мостай Кәримдең 80 йәшлек юбилейы айҡанлы осрашыу кисәһен Башҡорт дәүләт университетында миңә алып барыу бәхете яҙҙы. Ул ваҡыттағы ректорыбыҙ М.Х. Харрасов ил ағаһына университеттың почетлы профессоры тигән маҡтаулы исем бирҙе, "Шонҡар" әҙәби ижад берекмәһе ағзалары үҙ ҡулдары менән эшләгән "Әҙәбиәт батшаһы" тигән таш кейҙерҙе. Мостай Кәрим был символик бүләкте ихлас йылмайып ҡабул итте лә: "Ижадыма оло баһа биреүегеҙ өсөн рәхмәт. Әммә мин уның үҙемә тейерен генә ҡабул итәм. Бөйөк тигән һүҙ ҙә ысҡынды. Минең ҡарамаҡҡа, йөҙәр том яҙған Шекспир, Бальзак кеүектәр генә бөйөк," – тип яуапланы. Әйе, Мостай Кәримгә бөйөклөк сире ят булды. Уның "ҡояшҡа ла, үлемгә лә самалап ҡараш ташлау кәрәк" тигән һүҙҙәрендә оло мәғәнә ята.

Әҙипте 85 йәшлек юбилейы менән БДУ-ның Нефтекама филиалы исеменән ҡотлау бәхете лә тейҙе. Директорыбыҙ, философия фәндәре докторы О.К. Вәлитов әҙиптең донъяға киң ҡарашлы, заман аһәңен тойоп йәшәүсе шәхес, әүҙем позициялы ил граждань булыуына баҫым яһаны, студенттар музыкаль сәләм бүләк итте. Кисә аҙағында Мостай Кәрим ҙур юбилейында баҫып тороуына ҡыуанып, оҙаҡ йәшәү сере менән дә бүлеште. "Ҡасандыр был хаҡта инәйемдән һоранылар: Вазифа, йөҙгә етеү сере ниҙә, тигәс, ул, илгә килгән ҡайғыларҙы ил менән күтәрҙек, ә бына балаларым ҡайғыртыу түгел, ғәмләндермәне лә, шулдыр сәбәбе, тине. Бөгөн мин дә нәҡ инәйем кеүек уйлайым," - тигән яуап ишеттек беҙ. Быны яҙыусы аңлы рәүештә халыҡҡа еткергәндер, тип фекер йөрөтәм. Сөнки һәр әҙип, бигерәк тә, Мостай Кәрим кеүек тәбиғи талантҡа эйә шағир, прозаик, драматург, тамашасының да, уҡыусының да осрашыуҙарҙан, тәү сиратта, позитив уйҙар, ыңғай эмоциональ заряд менән таралыуын күҙ уңында тота. 85 йәшлек юбилей кисәһендә Мостай ағай, тәү сиратта, йәшенең дә, олоһоның да киләсәккә өмөт менән йәшәрҙәре тураһында уйлағандыр...

Хәтерҙән күп тәьҫораттар юйыла, әммә ил уҙаманы Мостай Кәрим менән осрашыу иҫтәлектәре ғүмерлеккә күңелгә уйылды, рухи тормошомдоң айырылғыһыҙ өлөшөнә әүерелде.

Бынан 14 йыл элек Мостай Кәримдең тәне генә беҙҙе ҡалдырып китте, ә әҫәрҙәренә күскән йәне, булмышындағы яҡтылығы ваҡыт уҙған һайын халҡыбыҙ рухиәте күгендә сағыуыраҡ балҡый.

© Муллағолова Ә.М., 2019

***Мусина А.Р.,***
*студент, БашГУ, г.Уфа*
***Мустафина Р.Д.,***
*к. филол. н., доцент, БашГУ, г.Уфа*

## ПАМЯТНИК МУСТАЮ КАРИМУ В РЕСПУБЛИКЕ БАШКОРТОСТАН

Имя Мустая Карима – поэта, мыслителя, философа с мировым именем тесно связана и с национальной журналистикой, публицистикой. Как и многие поэты начал свой творческий путь с работы в редакции. Будучи студентом Башкирского государственного педагогического института имени Тимирязева (ныне Башкирский государственный университет), работал корреспондентом газеты и журнала. Во время Великой Отечественной войны в бою получил тяжелое ранение, долго лечился по госпиталям. Выздоровев, возвращается на фронт и работает корреспондентом армейских газет.

На одной из главных уфимских улиц возле Дома профсоюзов 10 октября 2013 года был установлен памятник великому башкирскому поэту – Мустаю Кариму. Его открытие стало самым видным общественным событием в Республике Башкортостан.

Интересна история создания памятника: автором стал московский скульптор Андрей Ковальчук. Он был выбран среди множества конкурсантов, которые также хотели взяться за почётную работу. Из-под рук А.Ковальчука постепенно, день за днём, рождался и оживал монумент внушительных размеров.

В целом высота бронзового памятника составляет почти 6 метров, а длина 15 метров. На переднем плане композиции изображен Мустай Карим, который спокойно и уверенно смотрит вперед. Его фигура выражает непринужденность и живость, поэтическую возвышенность образа. Поэт смотрит вперед, а взор задумчив, словно погружен в свои мысли. В этой скульптуре автор изобразил весь внутренний мир писателя, его переживания, думы, чувства.

Памятник - можно сказать, целостное произведение, где в каждом образе и детале отражены и художественный мир, и биографические моменты народного поэта: за спиной рукописи произведений, на которой стоят символические образы Пупка и Старшей матери, раненный боец, чуть выше журавли и рьяно скачущие кони. Образ самого Мустая напоминает человека - путника, который всегда в дороге. На левой руке пиджак, правая чуть-чуть откинута назад, словно поэт хочет сделать следующий шаг. В образе самого поэта мне кажется, отражено идейно-эстетическое содержание всего его творчества, выраженное строками стихотворения “В дороге ноги, в песне думы”. В нем автор говорит:

*Я путь определяю не по звездам,*
*А - как по звездам - по глазам людей,*
*По радостным, печальным и серьезным...*
*Гляжу в глаза, чтобы с пути не сбиться,*
*Чтоб в песне не солгать, не ошибиться.*

Образу коня-скакуна автор частенько обращается. Он у поэта как и в фольклорных жанрах – верный спутник героя, защитника отечества (“Мой конь”). Также широко известен читателю стих “Нам еще жить, береги себя”, где говорится о лирическом герое, который подобно коню на скачках, полный энергии и сил, стремится сделать в этой бренной жизни больше хороших дел.

Скульптурная композиция необычно решена не только в плане образов. Все герои скульптуры находятся в бассейне, чьё течение связано с жизнью и её непрерывностью.

Таким образом, все вышесказанное приводит к одной только мысли. Каждый город имеет свою историю и ассоциируется с теми достопримечательностями, какими он обладает. Это может быть маленький памятник или возвышенная скульптура - все это является составляющей частичкой города. Я считаю, что памятники культуры и истории создают неповторимый облик нашей Республики, за что мы и ценим нашего любимого Народного поэта Мустая Карима.

У мусульман понятие ритуальной чистоты намного шире, нежели простая гигиена, поскольку предполагает не только формальное физическое очищение от экскрементов, но и подготовку верующего к совершению актов ритуального характера, связанных с отправлением культа и отражающих отношение верующего к высшему объекту поклонения. В исламе после посещения отхожего места мусульманину после обычного ритуала подмывания для совершения молитвы (намаз, салат) необходимо ввести себя в состояние ритуальной чистоты путём дополнительного омовения, а намаз, как известно, должен совершаться пять раз в день. То же самое относится и ко многим другим ритуальным актам. Так рекомендуют священная книга мусульман – Коран и пророческая традиция – сунна [22, 122-123, 125-130]. Поэтому неудивительно, что ибн Фадлан проявил интерес к подобным, казалось бы, мелочам. Религия ислама, внедряющая практику омовений и определенные принципы личной гигиены, сыграла важную роль в распространении объектов благоустройства в средневековом Булгаре, в частности, общественных бань [3, 347].

Не у всех современников булгар существовали такие правила приличия. Путешествовавший в 1253 году по причерноморским степям францисканский монах Гийом де Рубрук описывал половцев совсем по-другому: «Если у них появлялось желание опорожнить желудок, они не удалялись от нас и настолько, насколько можно бросить зерно боба; мало того, они производили свои нечистоты рядом с нами во взаимной беседе; делали они и много другого, что было тягостно выше меры» [6, 86]. Современные наблюдатели, кстати, приблизительно так же живописуют бытовые привычки телеутов и теленгитов – родни средневековых кипчаков.

Вместе с тем, описание ибн Фадлана, скорее, отвечает домусульманским религиозным нормам ираноязычных народов. Так, Аммиан Марцеллин (XXIII.6.79) пишет о нравах Персии: «Нелегко видеть, чтобы перс остановился для того, чтобы отлить воду или присаживался в стороне для естественной надобности, до того тщательно они скрывают эти и другие неприличные отправления» [2, 301]. Отправление малой нужды стоя у зороастрийцев считалось грехом, поскольку при этом происходило осквернение большего количества земли, чем при положении сидя. В «Книге о праведном Виразе» души таких грешников, которые «мочились стоя», претерпевают мучения наравне с другими лиходеями. Эти же прегрешения названы в тексте «Суждения Духа разума»: «Не мочись стоя, чтобы тебе не оказаться во власти демонов и чтобы из-за этого греха демоны не утащили тебя в ад». В пехлевийском комментарии к Видевдату приводится дискуссия относительно того, на какое расстояние от себя человек может осквернять землю во время мочеиспускания; желательно, чтобы это расстояние было как можно меньшим. Тем не менее, приводится мнение Вараз-Гошнаспа: «Дозволено мочиться вдаль, дабы не забрызгать себе одежду» [1, 246-247; 9, 111, 169; 5, 82, 123]. Для персов моча и всякое соприкосновение с ней были противны как нечто нечистое [4, 41]. Довольно очевидно, что и у волжских булгар моча однозначно считалась скверной. Особый интерес в связи с сообщением ибн Фадлана о недопустимости осквернения оружия представляют прямые потомки сарматов и алан – осетины на Северном Кавказе, многие черты быта которых впечатляюще близки к булгарским. Путешественники, в частности, Леонтий Штедер в 1781 году, отмечали, что осетины были более чистоплотными, чем кочевые народы, в особенности они следили за своим оружием. Осетины держали оружие очень чистым и всегда готовым к

употреблению, не занашивая его [8, 34]. Очевидно, подобные представления о необходимости ритуальной чистоты оружия были свойственны и булгарам, поэтому так наказывалось её нарушение.

Многочисленные параллели из иранского, в том числе сармато-аланского мира к быту и культуре волжских булгар и их соседей [21; 15; 19; 20; 12; 11; 17; 18; 10; 13; 14; 16] показывают, насколько сложным был путь формирования средневековых этносов Поволжья и Приуралья, сложившихся на основе иранского субстрата и впитавших в себя как тюркские и финно-угорские, так и иранские этнические элементы. Многие подмеченные ибн Фадланом и другими арабскими авторами черты их материальной и духовной культуры отражают эти этнокультурные связи. Субстратное влияние при этом проявлялось не только в архитектуре, мебели, одежде, традиционной кухне булгар и соседствующих с ними народов, но и в обрядах, верованиях и нормах поведения, которые перекликаются с таковыми у ираноязычных народов.

ЛИТЕРАТУРА:

1. Авеста. «Закон против дэвов» (Видевдат) / Адаптированный перевод, исследование и комментарии Э.В. Ртвеладзе, А.Х. Саидова, Е.В. Абдуллаева. – СПб.: издательство Политехнического университета, 2008. – 301 с.
2. Аммиан Марцеллин. Римская история. – СПб.: Алетейя, 1994. – 570 с.
3. Баранов В.С. Вопросы благоустройства города Болгара и их археологическое изучение // Город Болгар: Монументальное строительство, архитектура, благоустройство. – М.: Наука, 2001. – С. 319-364.
4. Зельцер Д.М. Медицина и магия древнего Востока. – СПб.: типография Н.В. Безрукова, 1910. – 45 с.
5. Зороастрийские тексты. Суждения Духа разума (Дадестан-и меног-и храд). Сотворение основы (Бундахишн) и другие тексты / Издание подготовлено О.М. Чунаковой. – М.: Восточная литература, 1997. – 352 с.
6. Карпини Иоанн Плано де, Рубрук Вильгельм. История Монгалов. Путешествие в восточные страны. – СПб.: издание А.С. Суворина, 1911. – XV, 232 с.
7. Ковалевский А.П. Книга Ахмеда Ибн Фадлана о его путешествии на Волгу в 921–922 гг. Статьи, перевод и комментарии. – Харьков: издательство Харьковского государственного университета им. А.М. Горького, 1956. – 345 с.
8. Осетины во II половине XVIII века по наблюдениям путешественника Штедера. Документ подготовил к изданию и снабдил введением проф. Г. Кокиев. – Орджоникидзе: Государственное издательство Северо-Осетинской АССР, 1940. – 62 с.
9. Пехлевийская Божественная комедия. Книга о праведном Виразе (Арда Вираз намаг) и другие тексты / Введение, транслитерация пехлевийских текстов, перевод и комментарии О.М. Чунаковой. – М.: Восточная литература, 2001. – 206 с.
10. Рахно Константин. Башкирский оберег жилища, его истоки и параллели // Национальные культуры Урала. Семантика пространства в традиционной культуре. Материалы Всероссийской научно-практической конференции. – Екатеринбург: Министерство культуры Свердловской области; Центр традиционной народной культуры Среднего Урала, 2018. – С. 74-79.
11. Рахно Константин. Казнь убийцы у средневековых булгар и её этнокультурные параллели // Преистория. Древность. Средневековье. Исследования по истории, археологии, культуре. Сборник научных статей. – Зимовники: Зимовниковский краеведческий музей, 2017. – Кн. I. – С. 84-95.

12. Рахно К.Ю. Великаны: страничка из эпоса волжских булгар // «Джангар» и эпические традиции тюрко-монгольских народов: проблемы сохранения и исследования. Материалы III Международной научной конференции (г. Элиста, 15-16 сентября 2016 г.). – Элиста: КИГИ РАН, 2016. – С. 213-216.
13. Рахно К.Ю. Зерновые ямы в культуре волжских булгар // Традиционная культура народов Поволжья: Материалы V Всероссийской научно-практической конференции с международным участием, посвященной 95-летию со дня рождения известного этнографа Р.Г. Мухамедовой (12–14 февраля 2019 г.). – Казань: Ихлас, 2019. – С. 304-310.
14. Рахно К.Ю. Иранские компоненты в языческих верованиях средневековых башкир // Актуальные проблемы гуманитарной науки: фольклористика, литературоведение, этнография, история, археография: Материалы Всероссийской (с международным участием) научно-практической конференции, посвященной 80-летию со дня рождения видного ученого-фольклориста, почетного академика АН РБ Сулейманова Ахмета Мухаметвалеевича. – Уфа: ИИЯЛ УФИЦ РАН, 2019. – С. 141-145.
15. Рахно К.Ю. Небесные битвы в булгарской мифологии // Традиционная культура народов Поволжья: материалы III Всероссийской научно-практической конференции с международным участием (9-11 февраля 2016 г.): в 2 ч. – Казань: Ихлас, 2016. – Часть вторая. – С. 99-108.
16. Рахно К.Ю. Охота за головами у населения Поволжья и Приуралья X-XIII веков // Урал–Алтай: через века в будущее: Материалы VIII Всероссийской тюркологической конференции (с международным участием) «Урал–Алтай: через века в будущее», посвященной 100-летию со дня рождения народного поэта Башкортостана, Героя Социалистического Труда Мустая Карима. – Уфа: ИИЯЛ УФИЦ РАН, 2019. – С. 220-223.
17. Рахно К.Ю. Сведения ибн Русте как источник по исторической этнографии Волжской Булгарии // Развитие гуманитарной науки в регионах России: Материалы Международной научной конференции, посвященной 85-летию Федерального государственного бюджетного учреждения науки Институт истории, языка и литературы Уфимского научного центра РАН. – Уфа: ИИЯЛ УНЦ РАН, 2017. – С. 162-164.
18. Рахно К.Ю. Стол в традиционной культуре питания волжских булгар и его параллели // Традиционная культура народов Поволжья: материалы IV Всероссийской научно-практической конференции с международным участием (13–15 февраля 2018 г.). – Казань: Ихлас, 2018. – С. 313-323.
19. Рахно К.Ю. Традиции воспитания ребёнка у средневековых волжских булгар и их этнокультурные параллели // Духовная культура и гуманитарные науки в Башкортостане и России: история и современность. Материалы Международной научно-практической конференции, посвященной 70-летию доктора филологических наук, профессора, члена-корреспондента Академии наук Республики Башкортостан, заслуженного работника образования Республики Башкортостан заслуженного деятеля науки Республики Башкортостан, Почетного работника Министерства образования и науки Российской Федерации, Почетного профессора БГУ Гиниятуллы Сафиулловича Кунафина и 25-летию Академии наук Республики Башкортостан (Уфа, 24 ноября 2016 г.). – Уфа: РИЦ БашГУ, 2016. – С. 92-93.
20. Рахно К.Ю. Фрагмент средневекового булгарского эпоса у Абу Хамида ал-Гарнати // Люди, культуры, пространство: социокультурная динамика мира Евразии: Материалы Всероссийской научно-практической конференции (с международным участием),

посвященной 75-летию профессора Р.З. Янгузина (Уфа, 15 - 16 ноября 2016 г.). – Уфа: РИЦ БашГУ, 2016. – С. 270-276.
21. Рахно К.Ю. Человеческое жертвоприношение у волжских булгар и его фольклорные параллели // Россия и Восток: взаимодействие стран и народов: Труды X Всероссийского съезда востоковедов, посвященного 125-летию со дня рождения выдающегося востоковеда Ахмет-Заки Валиди Тогана. – Уфа: ИИЯЛ УНЦ РАН, 2015. – Книга 1. – С. 257-260.
22. Хисматулин А. Туалеты и урны: ислам // Сосуды тайн: туалеты и урны в культурах народов мира. – СПб.: Азбука-классика, Петербургское Востоковедение, 2002. – С. 122-145.

© Рахно К.Ю., 2019

***Рәхмәтова Ғ.Х.,***
*магистрант, БДУ, Өфө к.*
***Мостафина Р.Д.,***
*филол. ф. к, доцент, БДУ, Өфө к.*

## БАШҠОРТ ТОРМОШ-КӨНКҮРЕШ ӘКИӘТТӘРЕНЕҢ ОБРАЗДАР СИСТЕМАҺЫ

Башҡорт халыҡ ижадының әкиәт өлгөләре ифрат бай һәм күп төрлө. Халыҡ әкиәттәрҙә төрлө образдарҙы кәүҙәләндерә. Әкиәттәрҙең бер төрө булған тормош-көнкүреш әкиәттәрендә бындай образ үҙенең ысынбарлыҡҡа яҡынлығы менән йәлеп итә. Тормош-көнкүреш әкиәттәренең төп геройҙары, ысынында, ябай кешеләр, уларҙың әхлаҡи сифаттарын әкиәт донъяһында тасуирлап, халыҡ беҙгә фәһем еткерә. Әммә тормош-көнкүреш әкиәттәренең образдар системаһын өйрәнеү буйынса ғилми тикшеренеүҙәр алып барыу һаман да көнүҙәк һәм актуаль һорау.

Әкиәттәрҙең бер төрө булған тормош-көнкүреш әкиәттәре һүрәтләнгән күренештәрҙең байлығы һәм идея-тематик яҡтан төрлөлөгө менән айырылып тора. Бындай әкиәттәрҙең берәүҙәрендә аҡыллылыҡ, әхлаҡи камиллыҡ, ғаилә татыулығы кеүек мөһим проблемалар күтәрелә һәм улар, ғәҙәттә, көтөлмәгәнсәрәк хәл ителә; икенсе бер төркөмөндә хәйләкәрлек, мутлыҡ, тапҡырлыҡ, етеҙлек йәки шуларҙың ки-реһе булған – иҫәрлек, бер ҡатлылыҡ, аңралыҡ һыҙаттарына эйә булыусы персонаж типтары үҙәккә күсә. Тыңлаусыларҙың зирәклеген, уяулығын һынау маҡсатында һөйләнелә торған әкиәттәр ҙә бар [2; 16].

Жанр билдәләре йәһәтенән тормош-көнкүреш әкиәттәрен төркөмләү мәсьәләһендә лә ғалимдар әлегәсә уртаҡ фекергә килгәндәре юҡ. Берәүҙәр уларҙы был яҡтан бөтәнсә бүленмәҫ художестволы берәмек кеүек күрә [1; 88]. Быға, ә.м. Сөләймәнов фекеренсә, үҙҙәре үҙ иткән «новеллистик» йәки «көнкүреш-новеллистик», «халыҡ новеллаһы», «сатирик» йәки «сатирик-көнкүреш әкиәттәре» терминдарына, хатта «тормош-көнкүреш әкиәттәре» тигәненә лә тарыраҡ мәғәнә һалыуҙары, аҙ һанлы сюжеттар менән эш итеүҙәре сәбәп булған [4; 156].

Тормош-көнкүреш әкиәттәре милләттең боронғо дәүерҙән алып формалашҡан әхлаҡи-этик ҡараштарын киң образдар системаһында сағылдыра. Бындай әкиәттәрҙе төркөмләү бик ауыр, сөнки, улар бихисап. Ғалим Ә.М. Сөләймәнов тормош-көнкүреш

әкиәттәрен новеллистик, сатирик, ғибрәтле һәм башҡа төрҙәргә бүлеп, уларҙың идея-эстетик йөкмәткеһенең бик киң булыуын, тормоштоң төрлө яҡтарын үҙ эсенә алып, реалистик ысынбарлыҡты тарихи көнкүрешкә яҡынайтып һүрәтләүен билдәләй [4; 40-159].

Әкиәттәрҙең бөтә типтарында ла төрлө характерҙағы образдар сағылыш таба. Был осраҡта беҙҙе кеше затына бәйле образдар ҡыҙыҡһындыра, шуның өсөн дә тормош-көнкүреш әкиәттәре махсус рәүештә ҡарала.

Тормош-көнкүреш әкиәттәрен өйрәнеп, беҙ уларҙағы образдарҙы түбәндәгесә бүлдек:

1. Тормош-көнкүреш әкиәттәре, тулайым алғанда, изгелек менән яуызлыҡ көрәшен күрһәтәләр. Мәҫәлән, әкиәттәрҙә төп герой булып, күбеһенсә, бер бабай менән бер әбейҙең йә яңғыҙ улы, ҡыҙы, йә өс улдың иң кесеһе кәүҙәләнә. Әкиәттәрҙең бер ҙур өлөшө – үгәй ҡыҙ йәки үгәй малай тураһында. Яңғыҙ әсәнең еткән ҡыҙы йәки убырлы ҡәйнәнең бахыр килене тураһындағы әкиәттәр ҙә байтаҡ. Был тип геройҙарҙың барыһы өсөн дә уртаҡ бер сифат бар: улар – кәмһетелгән, ҡыйырһытылған кешеләр; йәберләүселәр– өлкән туғандар, үгәй әсәләр, ҡәйнәләр.

2. Күп тормош-көнкүреш әкиәттәрендә яуызлыҡ батшлар, реаль кешеләр, образдарында кәүҙәләнә, ә ҡайһы бер сюжеттарҙа батша, хан образдарында бирелә. Бында шуныһын дөрөҫ аңлау мөһим: батша, хан образдарында, әлбиттә, конкрет тарихи шәхестәр түгел, ә уларҙың кире һыҙаттары киң дөйөмләштереп кәүҙәләндерелә. Әкиәттәрҙә яуыз хандар, батшалар, яуыз ҡатындар, уғрылар фантастик уйҙырма формаһында ҡабул ителәләр. Йыш ҡына бер үк сюжеттың бер вариантында яуыз көс дейеү йәки аждаһа итеп бирелһә, икенсеһендә ул батша йәки хан образында кәүҙәләнә. Ҡомһоҙлоҡ, ҡаты бәғерлелек кеүек сифаттар мифик көстәргә лә, батша һәм хандарға ла хас.

3. Тормош-көнкүреш әкиәттәренең эстәлегенең ижтимағи тормошҡа яҡыная барыуы һәм уның мифологиянан айырылыуы уның нигеҙендә ятҡан этик ҡиммәттәрҙең һәр конкрет ситуацияла яңыса ҡаралыуы һәм халыҡтың ҡараштарына ярашлы үҙгәрешен билдәләй [2; 72]. Мәҫәлән, аҙғын ҡатындар хаҡындағы тормош-көнкүреш әкиәттәренә мөрәжәғәт итәйек. «Ун ике биғлый», «Ышаныслы ҡатын», «Һалдат менән батша ҡатыны», «Үгәй әсә, ҡырҡ вәзир менән мулла», «Ҡатын хәйләһе» ише әкиәттәрҙә лә ир – мәшәү, ҡатын кеше бик әүҙем, бик инициативалы, тик кире яҡҡа, аҙғынлыҡ яғына. Әкиәт шуны фашлай ҙа инде. Яманлыҡ төшөнсәһе бындай әкиәттәрҙә аҙғын ҡатын образы аша бирелә, шул уҡ ваҡытта, күпселек текстарҙа уаль ҡаршылыҡ күҙәтелмәй. Аҙғын ҡатын образы фашлана, әммә уның ире образында ла яҡшылыҡ идеалы күренмәй. Дөрөҫ, ҡайһы бер әкиәттәрҙә ирҙең ҡатынын тәрбиәләргә тырышыуы әхлаҡи яҡтан ыңғай аҙым тип баһалана.

4. Тормош-көнкүреш әкиәттәрендә мәкерлек йыш ҡына зирәклеккә ҡаршы ҡуйыла. Был халыҡтың әхлаҡи ҡарашы тип ҡарарға кәрәк, шулай ҙа улар бер әкиәт тексында сағылмауын билдәләргә кәрәк. Мәкерҙәр тураһында һәм зирәктәр хаҡында айырым әкиәт төркөмдәре бар. Мәкерҙәр тураһындағы новеллистик әкиәттәр ҙә аҡыллы кәңәш биреүсе зирәктәр хаҡындағы новеллистик әкиәттәргә нигеҙләнә: берәү кәңәш бирә, башҡалар ул кәңәшкә эйәрә («Мәскәй», «Кеше һүҙе кеше үлтерә», «Кеше менән шайтан», «Ялғансы вәзир»). Әммә изге кәңәшсенең кәңәше – кәңәш алыусыны уңышҡа юлыҡтырыусы изге ниәтле кәңәш булһа, һуңғы төркөмсәләге кәңәш – мәкер кәңәше, уны тотоусыны уңайһыҙ хәлгә ҡуйыусы, хатта һәләкәткә юлыҡтырыусы кәңәш.

Мәҫәлән, “Ялғансы вәзир” ҙә баш вәзирҙе, йоғошло сир менән ауырый, тип, ханды ышандырыуға ирешкән икенсе вәзир, үтә сабырһыҙлығы арҡаһында, үҙ башына үҙе етә.

Беренсе вәзир аша хан ебәргән пакетты йәлләттәргә үҙе алып бара. Ә ундағы хатта пакетты килтереүсене язаларға ҡушылған була.

5. Тормош-көнкүреш әкиәттәрендә хәйләкәрҙәр йөҙөндә хеҙмәтсән халыҡтың аҡыл, зиһен камиллығы йәһәтенән уны иҙеүселәрҙән өҫтөн тороуы раҫлана. Ошо яҡтан әкиәттәрҙә Ерәнсә, Алдар образдары айырыуса әһәмиәтле. «Аллаҡай», «Аҡыллы егет менән ҡомһоҙ байҙар», «Етем Ҡалмаҡҡол» ише әкиәттәрҙең геройҙары иһә шул өҫтөнлөктө раҫлай.

6. Тормош-көнкүреш әкиәттәренең ғибрәтле әкиәттәр төрөндә геройҙы һәм уның эшмәкәрлеген, уның сығышы яғынан сығып ҡына, баһалау мәсьәләһе бер яҡлы түгел. Һәр хәлдә, «ярлы» тигән менән «һөнәрле», «эшһөйәр», «уңған» тигән төшөнсәләрҙе синоним итеп ҡарамай. «Ялҡау Аусаф», «Ялҡау малай» ише әкиәттәрҙә ялҡауҙар, һөнәрһеҙҙәр сифатында ябай халыҡ вәкилдәре кәүҙәләнә. Ярлылыҡ өҫтөнә ялҡаулыҡ һәм һөнәрһеҙлек арҡаһында, улар икеләтә ыҙа сигә. Был әкиәттәрҙә ялҡаулыҡ менән һөнәрһеҙлек, ярлылыҡ кеүек үк социаль фажиғә итеп баһалана [4; 24].

Характер булып өлгөрөү йәһәтенән ғибрәтле әкиәттәрҙең геройҙары төрлөсә бирелә. «Мәүлихафиз», «Эш кешеһе» кеүек әкиәттәрҙең геройҙары, традицион әкиәттәрҙәгесә, баштан уҡ әҙер характер, формалашҡан шәхес булып күҙ алдына баҫтырыла, уңғанлыҡ, һөнәрлелек, тырышлыҡ өлгөһө итеп күрһәтелә.

Шулай итеп, тормош-көнкүреш әкиәттәренең ғибрәтле, новеллистик һәм башҡа төркөмдәрен ҡарау уларҙағы образдар системаһының геройҙың ниндәй ҙә булһа һыҙатын үҙәккә ҡуйып төҙөлөүен күрһәтә. Уңғанлыҡ, тырышлыҡ, ялҡаулыҡ, мәкерлек, аҙғынлыҡ кеүек һыҙаттар йөрөтөүсе ҡатындар, ирҙәр, егеттәр, ҡәйнәләр, батшалар, вәзирҙәр һәм типик Таҙ, Ерәнсә, Алдар һәм башҡа геройҙар донъяһы тирәләй әкиәттең икенсе персонаждары ла әйләнә. Улар бөтәһе бергә тормош-көнкүреш әкиәттәренең бай образдар системаһын тыуҙыра.

ӘҘӘБИӘТ:


1. Галин С. Тел асҡысы халыҡта. Башҡорт фольклоры: аңлатмалы һүҙлек. Уҡыу ҡулланмаһы. – Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1993. – 224 б.
2. Нәҙершина Ф.А. Әкиәт хыял асҡысы, йомаҡ – зиһен асҡысы. – Өфө, 2007. – 128 б.
3. Сөләймәнов Ә.М. Башҡорт тормош-көнкүреш әкиәттәренең поэтикаһы. – Өфө, 1980. – 80 б.
4. Сөләймәнов Ә.М. Тормош-көнкүреш әкиәттәре. – Өфө, Башҡортостан китап нәшриәте, 1990. – 272 б.
5. Сөләймәнов Ә.М. Тормош-көнкүреш әкиәттәренең стиль үҙенсәлектәре. – Өфө, 1984. – 85 б.
6. Хусаинова Г.Р. Поэтика башкирских сказок/Г.Р. Хусаинова. – М.: Наука, 2000. – 246 с.


© Рәхмәтова Ғ.Х. Мостафина Р.Д., 2019

***Салауатова Ф.Р.,***
*филол. ф. н., доцент, БДУ, Өфө к.*

# МОСТАЙ КӘРИМДЕҢ “ЯНҒЫҘ ҠАЙЫН” ДРАМАҺЫНДА ОБРАЗДАР СИСТЕМАҺЫ

Мостай Кәрим (тулы исеме – Кәримов Мостафа Сафа улы) - тыуған башҡорт әҙәбиәтендә генә түгел, ә донъя кимәлендә танылыу алған шағир, яҙыусы, драматург һәм йәмәғәт эшмәкәре.

Мостай Кәрим драматургияһының юл башы 1940 йылда ҡурсаҡ театрҙары өсөн яҙылған “Әтәстең башынан үткәндәре” исемле пьеса-әкиәт булһа, башҡорт дәүләт театры сәхнәһенә ул “Туй дауам итә” әҫәре менән килеп инә. Әҙип артабан төрлө йылдарҙа “Яңғыҙ ҡайын”, “Ҡыҙ урлау”, “Йырланмаған йыр”, “Ай тотолған төндә”, “Айгөл иле”, “Диктаторға ат бирегеҙ!”, “Салауат”, “Ташлама утты, Прометей!” кеүек драма әҫәрҙәре ижад итә. Был әҫәрҙәр жанрҙың төрлө төрҙәренә ҡарай.

М. Кәрим драмалары ул йәшәгән һәм ижад иткән дәүер - 1950-60 йылдарҙың ижтимағи һәм көнкүреш проблемаларын сағылдырыуға арналған. Әҙип үҙ әҫәрҙәрендә колхоз, милли интеллигенция проблемаларын күтәреп сыға. Уларҙа автор ҡоро ялтырауыҡ фекерҙәрҙе яңғыратыу менән сикләнмәй, ә ысын мәғәнәһендә, үҙ заманының актуаль проблемаларын асып бирергә ынтыла.

1950 йылдарҙы М. Кәрим «Яңғыҙ ҡайын» пьесаһы менән ҡаршылай. Әҫәрҙә коллектив һәм етәксе мөнәсәбәте үҙәккә ҡуйыла. Был драманың конфликт төйөнө һуғыштан һуңғы колхоз тормошо, ауыл хужалығын күтәреү мәсьәләләре менән бәйле. Әҫәрҙең төп геройы — колхоз председателе Мырҙахан Шәүкәтов. Мырҙахан заманында колхоздар төҙөшкән, йәмәғәт эшендә яйлап баҫҡыстан-баҫҡысҡа күтәрелә барған крәҫтиән, хәҙер ун биш йыл колхоз менән етәкселек иткән уҙаман. Күп йылдар колхозы алдынғылар рәтендә килгән. Бөйөк Ватан һуғышы осоронда фронтты икмәк, ат менән тәьмин итеүҙә оло эштәр башҡарған. Бөгөн эштәре, көнкүрештәре һәйбәт. Халыҡтың тамағы туҡ, өҫтө бөтөн, күңеле көр. Екһә, бейеп торған аттары, ултырһа, келтерәп барған арбалары бар. Барына хуш итеп ҡәнәғәтләнеп йәшәргә лә мөмкин. Председатель уғата ҡәнәғәт: үҙе баш, үҙе түш, үҙ көндәре көн, үҙ йүндәре йүн. Тик шуныһы, һүҙ әйтә, өйрәтә башлаһалар, һеркәһе һыу күтәрмәй – мин-минлелек ҡылығы бәреп сыға. Ләкин һуңыраҡ Мырҙахан бер ни тиклем туғарыла төшкән, унда маһайыу, үҙһүҙлелек ҡылыҡтары көсәйгән. Хәҙер булғанына шөкөрана ҡылып, һәүетемсә генә йәшәгеһе килә. Ә тормош бер урында тормай, коллектив хәстәре лә бер «Яңғыҙ ҡайын» колхозы эсенә генә һыйып бөтмәй хәҙер. Етәксе кешегә халыҡтан алдараҡ атларға, заман талаптарына ҡолаҡ һалырға, тирә-йүнгә киңерәк ҡараш ташларға ине лә бит– “үҙем beләм” тигән позиция ебәрмәй. Ана, күрше «Түңәрәк» колхозы председателе Арыҫланов тынғыһыҙ әҙәм. Әле бер эште, әле икенсеһен килтереп сығарып тора. Үҙ колхозына һыймай, күршеләренә лә килеп керә, бүтәндәр эшенә тығыла. Шәүкәтовтың төрлөсә ҡылын тартып маташа. “Түңәрәк” менән «Яңғыҙ ҡайын» колхоздарын берләштереп көс-ҡеүәтте арттырырға тырыша, ләкин Мырҙахан ишетергә лә теләмәй. Ә колхозсылар эрерәк хужалыҡтарҙың мөмкинлектәрен яҡыныраҡ күрә. Нәҡ ошо ерлектә ике председатель һәм Шәүкәтов менән колхозсылар араһында конфликтлы ситуация хасил була. Пьесала ул киҫкен төҫ ала.” [3, 173-174].

Шәүкәтов былай кирегә бөткән әҙәм түгел. Унда үҙенең етешһеҙлектәрен аңларлыҡ, бөтәһенә объектив баһа бирерлек айыҡ аҡыл да, ихтыяр көсө лә бар. Имәндәй баҙыҡ һәм ҡаты булһа ла, ҡарыулашып шартлап һынырға ла тормаç. Кире ҡылыҡтарын еңгәнсе, тормош логикаһына төшөнгәнсе күпме кисерештәр, тартҡылаштар үтергә тура килә уға.

Председателлектән бушатылғас тапҡан хәкиҡәте лә еңел генә биреләме ни. «Бер минут эсендә председатель Шәүкәтовтан ҡоро Шәүҡәтовҡа тороп ҡалдым, - ти ул был хаҡта уйланып. – Үҙ еремдең, хосуси еремдең, ыҙанынан алыҫ киткәс, «Яңғыҙ ҡайын» ыҙанына килеп абындым. Ахмаҡ, ҡарт ахмаҡ. Кешеләр мине етәкләп бейеккәрәк алып менергә, «Яңғыҙ ҡайын» еренән арыны күрмәй торған күҙҙәремде асырға теләнеләр. Ә мин тартҡылаштым. “Мин, мин”, тинем. Нимә ул мин ошо кешеләр ҡаршыһында?..» Эйе, әҙәмдәрҙе ыҙандар ҙа абындыра. Мырҙахан әйткән ыҙандың үҙ тарихы һәм айышы бар. Ул ыҙандар менән бер генә осрашмай. Ул йәшлегендә үҙҙәренең хосуси милекселек ыҙанынан аша атлап сыға алмай ҡалған. “Үҙ биләне”, “үҙ хосуси ыҙаны” тип, Зөләйхаларға эйәреп оло юлға сыҡмай туҡтаған. Аҙаҡ ыҙаны “Яңғыҙ ҡайын” колхозы ҡырҙарынаса киңәйһә лә, шуныһы уға бер сиккә әйләнгән. Был ыҙанды ла аша атларға, киңерәк майҙандарға сығырға теләмәй. Бында ла Зөләйха менән уларҙың юлдары осраша һәм яңынан айырылыша. «Шулай, Зөләйха. Беҙ ғүмеребеҙҙә ике ҡат ыҙанда айырылыштыҡ. Һәр икеһендә лә һин артабан киттең, ә мин тороп ҡалдым. Һине ҡасан да булһа табырмын, тип өмөт иткәйнем, бара торғас, үҙемде лә юғалттым, ахыры», - ти Мырҙахан. Ләкин ул тормош арбаһынан еңел генә төшөп ҡала торғандарҙан түгел. Мырҙахан икенсе ыҙанды ла үтәсәк. Зөләйхалар менән бергә ҡулға-ҡул тотоношоп, бәлки, Зөләйха әйтмешләй, бик оҙон юл уҙыр. Аҙ ғына булһа ла, шулай һаман юғарыға бейеккә күтәрелер. Пьесаның ошо юлдар менән тамамланған юрау һүҙҙәре тормош һәм характер логикаһына тап килә. Ниндәйҙер өмөт ҡала. Мыҙахан Шәүкәтов тормоштан артта ҡалып барған кешенең йәки үҙ белдекле түрәнең схемаһы түгел, ул – тормошсан теремек характер. Уның тәжрибәлелеге, һыҡмыр крәҫтиән холҡо, үҙһүҙлелеге хатта һоҡланыу уята. Һөйкөмлө кеше ул. Хатта, автор уны ниндәйҙер рамкаларға һыйҙырырға, тиҫкәре әҙәм кеүегерәк күрһәтергә тырышҡан хәлдә лә, быға киреләнеп, үҙ характер логикаһына ҡайыра. «Яҙыусы үҙ геройын һүрәтләгәндә уның аҡылын, психологияһын, күңелен ныҡлап белә, - ти Мостай Кәрим. – Бына мин Мырҙаханды колхоздарҙы берләштереүгә ҡаршы консерватор әҙәм, прогресҡа ҡаршы сыға, тип ҡара бояуҙарҙа һүрәтләргә тырышып ҡарайым. Юҡ, ул быға ҡарыулаша. Минең бүтән персонаждарым араһында ул һөйкөмлөрәк килеп сыға: ул үҙ идеялары, үҙ фекере булырға хаҡлығын яҡлай, шуға һине ышандырырға тырыша. Мин ул геройымды ғәйепләргә, тәнҡитләргә ниәтләнәм, ә ул мине өйрәтә, үҙенең дөрөҫлөгөн раҫлай. Гәрсә уйым менән уның хаҡлы түгел яҡтарын тоям, ләкин уның әрнеүҙәрен уртаҡлашмай ҡала алмайым». Ә кем белә, Мырҙахан барыбер хаҡлыраҡ булғандыр. Мырҙахан яңғыҙлыҡтың, ыҙансылыҡтың бер һыны һымаҡ та. Ул үҙе лә күптән тол, буйҙаҡ, яңғыҙ кеше.

«Яңғыҙ ҡайын» атамаһы үҙе үк яңғыҙлыҡ исем һәм ул бер ваҡиға менән бәйле. Колхозға исем биргән яңғыҙ ҡайынды бер саҡ йәшен ата. Был хәл Мырҙахандың һуңғы яңғыҙаҡ терәгенең дә ауыуына бер ишара. Автор ремаркаһы ла шул фекерҙе ҡеүәтләй: «Көслө йәшен, дауыл. Яңғыҙ ҡайынды йәшен ата. Аҡрын ғына атлап Мырҙахан инә. Ул ялан баш, сәстәре туҙған. Килеп ҡайын төбөнә ултыра». Былар Мырҙахан күңелендә ҡупҡан күк-йәшендәй айҡалыуҙары, тәбиғәттең үҙендәге ғәрәсәт, күк-йәшен менән ҡушылып, психологизмды, характер драмаһын көсәйтешә. Тәкәбберлегенә барып, Мырҙахан колхозсылар менән дә, үҙ улы-килене менән дә конфликтҡа инә. Күңел драмаһы ҡуйыра. Ҡыҙып китеп улы менән киленен өйҙән ҡыуып сығарғас, ул тамам хәсрәткә бата: «Балалар!.. Киттеләр. Дүрт стена эсендә япа-яңғыҙ тороп ҡалдым. Минең кеүек яңғыҙ тағы нимә бар икән? Ҡыйҙаш буйында яңғыҙ ҡайын бар ине, уны ла хәҙер йәш урман солғап алған. Ә мин үҙ балаларымды үҙем ҡыуып ебәрҙем. Үҙеңдән үҙең ҡасып булһа ине...». Күрәһегеҙ, бында ла яңғыҙ ҡайын менән йәнәшәлек. Ләкин,

аҙаҡтан, йәшен атҡан яңғыҙ ҡайын тирәләй ҡулҡылар күтәрелә, хәҙер улар йәш урман булып үҫеп килә. Былар ҙа мәғәнәле һүҙҙәр.

“Мырҙахан Шәүкәтов. Төп геройҙың исем-фамилияһы уҡ аллегорик мәғәнәле. Был хаҡта шул заманда Баязит Бикбай былай тип яҙғайны: «Геройҙың исем һәм фамилияһына ғына иғтибар итегеҙ, ниндәй иҫкелек аңҡып тора. Был үҙе үк геройҙың кескәй хан булып, шәүкәт, йәки дан яратҡан кеше икәнлеген характерлай. Тимәк, автор геройҙың исем һәм фамилияһы менән үк образдың эске мәғәнәһен һыҙатлай». Ғөмүмән, “Яңғыҙ ҡайын” пьесаһының поэтикаһында аллегория, символ, метафора үҙе үк поэтик системаға әүерелә: Яңғыҙ ҡайын. Ыҙан. Ағым. Юнышҡы. Күпер. Каланча. Ағастан айырылған япраҡ һ.б. Яңғыҙ ҡайын һәм йәш урман. Тирә-яғында дәррәү күтәрелеп килгән сауҡалыҡ уртаһында ҙур яңғыҙ ҡайын – Мырҙахан Шәүкәтов бер үҙе һерәйеп торған һымаҡ. Әлбиттә, уның да күкрәп үҫкән, шаулап торған саҡтары булған. Инде ҡартая, муртая төшкән. Ләкин мәғрүр һыны тиҙ бирешмәле түгел әле.” [3, 175-176].

Мырҙахан – колоритлы образ. Төптән сыҡҡан крәҫтиән, тәүге колхоз етәксеһе. Йәшәү өсөн унан өлгө алыр яҡтар ҙа күп, алмаҫтайҙары ла бар.... Тимәк, Мырҙахан ҡаршылыҡлы характер драмаһын хасил итә. Ҡараштар, характерҙар бәрелеше тыуа. Пьесала яңғыҙ характерға коллектив характеры ҡаршы ҡуйылған кеүек килеп сыға. Хәйҙәр әйтмешләй, ҡырҡ кеше — бер яҡлы, ҡырын кеше — кире яҡлы. Коллектив гөрләп күтәрелеп килеүсе йәш урман һымаҡ. «Түңәрәк» колхозы председателе Тимербулат Арыҫланов, парторг Гәрәй Хаҡов, агроном Зөләйха Иштуғанова, бригадир Хәйҙәр, Гөлбәдуан әбей шул күмәк характерын һынландырған ыңғай персонаждар. Уларға, вазифаһына һәм үҙенә ҡарап, тормошҡа киңерәк ҡараш, инициативалыҡ, берҙәмлек, юғары аңлылыҡ кеүек ыңғай сифаттар һалынған, билдәле бер идеялар йөкмәтелгән.

Ана, Шәүкәтовтың шәүләһе кеүек, янында Шәүләүи йөрөп ята. Председатель йомошсоһо. Ул Шәүкәтовтың йомоштарын бер һүҙһеҙ үтәп йөрөүсе генә түгел, уның һәр бер әйткәнен йөпләүсе, түрәһенә оҡшарға һәм оҡшатырға трышыусы бер бәндә.

«Яңғыҙ ҡайын»да йәнә ҡотһоҙ һын Ҡотлыев образы ҡалҡып сыға. Шәүкәтов шикелле икеләнеп, юл сатында баҙап ҡалғандарҙы яман юлға бororға, һаҙлыҡҡа һөйрәргә әҙер торған һөмһөҙ әҙәмдәр улар юл бүлеге агенты Ҡотлыев ишеләр.

Шул яғы ла бар: Ҡотлыев ваҡытлыса вазифа башҡарыусы ваҡытлы бер тип. Уның тураһында Шәүкәтов үҙенә шулай ти: «Тағы ваҡытлы?.. Башта һин райматтың ваҡытлыса замы инең, шунан ваҡытлыса селпоға төштөң, унан һуң тағы ла унлап ергә, сират сире кеүек, инеп сыҡтың. Берәй ерҙә төпләнеп кенә эшләгәнең бармы һинең? Йә ваҡытлы, йә вазифа үтәүсе... Бәлки, һин ғөмүмән, тормошта кеше вазифаһын үтәп йөрөүсе бер мәхлүк, ә?»

Пьесала бер киҫкен эпизодта ғына сағылһа ла, Ҡотлыев киң дөйөмләштереүгә эйә тиҫкәре образ. Бер тип. Мостай Кәрим драматургияһындағы ят бәндәләр галереяһының башы. Пьесала йәнә Шәһи менән Фәйрүзә образдары бар. Ҡарамаҡҡа эпизодик персонаждар һымағыраҡ. Иллә мәгәр күгәрсендәр кеүек гөрләшеп йөрөгән ошо пар драмаға үҙенә бер төрлө йәм өҫтәп ебәрә. Драманың көсөргәнешле киҫкен ситуацияларына автор тағы бер эпизод, комик элемент йә лирик тамаша индереп, тамашасыға, гүйә, бер аҙ тын алырға, драматизмды тибрәндереп үтергә форсат бирә. Шартларға торған шарттар йор һүҙ, хатта йыр-моң менән бүленеп, киҫкенлек күпмелер һүрелдерелә, лирик, комик пауза яһала. Шулай итеп, ҡабатлап әйкәндә, үткер драматизм, лиризм һәм комик саралар менән аралашып килә. Был алым артабан Мостай Кәримдең пьесаларының бик килешле жанр-стиль һыҙатына әйләнәсәк. Бында шуны иҫкә төшөрөп китергә кәрәк: башҡорт драматургияһына һәм сәхнә сәнғәтенә элек-

электән лиризм, музыкаль бер стиль ағымы хас. Шуға башҡорт театрын ҡай саҡ музыкаль театр тип тә ataштырғылайҙар. Милли репертуарҙа фольклор-этнографик, музыкаль әҫәрҙәр ҙур ғына урын биләүсән. М. Кәримдең «Туй дауам итә» пьесаһында башлап, «Яңғыҙ ҡайын»да ныҡлап ошо ағымдан психологик драма ағымына лиризм, музыкаллек, комизм компонеттарын өлөш-элемент рәүешендә тығыҙ үреп ебәреү, синтезлау тенденцияһы көсәйә. Ижади үҙләштереү ысын новаторлыҡҡа юл аса. Шофер егет Шаһи «ҡуян ҡыуыу минең ҡайнап торған тормошомда бер эпизод ҡына ул», - тиһә лә, Шаһи менән Фәйрүзә йөҙөндәге пьесаға килеп ингән ҡайнар мөхәббәт, матурлыҡ, шуға тоғролоҡ, йәштәрсә шаянлыҡ, ирмәклек, йыр-моң мотивтары эпизод ҡына булмайынса, артабан М. Кәрим драматургияһының шулай уҡ күркәм сифатына, бер леймотивына әүереләсәк. Шаһи менән Фәйрүзә, йәштәр тарафынан йырланған йырҙар сәхнә түренән тормоштоң үҙенә, халыҡ күңеленә күсәсәк.

Тимербулат Арыҫланов, Гәрәй Хаков исем-фамилиялары йәнә аллегория уятыуға ҡарамаҫтан, Мырҙахан Шәүкәтов ҡаршыһында характер булараҡ йомшаҡтар, әлбиттә. Гөлбәдуан әбей менән Зөләйха Иштуғанова обаздары уңышлыраҡ. Күрше колхоз председателе менән партог күберәк хаҡ һүҙ һөйләп, дөрөҫ өгөт-кәңәш биреп йөрөүселәр һымағыраҡ. Шулай ҙа, был образдарҙың барыһы ла, эҙмә-эҙлекле драматик үҫеш алмаһалар ҙа, бер-береһен туландырып, берҙәм ансамбль тыуҙыралар. Мыҡты Мырҙаханды ҡаҡшатыр өсөн ҡырҡ кеше ҡырҡ төрлө, береһе өгөт, икенесеһе ҡыҫымлап, өсөнсөһө мыҫҡыллап, бәғзеһе хатта ҡурҡытып, аҡыл өйрәтеп ҡарай. Гөлбадуан ҡарсыҡ кәмһетеп, туранан-тура һуҡтыра: “Үҙебеҙ яһап ҡуйған көршәк һин. Үҙебеҙ элеп ҡуйған анау эшләпә һин. Арыу сағы ла бар ине ул эшләпәнең. Туҙанын гөпөлдәтеп ҡаҡмағас ни, үҙебеҙ ғәйепле”.

Әммә пьесала характерҙар драмаһына ҡарағанда үҙәк геройҙың характер драмаһы ғына алғы планға – мезансценаға сыға. Шәүкәтовтың тәрән кисерештәре, уй-тойғолар драмаһы килтереп тыуҙыра уны. Ошо яғы менән «Яңғыҙ ҡайын» психологик драма сифаттарына эйә. Бында автор нескәрәк драматургик алымдар һәм тасуири саралар менән эш итә. Ул айырыуса ситуацияларҙа диалогтарҙың үткерлеген тәьмин итеүгә иғтибарын көсәйтә. Шул йәһәттән, дүртенсе картинала, мәҫәлән, Мырҙахандың Ҡотлоев, улы Хәйҙәр менән диалогтары психологик яҡтан тетрәткес. Мырҙахандың Зөләйха менән һөйләшкәндәре эске моң, үкенес тойғолары менән тулы.”

Йомғаҡлап әйткәндә «Яңғыҙ ҡайын» пьесаһы М. Кәрим-драматургияһы өсөн үткер драматик конфликтҡа ҡоролошо, характер тыуҙырылышы, характерҙар драмаһының үҫеше, драматургик алымдарҙың һәм тасуири сараларҙың төрләләнә һәм нескәрә барыуы, художестволы оҫталығының күтәрелеүе менән уңышлы әҫәр булды.

ӘҘӘБИӘТ:

1. Килмөхәмәтов Т. Драматургия һәм драматургтар. Ғилми тикшеренеүҙәр. Ижади портреттар. – Өфө:Башҡортостан китап нәшриәте, 1986. – 296 б.

2. Кәрим Мостай. Әҫәрҙәр биш томда, 2-се том: пьесалар. - Өфө:Башҡортостан “Китап” нәшриәте, 1996. – 536 б.

3. Хөсәйенов Ғ. Мостай кәрим: - Шәхес. Драматург. Прозаик. - Өфө:Башҡортостан “Китап” нәшриәте, 1994. – 416 б.

© Салауатова Ф.Р.,

***Саникина С.Р.,***
*студент, БДУ, Өфө ҡ.*
***Гәрәева Г.Н.,***
*филол. ф. д.; проф., БДУ, Өфө ҡ.*

# М. КӘРИМДЕҢ “ОҘОН -ОҘАҠ БАЛА САҠ” ПОВЕСЫНЫҢ ПОЭТИКАҺЫ

М.Кәримдең “Оҙон -оҙаҡ бала саҡ” повесында символика, подтекст, деталь, йәнәшәлек, йәнләндереү, антитеза һ.б. поэтик троптарҙан туҡылған ассоциатив сараларҙың тотош сылбырҙарын табырға була. Улар геройҙар күңелендәге иң йәшерен уй-тойғоларҙы ла сағыу тасуирлауға хеҙмәт иттерәләр. Повесть күңел диалектикаһын биреүгә ниндәй юлдар, алымдар аша ирешеү мөмкинлектәрен күрһәтеүҙә сағыу бер миҫал булып ҡарала ала. Әҫәрҙә оло быуын замандаштарыбыҙҙың бер вәкиле булған геройҙың рухи үҫеше, шәхес булараҡ формалашыу этаптары күҙаллана. Яҙыусының төп идея-эстетик принцибы кеше йәшәйәшенең үҙенең үткәне, бала сағы - ваҡыт үҙенсәлектәрен үҙ эсенә алған, характер формалашыуҙа, поэтик күңел донъяһының башланғысына оло бер этәргес булған мәл менән тығыҙ бәйлелектә тороуын иҫбатлауға ҡайтып ҡала.

Әҫәрҙә хикәйәләү беренсе заттан алып барыла. Был алым психологизмдың билдәле кимәлдә тәрәнәйеүенә килтерә, шәхес яҙмышын, уның психикаһындағы үҙгәрештәрҙе һәр яҡлап тулыраҡ яҡтыртырға булышлыҡ итә. Повеста геройҙың эске йәшәйешенең йөкмәткеһен тышҡы донъя, ” мөғжизәләргә ышаныусан сәйерерәк, бер ҡатлыраҡ, шауҡымлыраҡ, саяраҡ” кешеләр йәшәгән ауыл тормошо тәшкил итә. Объектив ысынбарлыҡ сабый күреүе, күңеленән үткәреүендә бирелә. Кешеләр һәм ваҡиғалар тураһында хикәйәләү, сабыйҙың поэтиклаштырып ҡабул итеүе аша, эске бер йылылыҡ менән, хис-тойғоларға мансылып, эмоциональ буяу-төҫмөрҙәрҙә тасуирлана. Кешеләр тормошон, уларҙың ҡылған эш-ҡылыҡтарын күҙәтеү, йәшәйешен аңлау барышында, герой уларҙағы гүзәл сифаттарҙы аса, рухи яҡтан байыға. Билдәле бер эмоциональ торошҡа бәйле тыуған хәтерләүҙәр ваҡиғаларҙы бер епкә теҙеүсе сылбырҙар булып торалар, төрлө ваҡыт ҡатламдарын сағылдырыусы айырым картиналар бер үҙәк геройҙың хикәйәләүендә художестволы бөтөнлөктә бирелә.

Әҫәрҙә психологик анализ геройҙың күңел донъяһын асыуға, уның аңының яңы төшөнсәләр менән байыға барыуын күрһәтеүгә йүнәлтелгән. Геройҙың шәхес булып формалашыуында ыңғай геройҙарҙың да, кире персонаждарҙың да роле ҙур. Әгәр ҙә беренселәр уны ғәҙеллеккә, эскерһеҙлеккә өйрәтһәләр, икенселәре иһә үҙҙәренең ҡылған гонаһтары менән рухи түбәнлек-меҫкенлек тураһында иҫкәртәләр һымаҡ. Беренсе заттан хикәйәләүсе бөтә әҫәрҙәрҙәге һымаҡ уҡ, был повеста ла үҙәк геройҙан ҡала барлыҡ персонаждарҙың да рухи донъяһы, күңел хәрәкәте тышҡы сағылышында күрһәтелә. Уларҙың тойғо-кисерештәр донъяһын асыу үҙәк геройҙың нескә һиҙгерләү-тойомлауына ла бәйләнгән. Геройҙың шиғри күңеле уны уратып алған кешеләр күңелендә барған тойғоларҙың беленер-беленмәҫ нюанс-төҫмөрләнештәрен дә һиҙгер тойоп-аңлап ала. Кешеләрҙең йөҙөндәге, күҙ ҡарашындағы, хәрәкәт-ҡыланыштарындағы һәр үҙгәреш уның күҙ уңынан ситтә ҡалмай. Халыҡтың рухи хазинаһын һынландырыусы эстетик образ - Оло инәй, уның шәфҡәтле күркәм күңеле, Әсғәттең сихри рухи донъяһы, Мәрәһим менән Аҡйондоҙҙоң оло мөхәббәт тойғоһо менән яҡтыртылған саф күңелдәре тап герой күреүе, күңеле аша уҙғарыуында һүрәтләнә.

Беренсе заттан хикәйәләү алымы геройҙың үҙенең рухи донъяһын тулыраҡ асырға, тойғо-кисерештәр менән тулы эске күңел торошо һәр яҡлап, тәрәнерәк яҡтыртырға мөмкинлек бирһә лә, башҡа персонаждар күңелендә барған психологик процестар

үҙҙәренең тик тышҡы сағылыштарында, герой күрә-тоя алған дәрәжәлә генә асыла, шуға психоанализдың мөмкинлектәре бындай осраҡта шаҡтай сикләнә.Яҙыусы ошо сикләнгәнлектән ҡотолоу өсөн башҡа төрлө художество сараларын ҡуллана. Мәҫәлән, Мәрәһим күңелендә барған ҡатмарлы психологик процесты объектив автор хикәйәләүендә тулыһынса биреп булһа ла, беренсе заттан хикәйәләүҙә был мөмкин түгел. Яҙыусы ҡатмарлы күңел хәрәкәтен, хатта персонаждың иң нескә кисереш-тойғоларын да ситләтелгән ( метофорик ) юл аша - конкрет предмет - гармун аша бирә алған: “Нәк ошо мәл Түбән остан тулҡын-тулҡын булып гармун ағылып килде. Башта ул кемгәлер йомшаҡ ҡына, яғымлы ғына һуҙып өндәшкәндәй булды, унан һуң ярһып-ярһып эс серҙәрен һөйләргә кереште, бара торғас ниңәлер инәлергә, ялбарырға тотондо, аҙаҡ килеп үкһеп илап ебәрҙе”

Тормош герой алдында тик яҡты буяуҙарҙа ғына асылмай. Ҡырыҫ ысынбарлыҡ ҡот осҡос ваҡиғалары менән дә алға баҫа, шуның менән геройҙың әхлаҡи өлгөрөүенә лә йоғонто яһай. “Ысынбарлыҡтың балын да, ағыуын да татып ҡарау шәхестең үҫеше, уның рухи байығыуы өсөн бер тигеҙ мәжбүри”, - тип раҫлай күренекле әҙәбиәт белгесе С.Бочаров . Нахаҡҡа бурлыҡта ғәйепләнгән Сәмиғулланы үлтереү эпизоды тап ана шундайҙарҙан.

Персонаждың эске тормошоноң тышҡы сағылышын күрһәтеүсе деталдәр сылбыры Сәмиғулла күңелендә барған тотош психологик процесты күҙ алдына баҫтыра. Был процесс геройҙың күреү, ҡабул итеүендә бирелә һәм уның да эмоциональ торошон сағылдыра. Хикәйәләү туҡымаһының буйынан-буйына һибелгән йөҙ-ҡиәфәтен, хәл-хәрәкәтте, интонация үҙенсәлектәрен күрһәтеүсе деталдәр - “йөҙө көл кеүек”, “аҡрын ғына башын күтәрҙе”, “Сәмиғулла, башын юғары сөйөп, ике тапҡыр йүткереп алды”, “ҡалтыранған тоноҡ тауыш” - хөкөм ителеүсенең рухи хәләтен сағылдыра. Ҡоторонған, аҡты-ҡаранан айырмаҫ хәлгә еткән халыҡ төркөмөнөң ярһыуы көсәйгән һайын Сәмиғулланың да күңел торошо үҙгәрә бара. Ул инде ярлыҡауға өмөтөн өҙгән: “Сәмиғулла бөтөнләй битараф ҡиәфәттә баҫҡан да ҡатҡан. Уның башын ап-аҡ сал ҡаплаған: берәм-берәм генә төшкән ҡар бөртөктәре ни арала уның ҡара бөҙрәһен шулай һырып өлгөрҙө икән?” Был тәрән йөкмәткегә эйә сағыу деталь аша Сәмиғулла күңелендә барған кисерештәрҙең тотош бер ағымы бирелә. Төрлө художество саралары трагик сиселеш буласағы хаҡында һөйләй. Уратып алған фон: “Икеһенең дә артында күгелйем күк сите” ҡот осҡос булып тамамланасаҡ ваҡиғаға ишара яһай. Психологик подтекст: “Һауала һирәк кенә елберҙәк ҡар бөртөктәре тирбәлә (иғтибар итегеҙ:шундай тын, матур картина. Г.Г.) Улар бүтән ергә төшмәй ҙә кеүек, бары тотҡондоң ҡара сәсенә генә ҡуна. Әгәр оҙаҡ ҡына шулай торһа , уның эйелгән башы салға әйләнәсәк” – шулай уҡ Сәмиғуллаға янаған ҡурҡыныс хаҡында иҫкәртә һымаҡ. Был деталдәр, штрихтар традицион тәртиптә үҫешеп, психологик көсөргәнешлек тыуҙыралар, уҡыусыны кисеректергеһеҙ хәлде тулҡынланып, эске борсолоу менән ҡабул итеүгә әҙерләйҙәр.

Традицион рәүештә аҡ төҫтәрҙе, бәхетте символлаштырыусы аҡ ҡар әҫәрҙә төрлө функция башҡара. Аҡ ҡар һәм Сәмиғулланың ап-аҡ, дөрөҫөрәге сал башы. Бындай йәнәшәлек хөкөм ителеүсенең күңел торошон нығыраҡ төҫмөрләтә. Ергә паклыҡ, сафлыҡ алып килеүсе аҡ ҡар һәм ошо фонда барған трагедия. Ап-аҡ ҡар өҫтөнә тамған Сәмиғулланың ҡып-ҡыҙыл ҡаны. Аҡ ҡар һәм үҙҙәренең ҡара эшен башҡарған яуыздар. Был деталь тәрән психологик мәғәнәгә эйә, уға эмоциональ, эстетик нагрузка һалынған. Контраст контекста төрлө эпитеттар менән бәйле ҡулланылған деталь Сәмиғулла өҫтөнән яһалған хөкөмдөң фәжиғәһен тағы ла нығыраҡ тойомлата, трагик ваҡиғаны ҡабул итеүҙе киҫкенләштерә төшә, эмоционаллекте көсәйтә Был эпизодта тағы ла бер характерлы деталь бар: “ Сәмиғулланың һул яғында, алыҫта, сельсовет ҡыйығында

елберҙәгән ҡыҙыл флаг күренә. Бер ҡарағанда, улар икәүһе лә йәнәш тора һымаҡ. Кеше ҡымшанмай, флаг талпына, ҡайҙалыр ашҡына". Ҡыҙыл флаг һәм революцияға йәне-тәне менән бирелгән большевик – яҙыусы махсус рәүештә ошондай йәнәшәлек һайлай, уға идея йөкмәткеһе һала. Сәмиғулла – Ташбулат тарафынан ҡотортолған, аҡылдарын юйған кешеләр төркөмө алдында. Ҡыҙыл флаг коммунист эргәһендә, уның яҙмышы өсөн өҙгөләнә, ҡотҡарып ҡалырға ашҡына. Ситуацияны психологик яҡтан үтемлерәк биреү маҡсатында конкрет йәнһеҙ әйбергә йәнле предмет сифаттары бирелә ( йәғни йәнләндерелә ).

Икенсе бер новеллала, инде күп ваҡиғалар үткәс, ауылда барған үҙгәрештәр, колхозлашыу тураһында хикәйәләү башында, яҙыусы һүҙ ыңғайында Сәмиғуллаға самосуд ойошторған, уның үлеменә сәбәпсе булған Ташбулаттың ғәриплəнеүен телгә алып үтә: " Шулай ҙа яҙға табан Сәмиғулланың ҡәберенә үҙе яһап, бик матур рәшәткә ҡуйҙы. Ҡулы һөнәр белә икән," – тип үҙенә бер мәғәнә һалып ҡуйыла. Бына шул тәү ҡарашҡа ҡәҙимге тормош ағышын һүрәтләүсе бер-ике ауыҙ һүҙ эсенән дә Ташбулат күңелендә барған психологик һынылышты, уның выждан ғазапланыуҙарынан интегеүен һиҙергә-тойомларға була.

Артабан да геройға тормоштоң күп фажиғәләрен күрергә, әсе һабаҡтар алырға тура килә. Ул ауыр һуғыш һынауҙары аша үтә, дошман менән аяуһыҙ алышта тормош позицияһы сыныға. Тормошто аңлау, йәшәйеш закондарын эстетик үҙләштереү, фекерләү инде тәрән философик уйланыуҙар менән тығыҙ үрелә.

Һуғышта алған ауыр йәрәхәттәрен дауалап больницала ятҡан герой эргәһенә ҡасандыр ҡанға туҙышып һуғышҡан балалыҡ дуҫы Хәмитйән килә һәм герой күңелендә тағы ла үткән бала саҡ хәтирәләрен уятып ебәрә. Повеста Хәмитйән тураһында һүҙ барғанда бер үк деталь йыш ҡына ҡабатлана - был Хәмитйәндең Кендек менән һуғышҡандан һуң күҙҙәрендә ҡатып ҡалған хәсрәт шәүләһе. Түшәктә ятҡанда уны һаҡлап нигеҙ ташында ултырған Хәмитйәндең герой тәүҙә бойоҡ ҡара күҙҙәрендәге ҡайғыны күреп, сыҙай алмай, башын бора. Күп йылдар үткәс, герой үҙен больницала килеп тапҡан Хәмитйәндең шул уҡ күҙҙәрен шәйләй: "миңә үтә таныш моңһоу күҙҙәр ҡарай, тилмереп, ялбарып ҡарай", "баяғыса уҡ хәсрәт һәм хәүеф тулы күҙҙәрен миңә төбәне". Был психологик деталь, яңынан-яңы үткерерәк буяу-төҫмөрҙәрҙә ҡулланылып - Хәмитйәндең йөрәк өҙгөс әсенеүле, әрнеүле тауышы, үкенесле бала саҡ иҫәрлеге хаҡында һөйләгәндеге өҙөк-өҙөк, өндәүҙәргә тулы телмәре – тулылана барып, шул уҡ художество мәсьәләһенә хеҙмәт итә. Градация тәртибендә урынлаштырылған психологик деталдәр: "бәһлеүән кинәт кенә бөршәйеп, бәп-бәләкәс булып ҡалды ла минең түшәгем янына килеп тубыҡланды", "быуылып иларға kереште", "йөрәк өҙгөс әрнеүле тауыш менән әйтте" - уның психологик торошон тулыландыра, сағыуыраҡ һыҙатландыра төшәләр. Был эпизод дуҫлыҡ, тоғролоҡ тойғоларының бөйөклөгөн , гүзәллеген раҫлауы менән әһәмиәтле лә.

Хәмитйәндең үлем хәбәре геройҙа ике төрлө хәсрәт уята. Беренсеһе -балалыҡ дуҫын, ғәжәйеп ҡорҙашын юғалтыуҙан тыуған әрнеү хисе булһа, икенсеһе иһә, Хәмитйәндең дуҫында йәшәүгә өмөт ҡабыҙыу ниәте менән һөйләп ҡалдырған йыназа тарихын (геройҙың үҙенең үлем тарихын ) ишетеүҙән тыуған выждан ғазабы.

Был тарихты яҙыусы герой тарафынан һөйләтмәй, ә Хәмитйән күреүе, күңеленән үткәреүендә бирә. Быңдай алым - герой исеменән хикәйәләүҙән баш тартып, ваҡиғаларҙың тере шаһиты Хәмитйән тарафынан хикәйәләтеү күпкә отошлораҡ, ишеткәндәрҙе ҡоро һөйләп сығыуға ҡарағанда, эмоциональ-экспрессив һүрәтләүгә, драматик ситуацияны үтемле, юғары художестволы кимәлдә тасуирлауға мөмкинлек асҡан. Хәмитйән, яраланғандан һуң, ауылға ялға ҡайтыуын, ҡайтҡан көндө клубта

концерт ҡарауын һөйләй. Сәхнәгә геройҙың ҡатыны “аҡ күбәләк кеүек, саф, сибәр” Рауза сыға. Уның “Шәшкеләргә китеп вафат булды,ҡалды ғәзиз башым йәш көйгә” тип “Ашҡаҙар”ҙы йырлаған сағында халыҡ башы өҫтөндә ҡурҡыныс тынлыҡ аҫылынып тора, бына-бына ул ҡолап төшөр ҙә әҙәмдәрҙе баҫып, үлтерер һымаҡ тойола. Дуҫының һәләк булыуын ишеткән Хәмитйән аҡрын ғына ер аҫтына батып, кире ҡалҡа. Рухи хәләтте сағылдырыусы метафоралар, сағыштырыуҙар, йәнәшәлектәр, йәнләндереүҙәр , төрлө поэтик троптар, тетрәндергес йыр юлдары - бөтә был художество алымдары, проза теленә хас булмаған юғары, ҡалҡыу, шиғри һүрәтләү саралары әжәл ҡайғыһы өҫтөнә ишелергә торған, “илаһи, сихри затҡа тиңдәш” Раузаның да, шул әжәл ауырлығын аҙна буйы күңелендә бикләп тотҡан мәрхәмәтле ауылдаштарҙың да, ҡапыл да үлем хәбәре ишетеп тетрәнгән Хәмитйәндең дә психологик торошон сағыу һыҙатландыралар. Улай ғына түгел, был эпизод үҙендә оло идея-эстетик нагрузка йөкмәгән. Ул һуғыштың бөтә трагиҡлығын, совет кешеләре иңенә төшкән фажиғәләрҙе ҡалҡыу күрһәтә.

Геройҙың рухи үҫешендә, шәхес булып формалашыуында, күңел донъяһының байыға барыуында, йәшәүҙең мәғәнәһен аңлауында, тормош һабаҡтарын үҙләштереүендә халыҡтың зирәклеген, этик-эстетик байлығын үҙендә туплаған Оло инәйҙең роле ҙур. Үҙенең яҙмышы хаҡында хикәйәләүе аша уның эске донъяһы әле сабыйлыҡтан сығып та бөтмәгән герой алдында асылып китә, тәрән күрһөнөүҙәре, ҡараштары , сәйерерәк тойолған серле һүҙҙәре аңлашылғандай була.

“ Ә ҡар һаман да яуа ла яуа.Ҡара тупраҡ өйөмө инде аҡ донъяның эсенә инеп батты. Кинәт бөтәһе лә алмашынды. Әйләнеп-әйләнеп ҡап-ҡара ҡар яуырға тотондо. Ҡара мамыҡ бөртөктәре берсә ергә тартыла, берсә һауаға ынтыла... Тик Оло инәйемдең ҡәбере генә, ап-аҡ тау булып, ҡара ер өҫтөндә ҡалҡып тора. Ҡара ҡар бөртөктәре аҡ тау башына ҡунмаҡсы булып киләләр ҙә, кире осоп китәләр...” - был өҙөк Оло инәйҙе ер ҡуйынына тапшырған мәлдән килтерелгән. Антонимик мәғәнәгә эйә композицион йәнәшәлектәр, сағыу эпитеттар, ҡайта-ҡайта ҡабатлана килеп,үлем фажиғәһен, геройҙың хәсрәтле психологик хәлен сағылдыра.

Ғөмүмән, дөйөм бер эмоциональ фон тыуҙырыусы, билдәле идея-художество функцияларын үтәүсе психоанализдың төрлө саралары: ассоциативлыҡ, образлы символика, метафоризм, психологик подтекст, деталдәр повеста геройҙың рухи донъяһын асыуҙа уңышлы ҡулланыла.

ӘҘӘБИӘТ:

1. Кәрим М. Оҙон-оҙаҡ бала саҡ. - Өфө, 1976. – 285 бит
2. Кәрим М. Әҫәрҙәр.II том. - Өфө, 1996. – 541 бит.
3. Карим М. Долгое-долгое детство. – М.: Просвещение, 1985. – 274 с.
4. Хөсәйенов Ғ.Б. Мостай Кәрим. - Өфө: Китап, 1994. – 320 б.
5. Хөсәйенов Ғ. Мостай Кәрим. Шәхес. Шағир. Драматург. Прозаик. Өфө, 1994. – 485 бит.
6. Әхмәҙиев Р.Б. Хәҙерге башҡорт драматургияһы. – Өфө, 2003. – 235-се бит.

© Саникина С.Р., Гәрәева Г.Н.

***Саньярова Р.Р.,***
*к. филол. н., доцент, БашГУ, г. Уфа*

# ЯЗЫКОВАЯ КАРТИНА МИРА КАК МНОГОГРАННЫЙ МЕНТАЛЬНЫЙ ФЕНОМЕН

«Языковая картина мира» как совокупность реконструированных семантических полей, классов взаимосвязанных и взаимообусловленных единиц языка представляет собой вполне конкретную лингвистическую категорию. Наряду с лексикой она включает и релевантные для данного языка грамматические значения, и те, во многом бессознательные способы, которыми говорящий на том или ином языке организует языковую действительность, и те системы грамматических оппозиций, которые носители данного языка используют для языкового представления действительности. Если принять положение, что любой естественный язык некоторым образом концептуализирует окружающий мир, то языковая картина мира может быть определена как концептуальная картина мира человека. По мнению В.Н. Денисенко, в этой совокупности знаний о мире, запечатленных в единицах языка, имеются также и образы. Исследователь аргументирует свою позицию как более широким пониманием того, что такое знание вообще, так и более широким пониманием лексического значения, и справедливо замечает, что образ, как правило, формируется в системе знаний13. Отметим, что Г. Гийом в свое время говорил о видении человеком реальности «при обязательном посредстве образа, который он носит в себе» и считал это посредничество неотделимым от человеческого взгляда [1].

Рәхимәнең был һүҙгә тағы ла нығыраҡ иҫе китте.

– Һай, һай, нисәмә йылдар эшләйбеҙ, имеш. Биш йыл да, ун йыл да эшләрһегеҙ. Эш тип, таш ҡырҡҡаның бармы? 237-се бит.

– Һөйөнсө!

– Һөйөнсө, имеш, мин иң тәүҙә ишетеп, үҙем күлдәк әйттем инде. 365-се бит.

Әхмәҙи:

– Ҡуй, Ҡотлояр ағай, аҙыраҡ аша һуҡтырып ебәрәһең, бисәләре тураһында әйтмәгәндер, – ти ҙә, үҙе тыйыла алмай көлә. Ҡотлояр дауам итә:

– Ысын, ысын, ни эшләп аша һуҡтырайым. Әйтәм бит, халыҡ тәгәрәп ятып көлә. 391-се бит.

– ... Ана бит иламай ҙа, ҡулда булғас, мыҡыр-мыҡыр итеп кинәнә. Ул, бахыр, ҡулға көн тәүлегенә бер эләкмәй, алама сепрәк араһында һаҫып ятҡас, иламай нишләһен, – тип баланы Хәлимәгә кире бирҙе.

– Эйе, апай, ҡулға алыу ҡайҙа ул. Әле юргәген алмаштырғанды күреп ҡалһалар ҙа әрләй башлайҙар... 35-се бит.

Айбулаттың да, Мәғфүрәне күргәс, күңеле йомшап китте. Күҙенә йәш эркелгәндәй булды, ул уға ирек бирмәне.

– Эй запас, запас, һин дә ҡартайып киткәнһең. Тешең дә төшкән, – тип уйын һүҙҙәр әйтеп, уның илауын туҡтатырға тырышты.

– Ҡартаймаған ҡайҙа инде ул, илленең өҫтөнә сыҡҡас! 430-сы бит.

Сәйгә алдан туйып алған Рәхимә бик кәйефләнеп, аяҡтарын һуҙып ебәреп, тирә-яғына ҡаранды. Шунан оноҡан бер нәмәне иҫенә төшөргән тауыш менән:

– Әйткәндәй, беҙҙең ялсылар, күсеп килгәс, сәй эсеп алдылармы әле, юҡмы шулар? – тип Мәғфүрәгә һорау бирҙе.

– Юҡ, сәй эсергә ҡул тейеү ҡайҙа ти ул. Бушай алманыҡ, өлкән еңгә. 17-се бит.

Тетя Даша һаман көлә лә көлә:

– Ул, меҫкен, һинең яҡшылығың тураһында әле лә онотмай, күрәһең.

– Юҡ, ҡайҙа ти ул онотоу. «Эттең ҡойроғон кем ҡырҡһа, шул яҡшы», – тиҙәр бит. – Дядя Гриша күҙҙәренән йәш сыҡҡансы хахылдап көлә... 73-сө бит.

Сәйҙең аҙағына табан:

– Әссәләмәғәләйкүм! – тип Тимерғәле ҡарт килеп инде.

– Вәғәләйкүмәссәләм. Әйҙә, ҡорҙаш, әйҙә, юғары уҙ. Бәләкәс яманлаңҡырап киләһең дә килеүен, ярай инде, маҡтаған сағың да булыр әле, әйҙә, – тине Үмәр.

– Юҡ, ҡорҙаш, яманлау ҡайҙа ул. Әле, ана, Ныязғолға бойҙай иләп йөрөп һуңға ҡалып киттем. 117-се бит.

Ҡабатланған фекергә ҡайҙан һүҙе өҫтәлә:

– Йә, иген ни хаҡ тора был баҙарҙа? Аҙыраҡ күтәрелгән тигәндәй булалар? ...

– Юҡ, ҡайҙан күтәрелһен. Үткән баҙарҙа бойҙайҙың бото бер һум һикһән тингә етте тигәйнеләр. 114-се бит.

Килтерелгән миҫалдар күрһәтеүенсә, бындай төҙөлөшлө ҡабатлауҙар ҡулланыу эмоционаллекте арттыра, кешенең эске уй-кисерештәрен, психологик хәлен, хәл-ваҡиғаның көсөргәнешлелеген күрһәтә. Ҡабатлауҙар әҫәрҙе, телмәрҙе сағыуыраҡ итеп кенә ҡалмай, иң мөһиме – уҡыусыға, тыңлаусыға эмоциональ-экспрессив йәһәттән йоғонто яһау сараһы булараҡ та сығыш яһай.

ӘҘӘБИӘТ:

1. Басырова Г.А. Диалогик телмәрҙә ҡулланылған ҡабатлауҙар // Язык и литература в условиях многоязычия: Материалы II Международной научно-практической конференции. Часть I. Языковая картина мира и лингвистика XXI века. – Нефтекамск: РИО БашГУ, 2008. – 204 с.

2. Хөснөтдинова Р.Я. Һәҙиә Дәүләтшинаның "Ырғыҙ" романының ҡайһы бер синтаксик үҙенсәлектәре // Язык и культура: проблемы соотношения и взаимодействия в полиэтническом пространстве. Часть 2. Материалы Всероссийской научно-практической конференции (с международным участием), посвященной 80-летию доктора филологических наук, профессора, академика АН Республики Башкортостан, заслуженного деятеля науки Республики Башкортостан Зайнуллина Марата Валиевича. – Уфа: РИЦ БашГУ, 2015. С. 222-225.

3. Хөснөтдинова Р.Я., Закирова Г.М. Персонаждарҙың телмәрендә ҡабатлауҙарҙың стилистик үҙенсәлектәре // Материалы Международной научно-практической конференции "Духовная культура и гуманитарные науки в Башкортостане и России: история и современность", посвященной к 25-летию Академии наук Республики Башкортостан и 70-летию доктора филологических наук, профессора, члена-корреспондента Академии наук Республики Башкортостан, заслуженного работника образования Республики Башкортостан, заслуженного деятеля науки Республики Башкортостан, Почетного работника Министерства образования и науки Российской Федерации Гиниятуллы Сафиулловича Кунафина. (24 ноября 2016 года). – Уфа: РИЦ БашГУ, 2016, с. 292-294.

4. Хуснетдинова Р.Я., Закирова Г.М. Һәҙиә Дәүләтшинаның "Ырғыҙ" романында ҡабатлауҙарҙың ҡулланылышы // Филологическая наука: история, современность, перспективы: Материалы Международной научно-практической конференции, посвященной 80-летию со дня рождения известного башкирского языковеда К.Г. Ишбаева, Республика Башкортостан, г. Уфа, 27 ноября 2017 года / Под общей редакцией Г.Р. Абдуллиной. – Уфа: БашГУ, 2017, с. 78-81.

© Хөснөтдинова Р.Я., 2019

***Хужахметов А.О.,***

*к. филол. н., доцент, БашГУ, г. Уфа*

## К ВОПРОСУ РАННЕЙ ЛИРИКИ МУСТАЯ КАРИМА

Поэзию Мустая Карима можно рассматривать как поэтапно прогрессирующую, обрастающую новыми и новыми конструкциями и образами, более философским

смыслом.

Произведения раннего Карима середины и конца 30-х гг. XX века – это полные комсомольского задора стихотворения, посвященные любви («Незнакомый гость»), празднику урожая («Колхозная застолья»), восхищение весенней порой («Весенние голоса»).

*Может, звуки этой песни*
*И не в первый раз слышны,*
*Но пускай они вольются*
*В ораторию весны!*
....
*Облаков сквозные крылья,*
*Тёплый дождь, летящий вниз,*
*Как люблю я майский воздух,*
*Всех пьянящий, как кумыс!*

«Бишбармак», «кумыс», «гусь в масле», «мед молодой», удалой пляс, «оратория весны» и другие создают каркас поэтических символов сборников «Отряд тронулся» и «Весенние голоса». Мустай Карим восхваляет коллектив, ведь по его убеждению – лишь коллективный труд пятилеток поднимает страну на новую высоту. Эпоха пятилеток ставит перед молодыми поэтами задачу духовно поддержать усилия советского народа выйти на новые уровни развития, достичь высот в сельском хозяйстве и промышленности. Одним из таких идеологически подкованных поэтов был и Мустафа Сафич Каримов.

Но по-настоящему, его талант раскрывается в годы Великой Отечественной войны. В поэзии Мустая были найдены новые образы и мотивы, свершились открытия. В его стихах, окутанных патриотическим пафосом, на последний план стали отходить трудности жизни, на передний план выходит верный защитник, честный сын Отечества.

Перед отъездом на передовую поэт пишет стихотворение «Я ухожу на фронт», написанное в форме клятвы.

*Я ухожу, товарищи на фронт.*
*Чтоб стариков текла спокойно старость,*
*Чтоб нашим девушкам краса осталась,*
*Чтоб наш Урал всегда стоял могучий,*
*Чтобы над Белой не сгущались тучи.*
*Товарищи, я ухожу на фронт*
*За ту весну, что навсегда настанет,*
*За светлый сад, которым край наш станет,*
*За маленького сына моего*
*И родины любимой торжество.*

Вначале идет благословение от отца с матерью: отец приводит ему коня, а мать дает клинок деда. Стихотворение действие лирического героя подает как месть за павших. Он отомстит врагам, сокрушит их, только так можно сохранить Урал, защитить родных и близких, народ.

Как отмечает Дмитрий Быков: «Сталин любил фольклор, интересовался им, придавал ему огромное и не случайное значение: он вообще любил архаику, опирался на нее, видел в ней, если угодно, легитимацию собственного правления. Парадокс, но одним из немногих путей легально выжить при нем было именно выдать себя за народ, создать фольклор или перевести его».

Фольклоризация башкирской литературы, внесение в текст эпических, сказочных

элементов становится устойчивым явлением. Эта тенденция идет уже с 1930-х годов XX века, когда дана была установка стилизовать фольклор под новые, советские реалии. Персонажи в произведениях советских авторов обретают силу, ум и другие качества, присущие раньше лишь мифологическим образам, героям эпосов. Конь и меч являются теми элементами, которые вводят читателя в мир мифологии. Правильнее сказать, через мифологические детали автор привносит читателя в художественный мир сказки, где добро всегда побеждает зло, справедливость торжествует, и в конце всегда – хипп-энд.

В стихотворении «Трубка» уже нет той радужности, той легкости, присущей стиху «Я ухожу на фронт». Так же от девушки как память дается лирическому герою трубка, которую он впоследствии теряет во время жестокого боя. Война здесь предстает глазами не юноши – мечтателя и романтика, а увидевшего и прочувствовавшего тяжелые фронтовые будни солдата, с помощью трубки вспоминающего о родном доме, о своей любимой.

Фольклорными мотивами изобилуют стихотворения «Звезды на земле», «Мой конь», «Исток» и др. Кстати, в стихотворении «Исток» автор объясняет на языке поэзии – откуда берет начало богатый фольклорный колорит, национальный оттенок в его творчестве.

Особенно уникальна в данном контексте поэма «Ульмасбай». Произведение полностью: на жанровом, стилевом, композиционном, сюжетном и хронотопном поле построено на фольклорной парадигме.. Возможно даже исполнение данной поэмы под аккомпанемент народного музыкального инструмента.

Герой эпопеи, Ульмасбай – персонаж, схожий с Василием Теркиным из одноименного произведения А. Твардовского. Оба бессмертны, находчивы и смелы, им повсеместно сопутствует удача или везение, при этом хладнокровие героев приукрашивает юмор. Однако Ульмасбай и его друг Теребай являются героями из башкирской сказочной традиции, объединившими в себе качества Алдара, Ерэнсэ, Камыр-батыра и др. Рассказчиками являются сам Ульмасбай и автор, а также вкрапливается речь слушателей.

Композиционно поэма делится на несколько сюжетных линий, связанных между собой и раскрывающих образ башкирских разведчиков. Первый сюжет можно условно назвать «Взятие «языка», в котором Ульмасбай увлекательно рассказывает, как один пошел навстречу врагу, чтобы пленить и вывезти к своим за линию фронта фашистского офицера.

Второй сюжет называется «Свадьба». Здесь уже главному герою приходит на помочь его друг Теребай. Вдвоем они совершают рейд по тылам противника и нарываются на немецкую свадьбу в белорусской деревне. Рассказ Ульмасбая веселый, хотя сама ситуация патовая и напряженная, силы слишком не равны,. Все показывается так, что все персонажи участвуют в мирной интернациональной свадьбе, а два башкира – это сватья. Но вместо сватьев фашисты получают в гости двух храбрых разведчиков со взрывчаткой в качестве гостинца. В этом, как шутит автор, и состоит традиция башкирского туя.

Третий сюжет именуется «На рыбалке». Два героя, узнав, что три немецких солдата купаются на речке, быстро соображают, как унизить захватчиков перед населением. Это очень важный шаг, так как смех над униженным врагом помогает ликвидировать страх, сковывающий тело.

Небольшая поэма военных лет Мустая Карима «Ответное письмо башкирскому народу” создана как народное башкирское сказание. В поэме переплетаются потоки башкирской разговорной стихии, жанровые и изобразительные особенности

фольклорных произведений, татаро башкирские эпистолярные традиции. Особенностью произведения также является и афористичность, меткая лапидарность характеристики, идущая от пословиц и поговорок.

© Хужахметов А.О., 2019

***Хужахметов А.О.,***
*к. филол. н., доцент, БашГУ, г. Уфа*

## К ВОПРОСУ ВОЕННОЙ ЛИРИКИ МУСТАЯ КАРИМА

Примечательно стихотворение «Три мертвеца». Произведение поражает смысловой глубиной. Вода с древних времен подразумевалась как элемент, разделяющий миры живых и мертвых. И второй момент, когда тела своих сторонников, по поверью, предки пускали на лодке и сжигали посередине водной глади. И это считалось отправлением высочайшего ритуала, освобождающего душу от бренного тела. Как раз намек на благостный огонь летнего рассвета встречается в начале произведения. Чего, конечно, не хотят сотворить с телами врагов, так как народ желает, чтобы души захватчиков мучились, как и тела. Они – солдаты тьмы и должны уйти в ту кромешную темноту, откуда пришли. Им вслед летят лишь слова гнева и проклятия, сопровождает тишина и безразличие.

В произведении обыгрывается сакральность цифры три. Эта цифра уводит к осмыслению мировоззрения башкирского народа, что мир триедин, состоящий из верхнего (неба), среднего (земля) и подземного (обиталища демонов). Как раз воротами в подземный мир считалась вода: река, озеро, море. К примеру, герой эпоса «Акбузат» Хаубан проникает в царство демонов на дне озера и правит там Шульган. Рано или поздно солдаты тьмы попадут в мир теней, исчезнут, будут вычеркнуты из памяти человечества. Поэтому три тела – они безымянны, являя собой обобщенный образ врага.

*Идут, идут в последний путь*
*Солдаты тьмы.*
*Назад уже не повернуть*
*Средь тишины.*
*Им вслед проклятия летят,*
*Летят вослед,*
*А люди даже не глядят –*
*Как будто лодки нет...*

Стихотворение «Дождь», написанный в 1943 году, разделяет судьбу лирического героя на две части-антипода: мальчишки, бегающего под летним дождем и воина-фронтовика, стоящего на страже. Перед нами монтажная композиция: две ипостаси одной личности – в мире и войны, переданные через деталь летнего дождя. Мальчик – образ мирного времени, во время которого капли с неба – необходимое, долгожданное для всей природы благодатное явление. А воину при полной амуниции в тягость стоять под дождем. Лишь тоска по сыну возвращает его думами в собственное детство, и солдат принимает душой небесный поток.

*...Ему показалось: от струй дождя*
*На Белой волна дрожит,*
*А сын Ильгиз, как в детстве отец,*
*Сквозь дождь босиком бежит.*
*«Дома побыть бы! — подумал он.*
*А дождь по брустверу бьет.*

*Мокрой шинелью накрылся солдат: —*
*К лучшему! Пусть идет».*

Это стихотворение автобиографично: упоминается сын Ильгиз, и по нашему мнению, является предтечей венца творения Мустая Карима – произведения «Долгое-долгое детство». Как раз сюжетной основой повести станет создание панорамы развития личности, с сознательного детства до зрелости, с мальчика, который лишь познает окружающий мир, учится различать хорошее и плохое до прошедшего поля самой беспощадной и кровопролитной войны воина, чьи взгляды сформированы и ясны.

Еще одно произведение, написанное в 1945 году, отличается своей лиричностью и глубиной мысли. Это – «Цветы на камне». Оно больше объясняет отношение лирического героя к любимой, чем повествуют об удивительном явлении в природе. Метафоричность образа цветов, расцветающих наперекор перипетиям судьбы, в полной мере обозначают расцвет жизни и зрелость чувств солдата. Ведь, несмотря на то, что его «сердце впрямь окаменело», «цветами на камне расцветает».

Еще один момент, вызывающий интерес в творчестве М. Карима – это его трепетные чувства к вопросу интернационализма, дружбы между представителями различных национальностей – к нему поэт в своем творчестве будет возвращаться не раз. Дружба с древних времен считается одной из важнейших социально-нравственных ценностей, обозначающих не только индивидуальные, межличностные, но и отношения социального характера. Основными линиями развития дружбы являются быть опорой близким, верным другом, гражданином, неравнодушным к страданиям и горести народов, населяющих большую Родину [4, с. 93].

В лирике поэта военной поры эта тематика наиболее ярко передана в произведениях «Русская девочка» (1942) и «Украине» (1943). Выбранный образ девочки/девушки, чье спасение от рук фашистов и защита – дело чести любого гражданина страны, способствует ощутить единство наций не только на культурном уровне, а на более глубокой ментальной плоскости. Нежный образ гиперболизируется, становится олицетворением страны, символом, зовущим к победе над злыми силами, во имя светлого и цветущего будущего:

*Была душой России та девчушка,*
*Цветком, что никогда не отцветет.*
*Ее улыбка – днем была грядущим,*
*Который к нам через Берлин придет. («Русская девочка»)*
*Довольно слез! Меня послал Урал,*
*Чтоб ты утерла слезы, Катерина.*
*Я под Уфою землю целовал,*
*Чтоб ты цвела, как прежде, Украина! («Украине»)*

Впоследствии колоритный образ девочки-украинки Оксаны появится в сюжетной матрице повести «Радость нашего дома». Она привносит в башкирскую семью новый смысл бытия, превращая дом Ямиля, деревню, где они живут, в миниатюрную модель всей страны, борющейся, благодаря сплоченности народов, за освобождение целого мира от фашизма. Страна становится единой семьей, дарящей для каждого из ее членов уют очага и тепло родительской любви.

Затем эта же тематическая линия вновь станет основополагающей в повести «Помилование», гениальная обрисовка любви между украинцем Любомиром Зухом и испанкой Марии Терезы сквозь призму башкирской мифопоэтики [1] в которой – это логическое продолжение интернациональной философской парадигмы.

© Хужахметов А.О., 2019

***Шәймөхәмәтова Л. Ф.,***
*магистрант, БДУ, Өфө ҡ.*
***Солтанбаева Х.В.,***
*филол. ф. д., проф., БДУ, Өфө ҡ.*

# ТАҢСУЛПАН ҒАРИПОВАНЫҢ "БӨЙРӘКӘЙ" РОМАНЫНДА ҠАТЫН-ҠЫҘ ОБРАЗЫН ҺҮРӘТЛӘҮҘӘ САҒЫШТЫРЫУҘАР

Таңсулпан Ғарипованың әҫәрҙәрендә, айырыуса "Бөйрәкәй" романында, һүрәтләү сараһы булараҡ сағыштырыуҙарҙың ҡулланылышы айырым иғтибарға лайыҡ. Был мәҡәләлә беҙ романдың төп героиняһы булған Мәҙинә образын тасуирлағанда ҡулланылған сағыштырыуҙарға туҡталып үтәбеҙ.

Роман башында автор уны ябай, әммә сос һәм шаян ҡыҙ бала итеп һүрәтләй:

"Ипләп, ҡустыларыңды уятырһың! Ай, ата Ғәбиҙә...

"Ата Ғәбиҙә" тимәҫлек тә түгел ине Мәҙинәһе ошо минутта: торғаны малай. Бынау муйылдай күҙҙәрендәге ҡыҙҙарға ғына хас шаянлыҡ менән һикерешкән осҡондар һәм улар өҫтөндә яңы тыуған айҙай ҡыйылған ҡашы булмаһа, кем ышаныр икән уның ҡыҙ бала булғанына?

Гәлбаныу көлдөксә эргәһенә сүгәләгән еренән торғас та ҡыҙына һаман тамһынып ҡарауында булды: тал сыбығылай нескә үҙе, эсендә йәне нисек тора, ә тауышы... моңо..." Ошо әсә кешенең ҡыҙына ҡарап уйланған һүҙҙәренән генә уҡыласаҡ романдың төп геройының холоҡ-фиғелен, буй-һынын төҫмөрләп була. Беренсенән, тиктормаҫ тәбиғәтле булғаны өсөн әсәһе уны "ата Ғәбиҙә" тиһә, муйылдай күҙҙәр, яңы тыуған айҙай ҡыйылған ҡаш һәм тал сыбығылай нескәлек кеүек һүрәтләүҙәр аша беҙҙең күҙ алдыбыҙға ҡыҙҙың тышҡы ҡиәфәте килеп баҫа.

Артабан роман барышында ҡыҙҙың тышҡы ҡиәфәтен тасуирлауҙар йышыраҡ осрай бара. "Боронғо башҡорт ҡыҙҙары кейемендә килгән талсыбыҡтай нескә, ләкин бик һомғол буйлы ҡыҙ урынынан ҡалҡты" йәки Биле нескә генә үҙе яурыны тар, елән кейгән ҡуйыны тулып-күпереп тора. Ошондай тал сыбығылай ҡыҙҙа быңдай түштәр ҡайҙан барлыҡҡа килгәндер ул. Был ике тасуирлауҙа ла Мәҙинәнең һомғоллоғона айырыуса ҙур иғтибар бүленә - ул тал сыбығы менән сағыштырыла. Мәҙинәгә боронғо башҡорт кейемен кейҙереү ҙә автор тарафынан ауылдың башҡа ҡатын-ҡыҙҙарында булмаған буй-һынды тасуирлауҙа ҡулланылған тағы ла бер ысулы тип ҡабул итергә мөмкиндер. Башҡорт халҡының кейемдәре ҡатын-ҡыҙҙарҙың ҡиәфәтенә ярашлы тегелә.

Сағыштырыу өсөн икенсе бер миҫалға иғтибар итәйек: иӘберкәләр һалдырып, яңы күлдәк тектереп кейгән кейеүгә ( һүҙ Сәбилә хаҡында бара/ әммә уның ҡоро тарамыштан торған тәненә һис кенә лә килешмәй шул: ҡараҫҡыға кейҙерелгән тоҡ кеүек аҫылынып тора. Был миҫалдан беҙ "ҡоро тарамыштан торған" кәүҙәле Сәбиләне ҡараҫҡы менән, ә уның яңы тектереп кейгән күлдәген тоҡ менән сағыштырылыуын күрәбеҙ. Был тасуирлауҙа боронғо башҡорт кейемдәре телгә лә алынмай хатта. Тимәк, яңы кейем кейеп кенә тышҡы ҡиәфәттең йәмһеҙлеген йәшереп булмай тигән һығымтаға килергә мөмкин.

Бынан тыш, Мәҙинәнең әсәһе Гөлбаныуҙың да һылыулығын, уның тәбиғи, илаһи матурлығын автор сит күҙ, сит телмәр ярҙамында, күҙ алдына баҫтырырҙай картиналар аша үҙ уҡыусыһына еткерә. Мәҫәлән:

-Шәһәрбаныуҙа бар икән бер кыҙ!

-ҡыҙ түгел, һыу һөлөгө!

-Ут!”

Йәки, “...тештәре лә ап-аҡ, мәрйен кеүек теҙелеп торалар- һүҙ шулай уҡ Гөлбаныу тураһында бара. Ошо теҙелешеп торған аҡ тештәрҙән таный ҙа инде Хашим ҡатынының мәйетен.

“Бына Гэлбаныуҙың ҡоралайҙай еңел һыны торған ер. Ошонда торған еренән ярҙам һорап, ялбарып, үҙенең аҡҡош ҡанатылай нескә ҡулдарын һуҙғайны ул... ”

Ошонда уҡ беҙ тағы ла бер сағыштырыу объектын күрәбеҙ. “Гөлбаныу килеп Фәүзиәнең тарамыштан да ҡатыраҡ ҡулдарына йәбеште’’. Был осраҡта инде ҡаты ҡулдарҙы тарамыштан да ҡатыраҡ булыуын күрәбеҙ. Кемдәрҙең һуң ҡулдары шул тиклем ҡаты булыуы ихтимал? Әлбиттә, рәхәт, еңел тормошта йәшәгән, тик үҙен генә тәрбиәләп торған кешенең ҡулдары шулай ҡаты булмай, ә, киреһенсә, был донъяла күпте күргән, күпте кисергән; бер ваҡытта ла эштән бушамаған әҙәм затының ҡулдары тарамыш хәленә инә. Ә был осраҡта Фәүзиәнең ҡулдары шул тарамыштан да ҡатыраҡ.

Күреүебеҙсә, ҡатын-ҡыҙ образдары һүрәтләнгәндә сағыштырыуҙар мөһим вазифа үтәй. Ҡарап үткән ошо һүрәтләү саралары аша беҙ романдағы был персонаждарҙың ысын асылына үтеп инәбеҙ. Уларҙың буй-ҡиәфәтен күҙ алдына килтерә алабыҙ.

ӘҘӘБИӘТ:

1.Аҙнағолов Р. Ғ. Бер сырағы ҡырҡҡа тороролоҡ. // Ватандаш. 2002, 11-се һан.
2.Аҙнағолов Р. Ғ. Сәйләндәрем төҫлө-төҫлө. Ижади портреттар. - Өфө: Китап, 2007. - 272 бит.
3.Т. Ғарипова. Бөйрәкәй: роман-эпопея. - Өфө: Китап. 2006. - 765 бит.

© Шаймухаметова Л.Ф., Султанбаева Х.В., 2019

***Әбсәләмова Ш.М.,***
*52-се лицейҙың башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы, Өфө ҡ.*

## МОСТАЙ КӘРИМДЕҢ «БЕҘҘЕҢ ӨЙҘӨҢ ЙӘМЕ» ПОВЕСЫНДА БӘХЕТЛЕ БАЛА САҠ...

*”Бәхетле булһа ла, бәхетһеҙ булһа ла,*
*беҙҙең бала сағыбыҙ оҙон-оҙаҡ*
*йылдар буйына эйәреп килә...*
*Ә сабыйлыҡ – могайын сафлыҡтыр”.*
*М.Кәрим.*

Мостай Кәрим – башҡорт әҙәбиәтен бөтә донъя даирәһенә алып сыҡҡан һәм үҙенең ижады менән донъя әҙәбиәтенә һәм мәҙәниәтенә баһалап бөткөһөҙ өлөш индергән талантлы әҙип. Һуғыш юлдарын үткән заманыбыҙҙың аҡһаҡалы, ил уҙаманы – үҙ әҫәрҙәрендә ғаиләлә бер-береңә ниндәй мөнәсәбәттә булырға, балалар менән нисек аралашырға һәм йәштәрҙе йәшәргә өйрәтә. Ул үҙенең бар көсөн һәм талантын Башҡортостандың ҡабатланмаҫ образын һүрәтләүгә бағышлаған. Унның китаптары күп телдәргә тәржемә ителгән. Халыҡ уны юғары әҙәби маһирлығы, таланты һәм кешелек сифаттары өсөн ярата.

Бала саҡ – кеше ғүмеренең иң яҡты сағы, һөйләп, тасуирлап бөткөһөҙ серле донъя. Кешенең бала сағында уҡ зиһененә һалынған төшөнсәләр, күңеленә һеңгән йылы

тойғолар, тыуған ер, ил, халыҡ, намыҫ, кешелек кеүек оло төшөнсәләр бар рухын һуғарып шәхес итеп формалаштыра.

«Балалар донъяһы - үҙенә бер төрлө ул. Бөтмәҫ-төкәнмәҫ хыялдар, теләктәр донъяһы. Балалар, ғәҙәттә, ололар күрмәгәнде күрәләр, ололар ишетмәгәнде ишетәләр. Үҙҙәренсә бер серле, тылсымлы донъя тыуҙыралар», - тип яҙған М.Кәрим.

1951 йылда республикабыҙҙың "Пионер" журналында М.Кәримдең "Беҙҙең өйҙөң йәме" повесы донъя күрә. Ҡәҙимге ауыл тормошо, кескәй балалар донъяһы һүрәтләнә. Осоро – Бөйөк Ватан һуғышы йылдары. Бәләкәй Йәмилдең атаһы фронтта. Ул – ете йәшлек малай. Әсәһе менән генә йәшәй. Күрше ауылда өләсәһе бар. Һуғыш шарттарында тормоштары еңелдән түгел. Ләкин автор әҫәрҙә һуғыш йылдарының иҫ киткес ауырлыҡтарын, мохтажлыҡтарын түгел, йәшәүҙе йәмләй торған һәйбәт кешеләр тураһында һөйләүҙе тәүге урынға ҡуя. Тормош ни тиклем ауыр булһа ла, ул заман кешеләренең күңеле ҡатмаған, йөрәктәрендә бер-береһенә үс, асыу тотмаған. Үкенескә ҡаршы, хәҙерге етеш заманда, тормош ауырлыҡтарына зарланып, үҙ балаларынан баш тартыусы ғаиләләр йыш осрай. Был нимәнән ғибәрәт?

Бына бер саҡ әсәһе атаһының яҙыуы буйынса ҡайҙалыр алыҫҡа барып, Оксана исемле дүрт йәшлек бер ҡыҙҙы алып ҡайта. Автор әҫәрҙең тәүге юлдарынан уҡ беҙҙе бәләкәй Оксана менән осрашыуға әҙерләй:

*«Тик сәй янына ултырғас ҡына, табындың бик иртә әҙерләнгәнен һиҙәм. Шунда уҡ әсәйемдең тоҡсайын, төйөнсөктәрен күҙ алдына килтерәм... Берәү ҙә өндәшмәй. «Әһә, - мин әйтәм, эстән генә, - барыбер беләм инде. Әсәй бөгөн ҡайҙалыр китә».* Ҡайҙа?

*«... Мин, йүгереп килеп, өләсәйгә һыйынам. Ул минең башымдан һыйпай.*

- *Фәриттең ҡустыһы бар. Мараттың һеңлеһе бар, бөтәһенең дә инде... Минең генә бер кемем дә юҡ, - тип шунда уҡ танауымды тарта башлайым.*

- *Һинең һеңлең булһа, яратыр инеңме? – тип һорай өләсәй.*

- *Би-и-к яратыр инем! Эй-й, һеңлем булһамы, мин уны күтәреп кенә йөрөтөр инем. Бер ҙә йыҡмаҫ инем, Марат кеүек...»*

« - *Өләсәй, өләсәкәйем, әкиәт һөйлә әле...*

- *Борон-борон заманда, - ти өләсәй, - Тимербәк тигән батырҙың ай йөҙлө, йондоҙ күҙле Гөлнур исемле бик һылыу һеңлеһе булған...»*

Бер көн килеп Йәмилдең хыялы тормошҡа аша, ул үҙен донъялағы иң бәхетле кеше итеп тоя – әсәһе уға күптән көткән һеңлеһен алып ҡайта:

*«... Бүтәнсә түҙеп булмай. Һандыҡ өҫтөнән һикереп төшәм дә шул бер быймамды ғына кейгән көйө тышҡа йүгерәм...*

*Өйгә ингәс, теге бәләкәс ҡыҙ менән мине ҡара-ҡаршы баҫтырып ҡуялар.*

- *Бына һеңлеңде алып ҡайттым, Йәмил. Оксана исемле. Сисендер өҫтөн! – ти әсәй. Миңә бик күңелле булып китте. Башта мин Оксананың муйынынан ҡосаҡлап алдым, унан биттәрен һыйпаным. Минең дә һеңлем бар, Оксана исемле һеңлем бар!.. Исеме лә урамда бер исем – Оксана, ҡалайыраҡ!..»*

*«Минең Оксанаға бик күп йылы һүҙҙәр әйткем килә. Тик нисек кенә өндәшергә икән һеңлемә?..*

- *Йәмил... – тине ул. Мин һиҫкәнеп киттем. Әҙерәк торғас өҫтәп ҡуйҙы: - Ағай...*

- *Ҡалай матур итеп әйтә ул!*

- *Оксана! Туғаным! – тим мин. Әсәйемдең итәгенән һикереп төшәм дә уның битен һыйпайым. – Әйт, тағы әйт!*

- *Ҡош та бит һайрарға әкренләп өйрәнә. Ул да өйрәнер, балаҡайым, - ти өләсәй».*

Оксана Йәмилдең бер туғанылай яҡын кешеһенә әйләнә. Ул уны үҙенең бер туған һеңлеһеләй үҙ итә, уның өсөн утҡа-һыуға керергә әҙер тора.

Ике бала араһында баштан уҡ йылы мөнәсәбәттәр барлыҡҡа килә. Һуғыш ваҡыты булыуға ҡарамаҫтан, бик бәхетле тормош кисерә был балалар.

Ауыр йылдар, аслы-туҡлы йәшәү, һыуыҡ-яланғаслыҡ кешеләрҙең, балаларҙың күңелен ҡатырмаған. Киреһенсә, улар бер-береһенә тағы ла нығыраҡ тартылған, ярҙам иткән. Быны беҙ әҫәрҙең төрлө урындарында күрәбеҙ. Төп геройыбыҙ Йәмил дә үҙенең бар байлыҡтарын, уйынсыҡтарын яңы туғанына бирергә әҙер:

*«…Мин һеңлемде, ҡулынан етәкләп, һандыҡ эргәһенә алып киләм. Шунда уҡ карауат аҫтына инеп, үҙемдең бөтә уйынсыҡтарым һалынған тартманы алып сығам. Минең әйберҙәрем байтаҡ. Таш атым, ағас мылтығым, бәләкәс арбам, баҡа ҡабырсаҡтары, имән сәтләүектәре, тәтәй таштарым, матур-матур һүрәттәр төшөрөлгән ҡағыҙҙарым бар. Ҡалалағы һылыу апа алып килгән ҡыҙыллы-йәшелле тутыйғошом менән тимер һаплыбәкем дә юғалмағайны әле ул саҡта... Бына ни тиклем уйынсығым бар минең! Шуларҙың бөтәһен дә мин Оксана алдына теҙеп ҡуйҙым.*

*- Ал, ал, Оксана, - тим мин, - бөтәһен дә һиңә бирәм».*

*«Ҡапыл көслө ел тәҙрә ҡапҡастарына килеп һуҡты. Улар дөбөрләп киттеләр. Оксана «ой» тип ҡысҡырып ебәрҙе. Мин һеңлемә әйләнеп ҡараным, уның күҙҙәре ҙур булып асылғандар. Күҙҙәре миңә был юлы асыҡ зәңгәр булып түгел, ҡараһыу булып күренделәр. Ниңә улай ирендәре, иларға иткән кеүек, ҡалтырап тора? Ни булған уға? Шул арала тәҙрә ҡапҡастары тағв ла шәберәк дөбөрләп ҡуйҙы. Оксана инде карауат өҫтөнә өйөлгән мендәрҙәр артына уҡ инеп ҡасты. Мин, аптырап, тышҡа ҡараным. Тышта ҡараңғы төшөп килә. Ел һаман беҙҙең ҡайындың ботаҡтарын тартҡылай. Ә ҡурала элеккесә бер кем дә юҡ. Ниҙән ҡурҡа һуң һеңлем?уның эргәһенә килеп, мин дә мендәргә һыйындым.*

*Оксана ике ус төбө менән ҡолаҡтарын баҫып тотҡан да бөршәйеп кенә ултырып тора. Ул, ҡалтырана-ҡалтырана, миңә бышылдай:*

*- Ҡас тиҙерәк, Йәмил, ҡас, ана фашист килгән тышта! Ишетәһеңме, мылтыҡ ата бит! Ул уҫал! Ҡас тиҙерәк!»*

Был эпизодта ла Йәмилдең һеңлеһе өсөн өҙөлөп торғанын күрәбеҙ. Ул уны хатта фашистан да ҡурсаларға әҙер:

*«... Мин тиҙ генә һикереп төшәм дә тартманан ағас мылтығымды алып киләм.*

*- Күрәһеңме быны? – тим Оксанаға. – Килеп кенә ҡараһын фашист! Кәрәген алыр!.. Беләһеңме, Оксана, - тим, - мин бар саҡта һин ҡурҡма. Мин, үҫеп, Тимербәк кеүек батыр булғас, фашистарҙы еңергә китәм, һин өйҙә ҡалырһың. Мин ҡайтып етеүгә һине аждаһа урлап китһә лә, мин һине барыбер табып ҡотҡарырмын. Һин ҡурҡма, йәме?...»*

Дуҫтары менән бәхетле повесть геройҙары. Улар һәр саҡ бергә – уйнағанда ла, эшләгәндә лә, ауыр саҡта ла, шатланғанда ла:

*«Ҡапыл урам ҡапҡаһы аҫтынан Марат һеңлеһе Фөһимәнең һары башы килеп сыҡты. Бер Фәһимә генә түгел, беҙ бөтәбеҙ ҙә ҡапҡа аҫтынан инеп-сығып йөрөйбөҙ.*

*... Фәһимәне күргәс, Оксана көлөп үк ебәрҙе. Дуҫы килгәс, кем дә шатлана инде. Фәһимә ике ҡулына ике сәүкә тотҡан. Ул, йүгереп килеп, бер сәүкәне Оксанаға, береһен миңә һуҙҙы. Үҙе һаҡаулап-һаҡаулап һөйләргә тотондо:*

*- Малат дүлт сәүкә яһаны дүлтебеҙгә. Хәҙел Фәлит менән бында киләләл. Сәүкә осолғас, эй ҡыҙыҡ булыл, - ти Фәһимә. – Үҙе Оксанаға биргән сәүкәһен кире алып, осороп та ебәрҙе. – Күлдеңме? – Ҡағыҙ сәүкә ҡыйпылып-ҡыйпылып осоп китте. Оксана ҡыуанысынан ҡул сабып ҡуйҙы... »*

Ниндәй генә ваҡиғаларға осрамай повесть геройҙары! Ата ҡаҙ менән дә һуғышалар, Көмөшлө йылғаһы буйлап ағып киткән башмаҡтарҙы ла баҫтыралар һ.б. Ләкин бер хәлдә бер-береһен ташламай дуҫтар, киреһенсә, терәк, таяныс булып ҡалалар.

Ауыр һуғыш йылдары булыуға ҡарамаҫтан, байрамдарға ла урын табыла был тормошта.

*«Өләсәй әйткәндәй, суктай итеп кейенеп, яңынан урамға сығабыҙ. Беҙ бик күмәкбеҙ. Һанап та бөтөрлөк түгел.*

- *Ә ниңә һуң байрамда кешеләр урамға сығып йөрөйҙәр, әсәй? – тип һораным мин шул сакта. Әсәйем миңә һөйләп бирҙе:*

- *Донъяла беҙҙең дуҫтарыбыҙ ҙа, дошмандарыбыҙ ҙа күп. Беҙ күмәкләшеп урамдарға сыккас, алыҫ илдәрҙәге дуҫтарыбыҙ беҙҙе күрә лә: «Ана беҙҙекеләр ни саклы, үҙҙәре берҙәм, үҙҙәре көслө!» - тип шатланалар. Бөтәбеҙ ҙә бергә йыйылғас, күңелле була бит.*

- *Ә дошмандар ни эшләй?*

- *Дошмандар ҡурҡалар, уларҙың коттары оса. Белдеңме инде?*

*Бына беҙ күмәкләшеп урамға сыктык. Дуҫтар шатланһындар, ә дошмандарҙың коттары осһон!*

*... Артта йыр башланылар. Оксана минең беләгемдән тота:*

- *Йырла, Йәмил, рәхәт бит!*

- *Эйе, эйе, Оксана, бик рәхәт! – тип бышылдайым мин. Һеңлем, миңә эйелә төшөп, йырларға тотона*

*... Ниҙәр менән генә һыйламаны беҙҙе өләсәй был көндө! Беҙҙе лә, байрамды ла ярата бит ул...».*

Ләкин беҙҙең геройҙарыбыҙҙы алда тағы ла ҙурыраҡ, тормоштарының иң мөһим байрамдары көтә ине. Ул да булһа – Еңеү байрамы! Ошо түгелме ни бәхет?

*«...Бер аҙҙан тағы ла байрам булды. Был үҙенә башка бер байрам ине.*

- *Һуғыш бөттө, беҙ еңдек! – тинеләр ҙурҙар.*

*Халык тағы ла клуб янына йыйылды ул көндө... Әбейҙәр ҙә, бабайҙар ҙа үҙҙәре көләләр, үҙҙәре илайҙар.*

- *Улар ниңә илайҙар, Мансур бабай? – тип һорайым мин.*

- *Шатлык йәштәре, балам, улар, татлы йәштәр, - ти ул. Оксананы бер апай күтәреп ала. Үҙе һөйләнә:*

- *Бик бәхетле булырһығыҙ инде, балаҡайҙарым, ана ниндәй аждаһаны дөмөктөрҙөләр бит...»*

Еңеү менән бергә, ауылға бер-бер артлы һалдаттар ҡайта. Был бәхетле ваҡиғаларҙың да шаһиты була повесть геройҙары:

«*Бер саҡ әсәйем төшкә ҡайткас, беҙгә Тәзкирә апайым керҙе.*

- *Беләһеңме, Көнбикә еңгә, күпер башы Бәкерҙең Рамазаны ҡайткан бит, бүтәндәр ҙә оҙакламаҫ инде, - ти ул.*

*... Көн һайын кешеләр фронттан ҡайтып торҙо. Марат менән Фәһимәнең атаһы ла, Баҙамша бабайҙың ҙур улы ла, арткы урам кешеләре лә ҡайтты. Беҙ Оксана менән икәү, уларҙың бөтәһенә лә барып, атайҙы һорашып йөрөнөк... »*

Һәм, ниһайәт, Йәмилдең атаһы ла һуғыштан ҡайта:

«*Әсәйем ул көндө эшкә барманы. Кискә тиклем мейес янында төрлө тәмле нәмәләр бешереп йөрөнө. Беҙ һәр вакыт атайға һыйынып кына торҙоҡ. Әсәй ҙә беҙҙең янға килгеләп китә. Үҙе өҙлөкһөҙ йылмая, һөйләгәндә һүҙҙәре лә, сулпы сылтырауы кеүек, матур булып сыға. Әсәйемдең янып торған ал йөҙөндә ниндәйҙер нур балкыған төҫлө*

*тойола. Эйе, мин күреп торам: ул нурҙар әсәйемдең күҙҙәренән бөркөлөп сығалар ҙа йөҙөнә таралалар. Бер уның йөҙөнә генә түгел, бөтә өйгә, бөтә урамға тарала ул нурҙар...*»

Яҡшы хәбәрҙәр, ҡыуаныслы хәлдәр бының менән дә бөтмәгән булып сыға беҙҙең геройҙарыбыҙ өсөн:

«*...Атайым әсәйемә, унан беҙгә күҙ төшөрөп ала ла тыныс ҡына һүҙ башлай:*

- *Бөгөн, - ти ул, - алыҫ ерҙәрҙән яҡшы хәбәр алдыҡ, балалар, бик яҡын кешебеҙҙән хат килде...»*

Ошо көндән башлап, Йәмил менән Оксана алыҫ ерҙәрҙән яҡшы хәбәр ебәргән ҡунаҡты көтә башлай. «*...Ә өсөнсө көндө беҙҙең өйгә, өләсәй әйтмешләй, һөйөнөс тә, көйөнөс тә килеп инде...*»

« - *Бынан өс көн элек хат килеүе тураһында әйткән инем һеҙгә. Ул хатты Петро яҙғайны. Оксананың атаһы – беҙҙең ҡәҙерле ҡунағыбыҙ һәм туғаныбыҙ Петро – бөгөн үҙе килеп төштө, - тине атай. Һуңғы һүҙҙәрҙе әйткәндә, уның тауышы нисектер ҡалтырап китте...*»

Петро ағай Оксананы алыҫ Украинаға алып ҡайтырға килгәнен белгәс, Йәмилдең тормошо нисектер төҫһеҙләнеп ҡала. Өйҙә ул аңламаған һөйләшеүҙәр, бышылдашыуҙар ишетелеп ҡала:

*« - Бәндәләрҙе тел дә, байлыҡ та туғанлаштырмай, - ти Мансур бабай. – бәндәләрҙе йөрәк туғанлаштыра. Мин күп йәшәгән кеше инед. Беләм: был заман кешеләрҙең тормоштарын ғына түгел, йөрәктәрен дә яҡшыртты.*

Өләсәй көрһөнөп ҡуя ла дауам итә:

- *Йөрәк итен телеп алған кеүек булыр инде, Мансур ағай. Артыҡ нык эйәләштек шул ҡыҙыбыҙға...»*

Хушлашыр көн дә килеп етә. Оксана менән Петро ағайҙы оҙатырға бар ауыл сыға:

«*Беҙ ҡуҙғалып китәбеҙ. Ҡапҡа төбөнә йыйылған кешеләр ҡарап ҡалалар. Фәһимә ҡысҡырып уларға тотона, ә Марат менән Фәрит арба артынан эйәреп, йүгереп килә.*

- *Һау бул, Оксана! – ти Марат.*
- *Иҫән бул! – ти Фәрит*».

« - *Һин китмә, туғаным! – тим мин.*

- *Әсәй ҙә барырға ҡуша бит, - ти ул. – Минең атайым бик һәйбәт. Ул һине лә, мине лә ярата. Ә һин әсәйҙәр менән бергә беҙгә ҡунаҡҡа килерһең. Беҙҙең унда яңы өйөбөҙ булыр...*»

Повестың һуңғы юлдарында Йәмилдең атаһы бик мөһим һүҙҙәр әйтә:

«*...Ҡыҙыбыҙ ғүмер буйы беҙҙең өйөбөҙҙөң йәме булып ҡалыр. Хәҙер Оксананың ғына түгел, беҙҙең бөтәбеҙҙең дә ике оябыҙ буласаҡ. Үҙ нигеҙендә Петро өр-яңы өй һалыр. Ул булдыҡлы, кеүәтле кеше. Бынан һуң шатлыҡтар ҙа, ҡайғылар ҙа улар менән уртаҡ буласаҡ... Бер-беребеҙгә ҡунаҡҡа йөрөшөрбөҙ, кәрәк сағында ярҙам да итешербеҙ...*»

Бер кем дә яңғыҙ булырға тейеш түгел: һәр кемдең дә туғандары булырға тейеш. Йәмил, уның атаһы менән әсәһе Оксана өсөн ысын ғаиләгә өйләнә, уның өсөн иң яҡын кешеләре булып китә. Был ғаиләлә йәшәү дәүерендә Оксана бик бәхетле була, сөнки ул үҙен уратып алған кешеләрҙең һөйөүен, иғтибарын тойоп йәшәй. Аяуһыҙ һуғыш йылдары кешеләрҙе бер ҙә ҡатырмай. Улар, киреһенсә, үҙ йөрәктәрендә ят ҡыҙ өсөн йылы урын таба һәм үҙ балаларындай яратып үҫтерә.

Ғаиләлә бала әҙәплелектең төп ҡағиҙәләренә өйрәнә. Тәрбиәле баланың төп сифаты- кешеләргә яғымлы, тәмле телле булыу, уларҙы ихтирам итеү, кешелеклелек. Был сифаттарға нигеҙ бәләкәй саҡтан һалына. Олоно оло итеү, кеселәргә ярҙам итеү һәм уларға үрнәк булыу, намыҫ, һаулыҡ, ҡунаҡсыллыҡ сифаттары, хеҙмәткә мөнәсәбәт,

төрлө һөнәрҙәргә өйрәнеү, ғөмүмән, йәшәргә өйрәнеү нигеҙҙәре ғаиләлә тәрбиәләнә. Татыу ғаиләлә тыуған балалар ата-әсәләренең иҙге ниәттәрен төплө аңлай, тормошта эшһөйәр, әҙәпле һәм кешеләргә ихтирамлы, иғтибарлы була. Ундай ғаиләләрҙә татыулыҡ, миһырбанлыҡ ололарҙан кеселәргә күсә килеүсән. Халҡыбыҙ тормошонда ошондай яҡшы күсәгилешлек борондан күҙәтелгән. Шуға ла ундай ғаиләлә тыуған балалар, төплө тәрбиә алғандан һуң, донъяға ысын кеше булараҡ баға.

Үкенескә ҡаршы, әлеге ваҡытта ата-әсәләре була тороп та балалар йорттарында тәрбиәләнгән балалар һаны бик күп.

Статистика мәғлүмәттәренә ҡарағанда, Башҡортостанда етем һәм ҡараусыһыҙ ҡалған балалар һаны күбәйә: 2016 йылда ундайҙар 3 575 булһа, 2018 йылда 5 195-кә еткән.

«Беҙҙең өйҙөң йәме» әҫәре – бала саҡ хәтирәләренең иң матур бер биҙәге булып иҫтә ҡала. Ғөмүмән, оло әҙиптең ҡайһы ғына әҫәрен алһаң да, йылдар үтеү менән популярлығын юғалтмай, матурлыҡҡа, изгелеккә әйҙәп йәшәүен дауам итә. Донъяға, кешеләргә һөйөү, хәстәрле, мәрхәмәтле уй-тойғолар әҙип ижадының аслын тәшкил итә.

Әҫәрҙә күреүебеҙсә, ауыр йылдар, аслы-туҡлы йәшәү, һыуыҡ-яланғаслыҡ кешеләрҙең, балаларҙың күңелен ҡатырмаған. Киреһенсә, улар бер-береһенә тағы ла нығыраҡ тартылған, ярҙам иткән. Быны беҙ әҫәрҙең төрлө урындарында күрәбеҙ.

Автор үҙ геройҙарының күңел донъяларын тәрәндән тойоп, уларҙы аңлап яҙа. Геройҙарҙың эске донъялары, психологиялары, уларҙың күҙгә күренеп тормаған яҡтарының ниндәй булыуын беҙ шаҡтай асыҡ күрәбеҙ.

Мостай Кәримдең башҡа әҫәрҙәре кеүек үк, «Беҙҙең өйҙөң йәме» повесы ла уҡыусыларҙы уйландыра. Уҡыусы нимәнең яҡшы, нимәнең насар булыуын асыҡларға тырыша, кешелеклелек, кешесә йәшәү хәҡиҡәтен аңларға ынтыла.

ӘҘӘБИӘТ:


1. *М. Кәрим*. Беҙҙең өйҙөң йәме. – Өфө: «Китап», 2014
2. *Баһауетдинова М.И., Йәғәфәроварова Г.Н.* Уҡыусыларҙың фәнни-тикшеренеү эшен ойоштороу. – Өфө: «Китап», 2012
3. https://infourok.ru/tema-m-krimde-oonoa-bala-sa-re-buyinsa-dres-3362603.html
4. *Башинформ.рф* http://www.bashinform.ru/bash/618161/


© Әбсәләмова Ш.М., 2019


***Якупова Е.Р.,***
*учитель истории и обществознания*
*МОАУСОШ №7, г. Нефтекамск*


## СОЗВЕЗДИЕ КАРИМА НА КАРТЕ УФЫ

*«В заре весенней вижу я … мою Уфу…»*
*Мустай Карим*

В настоящее время экскурсионная деятельность является одним из актуальных направлений туристской индустрии. Учитывая то, что экскурсионный туризм в Башкирии развит слабо, с точки зрения формирования новых региональных туристских продуктов и их реализации перспективным является разработка литературных маршрутов.

Основная цель разработки литературных маршрутов заключается не только в

знакомстве школьников и их родителей с биографическими данными и произведениями народного поэта, писателя и драматурга, а также но и проследить основные этапы работы над произведениями, попробовать проникнуть в их глубинный смысл, пробудить желание к творчеству.

Предлагаемый литературный маршрут посвящен 100-летию со дня рождения народного поэта Башкортостана Мустая Карима и расскажет об его биографии,тесно связанной с жизнью и деятельностью в столице Республики Башкортостан – городе Уфе.

Задачи маршрута:

1. Формирование у подрастающего поколения интереса к изучению литературного краеведения;
2. Закрепление и обогащение теоретических знаний о жизни и творчестве башкирского поэта и писателя;
3. Развитие коммуникативных навыков в процессе межличностного общения во время экскурсии;
4. Привлечение внимание общественности к проблеме сохранения историко-культурного наследия писателя;

Методическая разработка экскурсии «Созвездие Карима на карте Уфы»

Вступление экскурсовода:

Здравствуйте, дорогие ребята и уважаемые взрослые! Приветствуем Вас в столице республики Башкортостан, городе Уфе. Мы находимся у памятника Салавата Юлаева, расположенного на высоком берегу реки Белой. Это самое любимое для прогулок и отдыха место уфимцев и всех гостей города. Отсюда хорошо видно, как вдали, недалеко от берегов красавицы Демы, у подножия большого холма, напоминающего грудь большого богатыря, раскинулось затерявшийся среди башкирской природы село Кляшево. Сейчас его слава перешагнула границы не только Чишминского района, но и всего Башкортостана. Ведь Кляшево – родина народного поэта, аксакала, лауреата премии имени Салавата Юлаева Мустая Карима.

Тема сегодняшней экскурсии «Созвездие Карима на карте Уфы». Мы с вами побываем на уфимских улицах, связанных с биографией Мустая Карима.

Подтема 1. Детские годы М.Карима

Маршрут: аллея возле памятника Салавата Юлаева (пешая экскурсия), далее туристы проходят и садятся в автобус

Используемый приём: описание детских лет М.Карима, проведенных в селе Кляшево Уфимского уезда (ныне Чишминский район Республики Башкортостан)

Родился Мустай Карим 20 октября 1919 года в Кляшево Сафаровской волости Уфимского уезда Уфимской губернии в простой крестьянской семье. Отец – Мухаметсафа Садыкович был хлеборобом. Мать – Вазифа Хафизовна, прожила 105 лет, годы ее жизни с 1885 по 1990 год. Был вторым ребенком, а всего их было 12 братьев и сестер. У главы семьи было две жены, что имело место в мусульманских традициях. Его воспитанием занималась старшая мать, духовная наставница будущего писателя. Мальчик считал ее родной матерью, пока не узнал, что вторая, младшая жена отца, и есть его настоящая мама. Между женщинами в доме было уважение и взаимопонимание. В большом роде Каримовых Мустай был вторым грамотным человеком, первым научился читать старший брат Муртаза. Он же впервые посадил Мустафу на коня. До него же Каримовы, как и все кляшевцы, были неграмотны.

Подтема 2. Годы учебы в Уфе

Маршрут: здание рабфака Башпединститута (ныне ФРГФ БашГУ)-здание

факультета башкирского языка и литературы Башпединститута имени К.И.Тимирязева (ныне – завод «Прогресс»)- Союз писателей Республики Башкортостан

Объект показа: здание рабфака Башпединститута (ныне ФРГФ БашГУ)

Используемый прием: рассказ о годах учёбы М.Карима в Уфе на рабфаке и в Башпединституте имени К.И.Тимирязева, совмещаемых с работой Союзе писателей БАССР и началом литературной деятельности - ул. Мустая Карима,3 (бывший кинотеатр «Салават»)

Первые детские и юношеские впечатления от Уфы были связаны с улицей Зенцова (позже улица была переименована в ул. Сталина, еще позднее в Коммунистическую). В 1928 году будущий народный поэт в возрасте 9 лет впервые побывал в Уфе, где заночевал в доме 113 по улице Коммунистической. Это было полиграфическое училище. В нем дальние родственники Мустая Карима работали дворниками. Этот дом стал первым уфимским пристанищем Мустая Карима:[1,с. 406] (фото из портфеля экскурсовода).

Наш автобус подъезжает к зданию по улице ул.Коммунистическая, 19,где находился педрабфак по ул.Коммунистическая,19 (ныне инфакБашГУ). Мустай Карим писал в своей автобиографии, что его приняли как более-менее грамотного сразу на 2 курс. А когда через два года окончили рабфак, то уже прилично писали и говорили.

Мы подъезжаем к ул.Коммунистическая, 34, находящейся возле здания Союза писателей Республики Башкортостан.

В 1937 году поступил на факультет башкирского языка и литературы Башкирского педагогического института имени К.И.Тимирязева, который располагался на углу улиц Сталина (ныне ул.Коммунистическая) и Аксакова. В настоящее время в нем располагается завод «Прогресс». В годы учебы вошел в литературную среду. Совмещал работу с учебой в Башпединституте.

В 1938 году вышла в свет первая книга стихов «Отряд тронулся» совместно с Вали Нафиковым, еще раньше в 1935 году опубликовано стихотворение в газете «Яшьтөзүче». Продолжая учебу в институте, работал в редакции журнала «Пионер», в 1939 году его приняли литературным консультантом в Союз писателей, в том же году принят в Союз писателей СССР. В канун войны на башкирском языке вышел сборник стихов «Весенние голоса».

Позже с 1951 по 1962 годы Мустай Карим являлся председателем правления СП БАССР,позже-секретарем правления СП РСФСР.

Но прежде чем стать большим поэтом, Мустаю Кариму предстояло взять в руки оружие, чтобы защитить страну от фашистского нашествия, как и сотням тысяч его сверстников: [2, с.22].

Подтема 3. Участие М.Карима в Великой Отечественной войне

Маршрут:ул. Мустая Карима,47(на углу ул.Достоевского)

Объект показа: жилой дом на ул. Мустая Карима, 47

Используемый прием: рассказ об участии М.Карима в Великой Отечественной войне

Мы подъезжаем к улице, которая до 2006 года носила название Социалистическая, а еще раньше – Бекетовская. А еще ее называют улицей первой любви Мустая Карима.

Мы находимся на том месте, где стоял домик тетушки Хадии-апы, сейчас здесь многоэтажка на углу ул. Достоевского и Мустая Карима (ул. Мустая Карима, 47) .

Мустай Карим в воспоминаниях писал: «В августе 1938 года мы с Вали Нафиковым сняли комнату в квартирке с двумя маленькими комнатками. Это был двухэтажный деревянный дом ( в наст.время - дом снесён). В том же доме в апреле 1941 года мы с Раузой поженились. Наша хозяйка Хадия-апа была родной тётей Раузы. Оттуда я ушёл

на войну. После войны до сентября 1947 года оставались там же».

Вскоре после свадьбы в 1941 году, был мобилизован в Красную Армию.

После прохождения учебы в военном училище связи города Мурома, служил связистом. С мая по август 1942 года участвовал в боях на Брянском фронте в качестве начальника связи артдивизиона в звании младшего лейтенанта. В августе 1942 года получил тяжелое ранение в грудь под городом Мценском. Более шести месяцев находился на лечении в разных госпиталях. Был трижды оперирован.

После госпиталя продолжил службу на передовой в качестве корреспондента фронтовых газетах «Советский воин» и «За честь Родины». День Победы встретил в качестве военного журналиста застал за Веной, около Линца, куда был отправлен редактором на встрече с американцами.

В июле 1946 года был демобилизован из Советской Армии. Как участник Великой Отечественной войны награжден орденами Красной Звезды(1944), Отечественной войны II степени(1945), медалями.

Подтема 4. Литературное творчество М.Карима.

Маршрут:ул.Ленина,31/33-ул.Энгельса,5-ул.Чернышевского-памятник М.Кариму.

Объекты показа: мемориальная доска М.Кариму-памятная доска со стихами М.Карима, памятник М.Кариму .

Началась творческая жизнь писателя, поэта. В декабре 1953 года правительство выделило Мустаю Кариму трёхкомнатную квартиру в новом доме по ул. Ленина, 65а. Но вскоре в 1958 году поэту и писателю предоставили 4-комнатную квартиру, где он прожил ровно 40 лет. В стенах той квартиры были гостями известные писатели, государственные и общественные деятели: Константин Симонов, Расул Гамзатов, Чингиз Айтматов, Кайсын Кулиев, Сергей Михалков, Михаил Дудин, МирзоТурсун-заде, президент Татарстана Минтимер Шаймиев, Лев Николаевич Богуш (академик).

Мы подъезжаем к дому 5 по улице Энгельса, куда в январе 1999 года Мустай Карим переехал, чтобы съехаться с семьёй дочери Альфии. «Там остались 40 лет жизни, дух общения с людьми. Здесь этой атмосферы нет. Стены не обогреты, не освещены, не обласканы душами моих друзей», - писал народный поэт Башкирской АССР.

Мустай Карим скончался 21 сентября 2005 года, находясь в республиканском кардиологическом диспансере Уфы. Похоронен на мусульманском кладбище в Уфе.

Далее экскурсовод читает стихотворение «Птиц выпускаю…», возложение цветов возле мемориальной доски.

Мы приближаемся к ул. Чернышевского, где установлена памятная доска, посвященная стихотворению Мустая Карима «Птиц выпускаю

23 октября 2009 года в Уфе открылась памятная доска, посвященная стихотворению Мустая Карима «Птиц выпускаю…». Автор - Наиль Байбурин, заслуженный деятель искусств Республики Башкортостан.

Произведения М.Карима переведены на десятки языков России и мира, апо самым известным были сняты фильмы «Долгое-долгое детство» (режиссер-постановщик Булат Юсупов) и «Сестренка « (реж. Александр Галибин).

Именем Мустая Карима в Уфе названы Национальный Молодежный театр РБ и улица в Ленинском районе Уфы. Гимназия №158 имени Мустая Карима в селе Кляшево Чишминского района.

В главном ВУЗе республики Башкирском Государственном Университете:

• учреждены ежегодные стипендии имени для студентов филологического факультета,

• открыта творческая мастерская имени Мустая Карима- центр по изучению

башкирского языка и литературы в БашГУ,

• на фасаде главного корпуса БашГУ установлена мемориальная доска (автор, академик Российской Академии художеств РФ Андрей Ковальчук.

Имя Мустая Карима присвоено Международному аэропорту Уфа и круизному лайнеру, четырехпалубному теплоходу «Водоходъ».

В Кабардино-Балкарской Республике на главном Кавказском хребте, в Чегемском ущелье, безымянному пику на высоте 3555 метров присвоено имя Народного поэта;

В почтовое обращение вышла марка, выпущенная в честь 100-летия со дня рождения;

В 2013 году сын, дочь и внук писателя основали Фонд имени Мустая Карима, одна из задач которого поддержка башкирского языка и литературы.

Мы приближаемся к памятнику Мустая Карима на площади Дворца Профсоюзов.

Перед нами - памятник народному поэту Башкортостана Мустаю Кариму художника и скульптора Андрея Ковальчука. Недалеко от памятника находится дом Мустая, где он жил на протяжении 40 лет. Раньше, около 10 лет назад, рядом с его домом находилось частное жилище, в котором снимал угол Мустай, будучи студентом.

Памятник высотой в 6 метров и длиной в 15 метров не может не поражать. Если взглянуть на него, то кажется, будто перед нами сидит оживший Мустай Карим. Он смотрит прямо на нас уверенным, живым и спокойным взглядом. За его спиной кружится каскад страниц из написанных книг. С этих страниц на нас сходят герои его повести «Долгое-долгое детство» [4, https://rb7.ru/]..

В этой скульптуре автор изобразил не только героев повести, но и весь внутренний мир писателя, его переживания и чувства. Кажется, будто ещё мгновение, и М. Карим встанет и пройдёт к любопытным зрителям, проходящим мимо людям. Скульптурная композиция необычно решена не только в плане образов. Все герои скульптуры находятся в бассейне, чьё течение связано с жизнью и её непрерывностью.

Дагестанский поэт Расул Гамзатов сказал о Мустае Кариме следующие слов: «Путь Мустая Карима и в поэзии, и в жизни освещен тем добрым светом, который исходит от лиц людей, из глаз друзей. А в пути его было много горестей и радостей, и он в том и в другом случае достоин их.»

Закончилась наша экскурсия возле памятника, который возведен в честь великого башкирского писателя М.Карима. Вы можете прогуляться самостоятельно по парку и отдохнуть.

Хочу вновь привести слова А.С.Пушкина: «Уважение к минувшему - вот черта, отличающая образованность от дикости».

Подведение итогов экскурсии, ответы на вопросы.

Экскурсовод в течение всей экскурсии читает стихи, либо часть прозы М.Карима, начиная от раннего творчества (с начала экскурсии) и заканчивая поздними произведениями.

Приятных впечатлений. Всего доброго. До свиданья.

ЛИТЕРАТУРА:

1. Карим, М. Сочинения: том IX .-Уфа, Китап, 2018.-520с.
2. Валеев И. Мустай Карим: воин, поэт, гражданин / И.Валеев.- Герои Отечества, 2004.-582 с.
3. Информационно-краеведческий путеводитель «Уфа литературная» [Электронный ресурс].- http://ufalit.csdb.tk/images/logo/ufaliteraturnaia.png (дата обращения:01.10.2019].

4. Памятник Мустаю Кариму в Уфе. [Электронный ресурс].- https://rb7.ru/ (дата обращения 30.08.2019).
5. Валеев И. Воспитание природой /И.Валеев // Табигат .- 2006. -№1.-с.17.
6. Карим, М.Сочинения: в 4-х томах. Т.1. Стихотворения. Поэмы.- Уфа, 1987.-399с.
7. Валеев И. Карим-общественный и государственный деятель//Истоки.-2004.-№42.-с.5.
8. Карим М., Долгая дорога:стихотворения.- Уфа, Китап, 2004г.- 278 с.
9. Мустай Карим.Жизнь и творчество. Фотоальбом (на башкирском и русском языках)-Уфа, Китап,2000.-240с.

© Якупова Е.Р., 2019

***Янбаев И.К.,***
*филол. ф. н., доцент, БДУ Өфө ҡ.*

## МОСТАЙ КӘРИМ ИЖАДЫНДА ТИПИКЛАШТЫРЫУ АЛЫМЫ БУЛАРАҠ ПРОТОТИПТАР

Художестволы әҙәбиәттә, сәнғәттең башҡа төрҙәрендәге кеүек, меңәр йылдар һуҙымында формалашҡан ҡанундар бар. Тик конкрет күренешкә хас булған үҙенсәлектәр аша кешелек йәки халыҡ өсөн дөйөм һәм уртаҡ сифаттарҙы күрһәтә алыу, ябай ғына эпизод арҡылы үтә ҡатмарлы эпик ваҡиғаларҙы сағылдырырға һәләтле булыу, йәғни айырым образ, символ йәки художестволы деталь ярҙамында дөйөм кешелек өсөн хас булған күренештәрҙе һүрәтләү – шул законсылыҡтарҙың иң әһәмиәтлеләренән. Индивидуалләштереү аша дөйөмләштереүгә ынтылыш һәр яҙыусы өсөн мөһим талап булып тора. Шунһыҙ әҙәби әҫәрҙең нәфислеге, уҡыусыға тәьҫире, ижтимағи һәм эстетик тәрбиә вазифаһы, һүрәтләнгән ваҡиғаларға ышандырыу көсө бик самалы. Әҙәбиәт ғилемендә бындай оҫталыҡты *типиклаштырыу* тип йөрөтәләр. Әҫәрҙең художестволылығы һәм сифаты йөкмәтке һәм форманың камил бөтөнлөгөнә бәйләнгән һымаҡ, уның кимәлен күрһәтеүҙә типиклаштырыу ҙа хәл иткес урындарҙы алып тора. Яҙыусының маһирлығы, асылда, шул күренештәр менән баһалана ла инде.

Нәфис әҙәбиәт, дөйөм ҡағиҙәләргә нигеҙләнеүенә ҡарамаҫтан, күп төрлө тормош материалы менән эш итә. Яҙыусы шәхесе лә күп ҡырлы, шул уҡ ваҡытта, индивидуаль күренеш: уның тәрбиәләнеү һәм формалашыу мөхите үҙенә башҡа, тик уға ғына төҫ ижад итеү манераһы һәм алымдары бар, өҫтөнлөк биргән темалары була, ул бөтөн әҙәби төрҙәрҙә эшләмәҫкә, хатта бер генә жанр оҫтаһы булараҡ танылырға мөмкин һ.б. Шунлыҡтан сәнғәттең бөтөн төрҙәрендә лә индивидуалләштереү һәм дөйөмләштереү алымдары, типиклаштырыу формалары күп төрлө була. Әҫәрҙә хәл-ваҡиғаларҙың, кешеләрҙең шәхси сифаттарын дөйөмләштереү – шуларҙың киң таралғаны. “Үҙ заманының, үҙ синыфының үҙенсәлекле яҡтарын айырата тулы сағылдырған шәхестәр булырға мөмкин һәм яҙыусылар уларҙың яҙмышын үҙ әҫәренә нигеҙ итеп алырға; уларҙың эшмәкәрлеген үҙәккә ҡуйып, шуның миҫалында башҡа кешеләргә лә хас сифаттарҙы һынландырып бирергә мөмкин. Әҙәби әҫәрҙең геройы өсөн өлгө итеп алынған бындай реаль шәхесте прототип йәки прообраз тип атайҙар”, - тип яҙа Ким Әхмәтйәнов [4, 65-се бит]. Ғалимдар күҙәтеүе буйынса, бер осраҡта яҙыусы әҙәби типта йәки характерҙа бер социаль ҡатламға ҡараған халыҡ төркөмөнөң һыҙаттарын “һығып”, дөйөмләштереп бирергә мөмкин; икенсе осраҡта тарихи йәки замандаш шәхестең айырым сифаттарын ғына нигеҙ итеп алырға хоҡуҡлы; өсөнсө осраҡта реаль кешеләрҙе үҙҙәренең исемдәре менән тасуирлауы ихтимал [3, 92-се бит]. Әммә *прототип* төшөнсәһе баштараҡ кеше һәм геройға ҡарата ҡулланылһа ла, тора-бара уның йөкмәтке

сиктәре байтаҡ киңәйә төштө: *әҫәр персонажының ғына түгел, айырым эпизод йәки ваҡиғаның, идея, фекер һәм хис-тойғоның да прообразы булыуы ихтимал.* Ниндәй генә бойондороҡһоҙ, хөр фекерле, фантазияға бай булмаһын, яҙыусы ижады прототипһыҙ булмай. Бында, моғайын, бер мөһим иҫкәрмәне күҙ уңында тоторға кәрәк: "һүҙ рәссамы тарафынан прототиптарҙы файҙаланыу характеры беренсе нәүбәттә яҙыусының йүнәлеше, жанры, ижади хосусиәтенә бәйләнгән" [2].

Шуны ла белдәләргә кәрәк: ҡайһы бер осраҡта яҙыусылар, әҫәрҙә ҡуйылған төп маҡсаттан сығып (мәҫәлән, юмористик йөкмәтке, сатирик пафосты көсәйтеү йүнәлешендә), үҙҙәре белгән, хатта яҡшы аралашып йәшәгән замандаштарының образына мөрәжәғәт итеп тә айырым сифаттарын, характер үҙгәлектәрен бөтөнләй башҡаса, уны һис тә үҙенә хас булмаған ҡиәфәттә бирергә тырышалар. Һүҙ, әлбиттә, тик синфилыҡ, партиялылыҡ принциптары хөкөм һөргән, яҙыусылар өсөн төп ижад методы социалистик реализм булған совет осоро әҙәбиәте хаҡында ғына бармай. Айырыуса үткән быуаттың 20-50-се йылдарында геройҙарҙы "беҙҙеке" һәм "дошман"ға айырып, аҡ йәки ҡара төҫтәрҙә һүрәтләү менән бергә, объектив ысынбарлыҡтан ситләшеү ғәҙәти күренешкә әйләнгәйне, былары иһә – идеология һөҙөмтәһе.

Прототиптарҙың төрлө сығанаҡлы булғандарын айырыуса Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәрим ижадында күпләп осратабыҙ. Билдәле яҙыусы тарафынан тыуҙырылған персонаждарҙың күптәре прототиптарының биографик һыҙаттарына таянып эшләнгән, әлбиттә. Әгәр ҙә әҙип үҙенең "Ғүмер миҙгелдәре" яҙмаларында: "Минең зиһенем хәҙер бик алыҫта ҡалған ана шул йылдарҙа осраған, күргән, аралашҡан меңәр-меңәр кеше араһынан изге күңелле игелеклеләрен берәм-берәм сүпләй", - ти икән, тап шул киләсәктә әҫәрҙәрендә типиклаштырасаҡ геройҙарын да күҙ уңында тота булыр [1, 7-се бит]. Үҙе яҙыуынса, улар М.Кәримдең тормошона, ижадына һәм яҙмышына ҡағылып үтә, йоғонто яһай һәм таяныс була. Шағир хәтеренә һеңгән йәки көндәлектәрендә теркәлеп ҡалған замандаштарының тере образдарын әҫәрҙәрендә йыш кәүҙәләндерә. Әйткәндәй, М.Кәрим көндәлектәрен Муром ҡалаһында, хәрби элемтә училищеһында уҡыған сағында, 1941 йылдың 10 ноябренән башлап яҙырға тотона. Шул яҙмаларында уҡ үҙенең яҡын дуҫтарының береһе Юлдашевты буласаҡ романының бер геройы итеп күрә. "Юлдаш ул минең геройым булыр. Ул – характерлы кеше. Башҡаларға оҡшамаған. Суровый, бик суровый кеше", "...бик үҙенсәлекле, тыштан ҡырыҫ әҙәм ине..., оҙонса ҡаҡса кәүҙәле, етеҙ хәрәкәтле, үткер ҡарашлы дала башҡорто ине ул ", тип хәтерләй уны. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, был егет һуғышта һәләк була. Роман тыумай ҡала, әммә 1942 йылда госпиталдә сағында яҙылған "Декабрь йыры" поэмаһының берҙән-бер геройы Юлдаштың прототибы – автор менән бергә педагогия институтын тамамлаған, "иң зирәк һәм дыуамал заттарҙың береһе" Фәйзи Юлдашев.

Һуғыштан һуң яҙылған "Туй дауам итә" тигән тәүге пьесаһының персонаждарынан Фәйзи исеме лә шул егеттең иҫтәлеген йөрөтә. Был пьесаның бөтөн тиерлек персонаждарының прототиптары бар, әҫәр сюжеты ла автор үҙе кисергән хәл-ваҡиғаларға туранан-тура мөнәсәбәтле. Шағир Мәлихтең прототибы Мәлих Харисов икәнлеге аңлашыла, Заһир Кинйәкәевтеке – йәш шағир Сабир Кинйәкәй икән. Һәр береһе хаҡында автор йылы иҫтәлектәр йөрөтә, уларҙың шиғриәте, шәхесе хаҡында бик юғары фекерҙә була, һуғыштан һуң яҙыласаҡ хәтирәләрендә матур һүҙҙәр менән ҡат-ҡат телгә алып тора. Баҫалҡы һәм күндәм Сабир Кинйәкәй менән М.Кәрим һуңғы тапҡыр 1944 йылдың яҙында Одессала осраша. Уның һуңғы шиғырҙарын ҡулына ала, үҙе хеҙмәт иткән "Совет суғышсыһы" газетаһында баҫтырып та сығара. Әҫәрҙәге йор һүҙле батыр һалдат Ямалетдин Мөфтахов – Малаяҙ ауылы кешеһе Ямалетдин Мифтахов, ә Сәлих – фронтовик-яҙыусы Сәләх Кулибай. Башҡа персонаждарҙың да әҙип менән аралашҡан,

хеҙмəттəш булған реаль кешелəргə бəйлəнеше ҙур. Мəҫəлəн, ҡаҙаҡ һалдаты Сəрсенбаев та М.Кəрим менəн фронт газетаһының татар телле редакцияһында бергə хеҙмəт иткəн шағир Əбү Сəрсенбаевҡа килеп тоташа.

Ҡайһы бер шəхестəр Мостай Кəрим ижадында бер-нисə ҡабат күренеп ҡала. Ғайса Хөсəйенов халыҡ шағиры хаҡындағы монографияһында шундай мəғлүмəт бирə: "Ямалетдин Мифтаховты прототип итеп М.Кəрим уртаҡ исемдəге поэмаһында Үлмəҫбай образында яу йылдарында уҡ бер тапҡыр уңышлы файҙаланғайны инде. Күрəһең, Ямалетдин йор һүҙле, шаян холоҡло батыр кеше булған. Пьесала ла ошондай сифаттарында кəүҙəлəндерелгəн" [4, 165-се бит]. Əҫəрҙə фольклор геройҙарына тиңдəш гүзəл сифаттар менəн һүрəтлəнгəн Үлмəҫбай – йыйылма образ, уның портрет сығанаҡтары күп. М.Кəрим һуғыш йылдарында ундай йəш, ҡаһарман йөрəкле, сос, йор һүҙле егеттəрҙе байтаҡ осрата. Мəргəн атыусы, "шаян холоҡло ҡыйыу егет" Хəбибулла Разетдинов та шулар тоҡомдан. "Шундай мəргəнлек һəм таҫыллыҡ Үлмəҫбайҙың да ҡылығы бит", - тип яҙа Ғ.Хөсəйенов [4, 67-се бит].

Элемтə взводы командиры кесе лейтенант М.Кəримовтың хəрби юлында осраған тағы ла бер зат, "əллə ниндəй шарттарҙа ла ауыҙынан тупаҫ һүҙ сыҡмаҫ", "күңел сафлығы йөҙөндə балҡып торған", "ҡырҡтан байтаҡ өҫтə, ҡаҡса сал ир", йəғни комиссар Зубков та, бик типик герой булып сыға. "Ярлыҡау" повесында күренеп ҡалған комиссар Зубков – тап шул кеше. Был күркəм кеше лə яу яландарында ятып ҡала. Үҙенең яҙмышына туранан-тура ҡатнашлыҡ иткəн офицер хаҡында М.Кəрим былай тип хəтерлəй: "Əле алғы һыҙыҡҡа ингəнсе дезертирлыҡта ғəйеплəнгəн ғəйепһеҙ һалдатты атыуҙан ул минең взводты ҡотҡарҙы. Мине əрлəгəн булды, ə ҡотҡарҙы. Ғүмерлек выждан ғазабынан азат итте". Повеста ошо ауыр вазифаны башҡарған Байназаров йөҙөндə беҙ М.Кəримдең үҙен күрəбеҙ. Любомир Зух образы һəм уның менəн бəйле трагик ваҡиғалар ҙа реаль нигеҙҙəн үҫеп сыға, сығанағы – атыуға хөкөм ителгəн əлеге һалдат яҙмышы. Яҙыусы Австрияның баш ҡалаһы Вена өсөн барған һуғыштарҙа ла ҡатнаша, мəшһүр опера театрында снаряд ярылыуынан янғын сыҡҡас, совет һалдаттарының уны ҡотҡарырға ташланыуының тере шаһиты була. Был күренештəр ҙə əҫəрҙə күпмелер сағылыш тапҡан.

1942 йылдың декабрендə Тулала госпиталдə ятҡанда үҙен ихлас тəрбиəлəгəн Силəбе ҡыҙы, "ҙур зəңгəр күҙле йəш кенə санитарка" ла ярайһы уҡ эҙ ҡалдыра шағир күңелендə. Байтаҡ ваҡыттан һуң, ошо ҡыҙ баланы хəтерлəп, "Ул ҡыҙ мине ташлап китмəне" тигəн шиғырын яҙа. Бер минаның бер ярсығы М.Кəримдең йөрəк аҫтынан үтеп уны ҡаты яралаһа, икенсеһе иһə дуҫы Фоминды һəлəк итə. Был ваҡиға тулыһынса, бөтөнлəй үҙгəрешһеҙ тиерлек уның башҡа əҫəрендə һөйлəнелə:

*Икебеҙгə тейҙе бер юлы*
*Бер минаның ике ярсығы.*
*Береһе ҡалды сержант Фоминда,*
*Текə яр ситендə – ҡəберҙə,*
*Икенсеһе – минең тəнемдə.*

М.Кəримдең "Оҙон-оҙаҡ бала саҡ" повесының инеш өлөшөндə ҡаты яраланған авторҙың яу яланында яңғыҙ имəн янында ятыуы хаҡында хикəйə ителə. Был эпизод та уйлап сығарылмаған, əлеге Мценск янындағы ваҡиғалар менəн бəйлəнешле.

"Ауыл адвокаттары" һымаҡ уҡ, был повесть тə прототиптарға бай булған əҫəрҙəрҙəн. Уларҙың һəр береһе тураһында ентеклəп һөйлəп сығыу беҙҙең маҡсатҡа инмəй. Шулай ҙа, авторға иң яҡын булғандарынан, Оло инəйҙəн ҡала, моғайын Əсғəт образылыр. Сөнки ул үтə үҙенсəлекле тəбиғəте, ҡабатланмаҫ натураһы менəн башҡа персонаждарҙан айырылып тора. Бала саҡ дуҫы Искəндəр малайы Əсғəт тураһында

автор бик яратып та, һоҡланып, ғәжәпләнеп тә тасуир итә: “Әйберҙәрҙең тылсымлы мәғәнәһен иҫ киткес итеп аңлай, күҙе менән күргәнде йәки ҡолағы менән ишеткәнде түгел, үҙенең хыялына, фараз итеүенә тап килгәнде шәйләй ала ине ул” [1, 177]. Хыялдарға ифрат бай, шиғри күңелле егеттең ғүмере шулай уҡ һуғыш яландарында өҙөлә.

Шул уҡ әҫәрҙә үҙенең үтә ҡанһыҙлығы һәм кешелекһеҙлеге менән айырылып торған, иҫәпһеҙ енәйәт ҡылған Ярулла ҡараҡ образы бар. Ул судһыҙ-ниһеҙ, бөтөн халыҡ алдында, үҙенең енәйәтен йәшереү маҡсатында, йәмәғәт аҡсаһын урлауҙа ғәйепләнгән кооператив етәксеһе коммунист Сәмиғулланы үлтереп ташлай. Был ҡот осҡос фажиғәнән Сәмиғулланы Йомро Талип та, уны рәсми хөкөм ҡулына тапшырыу яғында торған йәштәше Мәрәһим дә ҡотҡара алмай, ә силсәүит Ташбулат – теләмәй ҙә. Ошо ҡанлы ваҡиғалар ҙа ысынбарлыҡтан алып яҙылған. Был хаҡта әҙип осетин яҙыусыһы Нафи Джусойты менән әңгәмәләшкәндә, әле повесть яҙылып бөтөлмәҫ элек, телгә алып китә [1, 553]. “Минең китабым – һоҡланыуҙар һәм тетрәнеүҙәр, бер һүҙ менән әйткәндә, кешеләр менән аралашыу һөҙөмтәһендә кисергән тетрәнеүҙәр тураһында”, - ти автор. ”Мин, мәҫәлән, ғүмер буйы ат ҡарағы булған, кешеләргә яуызлыҡ килтергән бер кешене күрһәтәсәкмен – мин уны беләм инем”, - тип өҫтәй. Реаль тормошта ла шулай булып сыға. М.Кәрим бер саҡ ауыл зыяратына ингәнендә әлеге кешене осрата, һөйләшеп китәләр. Ул 1924 йылда бөтөн мир менән йәмәғәт аҡсаһын урлаған бер кешене үлтереүҙәре, ысынында иһә аҡсаны үҙе урлауы, гонаһтарының күп булыуына ҡарамаҫтан, һаман да улар өсөн яуап тотмауы, бик күп йылдар уҙһа ла тыныслыҡ таба алмауы хаҡында һөйләй. Ни өсөн шундай кешеләрҙе геройҙары сифатында һайлауын да аңлата автор: “Мин китапҡа кешегә уның төп ғүмер миссияһы хаҡында иҫенә төшөрөү өсөн ҡайһы бер реаль ваҡиғаларҙы тупланым”.

Драматургтың эшмәкәрлеге театр сәнғәте менән тығыҙ бәйләнгән, ижад емеше сәхнәгә күтәрелгәндә генә ысын мәғәнәһендә тулы ҡанлы әҫәр рәүешен ала. Был осраҡта инде беҙ яҙыусы, режиссер, актер, композитор һәм бүтән һөнәр эйәләренең авторҙашлығын күҙ уңында тотабыҙ. Шунлыҡтан яҙыусының үҙ геройының прототибына булған ҡарашы бер төрлө, режиссерҙыҡы, сәхнә биҙәүсенеке үҙенсә, актер башҡарыуында бөтөнләй башҡа төҫ алырға мөмкин. Ябай ғына итеп әйткәндә, пьеса үҙе үк спектакль өсөн прототип сифатын үтәй башлай. Был йәһәттән Мостай Кәримдең “Йырланмаған йыр” исемле драмаһы буйынса әҙерләнгән спектакль хаҡында әйткәндәре ҡыҙыҡлы. Әҫәрҙең төп образдарының береһе – партияның ҡала комитетында икенсе секретарь булып эшләгән Дүсмәт Ярлыҡапов, ул “ыңғай образдарҙан түгел”. “Йырланмаған йыр” – партия етәксеһенә тәнҡит белдереүсе драма”, - ти автор үҙе [1, 391]. Әгәр ҙә М.Кәрим был типик образды тыуҙырғанда бөтөн ил кимәлендә оло бәләгә әүерелә башлаған бюрократик системаның боҙоҡлоғон фаш итеүҙе маҡсат итһә, Ярлыҡапов ролен башҡарыусы Арыҫлан Мөбәрәков конкрет бер шәхесте күҙ уңында тотҡан. Мостай Кәрим раҫлауынса, “бөтә торошо, йөрөшө, ултырыуы, тороуы, башын бороуҙары, күҙлек өҫтөнән ҡарауҙары, хатта ҡул хәрәкәттәре торғаны менән КПСС-тың Өфө ҡала комитетының беренсе секретары Мәрүән Йәнгирович Йәнгировтыҡы” булып сыға [1, 271-се бит]. Шулай итеп, яҙыусы үҙе ныҡ хөрмәт иткән яҡшы кешенең шәхсиәте сәхнәлә актер башҡарыуында күләгәлә ҡалдырыла.

Совет осоронда әҙәбиәт тә, киң мәғлүмәт саралары ла дәһшәтле идеологик ҡорал булыуы сер түгел. Сәнғәттең һәм мәҙәниәттең бөтөн йүнәлештәрендә лә партияның етәкселек роле ҙур булды. Шуның өсөн һәр бер яңы әҫәр киң йәмәғәтселеккә ентекле тикшерелеп, абруйлы, вазифалы кешеләрҙең фатихаһы аша еткерелде. Әҫәрҙә коммунистар партияһы, ил етәкселәре эшмәкәрлегенә тел тейҙерелмәйме, алып

барылған рәсми сәйәсәт дөрөҫ яҡтыртыламы-юҡмы – бөтөн йәһәттән цензура үткәс кенә халыҡ хөкөмөнә сығарылыр ине. Саҡ ҡына шик-шөбһә булған осраҡта айырым әҫәрҙәрҙең яҙмышы билдәһеҙлеккә дусар ителде. Был йәһәттән Мостай Кәримдең “Ташлама утты, Прометей!” трагедияһы яҙмышы ла характерлы. Уның тарихын драматург былай тип тасуирлай: “ Ташлама утты, Прометей!”ҙы үҙебеҙҙең театрҙа байтаҡ ҡуймай тоттолар. Ҡазанда премьера үткәс кенә икеләнеүҙәре таралды. Зевс кем: Брежневмы, әллә Шакировмы, ниңә тәнҡит туранан-тура атап әйтелмәй, тиеүселәр булды. Хатта ошаҡ яҙҙылар. Хәҙер генә көлкө тойола. Күп йыллыҡ үлән йәки кукуруз сәсеү проблемаһын хәл итергә тырышҡан әҫәрҙәр фонында быңдай уй тыуыу ғәжәп түгел” [1, 391-392-се биттәр]. Ғөмүмән, республикабыҙҙың ул ваҡыттарҙағы етәкселәре С.Д.Игнатьев, З.Н.Нуриев, М.З.Шакиров, Ф.З.Зәғәфуров кеүек оло шәхестәр М.Кәримдең яҙмышында бик ҙур ыңғай роль уйнай. Һәр береһен ул бөтөн һәйбәт яҡтары һәм кәмселектәре менән объектив ҡабул итергә тырыша, йыш ҡына уларҙың башҡорт әҙәбиәтенә лә, шәхсән үҙенә лә кире йоғонто яһамауҙары хаҡында белдерә.

Халыҡ шағирының төрлө жанрға ҡараған әҫәрҙәрендә үткәрелгән фекерҙең, идеяның, хатта интим, үтә нескә хис-тойғоларҙың да прототиптарын күрә, тәүсығанаҡтарын һиҙемләй алабыҙ. Уларға миҫалдарҙы күпләп табырға мөмкин булыр ине, моғайын. Мәҫәлән, түбәндәге юлдарҙа М.Кәрим үҙенең ҡатыны Раузаға тәрән ихтирам һәм мөхәббәт йөрөтөүе хаҡында ошолайыраҡ белдерә:

*Мөхәббәттән уңдым. Ышанысты*
*Өҫтөн ҡуйҙы барлыҡ анттарҙан.*
*Шик белдереп, үҙен кәмһетмәне,*
*Хатта шикләнерҙәй саҡтарҙа.*
[1, 408-се бит].

Был юлдарҙы ятраҡан кешеһенә бағышлау тип кенә атамаҫ инек, әлбиттә. Бында бер ниндәй ҙә яһалмалылыҡ һәм уйҙырма юҡ. Ә яҙыусының “ижади кәйефен” ғүмер буйы күтәремләп килгән, әҫәрҙәрен беренсе булып ҡабул иткән, көндәлек тормошта уға һәр саҡ таяныс булып йәшәгән ҡатыны хаҡында һүҙ бара.

М.Кәримдең “Европа-Азия” шиғырҙар циклы үткән быуаттың илленсе йылдарында милли әҙәбиәттә жанр йәһәтенән оло яңылыҡ булараҡ ҡабул ителгәйне. Унда осор шиғриәтендә актуаль булған бөтөн темалар үҙәкләшеп китә. Башҡорттоң тарихи яҡтан ике ҡитға мәҙәниәте, яҙмышы менән тығыҙ бәйләнешле икәнлегенә баҫымлап, әҙип: “Мин үҙ халҡымдың поэзияһы Көнсығыш поэзияһының төҫөн, иҫерткес тәмен, тыныс аҡылын, Көнбайыш поэзияһының ҡәтғи тормош дөрөҫлөгөн, революцион өндәүсәнлеген, актив зиһенен үҙләштереүен уйлайым... Ошо фекерҙәр миндә "Ев“опа-Азия” тигән китапты яҙа башлау теләген уятты”, - тип яҙһа ла, әҫәрҙең атамаһының ғына түгел, идея йүнәлеше лә Мәжит Ғафуриҙың ике континенттың диалог-бәхәсенә ҡоролған “Аурупа-Азия” шиғырына яҡын икәнлеген фаразларға була.

Дөйөм кешелек өсөн хас булған мөҡәддәс тойғолар, уртаҡ мәҙәниәт, тарихи яҙмыш һәм оҡшаш менталитет әҙәбиәттә йыш ҡына типик күренештәрҙе, образ һәм фекерҙәрҙе тыуҙырыуға килтерә. Шул уҡ ваҡытта бөйөк шағирҙарҙың поэтик фекерҙәре башҡа милли әҙәбиәттәрҙә билдәле бер ауаздашлыҡ хасил итеүсән. Быңдай оҡшашлыҡтарҙы һәм тәбиғи йоғонтоно, фекер осошон беҙ донъя әҙәбиәте менән алыш-бирештә торған һәр әҙип ижадында ла тиерлек күҙәтәбеҙ. Мәшһүр венгр шағиры Эндре Адиҙың китаптарын әҫәрләнеп уҡыған, күңеленә уның “ҡаһарманлығын, һыҙланыу һәм өмөттәрен” ҡабул иткән башҡорт шағиры оло остазының үҙ ватаны Венгрияға бағышланған шундай юлдарға иғтибар итә:

*Сочится кровь из наших пальцев,*

*Когда коснемся мы тебя.*

“Тәү тапҡыр был юлдарҙы уҡығанда һинең шиғырыңа ҡағылыуҙан минең бармаҡтарымдан ҡан тама төҫлө күренде. Шул уҡ ваҡытта минең ҡолаҡтарымда быуаттар төпкөлөнән исемһеҙ шағирҙың – минең йыраҡ ырыуҙашымдың, тауышы яңғырап китте:

*О Урал мой, когда я срезаю лозу*
*в твоих лесах,*
*То кровь батыров стекает*
*по лезвию ножа”,* -

тип яҙа Мостай Кәрим [1, 510]. Дөрөҫ, бында конкрет прототип хаҡында һүҙ бармай, ә халыҡтарҙың яҙмыш оҡшашлыҡтары оҡшаш йырҙар тыуҙырыуы тураһында әйтелә. Үрҙәге фактҡа беҙ тик айырым әҙәбиәттәге поэтик образдарҙың һәм деталдәрҙең донъя һүҙ сәнғәте йәки милли фольклорҙа аныҡ “шәжәрәгә” эйә булыуының тәбиғи хәл икәнлеген тағы ла бер тапҡыр раҫлау өсөн генә мөрәжәғәт итәбеҙ.

Мостай Кәрим әҫәрҙәре өсөн прототип һайлау эшенә яуаплы ҡарай, төп геройҙарын тасуирлауға нигеҙ булған типик шәхестәрҙең бөтөн яҙмышын, булмышын төпсөп өйрәнергә, әҙәби зауығына яуап бирерҙәйҙәрен генә хушһына. Үҙе әйткәненсә, кешеләрҙең “эшенә һәм шәхесенә ҡарата күптән сығарылған рәсми хөкөм” менән генә мөрхәтһенмәй, ә үҙенең мөстәҡил ҡарашын булдырыуҙы принципиаль мәсьәләләрҙән иҫәпләй. Тап шундай аныҡ позицияла булыуы, “әҙәбиәттең хөкөмө яуаплы унық” тигән инанысы уның әҫәрҙәренең, ҡайһы осорҙо һүрәтләүенә ҡарамаҫтан, бөгөн дә уҡымлылығын, ышандырыу көсөн, художество-эстетик әһәмиәтен һәм үлемһеҙлеген тәьмин итә. Был йәһәттән М.Кәримдең алтмышынсы йылдар ижадынан түбәндәге факт күргәҙмәле булыр. Ул саҡ әҙип Башҡортостандағы граждандар һуғышы осоро тураһында роман яҙырға уйлай, материалдар өйрәнә. “Был әҫәрҙәге бер образдың, әйтергә кәрәк, төп образдың прототибы Зәки Вәлиди булырға тейеш ине. Шолоховтың Григорий Мелеховы кеүегерәк, Иблес ҡеүәтле әҙәм, үрһәләнеүсе, фажиғәле йән эйәһе, ҡыҫҡаһы – үтә ҡатмарлы шәхес итеп күҙ алдына килтерергә тырыштым мин уны. Билдәле, дошман итеп таныным.”, - ти М. Кәрим “Сәғәт ярым ғүмер” исемле хәтирәһендә [1, 308]. Ҙур ҡоласлы әҫәр яҙыу ниәте ғәмәлгә ашмай ҡала. Эш сәйәсәт елдәренең башҡасараҡ иҫә башлауында ғына түгел. Әллә күпме йылдар инде сит илдәрҙә йәшәп яткан З.Вәлидиҙең ғилми хеҙмәттәре, фәлсәфәүи ҡараштары, үҙ заманына биргән баһалары яҙыусы өсөн ҡараңғы – шул мәсьәләләр әлеге хыялдарын тормошҡа ашырыуҙы тотҡарлай. Асылда был – һүҙ оҫтаһының ижадҡа, үҙ-үҙенә булған талап һәм оло яуаплылығы билдәһе ул. Әгәр ҙә роман туҡһанынсы йылдарҙа, башҡорт милли хәрәкәте етәксеһе һәм бөйөк ғалим Зәки Вәлидиҙең исеме тулыһынса халыҡҡа ҡайтарылған осорҙа яҙылһа, сифаты һәм ҡиммәте буйынса әҙиптең тарихи теманы яҡтыртҡан һәм боронғолоҡ рухын йөрөткән “Ай тотолған төндә”, “Ташлама утты, Прометей!”, “Салауат” трагедияларынан бер ҙә ҡайтыш булмаҫ ине, беҙҙеңсә.

С.Юлаев, М.Аҡмулла, З.Вәлиди, Ш.Бабич, Һ.Дәүләтшина, Р.Ғарипов кеүек мәшһүр әҙиптәребеҙ күптән инде милли әҙәбиәтебеҙҙә төрлө жанрҙағы күп әҫәрҙәрҙә үҙәк геройҙар өсөн прототип булып сығыш яһай. Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәрим дә шулар рәтендә торған яҙыусы. Уның образы рус әҙәбиәтендә урын алыуы менән исеме һимматлерәк тә, беҙҙеңсә. Күренекле рус шағиры, М.Кәрим шиғырҙарын тәржемә итеүселәрҙең береһе Михаил Дудин бер нисә тапҡыр Башҡортостанға килә, дуҫының тыуған ауылында була, ул тыуып үҫкән тәбиғәт менән хозурланып йөрөй. Был юлы ул “Таштағы сәскәләр” шиғри йыйынтығын тәржемә итеү уйы менән килә. Шул һөйләшеүҙәрҙең береһендә ул М.Кәримгә бер яңы поэма

тамамлауы тураһында хәбәр итә һәм былай тип өҫтәй: “Мин унда һинең ташта үҫкән сәскәләр тураһындағы шиғырыңдың эстәлеген һөйләп бирҙем. Эш шиғырҙа түгел. Эш башҡа нәмәлә. Белмәйем, нисек ҡабул итерһең. Беҙҙең ғөрөф-ғәҙәт буйынса, мин һине эҙәрлекләп йөрөгән үлемде яҙлыҡтырырға, алдарға теләнем. Әйҙә, ул һине үлгән икән тип уйлаһын. Минең поэмала һин һәләк булаһың” [1, 499-сы бит]. Михаил Дудин әлеге әҫәренән өҙөк тә уҡып ишеттерә:

*Звезда, как слеза, к горизонту стекла,*
*А мы хоронили Карима.*
*Был воздух прозрачней и чище стекла,*
*А мы хоронили Карима.*
*Незримые трубы трубили зарю,*
*А мы хоронили Карима.*
*Сверкали снега янтарем к янтарю,*
*А мы хоронили Карима.*

Аңлашылыуынса, башҡорт шағирының “Таштағы сәскәләр” шиғыры М.Дудиндың ҙурыраҡ әҫәре яҙылыуына сәбәпсе булһа, уның авторы үҙ исеме менән, үҙгәрешһеҙ-ниһеҙ алынып, поэма геройы булып киткән.

Бөгөн, бөйөк яҙыусыбыҙҙың йөҙ йыллығын билдәләгән көндәрҙә, уның ижады буйынса яңынан яңы сәхнә әҫәрҙәре ҡуйыла, нәфис фильмдар төшөрөлә, әҙәби әҫәрҙәр донъя күрә. Бөтөн XX быуат башҡорт әҙәбиәте һәм мәҙәниәте йөҙөн билдәләгән феноменаль замандашыбыҙ, талант һәм кешелеклелек символы, ижади фиҙәкәрлек һәм ҡаһарманлыҡ өлгөһө Мостай Кәрим шәхесе бөгөн үҙе үк күп әҙәби геройҙар өсөн прототипҡа әүерелде, әҫәрҙәре иһә күп ҡаҙаныштарға рухландырыр оло ҡиммәттәр сығанағына әйләнде.

ӘҘӘБИӘТ:


1. Кәримов М. Әҫәрҙәр (биш томда), 5-се том: Иҫтәлектәр, мәҡәләләр, телмәрҙәр, әңгәмәләр.-Өфө: Башҡортостан “Китап” нәшриәте, 1999.-592 бит.
2. Книгин И.А. Словарь литературоведческих терминов. Лицей, 2006.
3. Тимофеев Л.И. Краткий словарь литературоведческих терминов. Книга для учащихся. Издание второе, доработанное / Ред.-составители: Л.И.Тимофеев, С.В.Тураев.-М.: Просвещение, 1985.
4. Хөсәйенов Ғ.Б. Мостай Кәрим: Шәхес. Шағир. Драматург. Прозаик. – Өфө: Башҡортостан “Китап” нәшриәте, 1994.- 416 бит.
5. Әхмәтйәнов К.Әҙәбиәт теорияһы. Үҙгәрешле 3-сө баҫма.-Өфө: Китап, 2003.-392 бит.


© Янбаев И.К., 2019

***Янбаева Э.И.,***
*2-се һанлы башҡорт лицейының*
*башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы, Өфө ҡ.*

## МОСТАЙ КӘРИМДЕҢ "БЕҘҘЕҢ ӨЙҘӨҢ ЙӘМЕ" ӘҪӘРҘӘРЕНДӘ ҒАИЛӘ ҺӘМ ТУҒАНЛЫҠ МӨНӘСӘБӘТТӘРЕ

"Ғаилә, туғанлыҡ" һүҙҙәре беҙҙең барыбыҙ өсөн дә күңелгә яҡын, изге һүҙҙәр. Ғаилә тәрбиәһе кешенең холҡона, тәбиғәтенә ҙур йоғонто яһай. Нәҡ бына ғаиләлә баланың әхлаҡи үҫеше башлана. Әхлаҡ нигеҙҙәре балаға ата-әсәләрҙән - иғтибарлыҡ, мәрхәмәтлелек, эскерһеҙлек төшөнсәләре аша бирелә. Был тойғолар Мостай Кәримд әҫәрҙәрендә лә киң сағылыш тапҡан. Уның әҫәрҙәрендә ғаилә, туғанлыҡ хистәре мөһим роль уйнай, тип әйтһәк тә һис яңылышмабыҙ. Сөнки уның балалар өсөн яҙылған әҫәрҙәре бик күп. Мәҫәлән, "Беҙҙең өйҙөң йәме", "Өс таған", "Оҙон-оҙаҡ бала саҡ" повестарын, "Әлфиә хикәйәләре" һәм башҡа бик күп әҫәрҙәрен телгә алып китергә мөмкин. Уның әҫәрҙәрендә әсәй кеше ғаиләлә генә түгел, бөтә тормошта төп урынды алып тора. Мәҫәлән, "Беҙҙең өйҙөң йәме" повесында Оксананың атаһы Йәмилдәрҙә ҡунаҡта булған саҡта әсәһенең "Өс көн төш кеүек кенә үтеп китте" тигәнен ишеткәс, үҙенән:

- Әсәйем әйткәс, тап шулай булғандыр, - тип өҫтәп ҡуя. Сөнки ул баланың күңеле менән әсәһенең һәр саҡ хаҡлы булыуына иманы камил. Был тормошта ла шундай хәлдәр осрай, ике бала һүҙгә килешһә балаларҙың береһе әсәһенең һүҙен телгә алып:

Әсәйем шулай тип әйтте, - тип үҙенең хаҡлы икәнлеген иҫбатлап ҡуя. Һәм уның һүҙҙәрен берәү ҙә кире ҡаға алмай. Ошондай әсә менән бала араһындағы изге тойғолар баланы ысын кеше итеп тәрбиәләүҙә ҙур роль уйнай. Мостай Кәримдең әҫәрҙәрендә лә ошондай әсә һәм бала араһындағы нескә хистәр сағыу төҫтәр менән тасуирлана. Әсә кешенең һөйөүе балаларының күңелендә лә яҡты эҙ ҡалдырмай ҡалмай. Йәмил әле бала ғына булһа ла, туғандарына ҡарата иғтибарлы һәм ихтирамлы. Тәүҙә ул "бәләкәй туғаным булһа ине" тип хыяллана. Оксананы әсәһе алып ҡайтҡас, шатлығынан ни эшләргә белмәй. Ул һеңлеһен бер туғаны кеүек күреп ярата. Хатта, көсөнән килмәһә лә, ҡыуанысынан уны күтәреп алырға маташа. Бөтә булған уйынсыҡтарын уның алдына теҙеп ҡуя. Тағы ла нисек ҡыуандырырға белмәй һикергеләп ала. Уның был ҡыланышынан Оксана тәүҙә ҡурҡып ҡала, ләкин Йәмилдең ихласлығын күреп, үҙе лә тиҙ генә уға ылығып китә.

Мостай Кәримдең "Беҙҙең өйҙөң йәме" повесында хәл-ваҡиғалар беренсе заттан - Йәмил исеменән һөйләнә. Бигерәк тә уның хис-тойғолары, балаларға хас уйланыуҙары менән әҫәрҙең йөкмәткеһе байытыла. Йәмил өсөн донъяла иң изге кешеләр – әсәһе, атаһы һәм өләсәһе. Ул ошо иң яҡшы кешеләренең тәрбиәһендә үҫә, был донъяға ҡарашы улар ярҙамында формалаша. Бала ғына булһа ла яҡшы менән насарлыҡты айырырға өйрәнә. Әсәһе Украина ҡыҙы Оксананы үҙҙәренә алып ҡайҡас, уны шул тиклем яҡын күрә. Хатта һеңлеһе йоҡлап киткәс тә ул уның янынан китмәй. Үҙе Оксананың карауатына башын терәп йоҡлап китә. Кескәй Йәмилгә бәләкәйҙән үк туғанлыҡ хисе ят түгел. Бер саҡ эңер мәлендә Оксана менән икәүҙән-икәү генә өйҙә уйнап ултырғанда, ҡапыл көслө ел сығып, тәҙрә ҡапҡастары "шарт" итеп ябыла. Оксана ҡурҡып китә. Йәмил үҙе ҡурҡһа ла, йүгереп барып ҡулына уйынсыҡ мылтығын алып, "фашистар килһә атам", тип һеңлеһен тынысландыра. Дуҫтары менән уйнаған саҡта ла һеңлеһен гел генә ҡарап алып йөрөй. Повеста шулай уҡ Оксананың яңы башмағы менән килеп сыҡҡан ваҡиға ла Йәмилде вайымһыҙ ҡалдырмай. Яңы башмаҡтың һыңары һал өҫтөндә

ағып киткәс, ул бар донъяһын онотоп уның артынса ярҙан йүгерә. Юлына үҙенән дә ҙур уҫлаптай уҫал эт килеп сығып уның юлын быуғанда, үҙен уйламай, ә нисек тә һалды тиҙерәк ҡыуып етеү, башмаҡты алыу була теләге. Уйлап ҡараһаң, эш яңы башмаҡтарҙа ла түгел. Ә һеңлеһе өсөн тырыша ул. Уның өсөн беренсе урында үҙе түгел, ә һеңлеһен ҡайғыртыу хәстәре.

Шулай итеп, Мостай Кәримдең ижады туғанлыҡ хистәре менән ныҡ бәйләнгән. Унда ата-әсәйеңә, яҡын туғандарыңа ғына түгел, күршеләреңә, ауылдаштарыңа һәм сит милләт вәкилдәренә лә мөхәббәт кеүек изге тойғолар ярылып ята. Ә иң мөһиме – яҙыусының һәр әҫәрҙәре тыуған илгә һөйөү менән һуғарылған. Уның әҫәрҙәре ябай, аңлайышлы тел менән яҙылған, халыҡсан, һәр уҡыусыны ҡыҙыҡһындырып, үҙенә тартып тора. М.Кәрим әҫәрҙәрендәге һәр эпизод кинәйәле, уҡыусылар өсөн фәһем бирерлек, тәрән фекерле, тәрбиәүи йөкмәткеле. Шуға күрә лә беҙҙең өсөн уның әҫәрҙәре бик әһәмиәтле һәм ҡыҙыҡлы ла.

ӘҘӘБИӘТ:


1. Кәрим М. “Беҙҙең өйҙөң йәме”.- Өфө: Китап, 2003.-240 бит.
2. Нравственные уроки Мустая Карима /сост. И.И.Валеев.- Уфа. Китап, 2008.- 280 с.
3. Салихов М.В.Философия и педогогика человека в творчестве Мустая Карима.


© Янбаев Э.И., 2019

# СОДЕРЖАНИЕ
# ЙӨКМӘТКЕҺЕ


ВСТУПИТЕЛЬНОЕ СЛОВО РЕКТОРА БАШГУ ПРОФЕССОРА Н.Д. МОРОЗКИНА ....................5
***Абдуллина Г.Р., Ҡаһарманова Л.Ф.,*** МОСТАЙ КӘРИМДЕҢ ДРАМАТИК ӘҪӘРҘӘРЕНДӘ “КҮҘ” ЛЕКСЕМАҺЫНЫҢ МӘҒӘНӘ ҮҘЕНСӘЛЕКТӘРЕ (“ЯҢҒЫҘ ҠАЙЫН”, “ҠЫҘ УРЛАУ”, “ЙЫРЛАНМАҒАН ЙЫР” ӘҪӘРҘӘРЕ БУЙЫНСА) ....................6
***Абдуллина Г.Р., Ғүмәров З.И.,***ЛИНГВОКУЛЬТУРОЛОГИЯЛА «ҺУҒЫШ» КОНЦЕПТЫ (М.КӘРИМ ИЖАДЫ МИҪАЛЫНДА)....................9
***Абдуллина Л.Х.,*** МОСТАЙ КӘРИМ ИЖАДЫНДА – БАШҠОРТ АСЫЛЫ ....................12
***Абдуллина А.Ш., Лысова О.В.,*** ЛЕКСИЧЕСКИЙ ПОВТОР В ПОЭЗИИ М. КАРИМА....................14
***Акилова М.Ф.,*** ИЗУЧЕНИЕ ЛЕКСИЧЕСКИХ ВЛИЯНИЙ ЯЗЫКА ПАМЯТНИКОВ ОРХОНО-ЕНИСЕЙСКОЙ ПИСЬМЕННОСТИ НА БАШКИРСКИЙ ЯЗЫК В КОГНИТИВНОМ АСПЕКТЕ ....................18
***Алибаев З.А.,*** ЖАНРОВОЕ СВОЕБРАЗИЕ ТВОРЧЕСТВО МУСТАЯ КАРИМА ....................22
***Алиева С.А.,*** ТВОРЧЕСТВО МУСТАЯ КАРИМА В КЫРГЫЗСКОЙ ЛИТЕРАТУРЕ И КУЛЬТУРЕ......25
***Ахмадиев Р.Б.,*** ПОЭТИКА ТРАГЕДИЙ МУСТАЯ КАРИМА....................26
***Ахмадиев Ф.В.,*** ПРОБЛЕМЫ СВОБОДЫ, МОРАЛИ И ДУХОВНОЙ КУЛЬТУРЫ....................30
***Ахметова Г.А.,*** МУЗЫКАЛЬНЫЕ ЭПИЗОДЫ РОМАНА Л. Н. ТОЛСТОГО «ВОЙНА И МИР» В СВЕТЕ ФИЛОСОФИИ ПЛАТОНА.................... 34
***Байгужин И.Ғ.,*** БАБИЧТЫҢ “КӨТӘМ” ШИҒЫРЫНДА ТӘБИҒӘТ ҺӘМ ХАЛЫҠ ЯҘМЫШЫ САҒЫЛЫУЫ. ....................37
***Бахтиярова А.Н.,*** ОБРАЗОВАНИЕ ИМЕН ПРИЛАГАТЕЛЬНЫХ В АРАБСКОМ И БАШКИРСКОМ ЯЗЫКАХ ....................40
***Бикбулатов Г.Ф.,*** МУСТАЙ КАРИМ. ВОСПОМИНАНИЯ ИЗ ДЕТСТВА.....................43
***Бикбова З. И., Солтанбаева Х.В.,*** БАШҠОРТ ТЕЛЕНДӘ ҺОРАУҘЫ БЕЛДЕРЕҮСЕ САРАЛАР..........46
***Буранбаева Р.Д., Ҡунафин Ғ.С.,*** МӨНИР ҠУНАФИНДЫҢ «ҠАРТАЙҒАН ҠОЯШ АҪТЫНДА» ӘҪӘРЕНЕҢ ИДЕЯ-ТЕМАТИК ҮҘЕНСӘЛЕКТӘРЕ....................48
***Вәлиева Г.Д., Байбулов И.И.,*** М.КӘРИМ ӘҪӘРҘӘРЕНДӘ ИНТЕРЬЕРҘЫ ҺҮРӘТЛӘҮСЕ СИНТАКСИК БЕРӘМЕКТӘР ....................51
***Ганиева З.Ю.,*** МУСТАЙ КАРИМ КАК РЕКЛАМНЫЙ БРЕНД РЕСПУБЛИКИ БАШКОРТОСТАН .....54
***Гареева Г.Н.,*** ПРОБЛЕМА НРАВСТВЕННОГО ВЫБОРА В ДРАМАТУРГИИ МУСТАЯ КАРИМА.....55
***Ғиндуллина Р.А.,*** МОСТАЙ КӘРИМДЕҢ «АЙГӨЛ ИЛЕ» ДРАМАҺЫНДА АЙГӨЛ ОБРАЗЫ...........58
***Ғәлиуллин А.Х.,*** М. КӘРИМДЕҢ ДИУАНА ОБРАЗЫНДА КЕШЕЛЕКЛЕЛЕК САҒЫЛЫШЫ..............60
***Ғәниева Ғ.Ғ.,*** ТЕЛӘК МӘҒӘНӘҺЕН БЕЛДЕРЕҮСЕ -ҒЫ /-ГЕ КИЛӘ, -АҺЫ/ -ӘҺЕ КИЛӘ АНАЛИТИК ҠЫЛЫМ ФОРМАЛАРЫНЫҢ СИНТАКСИК ФУНКЦИЯҺЫ ....................62
***Даутова Л.Р., Салауатова Ф. Р.,*** ҒАЙСА ХӨСӘЙЕНОВТЫҢ ТАРИХИ ОЧЕРГЫНДА ҠАРАҺАҠАЛ ОБРАЗЫ ....................65
***Дауытова Р.А.,*** МОСТАЙ КӘРИМДЕҢ “ЕВРОПА-АЗИЯ” ШИҒЫРҘАР ЦИКЛЫНЫҢ ИДЕЯ-ТЕМАТИК ЙӨКМӘТКЕҺЕ ....................68
***Джанбеков Какаджан,*** РАШИДЕДДИН ВАТВАТ И ЕГО ЛИТЕРАТУРНОЕ НАСЛЕДИЕ....................69
***Дильмухаметов И.Т.,*** ОТРАЖЕНИЕ ФОЛЬКЛОРНЫХ ТРАДИЦИЙ БАШКИРСКОГО НАРОДА В РАССКАЗЕ М.КАРИМА «ПРИКЛЮЧЕНИЯ МЕДВЕДЯ» ....................73
***Додонова С.Г.,*** СОВРЕМЕННОСТЬ ИДЕЙ МУСТАЯ КАРИМА В ЭПОХУ КУЛЬТУРНОЙ ГЛОБАЛИЗАЦИИ ....................74
***Зөбәйерова Ҡ.Х., Вәлиева Г.Д.,*** МОСТАЙ КӘРИМДЕҢ "ЯРЛЫҠАУ" ӘҪӘРЕНДӘ ТЕЛ-ҺҮРӘТЛӘҮ САРАЛАРЫ ....................77
***Ибраһимова Т. Т., Гәрәева Г.Н.,*** ГӨЛСИРӘ ҒИЗЗӘТУЛЛИНАНЫҢ “ҺӘҘИӘ” РОМАНЫНДА ӘҘИБӘ ҺӘМ УСМАН ОБРАЗДАРЫ....................79
***Иҙелбаев М.Х.,*** МОСТАЙ КӘРИМДЕҢ ”САЛАУАТ” ТРАГЕДИЯҺЫ: ТӨП ГЕРОЙ ОБРАЗЫ ҺӘМ ӘҪӘРҘЕҢ ЖАНР ТӘБИҒӘТЕ....................82
***Исянгулова Г.А., Ишкильдина И.Г.,*** ПОДРАЖАТЕЛЬНЫЕ СЛОВА, ВЫРАЖАЮЩИЕ ВНУТРЕННИЕ ОЩУЩЕНИЯ И ЧУВСТВА ЧЕЛОВЕКА, В СОВРЕМЕННОМ БАШКИРСКОМ ЯЗЫКЕ ....................85
***Иҫәнголова Г.А., Йылкыбаева Р.И.,*** ХӘҘЕРГЕ БАШҠОРТ ТЕЛЕНДӘ СИФАТ (ЛЕКСИК-СЕМАНТИК ҺӘМ ФУНКЦИОНАЛЬ АСПЕКТТАР) ....................89
***Иҫәнголова Г.А., Хафизова А.А.,*** Н.МУСИНДЫҢ "МӘҢГЕЛЕК УРМАН" ӘҪӘРЕНДӘ ҠУЛЛАНЫЛҒАН ФРАЗЕОЛОГИЗМДАРҘЫҢ ТӨРҘӘРЕ....................93

***Ишмуратова Л.Н.,*** ЯЗЫКОВАЯ КАРТИНА МИРА: СОПОСТАВИТЕЛЬНО-СЕМАСИОЛОГИЧЕСКИЙ АНАЛИЗ ЛЕКСИЧЕСКИХ ЕДИНИЦ СО ЗНАЧЕНИЕМ «ЖИЛИЩЕ» (на материале русского и башкирского языков) ........ 97
***Ишмырҙина Р.К.,*** ПРОФЕССОР Ж.Ғ. КЕЙЕКБАЕВ – ХАЛЫҠ-АРА ИСЕМЕ БУЛҒАН МӘШҺҮР БАШҠОРТ ҒАЛИМЫ ........ 101
***Йомағолова Г.К., Хафизова Р.Ф.,*** БАШҠОРТ ТЕЛЕН УҠЫТЫУ БУЙЫНСА СИФАТЛЫ УҠЫУ АЛЫМДАРЫ ........ 105
***Йәғәфәрова Г.Н. ,*** МОСТАЙ КӘРИМ ЛИРИКАҺЫНДА ЗӘҢГӘР ТӨҪ ........ 107
***Кажигалиева Г.А., Кажигалиева Гж.А.,*** ЛИНГВОКУЛЬТУРНЫЙ МИР МУСТАЯ КАРИМА В КОНТЕКСТЕ ПРЕПОДАВАНИЯ РУССКОГО ЯЗЫКА КАК НЕРОДНОГО В КАЗАХСТАНСКОМ ПЕДАГОГИЧЕСКОМ ВУЗЕ ........ 111
***Кильмухаметов Т.А., Кунафин Г.С.,*** ТРАГИЧЕСКОЕ В ДРАМАТУРГИИ М. КАРИМА КАК ВЫСШЕЕ ПРОЯВЛЕНИЕ ГЕРОИЧЕСКОГО ........ 116
***Кинйәбаева Р.Р., Мостафина Р.Д.,*** ДОНЪЯ, РУС ӘҘӘБИӘТЕ ҺӘМ БАШҠОРТ БАЛЛАДАЛАРЫНЫҢ УРТАҠ ҺӘМ АЙЫРМАЛЫ ЯҠТАРЫ ........ 119
***Коротаева Л.В.,*** ПУШКĂРТСТАН РЕСПУБЛИКИНЧИ ЧĂВАШСЕН ТУЙ ЮРРИСЕНЧЕ ТĔЛ ПУЛАКАН ПАЙĂР ЯТСЕМ ........ 123
***Кузбеков Ф.Т.,*** ПУБЛИЦИСТИЧНОСТЬ СТИХОВ МУСТАЯ КАРИМА ........ 127
***Кульсарина И.Г., Кульсарин Н.Г.,*** СОВРЕМЕННОЕ СОСТОЯНИЕ ПЕСЕННОГО ФОЛЬКЛОРА БАШКОРТОСТАНА ........ 131
***Кульсарина И.Г.,*** ТВОРЧЕСТВО РУССКИХ ПИСАТЕЛЕЙ В ХУДОЖЕСТВЕННОМ МИРЕ МУСТАЯ КАРИМА ........ 134
***Кәлимуллина Л.Р., Гәрәева Г.Н.,*** КИРӘЙ МӘРГӘН ӘҪӘРҘӘРЕНДӘ БАЛАЛАР ПСИХОЛОГИЯҺЫ БИРЕЛЕШЕ ........ 138
***Ҡазыханова И.У., Ҡунафин Ғ.С.,*** ТИМЕР ЙОСОПОВ ШИҒРИӘТЕНДӘ ҠАБАТЛАУҒА НИГЕҘЛӘНГӘН СТИЛИСТИК ФИГУРАЛАР (ҠАЙҺЫ БЕР КҮҘӘТЕҮҘӘР). ........ 141
***Ҡаскынова Г.Н.,*** ХӘҘЕРГЕ БАШҠОРТ ӘҘӘБИӘТЕНДӘ ҺӘМ МОСТАЙ КӘРИМ ШИҒРИӘТЕНДӘ МӘҪНӘҮИҘӘР ........ 143
***Кунафин Ғ. С., Килмөхәмәтов Т.Ә.,*** М. КӘРИМ ШИҒРИӘТЕНЕҢ ОБРАЗЛЫЛЫҠ ҮҘЕНСӘЛЕКТӘРЕ ( ҠАЙҺЫ БЕР КҮҘӘТЕҮҘӘР) ........ 146
***Латыпова А.А .,*** ПИСАТЕЛЬСКИЙ ДНЕВНИК КАК ЖАНР ПУБЛИЦИСТИКИ (НА ОСНОВЕ ДНЕВНИКА М. КАРИМА) ........ 150
***Минлебаева Н.А., Ҡунафин Ғ.С.,*** ФӘРЗӘНӘ АҠБУЛАТОВА ХИКӘЙӘЛӘРЕНЕҢ КОМПОЗИЦИЯҺЫ ........ 156
***Мостафина Р.Д.,*** БАШҠОРТ ӘҘӘБИӘТ ҒИЛЕМЕНДӘ МОСТАЙ КӘРИМ ИЖАДЫН ӨЙРӘНЕҮ ТОРОШО ........ 158
***Муллағәрәева Г.Р., Солтанбаева Х.В.,*** БАШҠОРТ ДОНЪЯ ТЕЛ КАРТИНАҺЫНДА «БАЛА САҠ» КОНЦЕПТЫ (М. КӘРИМДЕҢ «ОҘОН-ОҘАҠ БАЛА САҠ» ӘҪӘРЕНӘН АЛЫНҒАН МАТЕРИАЛДАР НИГЕҘЕНДӘ) ........ 160
***Муллағолова Ә.М.,*** ХАЛҠЫБЫҘҘЫҢ РУХИ ҠӨҘРӘТЕ ........ 162
***Мусина А.Р., Мустафина Р.Д.,*** ПАМЯТНИК МУСТАЮ КАРИМУ В РЕСПУБЛИКЕ БАШКОРТОСТАН ........ 165
***Мухьянова Л.С., Султанбаева Х.В.,*** НАРОДНЫЕ И НАУЧНЫЕ НАЗВАНИЯ БОТАНИЧЕСКИХ ТЕРМИНОВ БАШКИРСКОГО ЯЗЫКА ........ 166
***Мырҙағолова Г.Ф., Мырҙағолова З.Ғ.,*** Т. ҒАРИПОВАНЫҢ “АЙ МЕНӘН ҠОЯШ БЕР ГЕНӘ” ПОВЕСЫНЫҢ ЖАНР-СТИЛЬ ҮҘЕНСӘЛЕКТӘРЕ ........ 169
***Мырҙағолова З.Ғ.,***М.КӘРИМ ПРОЗАҺЫНДА ГУМАНИСТИК ИДЕЯЛАР САҒЫЛЫШЫ ........ 171
***Назырова З.У.,***ЯЗЫКОВАЯ КАРТИНА МИРА МУСТАЯ КАРИМА ЧЕРЕЗ ПРИЗМУ КОНЦЕПТУАЛЬНОЙ СФЕРЫ “ТЫУҒАН ИЛ” (“РОДИНА”) ........ 173
***Нафиҡова Ф.Р.,*** МОСТАЙ ИЛЕ. ........ 178
***Низами Мамедов Тагисой,*** НРАВСТВЕННО-ХУДОЖЕСТВЕННЫЙ МИР МУСТАЯ КАРИМА ........ 179
***Охотникова Т.В.,*** МУСТАЙ КАРИМ: МНОГОГРАННОСТЬ ТАЛАНТА ........ 183
***Пермякова Л.А.,*** Н.В. ГОГОЛЬ И РУССКИЕ СИМВОЛИСТЫ ........ 185
***Рахимкулов А.С.,*** ПЕРИОДИЧЕСКОЕ ПЕЧАТНОЕ ИЗДАНИЕ БАШКИРСКОГО ГОСУДАРСТВЕННОГО МЕДИЦИНСКОГО УНИВЕРСИТЕТА - ГАЗЕТА «МЕДИК» БГМУ ........ 188
***Рахматуллина З.Я.,*** ФИЛОСОФСКИЕ СМЫСЛЫ В ПОЭТИЧЕСКОМ ТВОРЧЕСТВЕ МУСТАЯ КАРИМА: АКТУАЛЬНОСТЬ И ЗНАЧИМОСТЬ ДЛЯ СОВРЕМЕННОГО ЧЕЛОВЕКА ........ 191

*Рахматуллина З.Н.,* МУСТАЙ КАРИМ И КОМИЧЕСКОЕ....................195
*Рахно К.Ю.,*ЛИЧНАЯ ГИГИЕНА В ДОМУСУЛЬМАНСКИХ ПРЕДСТАВЛЕНИЯХ ВОЛЖСКИХ БУЛГАР....................196
*Рәхмәтова Ғ.Х., Мостафина Р.Д.,* БАШҠОРТ ТОРМОШ-КӨНКҮРЕШ ӘКИӘТТӘРЕНЕҢ ОБРАЗДАР СИСТЕМАҺЫ ....................200
*Салауатова Ф.Р.,* МОСТАЙ КӘРИМДЕҢ “ЯНҒЫҘ ҠАЙЫН” ДРАМАҺЫНДА ОБРАЗДАР СИСТЕМАҺЫ ....................203
*Саникина С.Р., Гәрәева Г.Н.,* М. КӘРИМДЕҢ “ОҘОН -ОҘАҠ БАЛА САҠ” ПОВЕСЫНЫҢ ПОЭТИКАҺЫ....................207
*Саньярова Р.Р.,* ЯЗЫКОВАЯ КАРТИНА МИРА КАК МНОГОГРАННЫЙ МЕНТАЛЬНЫЙ ФЕНОМЕН ....................211
*Саньярова Р.Р., Салихова З.М.,* РАССМОТРЕНИЕ ЯЗЫКА В МЕЖДИСЦИПЛИНАРНОМ АСПЕКТЕ ....................214
*Саяхова Д.К.,* КОГНИТИВНЫЕ И ЛИНГВОКУЛЬТУРОЛОГИЧЕСКИЕ АСПЕКТЫ АНАЛИЗА ПУБЛИЦИСТИЧЕСКОГО ТЕКСТА....................216
*Сибагатов Ф.Ш.,* ФОНД Р.ФАХРЕТДИНОВА В НАУЧНОМ АРХИВЕ УФИМСКОГО НАУЧНО-ИСЛЕДОВАТЕЛЬСКОГО ЦЕНТРА РАН ....................219
*Солтанбаева Х.В., Аҙнабаева Р.Р.,* ҺАН КОМПОНЕНТЛЫ ФРАЗЕОЛОГИЗМДАРҘЫҢ МӘҒӘНӘ ҮҘЕНСӘЛЕКТӘРЕ....................223
*Солтанова З.А., Мостафина Р.Д.,* А. АБДУЛЛИН ДРАМАЛАРЫНДА ШӘХЕС КОНЦЕПЦИЯҺЫНЫҢ САҒЫЛЫШЫ....................226
*Султанбаева Х.В., Гимашева Г.М.,* ПРОБЛЕМА ВЗАИМООТНОШЕНИЯ ЯЗЫКА И КУЛЬТУРЫ В БАШКИРСКОМ ЯЗЫКОЗНАНИИ (НА ОСНОВЕ ТВОРЧЕСТВА М. КАРИМА) ....................228
*Талипова Т.Р., Хөснөтдинова Р.Я.,* МОСТАЙ КӘРИМДЕҢ ӘҪӘРҘӘРЕНДӘГЕ САҒЫШТЫРЫУҘАРҘЫ ТӘРЖЕМӘ ИТЕҮ ЮЛДАРЫ ....................230
*Токмурзина С.М.,* ИЗУЧЕНИЕ ТВОРЧЕСТВА МУСТАЯ КАРИМА В НАЧАЛЬНОЙ ШКОЛЕ. ..........235
*Усманова Н.Г., Султанбаева Х.В.,* ОСОБЕННОСТИ НАЗВАНИЙ МУЖСКИХ ГОЛОВНЫХ УБОРОВ БАШКИР....................238
*Усманова Ә.А., Гәрәева Г.Н.* МӘҮЛИТ ЯМАЛЕТДИНОВ ИЖАДЫНДА ҠӨРЬӘН МОТИВТАРЫ САҒЫЛЫШЫ....................240
*Фаткуллина Ф.Г.,*ОТРАЖЕНИЕ НАЦИОНАЛЬНОГО МЕНТАЛИТЕТА В ПАРЕМИОЛОГИЧЕСКОЙ СИСТЕМЕ ЯЗЫКА ....................241
*Хасанов Р.Ф.,* ХУДОЖЕСТВЕННЫЙ МИР МУСТАЯ КАРИМА....................244
*Хасанова Т. Ю.,* КАК ПРИОБЩИТЬ ЮНЫХ ЧИТАТЕЛЕЙ К ТВОРЧЕСТВУ ДЕТСКОГО ПИСАТЕЛЯ МУСТАЯ КАРИМА? ....................247
*Хамитова З.З., Ф.Г. Фаткуллина,* НЕЧЛЕНИМЫЕ ПРЕДЛОЖЕНИЯ В ПОВЕСТИ МУСТАЯ КАРИМА «ПОМИЛОВАНИЕ»....................250
*Хисамова Г.Г., Клысова Г.М.,* ПОРТРЕТ КАК СПОСОБ ВЫРАЖЕНИЯ ВНУТРЕННИХ СОСТОЯНИЙ И КАЧЕСТВ ПЕРСОНАЖА В ХУДОЖЕСТВЕННОЙ ПРОЗЕ М. КАРИМА ....................253
*Хөснөтдинова Р.Я.,* ЙӘНЛЕ ТЕЛМӘРҘЕ БИРЕҮ САРАҺЫ БУЛАРАҠ ҠАБАТЛАУҘАР (Һәҙиә Дәүләтшинаның “Ырғыҙ” романы миҫалында)....................255
*Хужахметов А.О.,* К ВОПРОСУ РАННЕЙ ЛИРИКИ МУСТАЯ КАРИМА....................258
*Хужахметов А.О.,* К ВОПРОСУ ВОЕННОЙ ЛИРИКИ МУСТАЯ КАРИМА....................261
*Шәймөхәмәтова Л. Ф., Солтанбаева Х.В.,* ТАҢСУЛПАН ҒАРИПОВАНЫҢ “БӨЙРӘКӘЙ” РОМАНЫНДА ҠАТЫН-ҠЫҘ ОБРАЗЫН ҺҮРӘТЛӘҮҘӘ САҒЫШТЫРЫУҘАР ....................263
*Әбсәләмова Ш.М.,* МОСТАЙ КӘРИМДЕҢ «БЕҘҘЕҢ ӨЙҘӨҢ ЙӘМЕ» ПОВЕСЫНДА БӘХЕТЛЕ БАЛА САҠ... ....................264
*Якупова Е.Р.,* СОЗВЕЗДИЕ КАРИМА НА КАРТЕ УФЫ....................269
*Янбаев И.К.,* МОСТАЙ КӘРИМ ИЖАДЫНДА ТИПИКЛАШТЫРЫУ АЛЫМЫ БУЛАРАҠ ПРОТОТИПТАР....................274
*Янбаева Э.И.,* МОСТАЙ КӘРИМДЕҢ “БЕҘҘЕҢ ӨЙҘӨҢ ЙӘМЕ” ӘҪӘРҘӘРЕНДӘ ҒАИЛӘ ҺӘМ ТУҒАНЛЫҠ МӨНӘСӘБӘТТӘРЕ ....................281